Йыһат Солтанов

# ДРАМАЛАР



ӨФӨ – 2015

# УР-РА! АЛЯСКА БЕҘҘЕКЕ!
## Драма-фарс өс шаршауҙа, дүрт күренештә һәм эпилог

Ҡатнашалар:

Убайән – программасы-хакер, «яңы башҡорт», «Империя» рестораны хужаһы.
Нәфисә-Анфиса – ҡылансыҡ-мимылдаҡ ҡыҙ-ҡырҡын, ресторан йырсыһы, Убайән һөйәркәһе.
Алина-Малина – һомғол-һылыу буй-һынлы ханым, ресторан стриптизсыһы, Убайән һөйәркәһе.
Кесе Рокфеллер – шул ҡушаматлы «яңы татар».
Кесе Зигалов – «яңы урыҫ», кремлсе олатаһының ейәне.
Кесе Жареневский – «яңы йәһүд», кремлсе олатаһының ейәне.
Кесе Кисляков – «телевизор батшаһы», журналист, кремлсе олатаһының ейәне.
Мошонко-Тяпкин – кремлсе финанс министрының ейәне.
Мүклебашкин – Ветерандар берләшмәһе башлығы.
Суҡмарбашкин – «Йәш гвардия» хәрәкәте башлығы.
«Халыҡ-һарыҡ» массалары.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ
### Беренсе күренеш

«Империя» ресторанының затлы залында затлы ир-ат, ҡатын-ҡыҙ күңел аса. Түңәрәк өҫтәл ҡырында мөһим сәйәси әңгәмә ҡора Убайән, Кесе Рокфеллер, Кесе Зигалов, Кесе Жареневский, Кесе Мошонко-Тяпкин, Кесе Кисляков. Ара-тирә затлы коньяк ҡабалар.

Кесе Рокфеллер. Уфа берлән Ҡазан арасында күп жөрөп, мондойын да коньяк эчкән жуҡ иде. Башҡырт, ҡайдан чәлдердең?

Убайән. Ҡайҙан дөргәне мөһим түгел, ҡайҙа кергәне мөһим.

Кесе Зигалов. Шәп... эт ялағыры, зымырлатып бөтә тамырҙарға тиртте.

Кесе Кисляков. Беҙҙәрҙең, тим, телевизорҙан әйткән һәр һүҙебеҙ ошо үтемле хәмерҙәй булһа икән!

Кесе Рокфеллер. Телевизор дигән алжытҡыч йәшнигегездән тамаҡ жарып болай да халыҡны сарыҡҡа әйләдердегез, сезгә тағын ни кирәк?

Убайән. Тел тейҙермә зәңгәр экраныбыҙға. Халыҡ-һарыҡтың ул күҙгә күренмәҫ көтөүсеһе – массаларҙы теләгән яҡҡа бора.

Кесе Кисляков. Державабыҙҙың иң юғары сәйәси ҡаҙанышы.

Кесе Жареневский. Бының өсөн беҙ үҙебеҙҙең шанлы большевик олатайҙарға бурыслы, улар ғына сәйәси һүҙҙе үтемле көс яһаны.

Кесе Мошонко-Тяпкин. Был донъяла аҡса ғына үтемле, уның менән державаларҙы ҡулыңа ҡаратып була, тип өйрәтә минең финанс министры олатайым.

Убайән. Олатайың Мошонконың һабаҡтары саф алтын.

Кесе Рокфеллер. Хәлбуки ул да синең алтын аҡылға житкерә алмас. Мона син, башҡырт, чибек кенә бер офиста мизерный эш хаҡы алып әштер-өштөр жөк арбасы тартҡанында ничек итеп бу һиммәтле ресторанны сәрмәдең? Ай-хай, сәрмәвечең бик озон!

Кесе Жареневский. Хакер кем, беләһеңме?

Кесе Рокфеллер. Ҡаҡыр? Ҡаҡыруны сезләрдән уздырам мин! (Көлөшәләр).

Мошонко-Тяпкин. Компьютер селтәренә кереп кеше банкыларын тунаусы ул.

Кесе Жареневский. Бына шул, ҡалған яғын һорама.

Убайән. Әфәнделәр, ғәйбәткә тарымайыҡ. Барығыҙ ҙа алтын олаталарығыҙҙың алтындан да ҡиммәтле ейәндәре, тап шуларҙың кеселәре исемен йөрөтөүселәр. Әммә һеҙҙе тиҙ арала кеселектән арыныу, олатайланыу көтә. Бына-бына эпоханың алтын тотҡалары буласаҡһығыҙ. Мин һеҙҙе бында коньяк һемертеү өсөн генә йыйманым, эпоха әһәмиәтендәге гәүһәр проект бар.

Кеселәр барыһы бергә: -- Гәүһәр?!

Убайән. Гәүһәр. Әгәр шуны уңышлы бойомға ашырһаҡ, бөтәгеҙ тиң гәүһәргә әйләнәсәк.

Кесе Жареневский. Әйтеп ебәр.

Убайән. Укроптарҙан Ҡырымыбыҙҙы мирным путем ҡайтарып алғандан һуң, аласаҡ нимәбеҙ ҡалды?

Баштарын ҡашып уйланыу.

Убайән. Яуыз Америка тырнаҡтарынан интегеүсе мөҡәддәс алтын еребеҙ – Аляска ҡалды.

Күмәге бергә: -- Аб-бааа! Хаҡ һүҙ был!

Убайән. Хөрмәтле Кисляков әфәнде...

Кесе Кисляков. Айн момент! Бөтәһе лә ишетһен! (Ырғып тороп, түрҙәге микрофон алдына баҫа). Йәмәғәт, Америка золомона күпме түҙергә була?! Аҫты-өҫтө алтынға тулы еребеҙ – Аляскабыҙ ниңә һаман Америка ҡулында?

Убайән (атылып килеп микрофонға ҡысҡыра). Аляска – алысҡа йәғни алыҫҡа бара торған ер, унда беренсе ҡаҙыҡты аҫаба башҡорттар ҡаҡҡан; ә башҡорттар – борон-борондан Рәсәй граждандары, Рәсәй патриоттары!

Кесе Кисляков (микрофонға). Эйе! Аляска, бер һүҙһеҙ, Бөйөк Рәсәй-Әсәйҙеке!

Убайән. Еңеүле һөрәнләйек: Аляска наша! (Зал алҡышлай: «Аляска наша! Аляска наша! Аляска наша!»).

Убайән (микрофонға). Йәмәғәт, «крымнаш»тан һуң өлгөрөп еткән иң актуаль оран был! Алясканы кире ҡайтарып алыу буйынса оло көрәш башланыҡ – патриоттар хәрәкәте! Аҡсабыҙҙы ла, йәнебеҙҙе лә дөйөм ҡаҙанға һалайыҡ! Аляскабыҙҙы һуғышһыҙ, ҡан ҡойошһоҙ ҡайырып аласаҡбыҙ – тап «Крымнаш!» шикелле. «Аляска наша!» акциянерҙар йәмғиәте төҙөлдө, аҡса йыйыу башланды, акциялары бөтөн ил буйлап һатыла. Бөтөн халыҡ хәрәкәтенә берҙәм ҡушылығыҙ, «Аляска наша!» акцияларын алығыҙ! Ил төкөрһә, күл булыр – Аляска беҙҙеке булыр!

Көслө ҡул сабыуҙар, алҡыштар аҫтында Убайән менән Кесе Кисляков түңәрәк өҫтәл ҡырына ҡайта.

Кесе Рокфеллер. Ҡарале, әй, башҡырт, алысҡа-малысҡаң чип-чиста татар сүзе ләсә!

Убайән. Татар һүҙе булһа, «Ераҡҡа» тирҙәр ине.

Кесе Рокфеллер. Пәтәч, анысына баш житмәгән.

Микрофондан белдереү: -- Әфәнделәр, Ветерандар берләшмәһе башлығы Мүклебашкин! «Йәш гвардия» хәрәкәте башлығы Суҡмарбашкин! (Микрофон алдына баҫалар).

Мүклебашкин. Беҙ, державаның ветеран патриоттары, ысын сталинсы-ленинсылар, изге башланғысты бөтә йөрәктән ҡабул ҡылып хуплайбыҙ һәм ҡөҙрәтле алҡынышҡа башкөлләй ҡушылабыҙ. Аляска – наша!

Суҡмарбашкин. Державаның бөйөклөгө хаҡына йәш-елкенсәк гвардияһы ҡан ҡойорға, йән бирергә лә әҙер! Тетрәнһен Америка! Бөйөк башланғыстың авангардында дөрөп барасаҡ гвардия беҙ! Аляска наша!

Микрофондан иғлан ителә: «Заманабыҙ һандуғасы Нәфисә-Анфиса башҡарыуында «Аляска наша!» ораторияһы».

Нәфисә-Анфиса (микрофондан йырлай):

Ата-бабалар киткәндәр алыҫҡа –
Ер тапҡандар, атағандар «Аляска».
Диңгеҙ аръяғынан алып ҡайтырбыҙ,
«Наша Аляска!» тип ғорур әйтербеҙ!
Әйтербеҙ!

Дәртле ҡул сабыуҙар, дөйөм алҡыш: «Ур-рааа! Аляска наша!» Микрофондан иғлан: «Йәмәғәт, сәхнәлә заманабыҙҙың стриптиз алиһәһе Алина-Малина!!! «Аляска аборигенкаһы» тигән тере йәнһүрәт!» Һомғол һынлы Алина-Малина, өҫтөндәге хөлләләрен һыпырып ташлай-ташлай, стриптиз театры уйнай. Түңәрәк өҫтәл ҡырында әңгәмә дауамлана.

Кесе Рокфеллер. Әғүзебиллаһи, ни чыҡса башҡырттан чыға. Беринг боғазы арҡылы алтын туннель сузабыз, дип буш ҡувыҡ ҡабартабызмы?

Убайән. Алтын ҡыуыҡ!

Кесе Рокфеллер. Анауы жәллад ФСБ-лар төртөп ярмаса ярый ла...

Убайән. Уныһы уйланылған.

Кесе Рокфеллер. Бирге ярдан тороп өрәбез дә ул, арғы ярдағылар ни диәр? Явыз Америка сәйәсмәнләре, дим.

Убайән. Сәйәсәт бында ни при чем, важна эконолмика. Аляска бизнесмены менән килешелгән.

Кесе Рокфеллер. Исеме кем?

Убайән. Исеме Рокфеллер.

Кесе Жареневский. Ба, Рокфеллер ҡәберҙә бит!

Убайән. Кесе Рокфеллер. Йәғни оло Рокфеллерҙың ейәне. Бына ул.

Кесе Рокфеллер. Әғүзебиллаһи...

Кесе Жареневский. Йүнлерәкте таба алманыңмы? Сытырайған татар-монгол мордаһы!

Убайән. Уныһы мөһим түгел. Был морданы һин күрә лә мин күрә, башҡаларға ысын Рокфеллер ул.

Кесе Жареневский. Кесе Зигаловты һайлар инең, исмаһам – ҡойоп ҡуйған «дядя Сэм» томшоғо.

Стриптиздың сетерекле мәленә төбәләләр.

Кесе Жареневский. Их, ысын ожмах һылыуы! Олатайым менән беҙ зерә лә стриптиз һөйәбеҙ! Нисек эләктерҙең был аҫыл ҡошто?

Убайән. Үҙебеҙҙең инкубатор себеше ул.

Кесе Жареневский. Таныштыр мине.

Кесе Рокфеллер. Авызың пешеп ҡуймасын, ул бит аның жаныйы.

Убайән. Шаулама!

Кесе Рокфеллер. Шушы чебенгә сатырға маташасыңмы?

Кесе Жареневский. Ты! Монгольское отродье! Ҡайтып кит Монголияңа!

Убайән. Шыш!

Кесе Жареневский. Мин был гүзәл алиһәне олатайыма төртөр инем, ә ул -- Кремль сәхнәһенә... Унда стриптиз яраталар, хатта президент үҙе...

Убайән. Быныһы шәп!

Кесе Кисляков. Ханымдың имиджын балҡытыуҙы шәхсән үҙ өҫтөмә алам. Зәңгәр экран уны күктәргә күтәрер!

Мошонко-Тяпкин. Башлана!

Убайән. Әфәнделәр, Аляска наша!

Барыһы бер ауаздан: -- Аляска наша! (Сәкәштереп эсәләр).

Кесе Жареневский. Пентагон аяҡ салһа, ярҙан тороп дәһшәтле ут яуҙырырға!

Кесе Кисляков. Зәңгәр экрандарҙан был хупланасаҡ.

Кесе Рокфеллер. Хе-хе-хе!

Кесе Зигалов. Мирным путем, мирным путем! Алтын сөйҙө ҡағырға үҙем барам!

Мошонко-Тяпкин. Һыу төбө туннеленән!

Убайән (көлөп). Һеҙҙәр әллә ысынлап ышандығыҙмы? Һыу төбөнән туннель ҡаҙырға итәһегеҙме? Ҡағыҙҙа һәм зәңгәр экрандарҙа ғына ҡаҙыла!

Мошонко-Тяпкин. Һәм һөйөклө халыҡ-һарыҡтың иҫәрләнгән мейе улаҡтарында!

Убайән. Һыу аҫтынан туннель үткәреү картиналары компьютерҙа юғары сифатлы башҡарылды, зәңгәр экрандарҙан зәһәр гөрләтеү – коллегабыҙ Кесе Кисляков эше.

Кесе Кисляков. Акция һатып алыусылар бер-береһен тапалап ябырылыр.

Кесе Рокфеллер. Ә безләргә әжере?

Убайән. Акцияларҙың кәм тигәндә өстән бер өлөшөн дәүләтебеҙ елкәһенә йөкмәтһәк, дәүләт кеҫәһе һеҙҙеке булыр...

Мошонко-Тяпкин. Уныһы бик икеле. Министр олатайым зерә талапсан һәм һаран.

Кесе Жареневский. Ҡоролтайҙан ҡыҫым яһатһаҡ, бер юлы йомартланыр.

Мошонко-Тяпкин. Ә президент?

Кесе Зигалов. Уның да эсендә йәне бар, янында кеҫәһе бар.

Кесе Кисляков. Ҡатынын айырған, һомғолбикәләрҙе йәне һөйә, тиҙәр.

Кесе Жареневский. Алина-Малина кеүектәрҙе...

Микрофондан иғлан: «Әфәнделәр, әле генә ошонда һеҙҙең ҡатнашлыҡта гөрләгән оло ваҡиғаны үҙәк радионан шаңғырталар, тыңлағыҙ, тыңлағыҙ!» Бөтә зал тынып ҡала. Радионан яңғырай: «Ҡәҙерле радио тыңлаусылар, «Крымнаш!» хәрәкәте уңышлы осланғандан һуң, «Аляска наша!» бөтөн халыҡ хәрәкәте башланып, державаны ялманы, бына шул бөйөк ҡуҙғалыштан репортаж...» («Аляска наша! Аляска наша! Аляска наша!» тигән алҡыш...)

Убайән. Башланды!

Кесе Зигалов (сүкынып). Воистину башланды! (Аяғөҫтө баҫып тост тоталар). Барыһы бергә: -- Аляска наша! Аляска наша! Аляска наша!

**ШАРШАУ**

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### Икенсе күренеш

Заманса йыйыштырылған Убайән фатиры, аэродромдай киң карауатта, иртәнге тәмле йоҡоһонан уяныр-уянмаҫ, Убайән менән Нәфисә-Анфиса наҙланып кирелә, ҡапыл будильник шалтырай.

Нәфисә-Анфиса (башын ҡалҡыта биреп). Пупсик, шәкәрем, тор инде.

Убайән (шалтыраҡты баҫып туҡтата). Эй, тормайым.

Нәфисә-Анфиса. Пупсигым, шәкәрем! (Ирҙе һелкеткеләй).

Убайән. Мупсик, борсома мине.

Нәфисә-Анфиса. Тор, бөйөк эштәрең көтә.

Убайән. Мупсигым, медухам, аҙ ғына серем итәйем, эш ҡасмаҫ.

Нәфисә-Анфиса. Кисен типтерәһең дә иртән һамҫып ятаһың. Кем менән булдың?

Убайән. Һинең менән, һинең менән!

Нәфисә-Анфиса. Ҡайтҡас, төндә нимә эшләгәнеңде беләһеңме?

Убайән. Нимә эшләгәнемде үҙең беләһең... икәүләшеп...

Нәфисә-Анфиса. Ҡороғоро, иҫерек баш! Икәүләшеп түгел шул!

Убайән. Өсәүләшепме әллә? Тағы кемең килеп ҡыҫылды?

Нәфисә-Анфиса. Битһеҙ, һинән башҡа кем ҡыҫылһын! Ҡыҫып ҡосаҡлаған сағыңда кемдең исемен әйттең?

Убайән. Һинекен, кемдеке булһын.

Нәфисә-Анфиса. Алинам-Малинам, тип ҡысҡырҙың бит, телең тотлоҡҡоро!

Убайән. Булмаҫ, яңылыш ишеткәнһең.

Нәфисә-Анфиса (шыңшып). Минең менән ятаһың, шул стриптиз кәнтәйеңде иҫеңдә тотаһың.

Убайән. Китте бит инде ул, ниңә иҫкә төшөрөргә? (Һулҡылдап). Кремль сәхнәһенә китте, мәңгелеккә китте...

Нәфисә-Анфиса. Абау! Ул кәнтәйең дә һин тип һулҡылдап ятылыр әле... президент әфәнде аҫтында... Иманһыҙҙар!

Убайән (тороп ултыра). Мупсик! Һиңә нимә етмәй?! Ресторан тиклем ресторанымды үҙеңә бүләк иттем. Яҡшы фатирға килтерттем. Үҙемдең йылы ҡуйынымдан урын бирҙем. Тағы ни етмәй?

Нәфисә-Анфиса. Загсбюро штампыһы етмәй миңә! Никахлашырға ваҡыт! Бәпесебеҙҙең атаһын кем тип яҙҙыртырбыҙ?

Убайән (шашына яҙып). Ниндәй бәпес? Ҡайҙа ул?

Нәфисә-Анфиса (юрғанды атып-бәреп, яланғас эсенә төртөп). Бына бында ул бәпесебеҙ! (Убайәндең башын ҡорһағына ҡыҫа). Ишетәһеңме? Тик-тик-тик – сәғәт телеләй тибә.

Убайән (ҡырыҫ кире тартылып). Был ни хәл?! Кем рөхсәте менән?

Нәфисә-Анфиса. Артылғаныңда рөхсәт һораманың бит.

Убайән. Немедленно! Аборт!

Нәфисә-Анфиса. Поздно, пупсиккәйем, поздно. Дүрт айлыҡ булды инде.

Убайән. Иң яҡшы доктор менән үҙем килешәм.

Нәфисә-Анфиса. Ә мин килешмәйем!

Убайән. Мупсиккәйем, был юлы сабыр итәйек! «Аляска наша!» проектын аҙағына еткергәнсе, долларға ҡойонғансы! Алтын-көмөшкә күмермен, гәүһәрҙә балҡытырмын!

Нәфисә-Анфиса. Никах! (Ырғып тороп халатын кейә).

Убайән (ҡатар баҫып). Бөгөн үк аборт яһатмаһаң, ресторанды, фатирҙы тартып алам, шыр-яланғас ҡалдырам!

Нәфисә-Анфиса. Ә мин һинең ялған туннель ҡаҙыуыңды, ялған акциялар һатып байыуыңды, мошенниктар шайкаһына етәкселек итеүеңде шул сәғәтеминутында уҡ ФСБ-ға, президентҡа еткерәм!

Убайән. Мупсигым, медухам!

Нәфисә-Анфиса. Никах! (Атлығып сығып китә, Убайән ике ҡулы менән башын тотоп ыңғыраша). Медухам-балым түгел, әсеүташым булдың һин... (Ишек ҡыңғырауы шалтырай). Кем унда, инмәгеҙ, офисыма барығыҙ!

Алина-Малина күренә.

Алина-Малина. Асыҡ ишеккә эт тә керә. Кемең ине ул ярым-яланғас елтерәп сығып барған?

Убайән (өтәләнеп). Әү генәм, Алинаҡайым, Малинаҡайым!

Алина-Малина. Кем ине, тим?

Убайән. Фатирымды йыйыштырыусы ҡарсыҡ, плитәмде һүндерергә онотҡанмын, тип, ут ҡапҡандай йүгерҙе.

Алина-Малина. Йыйыштырыусы, тиһең инде?

Убайән. Йыйыштырыусы.

Алина-Малина (трюмолағы еҫлемай шешәһен, помаданы ҡарай). Минең биҙәүестәрҙе лә шул ҡарсыҡ йыйыштырҙымы! Яртылаш бүҫкәргән.

Убайән. Алинам-Малинам, уларҙы мин... һинең еҫкәйеңде өҙөлөп һағынып, иртә-кисен еҫкәй инем.

Алина-Малина (карауаттағы юрғанды һирпеп ебәреп, алһыу төҫтәге ҡатынҡыҙ трусигын ике бармаҡ осо менән генә семетеп алып күтәрә). Ә быныһы?

Убайән. Бәғеркәйем, үҙеңде шундайын ныҡ юҡһындым, шундайын ныҡ юҡһындым! Түҙер хәлем ҡалмағас, шкафтағы ошоноңдо янымa һалып ятып йоҡлар булдым.

Алина-Малина (трусикты ирҙең танауына төртөп). Кемдең еҫе?!

Убайән. Һинеке, һинеке!

Алина-Малина. Шаҡшы! Мин һис ҡасан емтек еҫе аңҡытып йөрөмәнем. Һәм ал төҫтө йәнем һөймәне, сөнки ундайҙы Нәфисә-Анфиса һөйрәлткең генә кейҙе! (Трусикты ирҙең йөҙөнә бәрә, иҙәндә тапап ташлай).

Убайән (күҙҙәрен аҡайтып). Булһа һуң? Һин минән киттең бит инде.

Алина-Малина. Бурысың китмәне шул.

Убайән. Ниндәй бурыс?

Алина-Малина. Аталыҡ бурысың!

Убайән. Һе! Мин һинең атаң түгел.

Алина-Малина. Балаңдың атаһы.

Убайән. Хе-хе! Ҡайҙа ул минең балам?

Алина-Малина (эсенә бармаҡ төртөп). Бына бында. Кил, тыңла.

Убайән (сигенеп). Шантажистка! Президентыңа япһарт! Киткәнеңә бер ай инде!

Алина-Малина. Ә был бәпескәйең инде дүрт айлыҡ! Бер айҙа дүрт айлыҡмы?

Убайән. Дәүләт башлығы бит ул, бер төн эсендә дүрт айлыҡты яһарға ла ҡөҙрәтле.

Алина-Малина. Ҡәбәхәт!

Убайән. Кит, күҙемдән юғал!

Алина-Малина. Тәүҙә никах, загсбюро штампы!

Убайән. Никогда!

Алина-Малина. Никогда не говори «никогда»! Балабыҙҙы аталы итмәһәң, туннель ҡаҙыу афераңды президентҡа, ФСБ-ға еткерәм! Гәзит-мәзиттәргә яҙып шаулатам! Көллөһө лә буш ҡыуыҡ – компьютер уйыны ғына икәнен фашлайым! Киттем.

Убайән. Туҡта!

Алина-Малина (бармаҡ янап). Уйлан, уйлан, туннельщик! (Сыға).

Убайән (башын тотоп). Бына бәлә! (Коньяк ҡойоп эсә). Их! (Һыҡтаныып). Дүрт ай элек уйларға кәрәк ине... (Ишекле-түрле йөрөй). Туҡта, ултырып көс туплайыҡ (диванға йәпләшә). Һәр бәләнән сығыу туннелдәре бар. (Бармаҡтарын бөкләй-бөкләй). Беренсенән, Кесе Кисляковтың зәңгәр экрандары – беҙҙең иң ҙур ҡаҙаныш, хатта Кремль ҡомаҡтарын да ышандыртты. Икенсенән, хакерҙарҙың хакеры икәнлегеңде, мең йоҙаҡлы сейфтарҙы ватып кереүеңде онотма! Дәүләт менән идара итеүсе даирәләрҙең рейтингын йә үҫтереү, йә төшөрөү рычагын үҙ ҡулыбыҙға алабыҙмы, алалабыҙ. Быныһы өс, беҙҙә барлыҡ көс!

Тулҡынланып арылы-биреле йөрөнә. Мүклебашкин менән Суҡмарбашкин инә.

Мүклебашкин. Әссәләмәғәләйкүм!

Суҡмарбашкин (честь биреп). Салют!

Убайән. Вәғәләйкүмәссәләмсалют! Өйөмдә лә тынғылыҡ бирмәйһегеҙ, әй.

Мүклебашкин. Үҙең бит йоҡлап ятмаҫҡа, хәрәкәт итергә ҡуштың.

Убайән. Хәрәкәтең күренмәй.

Мүклебашкин. Урамға сығып ҡара, халыҡ массалары мыжғып дыу-килә.

Суҡмарбашкин. Артабанға инструкция кәрәк.

Убайән (тәҙрәнән ҡарап). Ярай, хуп. Бына һин, ҡарт быуын, ҡымыҙ яратаһыңдыр.

Мүклебашкин. Әллә бармы?

Убайән. Көрәгәһендә оҙаҡ ҡалып айныған ҡымыҙ нишләй?

Мүклебашкин. Бурһып еҫләнә башлай.

Суҡмарбашкин. Уны помойкаға ауҙарыу мотлаҡ.

Убайән. Дөрөҫ. Батша ғали йәнәптәре менән дә тап шулай: тәхеткә яңы менгән сағында – сихәтле ҡымыҙ, ә оҙағыраҡ ултырһа, аҡылы томаланып боҙола башлай.

Мүклебашкин. Әллә үҙебеҙҙекенә ишаралайһың?..

Убайән. Дәүләтебеҙҙә шул хәл булмаһын өсөн, беләһегеҙме, беҙҙең боронғо скиф бабалар ниндәй сара ҡулланған?

Суҡмарбашкин. Башын киҫеп ҡотолғандарҙыр.

Убайән. Баш киҫергә ярамай. Бабаларҙың ебәк боғалаҡ йолаһы булған.

Суҡмарбашкин. Быуып үлтергәндәрме?

Убайән. Батша булырға ынтылғандың боғаҙына ебәк боғалаҡ һалып, әкрен генә ҡыҫҡандар, быуылыусы иҫен юйыр-юймаҫ хәлгә еткәс кенә: «Әйт, нисә йыл, бер... ике... өс...» -- тип уғата нығыраҡ ҡыҫҡандар, аңғыраланған бәндә иһә ҡолағына кергән һанды ҡысҡырғас, был уның Хоҙай тарафынан билдәләнгән тәхеттә ултырыу ваҡыты тип иҫәпләнгән һәм боғалаҡ бушатылған. Батша, әлбиттә, теленә килгәнде иҫләмәгән һәм тәхеткә мәңгелеккә ултырҙым, тип уйлаған.

Мүклебашкин. Һе!

Суҡмарбашкин. Үҙебеҙҙекеләй икән...

Убайән. Ләкин батша үҙе әйткән йылын тәхеттә тултырғас, уның боғаҙына баяғы ебәк боғалаҡ һалынған да тәхетенән быраҡтырылған...

Суҡмарбашкин. Их, беҙҙәрҙә лә ебәк боғалаҡ булһа!

Убайән. Бар ул, ҡустым. Заманса ебәк боғалаҡ.

Суҡмарбашкин, Мүклебашкин (икеһе бергә): -- Нимә ул?

Убайән. Рейтинг ул, рейтинг! Рейтинг тигән ебәк боғалаҡты ипләп кенә ҡыҫҡанда, президент әфәнде илдең резерв фондын беҙҙең фондҡа беркеткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалыр. Һеҙҙең кеҫәләргә алтын ағылыр.

Суҡмарбашкин. Алдан белеп хәрәкәт итәбеҙ, әй.

Мүклебашкин. Мырҙам, ас әле тәҙрәне! (Тәҙрә асыла, унда халыҡ массаларының ораны: «Аляска наша – резервный фонд! Аляска наша – резервный фонд!..»).

Убайән. Быныһы беҙ тигәнсә! (Тәҙрәне яба).

Суҡмарбашкин. Ә беҙ тигәнсәһе?..

Убайән. Бына чек: һәр танауға берәр миллион рубдь. (Тапшыра). Ҡәнәғәтме?

Мүклебашкин. Тик... тик... рейтингысы ҡарт-короноң, ауыҙын асҡан һайын, тамағы ҡытҡылдап тора...

Суҡмарбашкин. Йәш быуындың кеҫә төбө һыҙғыра...

Убайән. Без проблем! Ҡарт ҡарғалар тамағына -- дефицит ҡара бойҙай ярмаһы, шәкәр ҡомо. Ужым быҙауҙарына – йәшел һүрәтле баксылар. Дөрөгөҙ, әфәнделәр!

Ике әһел китә, Кесе Жареневский керә.

Кесе Жареневский. Кремль ҡапҡаһында һинең Алина-Малина осраны.

Убайән. Ул минеке түгеллеккә хан заман.

Кесе Жареневский. Күтенә ут ҡапҡан космик ракеталай дөрөп бара.

Убайән. Орбитаға олатаң менән ҡулалмаш сығарҙығыҙ...

Кесе Жареневский. Төнгө изге сәғәттәрҙә күгәргәндең ҡолағына нимә шыбырлай икән?

Убайән. Олатайыңдан һора.

Кесе Жареневский. Олатай алтын минең, буш ҡул менән йөрөмәй. Беләһеңме, бөгөн кем мин? ФСБ директорының беренсе урынбаҫары!

Убайән. Аб-ба, олатайҙар йәшәһен! Барыһынан элек компьютерыма табынһам да, Хоҙай ҙа бар икән, беҙҙәрҙе ярлыҡай икән!

Кесе Жареневский. Ҡой берҙе. (Сәкәштереп эсәләр). Ур-ра, Аляска наша!

Убайән. Аляска наша! (Ултыралар). ФСБ ҡайһылай тын ала?

Кесе Жареневский. Директорҙы әйтәм, һөрһөгән ҡәбер ҡорто, күптән китергә ваҡыт.

Убайән. Ул кресло һинеке! (Бераҙ тынлыҡ). Тик ҡара уны, стриптизкабыҙ алашаның ҡолағына уны-быны өрмәһен.

Кесе Жареневский. Ауыҙын йоҙаҡлармын.

Убайән. Хәҙерҙән үк вертикаль властың уң ҡулы булырға тораһың. Бурһып бөткән олатайҙар эпохаһы тамамлана, йылғыр ейәндәр эпохаһы башлана.

Кесе Жареневский. Бәйге ҡыры беҙҙеке!

Убайән. Мошонко-Тяпкин коллегабыҙ әйтмешләй, финанс ағымдар заманаһы...

Кесе Жареневский. Олатайҙар ҡыҫымын нығ көсәйттек, резерв фонд та беҙгә шылырға әҙер. (Ҡул ҡыҫышып) Так что, Аляска наша!

Убайән. Аляска наша!

Кесе Жареневский китә, бер юлы Кесе Зигалов, Кесе Кисляков, Кесе Рокфеллер, Мошонко-Тяпкин дөбөрҙәп килеп керә, шаулашып күрешәләр.

Кесе Зигалов. Бөгөн ҡотлауҙар көнө! Ҡөҙрәтле олатам президент дачаһында булып ҡайтты, ошо көндән мин – дәүләт ҡоролтайы скиперы!

Кесе Кисляков. Мин – дәүләт телевидение комитетының генераль директоры!

Мошонко-Тяпкин. Мин – финанс министры!

Кесе Рокфеллер. Мин фәҡиреңез бүгеннән башлап оборона-именлек министры, званием генерал!

Убайән. Ҡотлайым, дуҫтар, ысын күңелдән ҡотлайым! Ур-ра, Аляска наша! (Шулай оранлап ҡосаҡлашалар, үбешәләр, дәртле марш яңғырай). Бейейек, туғандар!

Музыка оҙатыуында күмәк бейеү башлана, Алина-Малиналар, Нәфисә-Анфисалар тантанаға ҡушыла.

**ШАРШАУ.**

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### Өсөнсө күренеш

«Аляска наша!» акционерҙар йәмғиәтенең идара ултырышы, Убайән алып бара.

Убайән. Әфәнделәр, коллегалар! Хөрмәтле Кесе Жареневский менән генералыбыҙ ниңәлер тотҡарлана, ләкин улар бына-бына килеп етергә тейеш, кворум бар, башлай торайыҡ. «Аляска наша!» акционерҙар йәмғиәте идараһының нәүбәттәге ултырышын асыҡ тип иғлан итәм. Көн тәртибендә – «Аляска наша!» проектының бойомға ашырылыу барышы һәм ағындағы төп бурыстар. Ошо көндә триллион рубллек акцияларыбыҙҙың күп өлөшө граждандар һәм төрлө юридик ойошмалар араһында уңышлы таратылды, фондтың финанс нигеҙе нығытылды. Ләкин нигеҙ өҫтөндәге ҡоролманы үҫтерәһебеҙ алда – акцияларҙың кәм тигәндә өстән бер өлөшөн дәүләт елкәһенә йөкмәтеп тылды нығытырға йәғни дәүләт яҡлауына өлгәшергә! Шул йәһәттән Дәүләт ҡоролтайында һәм президент идаралығы аппаратында һөҙгәк мөгөҙ лоббистар булдырылды, президентҡа һәр яҡлап ҡыҫым көсәйтелде, бигерәк тә тос баҫымлы олаталарҙың ейәндәренең тәьҫире ҡеүәтләнде. Коллегабыҙ Кесе Кисляков әфәндененң көнө-төнө беҙҙең файҙаға эшләгән зәңгәр экрандарынан фәһем алып рухланған ғәййәр йөрәкле мүклебашкиндар, суҡмарбашкиндар етәкселегендә меңәрләгән обыватель беҙҙе яҡлап урамдарға сыҡты. Нимәләр эшләнеп бөтмәгән һәм нимәләр эшләргә? Ошо хаҡта уйлашайыҡ.

Мошонко-Тяпкин. Проекттың архимөһимлегенә, обывателде генә түгел, Кремлде лә инандырттыҡ. Сит ил эксперттары, Франция һәм Англия араһына Ла-Манш боғаҙы аша туннель үткәреү барышында ун миллиард стерлинг фунты тотонолдо, ә Беринг боғаҙы проекты урыҫтарға ике тапҡыр ҡиммәтерәккә төшәсәк, тип бик дөрөҫ яҙа. Йәнәһе шул дефицитты ҡаплатырға йәнә лә ҡайҙан умырырға?

Убайән. Бына һин, державаның талантлы финанс министры, әйт әле: дәүләтебеҙҙең һаҡлыҡҡа һалынған резерв фонды ни хәлдә?

Мошонко-Тяпкин. Беләһегеҙ: Резерв фондының яртыһы Америка банкына күсерелде -- төпһөҙ ҡойоға баты тип иҫәпләйек.

Убайән. Бын响ы тәбиғи. Ә ҡалған яртыһы?

Мошонко-Тяпкин. Ҡалған яртыһы үҙебеҙҙә.

Убайән. Әнә шул ҡалғанын ҡайырып алырға кәрәк, президентты боғалаҡлап ҡыҫығыҙ. Спикер, һин нимә әйтерһең?

Кесе Зигалов. Ҡыҫҡысыбыҙ көйләнгән, бына-бына ҡоҫоп бирергә әҙер.

Убайән. Тиҙерәк, тиҙерәк! Әнә, генералыбыҙ килеп етте.

Кесе Рокфеллер керә.

Кесе Рокфеллер. Сөйөнчө, жигетләр, әле генә президентта булып чыктым, резерв фонды безнең ҡарамаҡҡа күчте!

Барыһы бергә: -- Ур-ра! (Аяғөҫтө тороп алҡышлау).

Кесе Кисляков. Америка дәүләт секретарының матбуғат буйынса ләпелдәгән беләһегеҙ бит...

Кесе Зигалов. Бер конгрессмен: «Рәсәй дәүләте ҡайҙа урынлашҡан?» -- тип һорағас, Көньяҡ Африка Берләшмәһенең уртаһындағы Лесотоның уртаһында, тип яуаплаған килделе-киттеле ханым.

Кесе Кисляков. Улай уҡ тимәҫ инем. Бына шул ханым, йәнәһе лә урыҫтар, Ҡырымдан һуң Алясканы аннекциялау башлап, Беринг боғаҙы төбөнән туннель ҡаҙа, ә Пентагон йоҡлап ята, тип ғауға һалған.

Кесе Зигалов. Был тәңгәлдә Жареневский хаҡлы: улар менән күп һөйләшеп тормаҫка, үҙебеҙҙең ярҙан тороп ут яуҙырырға!

Кесе Рокфеллер. Иртәрәк шул, туғанлар. Оборана-именлек министры буларак, кисәтергә телимен: анда очоп барып житәрлек ракеталарыбыз черегән, яңалары ясалмаган...

Кесе Зигалов. Эх, держава тубыкланды...

Кесе Кисляков. Уның ҡарауы дипломатиябыҙ көслө! Сит ил эштәре министрыбыҙ Капустин әфәнде, туннель ҡаҙғанды кем күргән? Дәлилдәрегеҙ бармы? Ни ҡылһаҡ та үҙ еребеҙ, тип ханымдың ауыҙын тиҙ яптыртҡан.

Убайән. Молодец Капустин!

Кесе Кисляков. Молодецлыгын молодец та, әммә Капустиндың да бит кәбеҫтә турағысы бар.

Убайән. Миллион йәшеллек етерме? Кәбеҫтәгә, тим.

Кесе Кисляков. Йәшелдән етеп торор.

Убайән. Хәл ителде. Тағы ни аңлашылмай?

Кесе Рокфеллер. Мона мин, оборона-именлек министры буларак, хәрби бюджетыбызның дөйәдәй өлөшөн, бигерәк важный хәрби ҡоролма дип баһалап, туннель авызына ҡаптырдым.

Мошонко-Тяпкин. Үҙеңдең ауыҙға төймәләйе генә ҡалдымы? (Көлөшәләр).

Убайән. Зыян юҡ, молодец. Генералға -- йөҙ мең.

Кесе Рокфеллер. Ник йөз генә? Ике, яки өч йөз түгел? Резервный фонд ҡулда лабаса?!

Мошонко-Тяпкин. Әфәнделәр, асҡаҡланмағыҙ! Ашаған белмәй, тураған ғына белә.

Убайән. Эйе. Проект үтәлгәс, бишләтә һоғонорбоҙ. Ә хәҙерен ошонда ултырған һәм ултырмаған һәр танауға йөҙәр мең. Шулаймы, коллегалар?

Дөйөм хуплау: -- Шулай! Шулай!

Кесе Рокфеллер. Жәнә дә бер мәсьәлә. Безнең алтын ҡувыҡны буш ҡувыҡ дип, майданларда халыҡ-сарыҡҡа сафсата сатып жөрөгән бер бомжаны, үзегез беләсез, Чуҡмарбашкин жигетләре аның үз теләге берлән күпердән су төбөнә зөмбөрләткән иде, жыйын-бар-жуҡ несознательный элемент шул урынға чәчкәләр салып, митингылар ясап тәртипне боза, полицияның көчө житми. Үземнең ҡул астындағы ғәскәр берлән эзләрен сеперттерер идем дә, закон жуҡ...

Убайән. Скипер, ҡасан сыға шул закон?

Кесе Зигалов. Проекты әҙер, оҙаҡламаҫ

Кесе Рокфеллер. Ҡарағыз аны, тыңламаған халыҡ-сарыҡны атырға да рөхсәт булсын.

Кесе Зигалов. Уныһы ла булыр.

Убайән (сәғәтенә күҙ һалып). Коллегабыҙ Кесе Жареневский юҡ та юҡ, ни булғандыр?

Кесе Кисляков. ФСБ-ла атмосфера баҫымы артҡан, директор һәм урынбаҫар араһында аҫтыртын алыш ҡыҙа, тиҙәр.

Кесе Зигалов. Үлеп тә китмәй бит, исмаһам, директор креслоһына ҡатмыш күгәргән йән...

Ҡыҙара-бүртенеп, төҫө ҡасып Кесе Жареневский инә, аяғөҫтө тороп ҡаршылайҙар.

Кесе Жареневский. Китте теге күгәргән йән... сердечная недостаточность...

Дөйөм еңел һулыш, ҡул сабыу.

Убайән (устарын ыуып). Хоҙай бар шул, бар!

Кесе Жареневский. Креслола мин хәҙер. Указға ҡул ҡуйылды. Президент үҙе етәкләгән хакимлыҡ итеүсе партиябыҙҙың сираттан тыш йыйынын саҡырҙыҡ. Президент, һаулығы ҡаҡшау сәбәпле, партия лидеры вазифаһынан бушатылды, мине бер тауыштан партия лидеры итеп һайланы. (Ҡул сабыуҙар). Бөтә сәйәси хәрәкәттәрҙе берләштергән Халыҡ фронты төҙөнөк, уның да етәксеһе – мин. (Оҙаҡ ҡул сабыуҙар). Президент рейтингы һикһән алты процент килеш ҡатып ҡалды, минең рейтинг туҡһан алтыға етте. (Алҡышлау: -- Йөҙгә етергә тейеш!). Партия алдына, артабан кем президент булыр, тигән мәсьлә килеп баҫты.

Кесе Зигалов. Әлбиттә, һин! Һин!

Кесе Жареневский. Ашығыс рәүештә законға төҙәтмә индереү зарур: ике лидер араһында ундай-бындай мәсьәлә килеп тыуһа, иң күп рейтинг йыйғаны президент була, тип. Скипер?

Кесе Зигалов. Булдырабыҙ, киттек!

Кесе Жареневский. Киттек! Генерал, һин дә эйәр! (Өсәүләшеп сығып китәләр).

Мошонко-Тяпкин. Тетрәткес тарихи момент! Яҙмышыбыҙ минуттар, секундтар менән һанала.

Убайән. Ошонда ҡалып көтөргә.

Барыһы бергә: -- Көтөргә!..

Бойоғошоп шымалар, тетрәтеп телефон шылтырай.

Убайән. Әү, Зигалов, ниндәй яңылыҡ?

Кесе Зигалов (бөтә залға яңғыратып). Хөрт хәл, эт илағыс хөртөй хәл...

Убайән. Ни булды, закон килеп сыҡманымы?

Кесе Зигалов. Закон сыҡты... башҡайҙарыбыҙға ҡара бәлә ҡупты... Һауаланған йәһүдебеҙ күрәләтә күҙебеҙгә төкөрҙө... (Барыһы ултыра төшә).

Убайән. Һеммм...

Кесе Зигалов. Юлға сығам, барып еткәс һөйләрмен. Таралмағыҙ.

Ҡайһыныһы – ултырып, ҡайһыныһы йөрөштөрөп ваҡыт ҡыҫҡарта, дөйөм борсолоу. Кесе Зигалов күренә, ҡапыл йәнләнеш.

Кесе Зигалов. Әбсәһен эт ялағыры, башыбыҙға сысты бит! Йәһүдте әйтәм.

Мошонко-Тяпкин. Ҡайһы йәһүд? Кремль тулы йәһүд?

Кесе Зигалов. Жареневский, әлбиттә. Президент креслоһына осаһын йәпләштереү менән үк, кеселеген онотто, олатайланып бүртте.

Убайән. Йәғни?!

Кесе Зигалов. Үҙенән бушанған креслоға ФБС директоры итеп генералды ултыртты... Унан бушанған урынға оборона-именлек министры итеп үҙенең ике туған ҡустыһын тәғәйенләне...

Бөтәһе бергә; -- Аб-ба!

Кесе Зигалов. Президент аппаратының башлығы итеп Алина-Малинаны алды...

Бөтәһе бергә: -- Аб-бауу!

Кесе Зигалов. Минең урынға спикер итеп Нәфисә-Анфисаны беркетте...

Бөтәһе бергә: -- У-ууу!

Убайән. Ә һине, һине ҡайҙа?

Кесе Зигалов. Минең менән һинең өҫтән уголовный эш асырға, туннель буйын энәһенән ебенәсә тикшереп, алтын ҡыуыҡтың бушҡыуыҡ икәнлеген фашларға, тип бойорҙо.

Убайән. Һатлыҡйән! Предатель!

Барыһы бергә: -- Предатель!

Убайән. Йәмәғәт, ултырышығыҙ.

Кесе Зигалов. Юҡ, ултырмайым... ФСБ ултыртмаҫы элек... (Елтерәп сығып китә, унын артынан башҡалары ла тая, Убайән менән Кесе Кисляков ҡына ҡала).

Убайән. Төтөнлө өйҙө тараҡандар ташланы...

Кесе Кисляков. Карап бата тип, ҡомаҡтар сығып ҡасты...

Убайән. Ә һин ниңә тайманың, ҡуша батҡың килдеме?

Кесе Кисляков. Минең төтөн тура йөрөй, һинең караптың батмаҫын яҡшы беләм. Унан килеп, Карл Маркс әйтмешләй, аҡсаның еҫе сыҡмай.

Убайән. Әләйһә, кил. (Ултыралар). Әммә беҙҙәр янмабыҙ, батмабыҙ – державаның аҡ йорто, флоты беҙҙең ҡулда буласаҡ!

Кесе Кисляков. Беләм.

Убайән. Тыңла. Алтын ҡыуыҡтың буш ҡыуыҡ икәнлеген һис ҡасан фашлай алмаҫтар, барыһы алдан күрелгән. Компьютерҙа «документаль» кинофильм әҙерләнем: имештер, һыу төбөнән арғы ярға еткерелмеш быуат ҡоролмаһын, йәғни туннелде, Америка-яуыз шартлата, мин бахырығыҙ туннелдә күмелеп ҡала... Шул фильмде кисекмәҫтән зәңгәр экрандарға һал, донъяны шаулат, халыҡ-

һарыҡты илат. Обыватель һыҡтанып һәм нәфрәтләнеп урам, майҙандарға сығһын, минең рейтинг күктәргә күтәрелһен.

Кесе Кисляков. Аңланым. Эшләнәсәк!

Убайән. Ә мин подпольеға йәғни туннелгә китәм. (Ҡул биреп). Пока – еңеүле көрешкәнсе!

Икеһе бергә: -- Аляска наша!

## Дүртенсе күренеш.

Президент дачаһының ҙур залы, оҙон өҫтәлдең бер яртыһына һый ҡуйылған, икенсе яртыһы буш. Президент булып алған Кесе Жареневский өҫтәл башында ҡуҡырайып ултыра -- ярандарын туғандарса кәңәшмәгә саҡырған, дөйөм хозурлыҡ.

Кесе Жареневский. «Тяжела ты, шапка Монамаха!» -- тип Пушкин бик тапҡыр әйткән. Ошо ауыр президентлыҡ вазифамды башҡарыуға бер ай ҙа үтеп китe, хәүеф-хәтәр иһә бер-бер артлы моронлап тора, тынғы юҡ. Яуыз Америка этлектәре арҡаһында тамам миктәп тубыҡланған держава ҡалҡынып аяҡҡа баҫа алмай тилмерә, илдә кризис; ҡарттар -- икмәк, йәштәр эш даулай, сит илдәргә һатҡан нефть, газ хаҡы түбән тәгәрәй, урлашыу, алдашыу, наркомания, бандитсылыҡ көсәйә. Әллә ҡасан туннелендә күмелеп ҡалған ниндәйҙер бер Убайәндең рейтингы артҡандан-арта. Көсөргәнешле шул шарттарҙа вертикаль власты һаҡлап ҡалыу һәм нығытыу өсөн президенттың рейтингы хәл иткес әһәмиәткә эйә, ул көндән-көн күтәрелергә тейеш. Ә, ФСБ?

Кесе Рокфеллер. Эшлибез, туҡсан процентҡа күтәрттек.

Кесе Жареневский. Туҡһан туғыҙға, йөҙгә етергә тейеш!

Кесе Рокфеллер. Аның өчөн стимул житешми шул... Складларда снаряд, ракеталар чери башлады – берәр жирдә кечкәйерәк суғыш-муғыш чығарып булмасмы? Спикер ни дияр?

Нәфисә-Анфиса. Без проблем. Сит илгә ғәскәр керетергә президентыбыҙ рөхсәт һораһа, сәғәте-минутында тауышҡа ҡуйылып, ыңғай хәл ҡылынасаҡ.

Алина-Малина. Тәүҙә эске эштәрҙе теүәлләйек. Мәҫәлән, алтын ҡыуыҡ афераһы. Ялған туннелдең ялғанлығы әле булһа фашланмай.

Нәфисә-Анфиса. ФСБ йоҡлай.

Кесе Рокфеллер. Йоҡламибыз, ғасыр мошенниғы Убажанның эзләренә төшәбез.

Кесе Кисляков. Ой-ли, ҡойроғон тотторормо? Туннелендә тыныс ҡына мәкерләнеп ятмаймы?

Мошонко-Тяпкин. Ифрат хәүефле хәлдәр...

Кесе Кисляков. Бына «Нью-Йорк Таймс» гәзите: донъя кимәлендәге бер хакер Америка Пентагоны сейфына кергән, секреттарын сәлдергән.

Кесе Жареневский. Америкаға шул кәрәк!

Кесе Кисляков. Америкаға түгел шул... Державабыҙҙың Америка банкындағы резерв фондын Кремлдәге кемдәр бүлешеп алғанлығы тураһында... оҙаҡламай исемдәре фашланасаҡ, тиелгән.

Кесе Рокфеллер. Үкенечкә ҡаршы, үзебезнең ҡырҡ келәле ФСБ сейфына кергәнләр...

Кесе Жареневский. Был ни хәл?! Кем ул?

Нәфисә-Анфиса. Бер үк почерк, Убайән-хакер ҡылығы!

Кесе Жареневский. Туннеленән һөйрәп сығарырға!

Иҙән паркетының баҙ ҡапҡасы дәүмәлендәй өлөшө шатырҙап асыла, табын ҡырындағыларҙы шаҡ-ҡатырып, Убайән килеп сыға.

Убайән. Һөйрәп алыу кәрәкмәй. (Өҫтәлдең буш яртыһының башына барып ултыра). Бына мин.

Кесе Жареневский. Һин... һин... как посмел?! Ҡулға алырға!

Убайән. Ҡулығыҙ һынып ҡуймаһын! Тейешле саралар күрелгән, резерв фондын урлашыуығыҙҙы сәғәте-минутында донъя беләсәк! Кисляков әфәнде, документтар һалынған файлды экрандан асып күрһәт.

Кесе Жареневский. Кәрәкмәй. Минән һиңә ни кәрәк?

Убайән. Кисляков әфәнде (Кесе Жареневский яғына бармаҡ төртөп), ситән башына ҡунған ошо күркәнең рейтингыһы нисек?

Кесе Кисляков. Туҡһан туғыҙға үрмәләй.

Убайән. Ә минеке?

Кесе Кисляков. Ошо момента йөҙ ҙә утыҙ процент.

Кесе Рокфеллер. Дөрөс түгел! Хәзер Убажан туғанныҡы йөз дә илле биш процент!

Убайән. Спикер, яңы закон үҙ көсөндәме?

Нәфисә-Анфиса. Үҙ көсөндә, үҙ көсөндә!

Кесе Жареневский. Ых... (Бөгөлөп төшә, күтәреп алып сығып китәләр).

Убайән. «Яҙығыҙ: «Президент әфәнде Кесе Жареневский, йөрәк өйәнәге тотоп, реанимацияға ятҡырылды, яңы закон нигеҙендә президент вазифаһын иң күп рейтинг йыйнаған Убайән әфәнде алды».

Нәфисә-Анфиса. Яҙылған, ул ҡарар алдан әҙер.

Кесе Рокфеллер. Президент администрациясы башлығы, яңа президент кабинетын яңача жиһазларға!

Алина-Малина. Йыһазланыҡ, алдан уҡ!

Шампанскийлы бокалдар таратыла, «замана һандуғасы» Нәфисә-Анфисаның йырын бөтәһе күтәреп ала:

Йәшәһен, йәшәһен беҙҙең елле президент!
«Аляска наша!» тиһәк, беҙҙәр ҙә йәшәрбеҙ бит!

Хөлләләрен атып-бәргән Алина-Малина шашып стриптиз күрһәтә. Яҡтылыҡ аҡрын ғына һүнеп ҡабына.

# ЭПИЛОГ

*Шул уҡ кешеләр шул уҡ оҙон өҫтәл ҡырында ултыра, яңы президент Убайән аҡыл бирә.*

Убайән. Как говорится, байрам тамам. Ең һыҙғанып керешергә! Илдә яман кризис, Америка менән Көнбайыш Европа залимдары интектерткес санкциялары менән тамам көрсөккә терәне. Эшсе эшләмәй, игенсе сәсмәй, йәштәр – кәйеф, ҡарттар икмәк даулай. Бюджет дефициты бюджеттың үҙенән артып китe. Тубыҡланған державаны аяғына баҫтыртыр кәрәк.

Урындан тәҡдим: -- «Аляска наша!» проектын тергеҙергә!

Убайән. Беҙҙең өсөн инде ул пройденный этап. Беҙҙең алда глобаль масштабтағы проблеманы хәл ҡылыу бурысы тора. Был – йәштәр һәм ҡарттар мәсәләһендә демографик балансты көйләү. Бюджетты бөкөрәйтеп баҫҡан пенсионерҙар геренән нисек арынырға?

Мошонко-Тяпкин. Бик ябай: пенсияға сығыу йәшен арттырырға, пенсия күләмен ҡыҫҡартырға!

Кесе Рокфеллер. Иртәгәсен үк бунт күтәреп, Мүклебашкин берлән Чуҡмарбашкиннар күкәйеңнән асып ҡуйырлар үзеңне!

Убайән. Шундай хәл булмаһын өсөн, замананың фән ҡаҙаныштарына таянған өр-яңы проект бар! *(Мәжлестә йәнләнеш, ҡул сабыу).* «Йәштәргә – кәйеф, ҡарттарға ожмах!» тип атала ул.

Мошонко-Тяпкин. Ошо ерҙә большевиктар төҙөгән ожмахмы ул?

Убайән. Беҙ большевиктар түгел. Марс планетаһындағы ожмах хаҡында һүҙ бара. Ҡарт-короно ожмахҡа осортабыҙ.

Кесе Рокфеллер. Ракеталар искерде, яңалары жуҡ...

Убайән. Кәрәкмәй. Зәңгәр экрандарҙан осортабыҙ, Марсҡа барып төштө, ожмахтағылар шатланып ҡаршы алды, тип хәбәр итәбеҙ.

Кесе Рокфеллер. Анысы ярый ла ул...

Убайән. Ҡыҫҡаса әйткәндә, проект шунан ғибәрәт: элекке бөтмөш президенттың «Һәр ветеранға – йылы фатир!» проектын «Пенсияға сыҡҡан һәр уҙаманға – Марс планетаһындағы ожмах!» проекты алмаштыра. Шул девиз ҡанына һеңешкән һәр уҙаман үҙ аяғы менән барып крематорийға керә; бер стакан көлө, имеш, капсулаға һалынып, контейнерға тейәлеп, йыһан ракетаһында Марсҡа оҙатыла; Марстағы лабораторияла көл ҡабаттан элекке әҙәми ҡиәфәтендә йәп-йәш егет, йәки ҡыҙ итеп тергеҙелеп, мәңгелек ожмахта кинәнеп йәшәп китә. Пенсия һәм льготалар алырға тейешле инвалидтар, наркомандар, ялҡауҙар менән дә шул уҡ хәл. Библия һәм Ҡөрьәндәрҙәге ожмах – тап шул Марс ожмахы ул, тип халыҡ-һарыҡтың аңына һеңдерергә.

Мошонко-Тяпкин. Тик хәҙерге ҡарт-короно ышандыртып булырмы?

Кесе Кисляков. Ышандыртырбыҙ. Не в перый раз замужем!

Алина-Малина. Ә ғәмәлдә көлөн ҡайҙа ҡуйырға?

Убайән. Уныһы ла ҡаралған. Көл, тоҡтарға тултырылып, заводтан сыҡҡан химик ашлама рәүешендә этикеткаһы яҙылып, ауыл хужалығына – баҫыуҙарға оҙатыла. Әнә, Кесе Зигалов ауыл хужалығы министры итеп тәғәйенләнде.

Кесе Зигалов. Барыһы ла цивилизация юғарылығында буласаҡ.

Убайән. Тағы һорауҙар бармы?

Нәфисә-Анфиса. «Йәштәргә кәйеф» мәсьәләһе аңлашылып етмәй.

Убайән. Һәр бәпестең мейеһенә әсә ҡарынында уҡ «эш коды» еректерелә, шуға күрә әҙәм балаһы эштән генә кәйеф ала.

Алина-Малина. Үҫеп еткәс барыбер эшләмәһә?

Убайән. Ундай уродтар ваҡытынан элек пенсияға сығарылып, дөйөм ҡағиҙә буйынса Марс ожмахына ебәрелә һәм унда мәңгелеккә бөкөрәйгән ҡарт, ҡарсыҡ ҡиәфәтендә тергеҙелә.

Барыһы бергә: -- Шәп! Шәп!

Убайән. Проектты үтәй барып, тубыҡланған державаны киреләдертеп, яуыз Американы, уның сателлиты Көнбайыш Европаны тетрәтербеҙ, ҡотон алырбыҙ! (Тороп тәҙрәне аса, ел бәреп инеп, ҡағыҙҙарҙы туҙҙыра; тышта күмәк хор: «Кәйеф – Ожмах! Кәйеф – Ожмах! Кәйеф – Ожмах!»). Ишеттегеҙме? Беҙҙең юғары рейтинг был. Тубыҡланыуҙар тамам! Торҙоҡ, аяҡландыҡ, әфәнделәр! Ур-ра!

Барыһы бергә: -- Ур-раaa! Ур-раaa! Ур-раaa!

**ШАРШАУ.**

26.10.2015.

# ҠАҺАРМАНДАР

## Драма өс шаршауҙа, һигеҙ сәхнәлә

*1812 йылғы Ватан һуғышы батырҙарына арнала.*

Ҡатнашалар:

Буранғол Ҡыуатов – тыуымыштан кенәз (бей), Ырымбур өйәҙе 9-сы кантон




башлығы, 62 йәштә.

Юлдашбикә – Буранғолдоң йәш ҡатыны.

Ҡаһарман – тыуымыштан кенәз (бей), кадровый хәрби офицер, Буранғолдоң



улы, 24 йәштә.

Боҫкон Даянов – тыумыштан кенәз (бей), Сәнкем-Биктимер ауылы аҡһаҡалы.

Зөләйхә – Боҫкондоң ейәнсәре, сабый саҡтан уҡ Ҡаһармандан ҡолағын тешләттертеп, уға кәләшлеккә килешелгән матур ҡыҙ, 15 йәштә.

Йәнтүрә – ҡурайсы-сәсән, 30 йәштә.







Ғәзимә – Йәнтүрәнең ҡатыны, 25 йәштә.

Волконский Сергей Георгиевич – Ырымбур генерал-гөбөрнәтере, 70 йәштә.



Ладыгин – Воздвиженск (Эйектамаҡ) крепосы казактар атаманы.

Александр I – Рәсәй императоры, 35 йәштә. 

Александр Чернышев – император адъютанты, полковник, 27 йәштә. 

Барклай деТолли Михаил Богданович – Рәсәй армияһының баш сардары  (Кутузовҡа тиклем), 51 йәштә.

Кутузов Михаил Илларионович – Барклайҙы алмаштырған баш сардар, 67  йәштә.

Багратион Петр Иванович – кенәз, Рәсәйҙең 2-се Көнбайыш армияһы сардары, 47 йәштә. 

Беннигсен Леонтий Леонтьевич – кавалерия генералы, Рәсәй армияһының Генераль Штаб башлығы, 67 йәштә. 

Платов Матвей Иванович – Дон казактары атаманы, 61 йәштә. 

Ростопчин Федор Васиьевич – граф, Мәскәү корпусының сардары, 49 йәштә. 

Людовик 18-се – Франция короле, буйҙаҡ ир 57 йәштә,.


Жозеф – генерал, король адъютанты.

Франсуа – принцесса, Людовиктың үгәй ҡыҙы, 16 йәштә.

Жозефина – элекке императрица – Наполеон Бонапарттың айырған



ҡатыны, 49 йәштә.

Гротензия – Жозефинаның тәүге иренән (Наполеон Бонапарттың үгәй) ҡыҙы. Гротензияның инсафлығын үгәй атаһы Наполеон Бонапарт боҙған.



Һөйтө (Гете Иоганн Вльфганг) – бөйөк немец шағиры, ғалим, дәүләт




эшмәкәре, 63 йәштә.

Массовиктар.

Рәсәйҙең Изге Анна ордены һәм миҙалы:





# Степени ордена и правила ношения

**I степень** — Крест на ленте шириной 10 см через левое плечо, звезда на правой стороне груди; 350 или 200 руб. ежегодной пенсии;

**II степень** — Крест меньшей величины на шее на ленте шириной 4,5 см («Анна на шее»[4]); 150 или 120 руб. ежегодной пенсии;

**III степень** — Крест ещё меньшей величины на груди на ленте шириной 2,2 см; 100 или 90 руб. ежегодной пенсии;

**IV степень** — Крест на эфесе холодного оружия и темляк из Орденской ленты («Клюква»); 50 или 40 руб. ежегодной пенсии.

Когда орден пожалован за военные подвиги, к знакам 1-й, 2-й и 3-й степени присоединяются по два меча, накрест лежащих посредине креста и звезды, к знаку 4-й степени присовокупляется на эфесе надпись «*За храбрость*».



Правила ношения степеней ордена Святой Анны (слева направо с 4-й по 1-ю)

В отличие от всех других российских орденов, звезда ордена Святой Анны носилась не на левой, а на правой стороне груди.

При пожаловании ордена высшей степени знаки низших степеней не носятся (за исключением знаков с мечами и знаков ордена 4-й степени на холодном оружии).

Император Александр I Ырымбур өйәҙе 9-сы башҡорт кантонына тапшырған Император Александр Байрағы:





Францияның Хөрмәтле Легион ордены:

В книге В.М.Корнеева и Л.В.Михайлова "Медицинская служба в Отечественную **войну 1812 года**" рассказывается, что "для **...** больных воинов, обслуживали сто восемьдесят **санитаров**, шестьдесят **сестер милосердия** и десять квалифицированных врачей.

В грозные дни Отечественной войны 1812 года образовалось первое из женских благотворительных обществ в России — «Женское патриотическое общество». Оно объединило русских женщин, воочию наблюдавших ужасы войны и старавшихся в меру своих сил и возможностей облегчить судьбу вдов и сирот, помочь раненым и калекам.





Рәсәй шәфҡәт туташтарына миҙал.




Наполеон алтын тәңкәһе.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ
## Беренсе сәхнә

29.08.1812. Рәсәй ғәскәрҙәре (1-се Көнбайыш армия – сардары Барклай де Толли һәм 2-се Көнбайыш армия – сардары Багратион), ҡаты һуғыштарҙан һуң Смоленск һәм Вязьма ҡалаларын Наполеон Бонапарт илбаҫарҙарына ҡалдырып, Вязьманан ун саҡрым төньяҡ-көнсығышҡа табан Мәскәү юлы буйындағы Федоровка ҡасабаһы төбәгендә туҡталған. Баш Штаб урынлашҡан бинаның ҙур залы, төпкө бүлмәгә – ябыҡ ҙур ишек. Ашығыс кәңәшмәгә йыйылған генералдар: Штаб башлығы Беннигсен, Барклай де Толли, Багратион, Платов.

Баннигсен. Генерал әфәнделәр, һеҙҙе фекер алышырға саҡырҙыҡ. Ошо минуттарҙа Император *(төпкө бүлмә яғына ымлап)* кенәз Кутузов-Голенищев менән айырым кәңәшләшә, йәғни (ҡәнәғәтһеҙ) йәнәһе «Суворовтың һөйөклө шәкерте» менән... Алъйып бөткән ҡартлас һөйрәлеп сыҡҡанға тиклем, фекерләшә торайыҡ. Беләһегеҙ, хәлдәр ифрат ҡатмарлы. Сигенәбеҙ ҙә сигенәбеҙ – һәр беребеҙ өсөн изге ҡала Смоленск менән Вязьманы ла Бонапартҡа ҡалдырҙыҡ...

Багратион. Баш сардар Барклай әфәнденең табан ялтыратыу стратегияһы.

Барклай. Минеке генә түгел, беләһегеҙ, Неймандан алып ошоғаса Император ҡулы аҫтында эшләнем. Һәм был – табан ялтыратыу ҙа түгел, ә, алдан күреп иҫәпләнгәнсә, һуғыша-һуғыша дошманды ҡанһыратыу.

Беннигсен. Уныһы шулай, Император етәкселегендә...

Багратион. Күпме туҡыным: Смоленскиҙа түгел, ә Нейман ярында уҡ аждаһаның аҙау тештәрен һындырырға, тип.

Беннигсен. Петр Иванович, ғәҙеллек өсөн танырға кәрәк: ул аждаһа аҙау тештәре алты йөҙ мең штыктан хасил инен, ә беҙҙеке...

Барклай. Ике ярым тапҡырға кәмерәк.

Платов. Эйе, тештәребеҙ ел үтмәле һирәгерәк ине шул. Ә шулай ҙа Рәсәй еренең һәр ҡарышын йән аямай һаҡланыҡ, француздарҙың ҡанын туҙҙыртып тешләштек.

Барклай *(Багратионга).* Әгәр һеҙҙеңсә Нейманда уҡ йөҙгә-йөҙ бәрелешһәк, Наполеон һеҙҙе лә, мине лә дөмбәҫләп ҡыйнар ине, Рәсәйҙең үҙаллылығы шунда көл булып ятып ҡалыр ине.

Беннигсен. Белмәйем, белмәйем... барыһы Хоҙай ҡулында.

Платов. Минеңсә, Император менән башсардар стратегияһы үҙен аҡлай: Наполеон колонналарын юл буйы туҙҙырабыҙ, аҙыҡ-түлек ылауҙарын, дары-йәҙрә йәшниктәрен шартлатабыҙ. Армияһы күҙгә күренеп кәмей.

Барклай. Ә беҙ армияны һаҡлап алып ҡалдыҡ, армия барҙа – Рәсәй ҙә бар.

Багратион *(ҡыҙышып).* Михаил Богданович, ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе аңламайым: ҡурҡаҡлыҡмы был?

Беннигсен. Юртаҡлыҡ ҡына, тип әйтенр инем, сөнки генералдың батырлығын донъя белә. Әммә өҙлөкһөҙ сигенеү бер кемде лә биҙәмәй. Армияла ҡәнәғәтһеҙлек арта.

Багратион. Ужасно, һалдаттарым башсардарҙы тәбрикләмәй башланы...

Беннигсен. Баш Штабҡа хаттар килә: башҡалабыҙ Санкт-Петербургта ла, тәүге башҡалабыҙ Мәскәүҙә лә был эште хупламайҙар...

Багратион. Етер, күп сигендек!

Барклай. Петр Иванович, ғәфү, һеҙҙең кавказ яндырайлығын аңлайым, ләкин...

Багратион. Ғәфү, һеҙҙең һалҡын немец ҡаны...

Төпкө бүлмәнән Император адъютанты Чернышев сыға.

Чернышев. Салют, генерал әфәнделәр. Әйҙәгеҙ, ҡандар тишерешмәйек, сөнки ул барыбыҙҙың да буталып бөткән. Уға ҡалһа, Кутузовты ла «татар Ҡотдос тоҡомо» тип ғәйбәтләйҙәр, ә башҡаларыбыҙҙыҡын әйтеп тә тормайым. Башсардар немец булыуы сәбәпле армиябыҙ сигенә, тигән насар хәбәр таралған. Шул Барклай де Толли арҡаһында армиябыҙ хәл иткес һуғышҡа әҙерлеген һаҡлап ҡалғанлыҡты белмәйҙәр. *(Платовҡа).* Матвей Иванович, Смоленск янында айырыуса ҡаһарманлыҡ күрһәтеүселәр килдеме?

Платов. башҡорт полкының өс ҡаһарманы полусотня ҡарауылы менән көтөп тора ихатала.

Чернышев. Император үҙе күрергә теләй, кәрәк саҡта индерерһегеҙ.

Багратион. Петр Иванович, секрет булмаһа, алдан әшкәртегеҙсе: Император ул Кутузов-ҡартлас менән нимә хаҡында серләшә?

Чернышев. Секрет түгел *(төпкө бүлмә ишеген ҡыҫыбыраҡ аса ла кире яба, унда ягымлы бер көйгә зауыҡлы һыҙғырыу ишетелә).* Аңлашылдымы? Зауыҡлы һыҙғырыу сәнғәтенән күргәҙмәле дәрес бара (бүлмәгә инеп китә).

Багратион *(һыҙғырып).* Фи-ю! Һыҙғырып ҡына Мәскәү тупһаһына килеп еттек...

Беннигсен *(әсе йылмайып).* Императорҙы беләһегеҙ: Баш Штабта ғәҙәттән тыш мөһим фекер алышыуҙар барышында ла үҙенең шул моңло көйҙәрен сығарып зауыҡлана...

Барклай. Тимәк, эшебеҙ ышаныслы.

Платов. Императорҙың һыҙғырыуы французларға пушка гөрһөлдәүенән дә дәһшәтлерәк!

Ростопчин керә.

Ростопчин. Ур-ра! Смоленск менән Вязьма дөрләп яна, француз йораттары ут эсендә ҡалған ҡара тараҡандарҙай тыбырсына!

Беннигсен. Ҡыуанмағыҙ! Һеҙ, хөрмәтле Мәскәү гөбөрнәтере, әллә үҙегеҙ ут төрттөгөҙмө? Ниңә бында сыуалып йөрөйһөгөҙ?

Ростопчин. Мине Император үҙе саҡырҙы.

Беннигсен. Платов, ниңә яна? Арьергардта һеҙ килдегеҙ.

Платов. Беҙ киткәндә ҡалалар янмай ине.

Ростопчин. Ҡара халыҡ ут һалған, ҡасаҡтарҙан һорашып белдем. Урыҫ мужигына дан! Илбаҫарҙың баҫҡан бер ерендә тупраҡ дөрләргә тейеш! Һәм дөрләр!

Багратион. Унда минең мөлкәттәрем...

Ростопчин. Мөлкәттәребеҙҙән француз кинәнмәһен – көл генә тороп ҡалһын!

Беннигсен. Мәскәүҙәге мөлкәттәрегеҙ дөрләһә, былай һайрамаҫ инегеҙ.

Ростопчин. Дөрләһен! Француз килә ҡалһа, мин үҙем ут төртөргә әҙер!

Төпкө бүлмәнән Чернышев, Кутузов, һыҙғыра-һыҙғыра Император Александр сыға.

Александр. Привет, генерал әфәнделәр!

Бөтәһе бергә. Здравия желаем, Ваше Высочество!

Александр. Ҡыҫҡаһы, Мәскәү юлында торабыҙ, әммә ғәскәрҙәребеҙ теүәл, ҡоралдарыбыҙ ҡулда. Артабан ни эшләргә?

Багратион, Беннигсен. Ошонда уҡ дошмандың башын-тояғын бер юлы тизырға!

Платов. Минең корпус Напашканың кәлтә ҡойроғон өҙәсәк.

Александр *(Кутузовҡа).* Ә һеҙ, Михаил Илларионович, ни әйтерһегеҙ?

Кутузов. Иң элек Михаил Богданович Барклай де Толли нимә тир?

Барклай. Һуғыш өсөн көйлө ошо урынға, Хоҙайға шөкөр, ике армиябыҙҙы ла иҫән-һау килтереп еткерҙем; әгәр Император бойорһа, ғәскәр бөгөндән үк дошман менән йөҙгә-йөҙ бәрелешергә әҙер. Ә шулай ҙа...

Багратион. Нимә тағы «шулай ҙа»?

Барклай. Ваше Высочество, беләһегеҙ, Ватан өсөн башымды һалырға әҙер, ләкин әлеге мәлдә бер фекеремдә ҡалам, йәғни генераль бәрелешкә иртәрәк, дошман колонналарын төрлө яҡлап бөлдөрә-бөлдөрә сигенә биреү хәйерле.

Платов. Минең казактар уларҙы юл буйынса туҙҙырҙы, артабан да туҙҙырасаҡ.

Александр. Йәнә кем ниндәй фекерҙә?

Ростопчин. Ваше высочество, мин һеҙҙең һәм Барклай де Толли стратегияһын тулыһынса яҡлайым. Наполеондың күтенә хәҙер ут ҡапты, артабан дөрләп янасаҡ. Хоҙайға шөкөр, Рәсәйенбеҙ иңе киң – генераль бәрелеште ашыҡтырмау хәйерле. Оҙайлы сигенгәндә лә, илбаҫарҙар өсөн Рәсәй Императоры Мәскәүҙә лә хәтәрлекле, Ҡазанда ла ҡурҡыныслы, Тобольскиҙа ла еңелмәҫ көс булып ҡаласаҡ! Мәскәү ҡалаһын ғәҙәттән тыш хәлдәргә әҙерләнек, ҡала халҡынан ополчение туплап ҡоралландырҙыҡ.

Александр *(бер быуа күңелле һыҙғырып уйланып ала).* Федор Васильевич, һеҙҙе бөгөндән Мәскәү ополчениеһының сардары итеп тәғәйенләйем. Әҙер торорға!

Ростопчин. Есть, беҙ әҙер!

Багратион. Ваше высочество, быны нисек аңларға? Мәскәүгәсә һаман сигенергәме?

Александр. Кәрәк булһа, Камчаткаға барып етербеҙ. Бөгөндән башлап, армияның баш сардары итеп Кутузов-Голенищев тәаәйенләнә. Барклай де Толли 1-се Көнбайыш армия сардары вазифаһында ҡала. *(Кутузовҡа)* Кенәз...

Кутузов. Генерал әфәнделәр, стратегия үҙгәрмәй. Армия сардарҙары ғәскәрҙәренә китә. Билдәләнгән маршруттарҙан сигенеүҙе дауамларға!

Барклай *(сукынып).* Хоҙайға шөкөр, һуғыш арбаһын тау үренә мендерҙем, инде үҙенән-үҙе тәгәрләйәсәк.

Барклай де Толли, Багратион китә.

Александр *(Беннигсенга).* Ватан һуғышы бара, бөтә Рәсәй халыҡтарын йәлеп итергә кәрәк, бигерәк тә башҡорттарҙы.

Беннигсен. Так точно, Ваше высочество. Уларҙың бер төркөмө көтөп тора.

Кутузов. Керһендәр. Мин уларҙы төрөк һуғышынан уҡ яҡшы беләм.

Ҡаһарман, Йәнтүрә, Ғәзимә инә. Император тәҙрә төбөндә тышҡа ҡарап тора, Александр Алябьевтың «Һандуғас»ын һыҙғырғылай.

Кутузов. Балаҡайҙар, исемдәрегеҙ?

Ҡаһарман. Подпоручик Ҡаһарман Буранғолов буламын. Эргәмдә *(күрһәтеп)* вахмистр Йәнтүрә Этбаев, уның хәләл ефете -- сотник вазифаһын башҡарыусы Ғәзимә ханым.

Александр *(торған урынынан әйләнеп ҡарап).* Тышта башҡорт яугирҙәре.

Платов. Эйе, Ваше высочество, минең данлы казактарым.

Александр. Өҫ-баштары һәләмә – кисекмәҫтән баштан-аяҡ кейендерергә!

Платов. Ваше высочество, өҙлөкһөҙ хәрәкәттәбеҙ, кейем-һалым етешмәй...

Александр. Ростопчин әфәнде, һуғыштан файҙаланып, Мәскәү ҡаҙнаһын ҡомаҡтар ҡайыҙламанымы?

Ростопчин. Ваше высочество, бөгөн үк курьер елдертәм, бөтәһен тиң энәнән-ептән кейендертәм!

Александр *(бер быуа һыҙғырыуын өҙөп).* Ниндәй көй, беләһегеҙме?

Генералдар аптырап ҡала.

Александр. Белмәйһегеҙ. *(Тынлыҡ).*

Ғәзимә. Ваше высочество, башҡорттоң «Һандуғас» көйө.

Александр. Ә?

Йәнтүрә. Эйе, Ваше высочество, беҙ был көйҙө ротмистр Алябьев менән икәүләшеп бергә сығарҙыҡ.

Александр. Ротмистр Алябьев һеҙҙең полктамы ни?

Платов. Ваше высочество, Алябьев менән Йәнтүрә лазарета бергә ятҡайны.

Йәнтүрә. Башҡорт көйөн мин ҡурайҙа һыҙҙырттым, ә ул нотаға һалды. Бына *(Алябьевтың «Соловей»ын ҡурайҙа уйнай, Император кинәнеп ҡуша һыҙғыра).*

Александр. Нотаны ла беләһегеҙме?

Йәнтүрә. Юҡ, нотаны танымайым.

Ғәзимә. Әммә беҙҙә көмөшкә яҙылған бороңғо ноталар бар. Теләһәгеҙ, күрһәтәм.

Александр *(яҡынлап).* Ҡыҙыҡ, бик ҡыҙыҡ.

Ғәзимә. Бына, Ваше высочество, сулпымдағы тәңкәгә яҙылған «Саҡ-Суҡ» көйө.

Александр. Вот тебе на! -- был бит Ватан тарихы! Ониндәй оҙон толом! *(Тәңкәләрҙе сылтыратып, адъютантына).* Алябьевҡа иҫкәртергә: һуғыштан һуң башҡорт йәйләүҙәрен гиҙһен, ноталарҙы ҡағыҙға күсереп алып, академияға тапшырһын!

Чернышев *(ҡуйын дәфтәренә теркәп).* Үтәлер, Ваше высочество.

Платов. Французлдарҙы баҡтыртып Смоленск күперен шартлатҡанда Ғәзимә ханымдың ҡыйыулығы хәл ҡылды: еңә башлаған дошманға сотняһы менән ташланып, дон казактарын үлемдән һәм әсирлектән араланы.

Александр. Гүзәл зат, тиңһеҙ батырлығығыҙҙы өсөнсө дәрәжә Изге Анна ордены айбарлаһын *(ҡыҙыл таҫмалы орденды Ғәзимәнең муйынына кейҙертә).* Мосолмандар өсөн махсус айһүрәтләп эшләнгән. Ҡотлайым!

Ғәзимә. Ватанға хеҙмәт итәм!

Император Йәнтүрәгә яҡынлаша.

Ҡаһарман. Ваше высочество, рөхсәт итегеҙ. Полк командирының ярҙамсыһы, полк муллаһы, танылған ҡурайсы-импровизатор вахмистр Йәнтүрә Этбаев. Ғәскәрҙәребеҙ артында дошманды Смолнеск күперенән үткәрмәйенсә тотоп торҙо.

Александр. Икенсе дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләйем *(орденды беркетә)* һәм подпоручик дәрәжәһенә күтәрәм. Ҡотлайым!

Йәнтүрә. Ватанға хеҙмәт итәм!

Император Ҡаһарман тәңгәлендә туҡтала.

Александр. Капитан Ҡаһарман Буранғолов...

Чернышев. Сир, ғәфү итегеҙ, уның званиеһы поручик.

Александр *(адъютантына).* Яҙып ҡуйығыҙ, капитан Буранғолов. Кемлеген аңлатыу кәрәкмәй, уның менән беҙ 1807 йылғы Фридланд янындағы ҡаты һуғыштан уҡ яҡшы таныштар... Унда поручик ине, ә хәҙерен – капитан. *(Ҡаһарманға)* Хәтерләйем, ул саҡта атайығыҙҙың – полк командиры майор Буранғол Ҡыуатовтың ярҙамсыһы инегеҙ, икегеҙҙең дә ҡылысҡа «Ҡаһарманлыҡ өсөн» Изге Анна миҙалы беркетелде. Күрәм, данлы ҡылыс һис тә һынатмай үҙен.

Платов. Ваше высочество, Башҡорт полкы командирының шәхси батырлығы арҡаһында Смоленск күпере аша имен сығып өлгөрҙөк һәм күперҙе илбаҫарҙың табаны аҫтында шартлаттыҡ.

Александр *(ҡыҙыл таҫмалы орденды Ҡаһармандың муйынына кейҙертеп).* Ҡаһарманлыҡ билдәһе итеп һеҙгә -- өсөнсө дәрәжә Изге Анна ордены. Ҡотлайым!

Ҡаһарман. Ватанға хеҙмәт итәм!

Александр. Атайығыҙ Буранғол Ҡыуатов ҡылысы менән империяға яҡшы хеҙмәт иткәйне. Ырымбур генерал-губернаторы кенәз Волконский хәбәр итеүенсә, кантон башлығы сифатында ла һынатмай, Ватаныбыҙ мәнфәғәтенә тырышып эшләй. Башҡорт полктары төҙөп һуғышҡа оҙатҡаны һәм кантон менән идара итеүҙәге уңыштары өсөн беҙ уны өсөнсө дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнек, ә кантонға үҙебеҙҙең Император Байрағын тапшырҙыҡ.

Ҡаһарман. Ваше высочество, ул шанлы Александр Байрағы аҫтында бөтөн Башҡортостан халҡы изге Ватан һуғышына күтәрелә, фронтҡа оҙатырға икешәр атлы биш йөҙ яугирҙән торған яңы полктар төҙөй.

Александр. Башҡорт халҡы шундай нисә полк бирергә һәләтле?

Ҡаһарман. Утыҙлап полк булыр. Атайымдан хат килде: беҙҙең 9-сы кантон үҙе генә лә дүрт полк оҙатырға әҙер, тип яҙа.

Александр *(адъютантына).* Башҡорттарҙың үҙбашланғысын хупларға һәм ошо хаҡта Волконскийға – бойороҡ, кантон башлығы Ҡыуатовға шәхси мәктүб күндерергә. *(Чернышев дәфтәргә теркәй).*

Платов. Ваше высочество, ғәскәрҙә аттар кәмене... ә башҡорт аттары – иң түҙемле, шәп аттар...

Ҡаһарман. Ваше высочество, рөхсәт итһәгеҙ, үҙем ҡайтып әйләнер инем, был эштәрҙе тиҙләтергә.

Александр. Рөхсәт. Атайығыҙға сәләм!

Ҡаһарман. Есть, Ваше высочество!

Кутузов. Һәй любезные мои, маладис башҡорттарым!

Башҡорттар сығып китә, күп тә үтмәй, ат тояҡтары тыпырлауына ҡушылып ҡурай тауышы, күмәк йыр («*Любезники, любизар*») яңғырай, генералдар баҫып тороп тыңлай:

Беҙ һуғышҡа ингәндә,
Бәхилләштек барыбыҙ.
Беҙ һуғыштан сыҡҡанда,
Алдан сыҡты данырыҙ.
  *Любезники, любизар,*
  Маладис, маладис.
Французлар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен.
Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,
Таба алмайҙар эҙҙәрен.
  *Любезники, любизар,*
  Маладис, маладис...

## Икенсе сәхнә

Буранғол кантондың йәмле Һаҡмар буйындағы йәйләүе, аҫыл биҙәкле ҡуштирмә алды; тирмә йөҙлөгөнә, бөтә киңлегендә киреп, Александр Император Байрағы беркетелгән; тирмә алдында түшәлгән аҡ кейеҙҙә ҡымыҙ табыны, аяҡ салып Буранғол, Боҫҡон аҡһаҡал ултырған; Буранғолдоң йәш ҡатыны Юлдашбикә, килеп-китеп, табын хәстәрләп йөрөй; табынға ҡаршы төпкө планда тирә-яҡ кантон башлыҡтарының, муллаларының йыйылыуы һиҙелә-ишетелә; Ырымбур хәрби гөбөрнәтере кенәз Волконскийҙың килеп етеүен көтәләр.

Боҫҡон. Оҙаҡланы. Гөбөрнәтерҙе әйтәм.

Буранғол. Оҙон юл бит. Ҡаһарманым ҡаршы алырға ките.

Боҫҡон. Буласаҡ кейәүебеҙгә лә тынғы юҡ: әле генә һуғыштан ҡайтып төштөм, тимәй, кантондар буйлап саба ла саба, хата буласаҡ кәләшен барып күрергә лә форсат тапмай. Ахыры бына ейәнсәрем Зөләйхәне үҙем етәкләп килтерҙем, йола хупламаһа ла.

Буранғол. Ҡаһылай итәһең, мөһим дәүләт эше менән йөрөй бит. Ә йоланың ҡануны үҙебеҙҙең ҡулда – килтереп яҡшы иткәнһең. Йә, буласаҡ ҡоҙа, һаумал ҡымыҙҙан рәхим ит.

Боҫкон (туҫтаҡтан һемереп). Һәй ҡымыҙы ла ҡымыҙы, гөбөрнәтерҙең генә түгел, батшаның телен йотторторлоҡ! Зөләйхәмдең тулыр-тулмаҫ ике йәшендә Ҡаһарманыңдан ҡолағын тешләттерткәйнек, кәләшең булыр, тип инселәп ҡуйғайныҡ. Бына буйға ла етте.

Буранғол. Буласаҡ киленгә, тим, нисә йәш инде хәҙер?

Боҫҡон. Ун алтыһы менән ките, туйлар ваҡыты етте. Күргәнһеңдер.

Буранғол. Ҡыҙҙар тирмәһендә йәшереп тоталар, Ҡаһарманың күрһен иң элек, тиҙәр.

Юлдашбикә. Гөлсәскәләй һылыу ҡыҙ, Зөләйхәбеҙҙе әйтәм. Әллә ҡасан уҡ өйләнмәй, әфисәр булып йөрөп ҡартая инде...

Буранғол. Йәш бисәкәймен, тигәс тә, тәртәнән сығып барма әле, һин тапҡан бала түгел. Әсәһенең ризалығы менән йөрөй. Илде баҫҡан ҡара яуҙы ҡайтармай тороп, егет кеше ҡылысын ҡынға тығырмы?!

Боҫҡон. Уныһы шулай...

Юлдашбикә. Шул ҡарт ҡатыныңдың һүҙе генә һүҙ...

Буранғол. Уның ҡарауы һин генә ҡуйынымда. Үҙем менән һуғышҡа ла алып китермен әле.

Боҫҡон. Бәй, ошо йәшеңдә һуғышҡа елкенәһең...

Юлдашбикә. Онотма, бер иле лә ҡалмайым!

Буранғол. Әйттем бит инде! *(Ат тояҡтары тыпырлай).*

Юлдашбикә. Әнә, ҡайтып та төштө, ғүмере оҙон булғыры.

Ҡаһарман керә, табындағылар тора.

Ҡаһарман. Әссәләмәғәләйкүм, ил ағалары! *(Күшҡуллап Боҫҡон менән күрешә).* Һаумы, буласаҡ ҡайным!

Боҫҡон. Вәғәләйкүмәссәләм, буласаҡ кейәү-балаҡай! Онотмағанһың икән.

Ҡаһарман. Онотоу ҡайҙа инде ул: ҡайтыуым менән ҡолаҡҡа атай туҡыны.

Боҫҡон. Әфисәр булдым, тигәс тә, үҙ башың, йөрәгең юҡмы әллә, атаңа һылтанмаһаң!

Юлдашбикә. Сер итеп кенә әйтәйем, Ҡаһарманыбыҙ, ҡайтып төшкән көнөндә үк, кәләшем Зөләйхә ни хәлдә, тип һораны минән.

Боҫҡон. Бәрәкалла, бәрәкалла.

Ҡаһарман. Губернатор килеп етте. Күрше йәйләүҙә ҡалдылар.

Буранғол. Бисәкәй, аш-һыуыңды әҙерлә!

Юлдашбикә. Әҙер, әҙер! *(Йүгереп сығып китә).*

Боҫҡон. Ул килеп төшкәнсе, йоланы яңыртайыҡ. Егет менән ҡыҙ күрешһен.

Буранғол. Бисәкәй!

Юлдашбикә. Хәҙер, хәҙер!

Оялып битен ҡаплarға тырышҡан Зөләйхәне етәкләп килтерә лә уның ҡулын Ҡаһарманға тотторта.

Юлдашбикә. Ас йөҙөңдө.

Зөләйхә. Эй, оялам...

Ҡаһарман. Ух, ҡайһындай ҙа һылыуланып үҫеп еткән кәләшем!

Боҫҡон. Буйға ғына түгел, аң-белемгә лә ныҡ үҫте ейәнсәрем. Ырымбурҙа кенәз Волконский астыртҡан хәрби табиптар мәктәбендә уңышлы уҡып ҡайтты.

Ҡаһарман. Оһо! Беҙҙең полка тап шундай лекарҙар кәрәк.

Зөләйхә. Барам, барам! Үҙең менән алып кит!

Ҡаһарман. Онотманыңмы?

Зөләйхә. Онотоу ҡайҙа инде, һағынып-һарғайып көттөм.

Боҫҡон. Балаҡайҙар, йәшерен-батырын түгел, йола яңыртыр ваҡыт.

Ҡаһарман, Зөләйхә *(икеһе бер юлы).* Ә?!

Буранғол. Бәләкәй сағындағылай, кәләшеңдең ҡолағын тешләп нығыт.

Зөләйхә. Эй, оялам... *(Ә шулай ҙа Ҡаһарманга ҡолагын яҡынлата).*

Ҡаһарман. Зөләйхәм! *(Ҡолагын тешләгән булла ла ҡыҙҙы ҡосаҡлап үбә, Зөләйхә уның муйынына һарыла).*

Күмәге. Бәрәкалла, бәрәкалла, изге йола яңырҙы!

Зөләйхә. Мине ҡалдырма, ҡалдырма! Үҙең менән алып кит!

Ҡаһарман. Эй Зөләйхәм, Зөләйхәм, ҡанлы яуға китәм бит...

Зөләйхә. Ҡаның аҡһа, туҡтатырмын, йоҡоң ҡасһа, йоҡлатырмын – яуҙа тоғро юлдашың, йәнуҙағың булырмын...

Ҡаһарман. Сабыр ит, мине көт...

Тирмә артынан һөрән: -- Гөбөрнәтер ылауы килеп етте! Ҡаһарман ашығып йүгерә, Зөләйхәне Юлдашбикә етәкләп алып китә. Волконский, Ладыгин, Ҡаһарман инә, ҡунаҡтарҙы аяғөҫтө тороп, ҡушҡуллап ҡаршылайҙар.

Ҡаһарман. Атай, ҡунаҡтарҙың күңелен күрә тороғоҙ, мин йыйынды барлайым *(китә).*

Буранғол. Хуш килдегеҙ, кенәз әфәнде, хуш килдегеҙ, атаман. *(Күмәк шау-шоулы сәхнә төбөнә ишарап).* Майҙанда тирә-яҡ аҫыдары йыйылды, Ватан һуғышы тураһында вәғәзегеҙҙе көтәләр. Ә тәүбашта юлаяғы һыйҙан рәхим итегеҙ. *(Аяҡсы ҡымыҙ ҡоя, тулы туҫтаҡтарҙы тотторта).*

Волконский *(һемереп).* Һәй был үҫәргән ҡымыҙы! Генералиссимус Суворов менән бергә төрөк һуғышында ярылған башымдың зыңҡыуын ошо ҡымыҙ бөтөрҙө. Әйткәндәй, мине төрөк ҡылысынан туратмаған Ладыгин әфәнде була был, һеҙҙең Эйек йылға тамағындағы Воздвиженск крепосы атаманы.

Табындағылар: -- Беләбеҙ, беләбеҙ.

Волконский. Һәм мин уға әйттем: минән үрнәк ал, казак, башҡорт ерендә башҡортса һөйләшергә өйрән, тинем. Шулаймы?

Ладыгин *(туҫтаҡ түңкәрә эсеп).* Ух! Шулай. Йылға аша йәшәһәк тә, башҡорт белештәрем күп. Мәҫәлән, бынауы природный кенәз Боҫҡон Дуянов уҙаман.

Волконский *(бармаҡ янап).* Белеш, белеш, тигән булып, башҡорт ерҙәренән казактарың өлөш тамшана икән, тип ишеттем, быныһы ла шулаймы?

Боҫҡон. Шулай, шулай...

Ладыгин. Шулайын шулай ҙа... сабынлыҡтар етмәй...

Волконский. Арендаға алып сабырға кәрәк. Һуғыш бөткәс, яҡшылап уйлашырбыҙ.

Буранғол. Кешеләр йыйылып бөткән, башларға ваҡыт.

Волконский. С Богом, башлайыҡ.

Буранғол *(Император Байрағы алдына баҫып).* Йәмәғәт, Император Александр ғали йәнәптәре беҙҙе ҙурлап тапшырған ошо Байраҡ алдында яҡты йөҙөбөҙ, пак күңелебеҙ менән баҫып торабыҙ. Императорҙың үҙ ҡулы менән беҙгә һәм ғөмүмән башҡорт халҡына яҙған хитапнамәһен дә беләһегеҙ. Бисмилланы нисәмә ҡабатлаһаң да иҫкермәй, тигән кеүек, хәҙер шуны Императорҙың үҙ телендә капитан Ҡаһарман Буранғолов уҡып ишеттерер.

Ҡаһарман *(уҡый).* «Божией милостью, Мы, Александр Первый, Император и Самодержец Всероссийский и прочие, прочие, прочие... Нашему Девятому Башкирскому кантону. В воздание верности вашей и усердие к Нам оказанное, жалуем вам... Наше Императорское Знамя, повелевая употребить оное на службу Нам и Отечеству с храбростью и ревностью единому Российскому войнству свойственным. Пребываем вам Императолрского Нашуго Милостию Благосклонны. Дана в Санкт-Петербурге, Мая 31 дня 1805 года. Александр».

Буранғол. Йәмәғәт, бына тора ҡаршығыҙҙа, һеҙҙе тәбрикләп, ул Байраҡ! Йәшәһен Император!

Йыйын: -- Ур-рааа! Йәшәһен Император!

Ҡаһарман. Һәм бына Император ғали йәнәптәренең үҙ ҡулы менән яҙған икенсе хаты: «Господин поручик Бурангул Куватов. В воздоянии отличной храбрости, оказанной вами в сражениях 4 и 6 июня противу французских войск,

где вы, нанося удары неприятелю, поступили храбро, ободряя примером своих подчиненных, жалую вас кавалером ордена Святой Анны третьего класса, коего знак, к вам доставляя, повелеваю возложить на себя и носить по установлению, уверен будучи, что он послужить вам поощрением к вящему продолжению усердной службы вашей. Пребываю вам благосклонный Александр. Санкт-Петербург 1 май 1808 год».

Буранғол. Орденды ла, бер миңә генә түгел, ә бөтөн башҡорт халҡына тип һанайыҡ. Һәм мин, Императорҙың беҙгә ышанысын аҡлап, был һуғышҡа ла атлы полкым башында китәсәкмен!

Йыйын: -- Афарин, ил ағаһы, афарин!

Ҡаһарман. Йәмәғәт, ағай-эне! Яуыз француз ғәскәрҙәре Ватаныбыҙ сиктәренбоҙҙо, дәһшәтле Ватан һуғышы башланды. Үҙем китәм бөтөн ил менән яуға!

Йыйын: -- Яуға! Яуға!

Ҡаһарман. Оло башын кесе итеп, генерал-губернаторыбыҙ кенәз Сергей Георгиевич килеп етте, уның вәғәзен тыңлайыҡ.

Волконский. Ҡәҙерле башҡорттарым, Рәсәйҙең яҙмышын хәл иткәндә һеҙ тынып ятманығыҙ – Ватан өсөн бөтә һуғыштарҙа ла ҡатнаштығыҙ, атлы полктарығыҙ менән ташҡындай ташландығыҙ. Был юлы ла яугир башҡорт атына дәррәү атланыр, ҡулына ҡорал алыр, Император Байрағы аҫтында изге походҡа сығыр, тип ышанабыҙ – Император ышана, Ватаныбыҙ ышана. Шул ышанысты аҡларбыҙ!

Йыйын: -- Аҡларбыҙ! Аҡларбыҙ!

-- Полктарға доброволь яҙылабыҙ!

Ладыгин. Юлға сыҡҡан һәр полк Воздвиженск крепосы аша үтә, Ырымбурҙан килгән махсус комиссия тикшереп, юл картаһы бирә.

Буранғол. Быйыл яман ҡоролоҡ килеүгә ҡарамай, берҙәм күтәреләйек. Өҫтәлмә рәүешендә дәүләт ҡаҙнаһына алтын-көмөшләтә иғәнә, Рәсәй армияһына яҡшы менге аттар йыйып бирәйек.

Йыйын: -- Бирәйек!

Буранғол. Рәхмәт, йәмәғәт! Император Александр ғали йәнәптәренең изге башланғысына Хоҙайҙан ярлыҡау һорап, бер тыу бейә менән тананы ҡорбанға салдыҡ, йәмле Һаҡмар буйында тирмәләр ҡороп, ҡаҙандар аҫтыҡ – ҡунаҡтар һәм бөтөн йыйын ҡорбан ашына рәхим итегеҙ, ҡуҙғалыштыҡ!

Йүнәлешә башлайҙар.

Буранғол. Йәнтүрә кейәү, Ғәзимәң ҡайҙа?

Йәнтүрә. Ҡаҙан тирәһендә аш яраштыра, ҡайным.

Буранғол. Ярай, оло ҡунаҡтарҙы табынға оҙата тор.

Йәнтүрә. Йә, ҡайным (китә).

Ҡаһарман. Атай, ашығам, ашҡа ҡала алмайым. Беләһең, кисекмәҫтән полкыма ҡайтып етергә. Хоҙайҙан именлек теләп, ошонда хушлашайыҡ. Эйәрләнгән арғымағым тыбырсынып көтөп тора.

Буранғол. Балам, яу ҡырҙары аяуһыҙ, иҫән-аман йөрөй күр.

Юлдашбикә, Зөләйхә килә.

Юлдашбикә. Аллаһы Тәғәлә ризығыңды өҙмәһен, Рәсәй дошмандарын еңеп, иҫән-һау әйләнеп ҡайт, батырым.

Зөләйхә *(илап).* Китмә, китмә!..

Ҡаһарман *(ҡыҙҙы ҡосаҡлап).* Мәңгелеккә китмәйем, кейек ҡоштар кеүек осоп ҡайтырмын, йәнкәйем!

Зөләйхә. Мине үҙеңдән ҡалдырма!..

Буранғол. Әфисәр кәләшеһең, тотҡарлама яугирҙе.

Зөләйхә. Аһ!..

Ҡаһарман. Көт, йәнекәйем, көт – таш яуһа ла осоп ҡайтырмын! *(Ашығыс китә).*

Буранғол *(улының артынан әйәрә биреп).* Полкым менән үҙем барып етермен, теге йылдарҙағылай, Наполеон Бонапартты бергәләп дөмбәҫләрбеҙ!

Юлдашбикә. Үҙем дә үҙем, тиһең – мине уйламайһың!

Буранғол. Нығ уйлайым, бисәкәй, аттар ҡушарлатып, икәүләшеп китербеҙ!

Зөлхизә. Мин дә һеҙҙең менән китәм, Ҡаһарманымды барып тапмайынса ҡуймайым!

**ШАРШАУ**

**ИКЕНСЕ ШАРШАУ**

## Өсөнсө сәхнә

Бородино һуғышы бара. Кутузов ғәскәрҙәренең позициялары һул флангыла Шевардино редутынан башлап уңға табан Ҡыҙыл убалағы Раевский батареяһы (үҙәктә Бородино ҡасабаһы) аша Маслово ауылынаса уң флангыға ҡарай һуҙылған. Уң флангыла резервҡа ҡуйылған Платов казак корпусындағы 1-се Башҡорт атлы полкы корпустың һул флангыһында – Раевский батареяһы тәңгәлендәге урман ышығында тороп һағалай. Урман ситендәге ҡалҡыулыҡта Ҡаһарман (подзор торбаһынан), Йәнтүрә аҡландағы дошман хәрәкәтен күҙәтә. Пушкалар гөрөлтөһө.

Ҡаһарман. Раевский батареяһы йән аямай һуғыша. Ике яҡ йөҙгә-йөҙ төкәлеште *(түҙемһеҙләнеп йөрөй).*

Йәнтүрә. Нимә көтәбеҙ һуң? Ҡылыстарҙы ҡындан һурырға ваҡыт! Егеттәребеҙ ярһый, аттарыбыҙ ер тырнай.

Ҡаһарман. Ашыҡҡан – ашҡа бешкән, бында ни өсөн ҡуйылыуыбыҙҙы онотма. Бына-бына беҙгә лә сәғәте һуғыр.

Платов инә.

Платов. Капитан, полк әҙерме?

Ҡаһарман. Беҙ һәр саҡ әҙер, ваша светлость. Тик сафтар һирәгәйҙе, беләһегеҙ.

Платов. Беләм. Әле генә илегеҙҙән өҫтәлмә көс килеп етте, бер сотняһын һеҙгә бирәм. Көсәйеп кәрәрһегеҙ.

Йәнтүрә. Ауыҙығыҙға бал да май, господин генерал!

Ҡаһарман. Рәхмәт.

Платов. Батареяны күрәһегеҙме?

Ҡаһарман. Күрәм, туптары ҡаты ата.

Платов. Наполеон, моғайын, фронтты шунда өҙөп, беҙҙең тылға сығырға, уратып алып юҡ итергә самалай.

Ҡаһарман. Шуға оҡшай.

Платов. Приказ үҙ көсөндә ҡала. Раевскийҙың хәлдәре мөшкөлләнһә, ҡылыс айҡап дошман флангыһына ташланығыҙ, паника тыуҙырығыҙ!

Ҡаһарман. Есть!

Платов китә.

Ҡаһарман. Төшөндөңмө?

Йәнтүрә. Иншалла, өҫтәлмә көс киләсәк.

Ҡаһарман. Бар, ҡаршыла.

Йәнтүрә ашығыс китә. Кутузов менән Беннигсен инә, Ҡаһарман, подзор торбаһына өңөлөп, абайламайыраҡ ҡала.

Кутузов. Капитан, нимә күренә унда?

Ҡаһарман. Ваша светлость, ғәфү итегеҙ, абайламай ҡалғанмын...

Кутузов. Наполеонды абайланығыҙмы һуң?

Ҡаһарман. Уны беҙҙең ҡылыстар абайлаясаҡ, ваша светлость.

Кутузов. Һәй маладис, ҡәҙерле башҡорттарым! *(Ҡаһармандың подзор торбаһын алып, һуғыш ҡырын күҙәтә. Беннигсенга).* Бонапарт үҙенең яратҡан алымын ҡабатлай.

Беннигсен. Ә был ҡәҙерлеләребеҙ ниңә себен һимертә?

Ҡаһарман. Платов приказы буйынса, хәл иткес мәлдә ябырылырға торабыҙ.

Кутузов *(подзор торбаһын эйәһенә ҡайтарып)*. Командирҙың приказын үтәгеҙ.

Ҡаһарман. Есть! Рөхсәт итегеҙ китергә?

Кутузов. Рөхсәт. *(Ҡаһарман китә).*

Беннигсен. Михаил Илларионович, ғәфү итегеҙ... ниңә был ярымҡырағай халыҡты «ҡәҙерлеләрем» тип осондортаһығыҙ?

Кутузов. Сөнки улар ысынлап та минең ҡәҙерлеләрем.

Беннигсен. Ә?!.

Кутузов *(һыңар күҙен ҡаплаған бәйгә төртөп).* Быны күрәһегеҙме? Төрөк йәҙрәләре яуған һуғыш ҡырынан мине башҡорт күтәреп алып сыҡты... һеҙ атаған «ярымҡырағай»... Туғаным кеүек улар.

Беннигсен. Хоҙай һаҡлаһын, православныйға мосолман нисек туған булһын?!

Кутузов. Һеҙ быны, моғайын, ҡанығыҙ аҡкас ҡына белерһегеҙ, аңларһығыҙ.

Китәләр. Ҡаһарман инә.

Ҡаһарман. Дәһшәтле мәл, беҙгә лә сәғәт һуҡты, буғай... Өҫтәлмә көс килеп етмәй...

Йәнтүрә йүгереп инә.

Йәнтүрә. Командир, Раевский батареяһы тәңгәленән Өфө йәйәүлеләр батальоны һәм ырымбур казак полкы егеттәре беҙҙән ярҙам ялбара, хатҡа яҡшы таныштарым -- батальондағы башҡорт типтәрҙәре Бакиров Ислам, Солтанов Тимерйән, Әхмәтов Арыҫлан, Сөләйманов Әхтәм, Нуриев Салауат ҡул ҡуйған, ә Ырымбур полкынан – үҙебеҙгә яҡшы билдәле казак атаманы Ладыгин...

Ҡаһарман. Яҡшы. Өҫтәлмә көстө беҙҙең арттан үҙең яуға алып кер!

Йәнтүрә. Есть, командир!

Ҡаһарман. Егеттәр, аттарға атланырға! *(Йүгереп сығып китә).* Ҡылыстарҙы һурырға! Марш-марш, минең арттан!

Йәнтүрә. Киттеләр...

Тояҡ тупылдауҙары. Зөләйхә, йүгереп инеп, Йәнтүрәне ҡосаҡлай; кейем тышынан ҡыҙыл ярымайлы аҡ күкрәксә бәйләгән.

Зөләйхә. Йәнтүрәкәй ағайым, ағайым!..

Йәнтүрә. Бәй, һылыуым, Айҙан төштөңмө әллә?! Һинме был, Зөләйхә һылыуым?

Зөләйхә. Мин, мин! Эскадронға яҙылып килеп еттем. Эскадрон әнә тора.

Йәнтүрә. Күкрәксәңдә үҙебеҙҙең ярымай... Был ниндәй яңы хикмәт?

Зөләйхә. Ошо мосолман башым менән нисек итеп ҡыҙыл тәре тағайым, ярымайҙы үҙем әтмәләп алдым. Яраларығыҙҙы бәйләрмен, ауырыуҙарығыҙҙы имләрмен. *(Ҡаранып).* Ә Ҡаһарманым ҡайҙа?

Йәнтүрә. Ҡаһарманың ҡаһарманлыҡ ҡырында! Эскадрон, аттарға атланырға, ҡылыстарҙы һурырға! Ҡаһарманыңды ут эсендә табырһың!

Китәләр. Кутузов, Платов керә.

Кутузов. Казактарың француздың арт һабағын яҡшы уҡытты, шул арҡала дошман артҡа сигенде, рәхмәт.

Платов. Раевский батареяһы тәңгәлендә ҙур юғалтыуҙар кисерҙек, ике яҡтың да мәйеттәре өҫтө-өҫтөнә өйөлдө. Яралыларҙы йыйнайбыҙ.

Кутузов. Беннигсен да шунда ине, йәрәхәтләнгән, тинеләр...

Платов. Йәҙрә ярсығы беләк тамырын киҫкән... Ярай, башҡорт шәфҡәт туташы ҡанын туҡтатып өлгөрҙө, юғиһә китә ине...

Кутузов *(суҡынып).* Слава Богу, бәхетле йондоҙ аҫтында тыуған икән.

Платов. Яралылар araһында капитан Ҡаһарман Буранғолов та бар, тиҙәр. Әнә, алып киләләр.

Яралылар һалынған йәнәшә ике носилка араһында Зөләйхә, алмаш-тилмәш, Беннигсенды һәм Ҡаһарманды хәстәрләй. Ҡаһарман ятҡан носилканың бер башын Ладыгин тотҡан.

Платов *(яралыны барлап).* Капитан Буранғолов... Казак, йөктө ниңә рядовойға бирмәнең?

Ладыгин. Туғанымдай ҡәҙерле яҡташым бит. Ошо туғанымдың полкы беҙҙе тамам ҡырылыуҙан ҡотҡарҙы.

Зөләйхә. Носилкаларҙы ипләп кенә ҡуйығыҙ *(ҡуялар),* лазарет арбаһын көтәйек.

Кутузов *(Ҡаһарманга эйелеп).* Геройҙың хәле нисек?

Зөләйхә. Яраһы ҡурҡыныслы түгел – йәҙрә ярсығы маңлайын шаңҡытып үткән, әле генә иҫенә килә алмай.

Кутузов *(Беннигсен эргәһенә килеп).* Һеҙҙең хәлде Платовтан ишетеп белдем. Слава Богу, һине юғалтыу ҡайғыһын кисермәнек... фәрештәгеҙ һаҡлаған.

Беннигсен. Ғәфү итегеҙ, әлегә хәлем юҡ... әнә тора ул фәрештәм, ҡыҙыл ярымай алиһәһе.

Кутузов. Әммә туғаным түгел, тип әйтмәксеһегеҙ?

Беннигсен. Туғаным, туғаным!..

Кутузов. То-то оно. Тиҙерәк төҙәл, штабной.

Беннигсен. Һум иттән генә үткән, бөгөндән үк аяҡҡа баҫасаҡмын! Артыбыҙҙа Мәскәү!

Кутузов. Артыбыҙҙа Мәскәү...

Ҡаһарман *(иҫенә килеп, ыңғырашып).* Мин ҡайҙа, ни булды?

Зөһрә. Һөйөклөм, Ҡаһарманым, һин саҡ ҡына яраландың... тыныслан, гел эргәңдә булырмын, үҙем һауыҡтырырмын *(үбә).*

Ҡаһарман. Өнөммө, төшөммө? Әллә һаташаммы? Зөләйхәм, ысынлап та һинме был?

Зөләйхә. Мин, мин!

Ҡаһарман. Һөйөклөм... *(Иҫен юя).*

Платов. Яралыларҙы лазарет арбаһына!

Беннигсен. Капитан менән икебеҙҙе бер палатаға һалырға, ярымайлы шәфҡәт туташы янышыҙҙан китмәһен!

Кутузов. Булһын шулай. *(Носилкаларҙы илтәләр).*

## Дүртенсе сәхнә

Мәскәү янындағы Фили ауылының бер йортонда хәрби кәңәшмә, Рәсәй армияһы генералдары йыйылған: Кутузов, Барклай, Беннигсен (яралы ҡулы бәйле – муйынына эленгән) һәм башҡалар.

Кутузов. Генерал әфәнделәр, Бородино ҡырында күрһәткән батырлыҡтарығыҙ менән барығыҙҙы ла ҡотлайым. Дәһшәтле бәрелештә донъяның иң көслө ике армияһы йөҙгә-йөҙ килде, икеһе лә, ҡыйралмайынса, яңы һуғыштарға һәләтле ҡалды. Бына генерал Беннигсен яралы хәлдә китлеп еткән... Хәҙерен, генерал Беннигсен әйтмешләй, артыбыҙҙа Мәскәү тәрәлеп тора. Икенең бере: Беннигсен әфәнде тәҡдименсә, иртәгә үк хәл иткес һуғышырғамы, әллә, Мәскәүҙе артта ҡалдырып, артабан сигенергәме? 1-се Көнбайыш армия сардары Барклай де Толлиға һүҙ бирелә.

Барклай. Генерал Беннигсен тәҡдим иткән позицияны ҡарап сыҡтым, ләкин ул беҙҙең өсөн – һәләкәтле, Наполеон өсөн табышлы булыр ине, тип һанайым. Әле генә ҡанһыраған армиябыҙҙы күрәләтә һәләк итеү булыр ине. Мәскәүҙе юғалтыу – Рәсәйҙе юғалтыу түгел.

Беннигсен. Шуның өсөнмө Бородино ҡырында ҡырҡ биш мең геройыбыҙҙы, шул иҫәптән егерме өс генералыбывҙҙы ҡорбан ҡылдыҡ?! Мәскәүҙе дошманға ҡалдырыу – шул данлы батырҙарыбыҙ рухына хыянат итеү булыр ине. Ошо урында уҡ ҡабат позициялар биләргә, хәл иткес бәрелешергә! *(Күмәкселек Беннигсенды тотанаҡлап шаулай).*

Кутузов *(тороп).* Бөтөнөбөҙ ҙә Ватан патриоттары – һеҙҙе яҡшы аңлайым. Ләкин мин асы хаҡлыҡ яҡлы: Мәскәүҙе юғалтыу – Рәсәйҙе юғалтыу түгел, ә армияны юғалтһаҡ, Рәсәй юғаласаҡ.

Өс-дүрт кеше генә Кутузовты тотанаҡлай.

Беннигсен. Михаил Илларионович, күпселек минең яҡлы. Һеҙҙең ҡарар күпселеккә таянырға тейеш.

Күмәкселек: -- Дөрөҫ! Мәскәү ҡапҡаһы алдында һуғышып хәл ҡылынһын!

Кутузов икеләнеп торған арала, Ростопчин атлығып керә.

Ростопчин. Әфәнделәр, Михаил Илларионович, ашығыс депеша! Санкт-Петербургтан – Император Александр беренсе ғали йәнәптәренән.

Кутузов. Күктән төшкәндәй булды *(конверты асып уҡый).* «Секретно, кенәз Кутузовҡа Ростопчин әфәнде тапшыра. Бородино ҡырында хәл ителмәһә, Мәскәүҙе ҡалдырып сигенергә, ләкин армияны һаҡлап ҡалырға. Александр». *(Тынлыҡ).* Бына шулай. Тәртипле рәүештә Тарутино йүнәлешендә сигенергә! *(Генералдар ҡуҙғалыша).*

## Бишенсе сәхнә

Кутузов штабы урынлашҡан Тарутино янындағы аҡланда башҡорт полктары смотрға теҙелгән; алғы буйҙа командирҙар Ҡаһарман, Йәнтүрә, Ғәзимә, Зөләйхә һәм яңы килгән атлы полк командиры Буранғол Ҡыуатов, уның ярҙамсыһы поход старшинаһы Мәхмүт Бикинәков, сотник Юлдашбикә; полк теҙмәләре артҡы планда тора.

Платов. Смирррно! Вольно! Башҡорт казактары, тыңлағыҙ! Император ғали йәнәптәре ғәскәрҙәрен ҡарарға сыҡты, хәҙер килеп етәсәк. Борғосо!

Борғо уйналып тына, Император Александр һәм уның адъютанты Чернышев, Кутузов беренсе теҙмә тәңгәлендә туҡтала.

Платов. Смирррно! Ваше высочество, Беренсе Башҡорт полкы.

Александр. Һаумыһығыҙ, башҡорттар!

Полк: -- Һау! Һау! Һау!

Платов. Капитан Ҡаһарман Буранғолов, өс аҙым алға! *(Ҡаһарман алга сыгып баҫа).*

Ҡаһарман. Капитан Буранғолов.

Александр. Капитан Буранғолов! Мәскәү ҡалаһынан Наполеонды ҡыуалағанда сая батырлыҡ күрһәттегеҙ, Мәскәү Кремлен шартлатыуҙан һаҡлап ҡалдырҙығыҙ. Полктың бөтә яугирҙәренә, айырыуса үҙегеҙгә рәхмәтемде белдерәм. *(Батырҙың ҡулын ҡыҫып).* Ватан һеҙҙе онотмаҫ!

Ҡаһарман. Ватанға хеҙмәт итәм!

Полк: -- Ур-ра! Ур-ра! Ур-ра!

Платов. Теҙмәгә ҡайтырға! *(Ҡаһарман урынына ҡайта).* Шәфҡәт туташы Зөләйхә Боҫҡонова, өс аҙым алға! *(Зөләйхә сыга).*

Александр. Бородино ҡырындағы һуғышта яраланған Рәсәй яугирҙәрен әжәлдән арсалап ҡалыуҙа күрһәткән батырлығығыҙ өсөн һеҙҙе мосолманса ярымай билдәле Шәфҡәтлелек миҙалы менән бүләкләйем *(ҡыҙҙың күкрәгенә беркетә)* һәм һеҙҙе данлы Рәсәй армияһының корнеты дәрәжәһенә күтәрәм.

Зөләйхә. Ватанға хеҙмәт итәм!

Платов. Корнет, теҙмәгә ҡайтығыҙ! *(Үтәлә).*

Сәхнә түңәрәге әкрен әйләнеп, икенсе полк теҙемдәрен алға килтерә.

Платов. Смирррно! Ваше высочество, фронтҡа яңы ғына килгән Башҡорт полкы

Александр. Вольно! Һаумыһығыҙ, башҡорттар!

Полк: -- Һау! Һау! Һау!

Александр *(Бурангол менән ҡушҡуллап күрешә).* Ҡарт гвардия ятып тынмай, иҫән-һау килеп еттегеҙме майор?

Буранғол. Ваше высочество, Ватаныбыҙ саҡырғас, бөркөттәрем менән ҡыйғырлап осоп килеп еттем, яңғыҙыбыҙ ғына түгел – артыбыҙҙан тиҫтәләрсә яңы полктар ағыла.

Александр. Һәй рәхмәт төшкөрҙәре!

Кутузов. Башҡорттарым маладис -- иле менән ҡубынды.

Буранғол. Император ғали йәнәптәре, хисап бирергә рөхсәт итегеҙ. Ил төкөрһә, күл була, тигәндәй, тиҙ арала Рәсәйебеҙгә егерме һигеҙ полк төҙөп юлландырттыҡ, ҡаҙнаға биш йөҙ мең тәңкә иғәнә йыйып тапшырҙыҡ, армияға биш мең баш иң яҡшы менге аттары бүләк иттек. Иншалла, моҙғайҙарҙа дарыны ҡоро тотабыҙ!

Александр. Майор, мең һигеҙ йөҙ етенсе йылғы алышты хәтерләйһегеҙме?

Буранғол (ҡылысының ал таҫмалы эфесын ҡармап). Һис оноторлоҡ түгел. Ҡылысымдағы Изге Анна миҙалы аҙым һайын иҫкәртә.

Александр. Нейман йылғаһы уртаһындағы кәшмәктә Тильзит килешеүенә ҡул ҡуйғанда яугир бөркөттәрегеҙ менән яр башында теҙелешеп торҙоғоҙ. Наполеон Бонапарт һорай ҡуйҙы: «Былар ниндәй ҡырағайҙар?» -- тип. – «Һеҙгә ҡаршы яуға күтәрелгән төньяҡ амурҙарым улар. Ярай, Нейман кисмәнегеҙ – ҡылыстары йәшендәй ялтлар ине!» -- тип шаяртып яуапланым. Алдан күрә белгәнбеҙ.

Буранғол.Тарих мең һигеҙ йөҙ бишенсе йылдың утыҙ беренсе майында Мәрхәмәтле Ҡулығыҙ менән илебеҙгә тапшырған Император Александр Байрағын башҡорт халҡы кер ҡундыртмай ҡәҙерләп тота. Наполеонды ла ҡыуырбыҙ, Парижды ла алырбыҙ.

Александр. Парижда еүһеү парадында ер һелкетеп барырбыҙ.

Кутузов. Ышанам, башҡорт полктары Парижға алғы сафтарҙа керер.

Буранғол. Амин! (Доға ҡыла).

Александр. Алға, яңы еңеүҙәргә, башҡорттар!

Полктар: -- Ур-ра! Ур-ра! Ур-ра!

Борғо уйнала, сәхнә түңәрәге, шыуышып, күренеште юғалта. Башҡорттарҙың күмәк йыры («Кутузов») яңғырай:

Император, батыр ир Александр,
Уттар-һыуҙар кисте, ҡурҡманы.
Полководец, һәй, Кутузов менән
Наполеон яуҙарын шул туҡманы.
Икеһе лә батыр ир икән,
Һәй, баһадир ир икән.

**ШАРШАУ**

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

## Алтынсы сәхнә

Париж, Император Аленсандр I резиденцияһы урынлашҡан Елисей һарай ихатаһындағы флигелдә һарай ҡарауылы – башҡорт полктарынан һайландыҡ команданың башлыҡтары урынлашҡан: Буранғол, Ҡаһарман, Йәнтүрә һәм уларҙың яҡындары Юлдашбикә, Ғәзимә, Зөләйхә. Өҫтәл тирәләй иртәнге сәй табыны, йырлап торған еҙ самауырҙан Юлдашбикә сәй яһай.

Юлдагбикә. Эй ошо өҫтәлдәрен – һис күнегә алмайым. Үҙебеҙҙең йомшаҡ кейеҙҙә аяҡ бөкләп ултырмағас...

Ғәзимә. Ике йыл буйы бит инде... Хатта тансыларына өйрәндек, батша һарайҙарында кавалерҙар менән ҡушарлап бейенек...

Юлдашбикә. Әммә барыбер үҙеңдекенә етмәй.

Буранғол. Һин, бисәкәй, ҡайҙа икәнеңде онотма – Император ғали йәнәптәре һарайындаһың. Үҙенең бер флигеленән урын биреүенә ҡыуан. Әнә, үҙенең гвардияһы, беҙҙең кеүек үк һарай һағында торһа ла, квартал аша йөрөй.

Йәнтүрә. Эйе, кемдең арбаһына ултырһаң – шуның йырын йырлайһың. Үҙ йырыңды оноттортоуҙары ла ихтимал.

Буранғол (бармаҡ янап). Һин, уҙаман, сәсәнмен үҙем, тигәс тә, аҫтан семеткеләмә. Император ғали йәнәптәренә ҡылысың менән хеҙмәт иткәнеңдә тырпайлығыңды ҡуйып тор, юҡһа анауы Буранбай хәленә ҡалырһың, башың Себерҙә серер.

Ғәзимә. Шулай шул, телеңде тый, тип торам.

Йәнтүрә. Мин ни, былай ғына – һүҙ ыңғайында ғына.

Буранғол. Һүҙ ыңғайында ла ыңғай һөйлә, бигерәк тә Ватан һуғышы осоронда.

Йәнтүрә. Нимә тип әйтәйем һуң?..

Буранғол. Мәҫәлән, Мәскәүҙән Наполеондың күтенә тибеп ҡыуып ебәргәс, «Любизар»ҙы йырланыңмы – йырланың. Березники йылғаһы ярында илбаҫарҙы себендәй ҡырып һалғас, «Кутузов» тип данланыңмы – данланың. «Парижды ла алдыҡ беҙ» тип йырларға кәрәк инде.

Йәнтүрә. Хәҙер, түрә! (Ҡурайында көйөн уйнап ишеттерә лә йырға күсә). Һәәәй!

Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
Мәскәүҙәргә килеп ингәс,
Ул да үҙен һынаған.
    Һәй Буранғол, Ҡаһарман,
    Еңеүгә бирә фарман.

Французлар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен.

Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,
Таба алмайҙар эҙҙәрен.
Һәй Буранғол, Ҡаһарман
Еңеп бара йән-фарман.

Мәскәүҙә лә булдыҡ беҙ,
Парижды ла алдыҡ беҙ.
Французлдарҙы еңгәндә
Ер емертеп барҙыҡ беҙ.
Һәй Буранғол, Ҡаһарман
Илгә бирә дәрт-дарман.

Булдымы, түрә?

Буранғол. Һәй маладис, Кутузов үҙе әйтмешләй! Сәсәндең дә сәсәне икәнһең, ауыҙыңа бал да май! Усың да ҡысыҡкандыр – шуны баҫырға, мә, көмөш биш тәңкәлек, Александр көмөшө!

Ҡаһарман. Сағыу сәсәнебеҙгә минән – Наполеон алтын тәңкәһе!

Йәнтүрә. Юҡ-юҡ, кәрәкмәй. Йырым алтын-көмөштәргә торғоһоҙ.

Ғәзимә. Әстәғәфирулла тәүбә, күпме ошо иҙрәп туҙған хөлләң менән йөрөрһөң? Ал, тигәс, ал! Бирегеҙ үҙемә! (Тәңкәләрҙе күкрәксәһенә йәшерә).

Буранғол. Эйе, йырың алтын-көмөштән юғарыраҡ. Иртәгә үк полктарға таралһын!

Ҡаһарман. Сәсәнебеҙ яңылышмай.

Буранғол. Аллаһыға шөкөр, Парижға алдан дөрөп керҙек, Император парадында ҡатнаштыҡ. Мең һигеҙ йөҙ бишенсе, һигеҙенсе йылдарҙан башлап Александр Байрағы аҫтында башҡорт исеменә тап төшөрмәнек. Шуның хаҡында был йыр.

Зөләйхә. Отоп та алдым инде, лазаретта ятҡандарға еҙ ҡурайға ҡушылып ишеттерермен.

Ғәзимә. Еҙ ҡурай?

Зөләйхә. Бындағы һыу буйҙарында ла, тап беҙҙең Таштуғайҙағылай, «еҙ» тигән ҡамыш үҫә имеш. Ҡурайсыларыбыҙ шунан еҙ ҡурай яһап тарта, французлдарҙы аптырата.

Ҡаһарман. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ һырып ала.

Ғәзимә. Беҙҙең ир-егеттәр тарта уларҙы. Ҡатын-ҡыҙҙары аҙғын – биҙәнеп-төҙәнеп, урам тулып хихайлап йөрөйҙәр, осраған ир-атты күҙ ҡыҫып ымһындырталар...

Ҡаһарман. Аҙғынлыҡ түгел, бәлә был. Оло һуғыштан һуң була торған хәл. Ир заты ҡырылып бөтә яҙған, ҡатындары – тол, ҡыҙҙары егетһеҙ ҡалған.

Юлдашбикә. Шул бәлә беҙгә лә килмәһә ярар ине.

Зөһрә. Мадемуазелдәре бигерәк тә беҙҙекеләрҙе ҡороҡларға маташа. Туғыҙ айҙан Парижда ла ҡараҡай башҡорт балалары йүгереп йөрөмәҫ, тимә...

Юлдашбикә. Тәүбә-тәүбә...

Йәнтүрә *(Зөләйхәгә).* Корнет, ҡара уны, французбикәләр аҙҙыртмаһын ғәскәрҙе!

Ҡаһарман *(көлөп).* Сәсән Йәнтүрә ағайыбыҙҙың муллалығы өҫкә сыҡты.

Зөләйхә. Юҡ, беҙҙең ир-егеттәр имандан таймаҫ – хәле бары биш намаҙын ҡалдырмай.

Ғәзимә. Ә шулай ҙа французлдарҙың йолаһы оҡшай миңә. Беҙҙәгеләй, ҡатын-ҡыҙҙы айырым өйгә, йәки шаршау артына йәшермәйҙәр.

Йәнтүрә. Һин! Нимә ләпелдәйһең?! Кафыр менән ҡуша ултырып харам суҫка ите лә ейер инеңме?!.

Ғәзимә. Тфү-тфү, уныһынан Аллам һаҡлаһын берүк!

Ҡаһарман. Суҫка ите, тигәндән, французлдарҙы яман ҡылыҡ тетрәтте: дон казагы менән бер ҡалмыҡ, француз йәһүтен ҡороҡлап, уны суҫка һуйырға мәжбүр ҡылғандар...

Йәнтүрә. Ҡот осорғос! Йәһүт динендә лә суҫка – харам мал.

Ҡаһарман. Ә ике урыҫ һалдаты, йәһүт меҫкенде кафеға һөйрәкләп индереп, көсләй-көсләй ауыҙына суҫка ите һалғандар...

Буранғол. Император быңдайҙарға иң ҡаты яза ҡулланырға бойорҙо. Мәҫәлән, баҙарҙа тоҙло балыҡ урлаған дон казагын диуарға терәтеп аттылар.

Йәнтүрә. Ә шулай ҙа боҙола башланы халыҡ.

Буранғол. Ғәскәр мөфтөйөһөң бит, муллаларыңа еткер: һәр яугирҙең, нәсихәтләп, ҡолаҡ итен ашаһындар, башҡорт исеменә туҙан ҡунмаһын!

Йәнтүрә. Иншалла, боҙоҡлоҡтар беҙҙәргә яҡын юламаҫ. Муллалар ҡоронда килештек: ҡымыҙ юҡтаған ғәскәргә көнөнә бер туҫтаҡ ҡына әскелт йөҙөм һуты эсергә мөмкин – үҙебеҙҙең асы бал урынына. Кем арттыра – шәриғәт хөкөмө ҡаты.

Ҡаһарман. Әйткәндәй, Еләсәй яланында бейәләр ҡолонлай башланы, ағай-эне гөбөрләтеп ҡымыҙ бешә, французлдар дыу-ҡуба. Бәғзеләре, йүгереп инеп, аяғөҫтө генә ашап-эсмәле «бистро» тигән дөкәндәрендә, беҙҙекеләрҙән алып, ҡымыҙ һатырға кереште, француз ябырылып ала.

Буранғол. Иншалла, малҡайҙарыбыҙ ҙа илдең ебәк бүтәгәләрен ейеп һауҙыртыр – Император башҡорттарҙы ҡайтара башларға бойорҙо. Әйтеүемсә, беренсе булып һинең полк юлға сыға, улым.

Ҡатын-ҡыҙҙар: -- Бәрәкалла! Бәрәкалла!

Ҡаһарман. Оҙон сәфәргә әҙерләнергә кәрәк (китә).

Буранғол. Эштәребеҙ баштан ашҡан. Ә һеҙ, хужабикәләр, кисә үк иҫкәрткәнемсә, һиммәтле француз ханымдарын тап үҙебеҙсә хөрмәтләп ҡаршылағыҙ. Үҙебеҙҙең милләт кейемдәрендә. Император шулай ҡушты. Элекке императрица Жозефина һәм уның ҡыҙы герцогиня Гротензия «төньяҡ амурбикә»ләрен үҙ күҙҙәре менән күреп танышырға теләгән. Бөгөнгө кискә император һарайына балға саҡырылғаныбыҙҙы ла онотмағыҙ, яҫанып-төҙәнеп барығыҙ.

Юлдашбикә. Кейенгәнбеҙ бит инде. Йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәбеҙ.

Буранғол. Киттек, подпоручик. Ҡурайыңды ҡалдырма *(китәләр).*

Табын йыйыштырыла, өҫтәлгә таҙа ашъяулыҡ ябыла. Йүгерешеп йөрөп әҙенрләнәләр – ысын башҡорт кейемендәләр.

Ғәзимә. Балға, тине бит әле.

Юлдашбикә. Баҙарҙарыбыҙ арта: Францияның яңы короле Людовик та, бал башланырҙан элек, башҡорттарҙы күрһәтегеҙ беҙгә, тигән.

Зөләйхә. Их, бейейбеҙ икән кинәнеп!

Юлдашбикә. Ҡарағыҙ уны, һынатмайыҡ.

Ғәзимә. Веймар ҡалаһында неместең таҫыллы ил ағаһы Вольфһанһ Һөйтө менән дә ҡушарлап бейегән баш әле!

Юлдашбикә. Осонма.

Зөләйхә. Жозефинаһы нисектер, әммә Гротензия тигәндәре бик һылыу – императорыбыҙҙың башын әйләндергән, тиҙәр. Шуның Черутти урамындағы Сан-Ле һарайынан эҙен һыуытмай имеш.

Ғәзимә. Һис ғәжәп түгел, император фәрештәнең дә күҙе төшөрлөк йәш тә, иҫ киткес сибәр ҙә бит.

Юлдашбикә. Етер, кеше ишетә күрмәһен.

Ишек ҡыңғырауы зыңғырлай, Жозефина менән Гротензияны хөрмәтләп ҡаршы алалар. Юлдашбикә – Жосефинаны, Ғәзимә Гротензияны ҡосаҡлай, Ғәзимә һулҡылдай.

Зөләйхә. Хуш килдегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ!

Гротензия *(Ғәзимәгә).* Мин – Гротензия. Исемең кем, ниңә илайһың?

Ғәзимә. Ғәфү итегеҙ, һуғыш һеҙгә сикһеҙ ҡайғы килтерҙе – ирегеҙ үлеп ҡалған, беҙҙекеләр ҙә күп үлде, шуға күрә илайым. Исемем минең Ғәзимә.

Гротензия *(Ғәзимәне ҡосаҡлап).* Аһһһ, Ғәзимә!.. *(Илай. Күҙ йәштәрен ҡулъяулыгы менән ҡоротоп).* Йөрәгегеҙ тап беҙҙекеләй икән.

Юлдашбикә. Һеҙ, ҡәҙерлем, донъяға билдәле императрица Жозефина бит, шулаймы? Ә мин Юлдашбикә, кенәз Буранғол ҡатыны.

Жозефина. Элек билдәле инем... Һеҙ бәхетле – кенәзегеҙ ҡосағында. Ә мин... элекке, элекке!.. *(Һулҡылдай. Юлдашбикәнең түшендәге тәңкәләрҙең береһен тотоп).* Наполеондра... минең ғәзиземдең алтын тәңкәһе... ҡайҙан алдығыҙ?

Юлдашбикә. Һуғыш бит... Француз миңә атты – теймәне. Минең уғым атынан тәкмәстерҙе. Ҡуржыны тулы сиркәү көмөштәре, Александр тәңкәләре ине. Араһынан Наполеон тәңкәһен алып ҡалып, йәмғеһен штабҡа тапшырҙым...

Жозефина. Һәм тегеп тә ҡуйҙығыҙмы?

Юлдашбикә. Эйе, Ватан һуғышы иҫтәлеге итеп. *(Тәңкәне түшенән йолҡоп алып тотторта).* Жозефина, һеҙгә минең бүләгем дә, иҫтәлегем дә булһын был.

Жосефина *(Юлдашбикәне ҡосаҡлай, илашалар, Зөлхизә уларга ҡушылып илай).* Рәхмәт, минән дә иҫтәлеккә бүләк – Наполеонымдың алтын тәңкәһе, рәхим итеп алығыҙ (бирә). Ошо була икән төньяҡ амурҙары!..

Гротензия *(Ғәзимә менән Зөләйхәгә).* Һеҙҙең түштәрҙә лә ылғый алтын-көмөш... шулар араһында беҙҙекеләр ҙә сылтыраһын *(икеһенә алтын тәңкәләр тапшыра, рәхмәт әйтеп алалар).* Ҡыҙығыҙмы был? Йәш кенә.

Юлдашбикә. Йәш булһа ла, оло яугир – оло яуҙарҙа һыналды. Буласаҡ киленебеҙ, улыбыҙ менән бергә һуғышта йөрөй.

Гротензия. Буласаҡ? Ниңә буласаҡ? Бергә йөрөп тә, ҡушылманылармы ни?

Юлдашбикә. Һөйөшөп кенә йөрөйҙәр. Илгә ҡайтып, атай-әсәй фатихаһын алмайынса тороп, йола ҡушмай.

Гротензия. Ә мин оҙаҡ түҙмәҫ инем, йоланы боҙор инем *(көлөшәләр).*

Юлдашбикә. Ҡәҙерле ҡунаҡтар, рәхим итеп табынға ултырышайыҡ. Ингән кешене ҡоро сығармау йолаһы бар. Зөләйхә, самауырың әҙерме?

Зөләйхә. Аҫау айғырҙай кешнәп, боҫ борҡотоп тибенә. Һоп! *(Килтереп ҡуя).*

Ултырышалар – табында бал, сәк-сәк, Юлдашбикә сәй яһай.

Жосефина. Их, ожмах хозурлығы аңҡый! Ниндәйен эсемлек был?

Юлдашбикә. Үҙебеҙҙең Күк Уралда үҫкән мәтрүшкә сәйе, ер еләге ҡушып киптерелгән.

Гротензия *(татып ҡарап).* Еҫе – еҫкәп туйғыһыҙ, тәме телеңде йоторлоҡ – ары торһон инглиздарҙың һинд сәйе!

Ғәзимә. Һеҙҙә кофе эсәләр, беҙ ҙә аҙлап шуға күнегә башланыҡ.

Жозефина. Үҙегеҙҙекенә етмәй.

Гротензия *(башлы сәк-сәккә күрһәтеп).* Ә быныһы нимәкәй?

Ғәзимә. Изге ризыҡ сәк-сәк был, исеме әсәк-әсәк тигән һүҙҙән алынған. Әсәк тип беҙҙә бәпес имәкәй Әсәй имсәге әйтелә: әсәк-әсәк, тимәк – ҡуш имсәк, тигән һүҙ.

Юлдашбикә. Күрәһегеҙме, ул, татлы балға ҡатырып, әсә имсәге рәүешле һерәйтелгән. *(Бысаҡ менән бүлгесләп, тәрилкәләргә һала).* Ваҡ ҡына тумалсыҡтар – нәҡ бәпескәй ҡабырлыҡ имсәк баштары... Татығыҙ – әсә күкрәгеләй танһыҡ тәмлекәс.

Һоҡланыу ауаздары сығарып етешәләр.

Юлдашбикә. Балдан да ауыҙ итегеҙ, быныһы ла үҙебеҙҙең Уралдан килтерелгән.

Гротензия *(ҡалаҡ осона элеп ҡабып).* Ммм... көтөлмәгә аромат! Бындай балды ашап күргәнебеҙ юҡ.

Зөләйхә. Үҙебеҙҙең йүкә балы.

Жозефна. Нимә ул?

Ғәзимә. Беҙҙә йүкә тигән ағастар үҫә, ҡарҙай ап-аҡ сәскәләренән тып-тып итеп бал тама.

Жозефина. Тамған еренә һауыт ҡуйып йыйып алаһығыҙмы? *(Көлөшөү).*

Зөлхизә. Егәрле бал ҡорттары йыя уны.

Гротензия. Һеҙҙең ул йүкәләрҙе, егәрле бал ҡорттарын Францияға күсереп үрсетергә ине.

Юлдашбикә. Башҡорт юҡ ерҙә йүкә үҫмәй, башҡорттоң бал ҡорттары ла үрсемәй.

Жозефина. Шундай ожмах ҡосағынан ҡылыс айҡап ниңә бында килдегеҙ?

Юлдашбикә. Ғәфү итегеҙ, үҙегеҙ беҙгә туптан атып керҙегеҙ.

Жозефина. Уныһы шулай...

Гротензия. Кисә генә һеҙҙең хаҡта бер мәҡәлә уҡыным: төньяҡ амурҙары бик ғәййәр ҡәүем. Скифия тигән боронғо дәүләттең башҡорт тигән уҫал халҡы үҙҙәрен йыртҡыс бүренән тыуған тоҡом тип һанаған, шуға күрә ирҙәре башына бүре башлы, бүре ҡойроҡло бүрек кейгән, тип яҙа тарихсыбыҙ...

Жозефина. Бәй, бөгөн килеп Елисей яланында тирмә ҡорған башҡорттарҙы күрмәнеңме ни – тап шундай бүреклеләр бит.

Гротензия. Эйе... Тарихсы бына нимә ти: шуға күрә ҡатындары ирҙәрен гелән «минең бүрем» тип атай, «берҙән-берем» тип ҡәҙерләй, быныһы ла улар телендә «бүренән тыуған бүрем» тигән бик боронғо мәғәнә...

Жозефина. Бүре башы һүрәтләнгән байраҡтары Император Александр ғәскәрҙәре парадында елберләне...

Гротензия. Тарихсының музыкаға бәйле күҙәтеүе ифрат ҡыҙыҡлы: имеш, боронғо башҡорттарҙың ярты өлөшө Изге Һыйыр-Инәгә табынған, ә икенсе ярты өлөшө – Изге Бүре-Әсәгә. Изге Һыйыр-Инәгә табыныусы башҡорт һыйыр мөңрәүенә оҡшаш үҙенсәлекле «өзләү» тигән көй сығарған, ә Изге Бүре-Әсәгә табыныусылары бүре олоуына оҡшатып оҙон көйгә йырлаған...

Юлдашбикә *(көлөп).* Әлдә Парижға килгәнбеҙ -- шуны ла белмәҫ инек!

Гротензия. Белеүемсә, һеҙ – бүре башҡорттары, берәй оҙон көйөгөҙҙө йырлап ишеттерһәгеҙсе!

Ғәзимә. Ярай, олоһаҡ – олойоҡ инде, Зөләйхә, һыҙҙырт «Ашҡаҙар»ыңды.

Зөләйхә моңайып йырлай, был осраҡта ул эталон һаналған Диана Нурмөхәмәтова башҡарыуында яңғыраһын (яҙмалағы музыкаһын юйып, яңғыҙ башҡарыу рәүешендә бирелһен):

> Йәнкәй-йәнәш ките, ай, һунарға,
> Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә,
> Э-эй... Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.
> Шәшкеләргә китеп вафат булды,
> Ғәзиз башым ҡалды ла йәш кенә,
> Э-эй... ғәзиз башым ҡалды ла йәш кенә...

Йырҙы тәрән кисереп тын ҡалалар. Жосефина менән Гротензия күҙҙәрен ҡаплап илай.

Жозефина *(Гротензияны етәкләп).* Ҡайтайыҡ... Рәхмәт һеҙгә! *(Китәләр).*

Ғәзимә. Император ҡатындары ла яп-ябай булыр икән, хәс тә үҙебеҙ кеүек.

Юлдашбикә. Иншалла, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәне, буғай.

Зөләйхә. Ә хәҙер балға, балға! Их, Париждағы һуңғы көндәребеҙ!

## Етенсе сәхнә

Елисей һарайында Александр I кабинеты алдындағы иркен зал, төрлө тарафҡа асылмалы ишектәр. Беннигсен һәм Барклай де Толли.

Беннигсен. Ғәҙәтенсә, көттөртә... Императорҙы әйтәм, һөйәркәләре артынан йөрөйҙөр инде.

Барклай. Йөрөһөн, йәш кеше бит.

Беннигсен. Һеҙ, әлбиттә, һәр аҙымын хуплайһығыҙ, «еңә-еңә» Мәскәү ҡалаһын уҙып киткәнебеҙ кеүек...

Барклай. Шул арҡала Парижға килеп еттек.

Беннигсен. Артыбыҙҙа Мәскәүебеҙ дөрләп янды, ә Париждың бер кирбесен дә ваттыртманыҡ. Өҫтәүенә, йәшәү рәүешен, ҡанундарын шул көйөнсә ҡалдырҙыҡ.

Барклай. Леонтий Леонтьевич, һеҙ әллә бында ла крепостное право керетер инегеҙме?

Беннигсен. Һис ҡыйыш китмәҫ ине.

Барклай. Император бының хилафлығын яҡшы аңлай, ул бит хатта Рәсәйебеҙҙә лә крәҫтиәндәрҙе азат ҡылыу, республика ҡанундары урынлаштырыу яҡлы. Уның девизы мәғлүм.

Беннигсен. Эйе: «Минең хаҡта нимә тип кенә әйтһәләр ҙә, мин барыбер республикасы һәм республикасы булып үлермен!» -- тигәйне... Буш хыял!

Барклай. Бойомға ашыр хыял.

Беннигсен. Ете мең йән крәҫтиән биләгән мәрхүм Кутузовы ни әйтер ине икән? Йәки үҙенең ун мең йән дәүләт крәҫтиәнен мал урынына илатып һатып ебәреүе, шуның менән ҡаҙна йыртығын ямауы...

Барклай. Дөрөҫ, Рәсәй әлегә һис өлгөрөп етмәгән, ләкин яҡты киләсәкте бөгөн үк ҡайғыртыу мөһим.

Беннигсен. Мөһимлектең эҙемтәләрен Париж урамдары һөйләй: сикләнмәгән әхләҡи бәйһеҙлек, фәхишәлек... Офицерҙарыбыҙ, һалдаттарыбыҙ Рәсәй көмөшөн французларға услап-услап тарата. Сөнки бер юлы өс йыллыҡ хеҙмәт хаҡы түләнде, ике мең бот ауырлығындағы көмөш сарыф ителде. Кем өсөн – Париж нәфсеһе өсөн.

Барклай. Шуның арҡаһында бында, Испаниялағылай, партизан һуғышы ҡупманы, әшнәлек киң йәйелде.

Беннигсен. Ғәскәрҙәребеҙ боҙола, дыуамаллыҡ көсәйә. Күмәк дезертирлыҡ осраҡтары бар. Мәҫәлән, Императорҙың үҙенең атлы гвардия полкынан алтмыш кеше атын-ҡоралын алып ҡасты, динен үҙгәртеп, француз булып теркәлде. Шундайҙарға алпауыттар яҡшы эш хаҡы түләй, хатта ҡыҙҙарын бирә.

Барклай. Казактарҙан, башҡорттарҙан шундай осраҡтар булдымы?

Беннигсен. Бәхеткә күрә, юҡ дәрәжәһендә.

Бына күрәһегеҙ Император хыялының хаҡлығын. Сөнки урыҫ һалдаттары, Рәсәй-әсәйҙән түгел, ә крепостное правонан биҙеп ҡаса. Казак менән башҡорт үҙ урынында, сөнки уларҙа һеҙ ятаҡкан крепостное право юҡ.

Беннигсен. Һәр хәлдә, тамам боҙолмаҫтан элек, армияны илгә ҡайтарыу зарур. Бигерәк тә башҡорттарҙың дарылай ҡапыл ҡабыныуын беләбеҙ. Император...

Барклай. Император быны инде бойорҙо: беренсе эшелонда башҡорттар ҡайта башлай.

Император адъютанты Чернышев инә.

Чернышев. Император әле генә Сан-Лье һарайынан ҡайтты, оҙаҡлағаны өсөн һеҙҙән ғәфү үтенергә ҡушты.

Беннигсен *(Барклайга).* Әйттем бит... әлеге лә баяғы шул Гротензия...

Күңелле көй һыҙғырып, Александр килә.

Александр. Беләһегеҙме, был ниндәй көй? Белмәйһегеҙ. *(Көйҙө һыҙгырып).* «Марсельеза», республика гимны.

Чернышев йылмая, Беннигсен менән Барклай суҡына.

Чернышев. Ваше высочество, король Людовик ун һигеҙенсе килеп етте, үгәй ҡыҙы прицесса Франсуа менән.

Александр. Бахыр ул ҡыҙҙы ҡыҙғанам: сит илдәрҙә әсәһенән етем ҡалып, ҡылауызланып үҫкән.

Беннигсен. Уныҡы ғына һүҙ булһын -- ҡарт королгә баш бирмәй ыҙалата.

Людовик һәм адъютанты, Франсуа инә.

Александр. Хуш килдегеҙ, король, хуш килдегеҙ, принцесса! Үҙегеҙҙең теләккә ярашлы, теге Оло залда бал башланғанға тиклем, ошонда һеҙҙе «төньяҡ амурҙары»м менән таныштырмаҡсымын. *(Адъютантына ҡарай).*

Чернышев. Полк командирҙары Буранғол Ҡыуатов, Ҡаһарман Буранғолов һәм уларҙың дамалары Юлдашбикә, Ғәзимә, Зөләйхә ханымдар килгән. Йәнә көтә элекке иператрица Жозефина менән герцогиня Гротензия.

Александр. Үткәрегеҙ.

Әйтелгән төркөм инеп баҫа.

Франсуа *(ҡул сәпәкәйләп).* О амурҙар! *(Бармагы менән Ҡаһарман ягына күрһәтеп).* Атаҡайым, мин бына ошо амур менән бейейем, ул миңә ифрат оҡшай!

Людовик. Ҡыҙым, ул ҡәҙәре осонма.

Франсуа. Оҡшай! Оҡшай!

Төркөмгә яҡынлайҙар.

Александр *(теҙмәләге һәр береһе тәңгәлендә туҡталып).* Былар минең армиямдың ысын амурҙары булды, һәр яуҙа еңеп сыҡты, Парижға ла алғы сафтарҙа керҙе: полк командиры Буранғол Ҡыуатов, полк командиры Ҡаһарман Буранғолов, полк командиры ярҙамсыһы, атаҡлы ҡурайсы-импровизатор...

Чернышев. Йәнтүрә Этбаев.

Александр. Эйе... Рәсәй армияһының беренсе ярымай шәфҡәт туташы Зөләйхә...

Людовик. «Ҡурайсы» ни тигән һүҙ?

Александр. Европаса әйткәндә, башҡорт флейтаһы. Үлән көпшәһенә тын өрөп төрлө көйҙәр сығара.

Людовик. Үлән көпшәһе... ҡыҙыҡ...

Александр. Подпоручик, һыҙҙырт берҙе!

Йәнтүрә бер-ике шаңғырта ла Император яратҡан көйгә – Алябьевтың «Һандуғас»ына күсә, Александр уға ҡушылып һыҙғыра, ҡул сабалар.

Людовик. Ышанмайым. (Ҡурайҙы алып, көпшә эсенә ҡарай). Шаҡ-ҡатырғыс: һис бер механизмы юҡ, ә һандуғастай һайрай.

Александр. Бына шундай ул минең батырҙарым.

Франсуа. Яратам! Яратам!

Людовик. Тик тор! Һеҙҙең юғарылыҡлы рөхсәт менән, батырҙароҙы Францияның юғары билдәһе – Хөрмәт Легионы ордены менән бүләкләйем. *(Дүрт яугирҙең муйынына сағыу ал тъаҫмалы орден кейҙертә, ҡулдарын ҡыҫа, Зөлхизәнең ҡулын үбә; бүләкләнеүселәр рәхмәт әйтә).*

Александр. Ә был ике гүзәл зат -- яугир ирҙәре ҡатарында батырҙарса утты-һыуҙы үткән Юлдашбикә ханым, Ғәзимә ханым.

Людовик. Ысын-ысындан ҡаһарман гүзәл заттарға Парижыбыҙҙың Хөрмәтле Дамаһы медальонын тапшырам, дамаларҙың исемдәре ошо Елисей һарайының хөрмәт кенәгәһенә алтын хәрефтәр менән яҙыласаҡ *(медальондарҙы дамаларҙың тәңкәле түштәренә беркетә, һәр береһенең ҡулын үбә).*

Франсуа *(ҡул сәпәкәйләп).* Атаҡайым, амурҙы алып бейейем, дамский вальс уйналһын!

Александр *(югарылагы оркестрга ҡул һелтәп).* Уйналһын!

Вальс уйнала, Франсуа менән Ҡаһарман ҡушарлап бейеп китә; сәхнә түңәрәге уларға ҡаршы әйләнеп, был икәүҙе аулаҡ бүлмәгә сығара, бейеп барып туҡталалар, музыка тына *(был хәл башҡалар менән дә ҡабатлана).*

Франсуа. Амурым минең, мин һине ныҡ яратам! Мин һиңә кейәүгә сығам!

Ҡаһарман. Гүзәлкәйем, яңы балҡып сәскә атҡан гөлдәй сафһың, үтә йәшһең... Ысын йәреңде табырһың, өҙөлөп яратырһың.

Франсуа. Өҙөлөп-өҙөлөп һине генә яратам!

Ҡаһарман. Һылыуым, Зөләйхә тигән батыр ҡыҙҙы күрҙең бит – бына шул минең йәрем.

Франсуа. Мин дә батыр булырмын, һуғышта бергә йөрөрбөҙ. Йәки бында ҡалырһың, атаҡайым үҙеңде Париждың генерал-губернаторы яһар *(егетте үбергә итә).*

Ҡаһарман. Ғәфү ит, матурҡайым, Ватаным көтә мине. *(Франсуа илай, вальс көсәйә, бейей-бара Оло залға сығып китәләр).*

Баяғылай ҡушбейеү күренеше, был юлы Александр менән Гротензия.

Александр. Гүзәл фәрештәм минең! Парижға мин һеҙҙең ғаиләне күралмаҫтай хасланып килеп керҙем, ә хәҙерен һеҙҙең ғаиләлә генә табам күңелемә йылылыҡ. Мин һеҙҙе йәберләнем, башҡаларға игелек иттем, аҙаҡ килеп йөрәгем һеҙҙе генә теләне. Гүзәлем, мин һеҙҙе өҙөлөп һөйәм!

Гротензия. Мин дә, мин дә! *(Үбешәләр; вальс көсәйә, бейеп сығып китәләр).*

Шул сираттан Жосефина менән Йәнтүрә бейеп килә, туҡталалар.

Жозефина. Ҡатындарығыҙ бәхетле – туйҙа ла, яуҙа ла ирҙәре менән бергә.

Йәнтүрә. Сөнки Хоҙайыбыҙ беҙҙе айырылмаҫ бербөтөн итеп яралтҡан.

Жозефина. Ә мин яңғыҙлыҡта ҡаңғырып ҡартайҙым...

Йәнтүрә. Һеҙ шундайын йәш, шундайын һылыу – бер күреүҙән үлеп ғашиҡ булырлыҡ!

Жозефина. Ҡатынығыҙ нисәү – дүртәүме?

Йәнтүрә. Әлегә берәү генә.

Жозефина. Һуң, эш ниҙә? Мин риза – икенсе бисәлеккә.

Йәнтүрә. Их, дин ҡушмай...

Жосефина. Ах шул дин, дин... *(Вальс көсәйә, бейеп сығып китәләр).*

Шул уҡ нәүбәттә Зөләйхә менән Чернышев бейеп килеп туҡтай.

Чернышев. Далалар алиһәһе, ниңә ошо күҙҙәремә Парижда ғына салындығыҙ, Санкт-Петербургка килмәнегеҙ?

Зөләйхә. Беҙҙең ҡыҙҙар егет артынан йөрөмәй, далаларға үҙегеҙ килергә ине.

Чернышев. Ҡалаларҙа күрештек, ҡалаларҙа ҡалайыҡ.

Зөләйхә. Ифрат һуңланығыҙ шул! *(Вальс көсәйә, бейеп сығып китәләр).*

Бынырһында Юлдашбикә менән Буранғол.

Юлдашбикә. Анауы *Людовик* тигән абышкаһы миңә кулын һуҙған булып маташасы, дамский вальс тигәндәрен онотоп...

Буранғол. Һәй әттәгенәһе, король бит ул, нимә тинең?!

Юлдашбикә. Ғәфү итегеҙ, хәҙер – дамский вальс, минең үҙ королем бар, тинем дә үҙеңде алып киттем.

Буранғол. Һөйөклөм! *(Вальс көсәйә, бейеп сығып китәләр).*

Баяғылай, Ғәзимә менән король адъютанты бейеп килеп туктай.

Адъютант. Париж окшаймы һеҙгә?

Ғәзимә. Иҫ киткес!

Адъютант. Король һеҙҙе Париж дамаһы итте, бында тороп калығыҙ.

Ғәзимә. Парижығыҙ ары торһон, үҙемдең ауыл барҙа.

Адъютант. Аптырайым: империя нигеҙҙәрен дер-һелкетеп баш күтәрә торған халык – Рәсәйҙе яклап бер түгел утыҙ полк биргән. Ниндәй сәбәп үҙгәртте?

Ғәзимә. Үҙгәрмәнек, йолабыҙҙы үтәнек. Ут күршеңә бәлә килһә, үпкәләшеүеңде онот, ут күршеңә ярҙамға сап, тигән йола бар беҙҙә. Урыҫ халкы беҙҙең иң ҙур ут күрше.

Адъютант. Илегеҙҙе барып күрергә ине.

Ғәзимә. Наполеон юҫығынан бармағыҙ, кунак булып килегеҙ! *(Вальс көсәйә, бейеп сығып китәләр).*

Оло зал яғында көсәйгән вальс ыңғайында сәхнә түңәрәге кирегә әйләнеп, тәүге күренеш кайта – Кесе зал. Башкорт төркөмө балдан сыккан, вальс ауазы тына. Франсуа менән *Людовик* етәкләшеп үтеп бара.

Франсуа *(илап).* Атакайым, ул мине кире какты, мин унһыҙ йәшәй алмайым! Бастилияға яптырт, акылға ултыртып сығарт -- минең кейәүем булһын!

*Людовик.* Һантый, һантый! Йәшһең шул әле, балакай... Нисек итеп яптыртайым, Рәсәй офицеры бит ул.

Франсуа. Александрҙан фарман бирҙерт, мине яратһын!

*Людовик.* Бәләкәсем минең, һантыйым *(сығып китәләр).*

Буранғол. Иншалла, быныһын да иҫән-аман ксерҙек, Императорыбыҙ менән хушлаштык. Береһе көнгә, улым, полкың менән – оҙон сәфәргә, Күк Уралыбыҙ көтә.

Каһарман. Хәйерле юлға, атай *(күмәк доға кылалар).*

Зөләйхә. Их, йөрәккәйем атлығып сығып бара! Башкорттарым, йәмле Парижда һуңғы тапкыр үҙебеҙсә ер һелкетеп бейейек!

Йәнтүрә курайҙа дәртле көй уйнай, күмәк бейеү. Әкрен генә ут һүнеп караңғылана.

Күмәк тауыш: -- Хуш, Парижкай, хуш, йәнкәй!

## Һигеҙенсе сәхнә

Илгә ҡайтып барған Ҡаһарман полкы Шварц ҡалаһында. Изге *Лауренсия* сиркәүе алдында башҡорттарҙы күреп ҡалырға килгән халыҡ. Шундағы кюре (беҙҙеңсә – поп) йортоноң ишек төбөндә Йәнтүрә, Ғәзимә, Зөләйхә.

Йәнтүрә. Командирыбыҙ анауы кюре, үҙебеҙсә әйткәндә поп, йортонда, ниместең оло *ил* ағаһы Вольфһанһ Һөйтө менән әңгәмә ҡора. Оло башын кесе итеп, башҡорттарҙы оҙатып ҡалайым, тип килгән.

Зөләйхә. Ә майҙанда күпме халыҡ!

Йәнтүрә. Нимес халҡы беҙҙе ихтирам итә – аттарыбыҙҙы дағаларға тимер табып бирҙеләр.

Ғәзимә. Һеҙ – беҙҙең ҡотҡарыусыларыбыҙ, тиҙәр.

Зөләйхә. Былтыр Веймар ҡалаһын азат иткәнебеҙҙә *лә* әлеге *ил* ағаһы шулай тигәйне.

Йәнтүрә. Әнә, сығып та киләләр!

Ишектән Ҡаһарман, Һөйтө, кюре күренә, халыҡ төркөмө күңелле шаулашып ҡаршылай.

Кюре. Прихожандар, беҙҙе Наполеондың ҡанлы тиранияһынан азат ҡылыусыларыбыҙҙы оҙатып ҡалырға килдегеҙ, бына улар, бына уларҙың командиры Ҡаһарман Буранғолов. *(Халыҡ тәбриклəп мыжгый).*

Һөйтө. Башҡорт яугиренең Урал ҡоросонан ҡойған булат ҡылысы, йәшендәй ялтлаған осҡор уҡтары донъяның хас дошмандарын тәкмәстереп Парижға барып етте, Европаға тыныс тормош ҡайтарыуҙа ҡатнашты. Еңеүселәр ғәскәре инде илкәйенә юл тотҡан. Данлы командир Ҡаһарманды тыңлағыҙ! *(Халыҡ гөжләп ҡул саба).*

Ҡаһарман. Хөрмәтле граждандар! Нимескә *лә*, урыҫҡа *ла*, шулай уҡ башҡортҡа *ла* бер нәмә берҙәйен ҡәҙерле – тыныслыҡ, азатлыҡ. Былтыр ғына был ерҙәрҙән һеҙҙе азат итеүселәр рәүешендә үткәйнек. Парижды алып, Наполеонды тәхетенән ҡолатып, шул уҡ азатлыҡ ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт итәбеҙ. Ысын күңелдән йылы ҡаршы алыуығыҙ, оҙатып ҡалыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! *(Тәбриклəп тулҡынланыу).*

Бер немец ҡарты алға сыға.

Немец. Хөрмәтлем, Наполеонды еңеүегеҙгә ышанам, быға бөтә донъя шаһит. Әммә бер нәмәне төшөнөп етмәйем: төп ҡоралығыҙ мылтыҡ түгел. Был ағас атҡыстарығыҙҙан ағас уҡтар атып нисек еңдегеҙ?

Кюре. Ҡорос башаҡлы бит уҡтар.

Немец. Ә шулай ҙа минең бынауы иҫке мундирымды *ла* тишеп үтерлек түгел.

Һөйтө (көлөп). Хөрмәтлем, мундирығыҙға аттыртып ҡарайһығыҙмы әллә?

Немец *(ҡыҙышып).* Атһын, мундирымды ла тишмәйәсәк!

Ҡаһарман *(етди).* Ярамай. Бородино яланында минең уғым Наполеондың менге атын үтәләй тишеп сыҡты, янындағы йәйәүлене ҡаҙаҡланы.

Халыҡ: -- Булмаç! Атып күрһәт!

-- Кюре, манараға сорғолтһон!

Кюре. Сорғолт, сорғолт.

Ҡаһарман. Ярамаç, Хоҙай йорто бит.

Кюре. Үҙем рөхсәт итәм, уғың барыбер кире ҡаҡлығып төшөр.

Ҡаһарман Һөйтөгә ҡарай.

Һөйтө. Атығыҙ, атығыҙ.

Халыҡ: -- Манараға еткерергә көсөнән килерме икән?

Ҡаһарман *(һаҙағынан уҡ һайлап алып, ҡоралын Зөләйхәгә бирә).* Бына минең кәләшем Зөләйхә. Көсөмә шикләнһәгеҙ, кәләшем атып күрһәтһен!

Зөләйхә ян крешен кирә тартып атып ебәрә, уҡ манара көмбәҙенең ҡалайына ярты биленән үтеп ҡаҙала. Халыҡ шаулай, һауаға баш кейемдәре сөйөлә.

Зөләйхә *(кюрега).* Ғәфү итегеҙ.

Кюре. Ғәфү кәрәкмәй, афарин амазонка! Изге Хоҙай йортоноң күркәм көмбәҙендә был оҫҡор уҡ мәңгегә тороп ҡаласаҡ, башҡорт тигән ғәййәр азатлыҡ илселәренең изге иҫтәлеге булып быуындан-быуынға ҡәҙерләп һаҡланасаҡ! *(Алҡышлы шау-шоу).*

Һөйтө. Мин «Зөләйхә» тигән шиғыр яҙырмын, моңло көйгә һалырмын!

Йәнтүрә. Ә мин алсаҡ нимес халҡын маҡтап йырлармын!

Ҡаһарман. Ҡуҙғалайыҡ, егеттәр. Алсаҡ халыҡ, күңелсәк халыҡ, хушығыҙ! Беҙ китәбеҙ!

Кешеләр ихлас тәбрикләп, ҡул болғап оҙата.

Һөйтө. Хушығыҙ, ҡәҙерлеләрем, иҫән-аман ҡайтып етегеҙ!

Ат тояҡтары тупырлай, күмәк йыр («Ерән ҡашҡа») аһәңендә әкрен генә сәхнә ҡараңғылана:

Йәйләүҙәрҙе һағынып, илгә талпынып
Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ менеп тә аттарға.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Алдан елер малҡайым,
Эйәрләгән егетеңде
Ташлап ҡайтма, малҡайым,
Эй-й... ташлап ҡайтма, малҡайым...

**ШАРШАУ**

13.04.2015.

# ШАҒИР ЙОНДОҘО

## Драма өс шаршауҙа туғыҙ сәхнәлә

***Надежда Васильевна Ғарипованың яҡты иҫтәлегенә***

Ҡатнашалар:

Рәмил – йоморо «толстой танаулы» урыҫ йөҙлө, үҙһүҙле башҡортйән; «башбирмәҫ» шиғырҙары өсөн совет хакимиәт әһелдәре тарафынан эҙәрлекләнгән шағир.

Варя – Рәмилдең һөйөклө ҡатыны, хахол менән сиған ҡиәфәттәрен берләштергән яҡты йөҙлө, алсаҡ күңелле, йомарт ҡуллы украинка; Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында лаборантка-машинистка булып эшләй, башҡортса яҡшы белә, саҡ ҡына акцент менән һөйләшә.

Йыһан – ауылдан килгән элекке хәрби диңгеҙсе, ҡаласа йышылып шымармаған, башҡорт халҡының тарихы менән һуғарылған шағир, прозаик, Рәмилдең ышаныслы дуҫы, ҡорҙашы.

Сафия – Йыһандың хәләл ефете, һарғылт сәсле яҡты йөҙлө ауылсан эскерһеҙ йән.

Ылауир – шиғриәттә Рәмилдең яратҡан шәкерте, сиған барондарынса матур ҡиәфәтле йәшерәк быуын шағир, Варя эшләгән институтта әҙәбиәтсе.

Марат – шул уҡ институттың фольклор секторын етәкләй, башҡорт халыҡ ижадының томдарын баҫмаға әҙерләүсе ирҙәрсә матур тулы йөҙлө, сөм-ҡара сәсле, мыҡты кәүҙәле күркәм йән.

Ғәбсәләм – Мараттың хеҙмәттәше, үҙ эшенә мөкиббән киткән, баш ҡалала башҡорт мәктәбе астыртырға яныып-көйөп йөрөүсән йән.

Әлфиә – Ғәбсәләмдең йомшаҡ күңелле ҡатыны.

Ғайнар – юғары етәкселек даирәһендә абруйлы, йәш ҡәләмдәштәренә ифрат игелекле ҡарт быуын шағир, прозаик, Яҙыусылар берлегенең идара ағзаһы, Сталинград һуғыштары ветераны.

Ахунйәр – ситайған сей-ерән йөҙлө, сталинса текә сәсле уҫал зат, КПСС өлкә комитеты секретары, башҡорт мәҙәниәтенең аҫтыртын «ҡара дуҫы», Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.

Клара – партия өлкә комитетының мәҙәниәт бүлеге мөдире, Ахунйәр рухында эшләүсе тулы кәүҙәле йәш ҡатын..

Аланбай – татар телле урта быуын башҡорт шағиры, Ахунйәрҙең фекерҙәше.

Карам Сахич – партия эшенә мөкиббән китеп бирелгән шөһрәтле халыҡ шағиры, Яҙыусылар берлеге рәйесе, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.

Ҡараһаҡал – әҙиптәргә «куратор» итеп беркетелгән КГБ майоры, һәр саҡ «гражданский» кейемдә.

Ҡасим – башҡорт темаһына урыҫса яҙып шымарған йәш әҙип, хәмерйән, күберәген «ярым-айныҡ» хәлдә йөрөй, осратҡан һәр танышынан «баш төҙәтергә» бер тәңкә һорай.

Болаҡбай, Тамырбай – йәш әҙиптәр, Рәмилдең шешәләш шәкерттәре.

Мыйыҡлы – ҡалала йорттар идаралығы башлығы.

Әзһәр – сантехник, Рәмилдең подъездаш-шешәләш күршеһе.

Солоҡсо – Урал арты ауылында йәшәүсе ҡарт.

Ала-ҡола кейемле, мыҡты кәүҙәле ике ир.

# БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

## Беренсе сәхнә

Биш ҡатлы панель («хрущовка») йорттоң беренсе ҡатында Рәмилдең ике бүлмәле фатиры, фәҡир йыһазландырылған; тышҡы яҡлап тәҙрә буйында тротуар – үткән-һүткәндең шәүләһе. Рәмилдең тыуған көнө, ләкин табын әҙерләнмәгән. Шағир буш өҫтәл ҡырында яңағына таянып уйға сумған, ҡулында сигарет төтәй. Варя кухняла табаҡ-һауыт шалтырата.

Рәмил. Варя, Варенька!

Варя. Әү.

Рәмил. Туҡтатһаңсы шул шалтор-шолтороңдо!

Варя. Ә һин тәмәкеңде ташла, өйҙө ҡара мунсаға әйләндерҙең.

Рәмил. Мин янғансы – тәмәке янһын! Тыуған көнөмдә йәнгә теймә, исмаһам.

Варя. Мин теймәйем, үҙең тейәһең. Тағы эшеңдән ҡыуылып, ләяҡын иҫереп ҡайттың. Бер түгел өс сабыйың бар, шуларҙы ҡайғыртмайһың, тапҡаныңды елгә осороп тораһың, тағы минең һикһән ете һумға ҡарап ҡалғанбыҙ.

Рәмил. Уф, баш сатнай! Әзһәр күрше лә күҙен күрһәтмәҫ булды...

Варя. Һинең һымаҡ түгел бит ул, эш кешеһе. Сантехник.

Рәмил. Булһын ине йәнтехник! Юҡмы шунда берәй нәмәң?

Варя (сынаяҡ тотоп сыға, өҫтәлгә ҡуя). Мә, ҡаты сәй.

Рәмил. Сәй эскән бар ҙа ул... Юҡмы, тим, ҡатырағы?

Варя. Ҡатырағын үҙең көрәп аҡса алғас алырбыҙ. Әйт, был юлы ни өсөн?

Рәмил. Ниңә тизыпмы-тизыйһың? «Әсәм теле» өсөн икәнен яҡшы беләһең бит инде.

Варя. Белергә теләмәйем! «Әсәм теле» -- яҡшы шиғыр. Бер башҡорттоң ғына түгел, урыҫтың да, татарҙың да әсәһе бар, әсә теле бар. Был шиғыр шуларҙың барыһының әсә телен ҡайғырта, ҡурсалай.

Рәмил *(ҡатынын ҡосаҡларға ынтылып).* Варенькам, әнә шуныңды обкомға – ахун таяғына барып әйтһәңсе!

Варя. Барырмын да! Сөнки шиғырың законно!

Рәмил. Их Варя, Варенька, һаман һантый-сабыйһың! «Совет Башҡортостаны»н уҡыманыңмы? Мә! *(Ҡуйын кеҫәһенән оҙонсалап бөкләнгән гәзит алып өҫтәлгә һала).*

Варя *(гәзитте иҙәнгә ташлай, йөрәкһеп уны тапай).* Уҡыным, һинән алдараҡ уҡыным.

Рәмил. Бәй, шулайғас? «Башҡорт милләтсеһе» тигән келәймәне... Обком келәймәһе был.

Варя. Был ни хәл? Ул шиғырҙа «башҡорт» тигән бер һүҙ ҙә юҡ... *(Илай).* Ниңә шулай тип әйтмәнең, ҡарыулашманың?

Рәмил *(тороп ҡатынын ҡосаҡлай, үбә).* Варенькам, илама... Башмаҡ башым һөҙөп кенә ауҙарырлыҡ түгел бит... Ҡалын ҡара таш диуар...

Варя. Көшәлектә – һуҡыр тин, бура төбө – шомотор... Эш хаҡы алғанымса, тип, балаларҙы ҡустың Рауилға илттем – картуф-маҙарҙары күп...

Рәмил. Тыуған көнөмә табын әҙерләмәнек... беренсе тапҡыр.

Варя. Кешенән оят... Хәйер, был хәлдән һуң кем килер тиһең...

Рәмил. Ысын дуҫтар килер.

Ишек ҡыңғырауы ҡыңғырлай.

Варя. Туҡта, үҙем барып асайым.

Йыһан, Сафия инә, шағирҙы тыуған көнө менән ҡотлайҙар.

Рәмил. Ҡарт, әллә инде был юлы һаранландың...

Варя. Һин, ни һөйләйһең!

Рәмил. Үҙебеҙҙекеләр бит.

Йыһан. Ҡорҙашҡайым, бәләкәс кенә бүләкте алғы өйҙә ҡалдырҙыҡ, шулаймы, Сафия?

Сафия. Эйе шул. Варя менән икәүләп сәй әҙерләрбеҙ – цейлон сәйе килтерҙем.

Рәмил. Һылыуҡайым, сәй генә эскән бар ҙа ул...

Сафия *(көлөп).* Рәмил ағай... *(Кухня ягына йүгереп сыгып китә лә өҫтәлгә шешә, рюмкалар килтереп ҡуя).* Сәйе булғас, мәйе лә булыр инде ул. Ә беҙ унда Варя менән уны-быны хәстәрләйек *(кухняга китә).*

Рәмил *(устарын ыуып).* Һәй рәхмәт төшкөрө һылыу! Ҡатындан уңдың һин, ҡарт! *(Ултыралар).* Ҡой, ҡарт, әтү ҡулдар ҡалтырай. *(Сәкәштереп эсәләр).* Бына хөрриәт!

Йыһан. Һин, ҡорҙаш, үтә ныҡ мауығаһың, быың менән... гәрсә иҫермәйһең дә.

Рәмил. Ауырымайым да.

Йыһан. Тәмәкене лә сыуаш мужигылай бороллдатаһың.

Рәмил. Танһыҡ тәғәмдәрем бит. Ҡой!

Йыһан. Яман ағыу икәнлектәрен онотма *(ҡоя).*

Рәмил. Ошо йәшемә етеп, хәстәхана тупһаһын атлап уҙғаным юҡ *(эсә).*

Йыһан. Ятып уҙырға яҙмаһын!

Рәмил. Ҡарт, ғүмереңдә бер рюмка *ла* ҡапмағаныңдай һөйләнәһең!

Йыһан. Дуҫ-иштәргә ҡушылмайынса әмәл юҡ, заманаһы шундай.

Рәмил. Эсһәм дә, эшем бара... Редакцияла ҡалып, төнө буйы гәзит эштәрен башҡарам, таң алдынан ғына ҡайтып йығылам, ләкин түрәләргә һис ярап булмай. Төшкә тиклем йоҡлай, төштән һуң ғына килә, тип, сүп өҫтөнә сүмәлә өйәләр...

Йыһан. Беләм.

Рәмил. Унышына ғына түҙер ҙә инем, «башҡорт милләтсеһе» тигән келәймәләре булмаһа...

Варя *(өҫтәлгә тоҙло кәбеҫтә ҡуя).* Бары менән байрам, тигәндәй... *(Рәмилгә).* Башҡалар барғанында – барып, ҡайтҡанда ҡайтһаң, аҡ һаҡаллы ҡарт булыр инең.

Йыһан. Ул «башҡалар» түгел шул – Шағир *ул*!

Варя *(Йыһандың башынан һыйпап).* Яҡлашаһың... Әнә, баш мөхәррире...

Рәмил. Башһыҙ мөхәррир! Ситән башына ҡунаҡлаған ҡупырыҡ күркә, держиморда!

Варя. Ярай-ярай, туҙынма *(китә).*

Рәмил *(рюмкаларга һалып).* Тот ҡарт, сысайыҡ танауҙарына! *(Эсәләр).* Ахун таяғының башы баштарҙы йәнсемәҫе элек.

Йыһан. Нисек ҡыҫҡартырға инде!

Рәмил. Таяҡтымы?

Йыһан *(шешәгә төртөп).* Ошоно. Шәкерттәрең яман һырышты, брат. Нисәмә ҡарама -- ҡыҫтыралар ҙа киләләр..

Рәмил. Бәй, бына үҙең дә...

Йыһан. Сафия бит...

Рәмил. Сафия һылыу йәшәһен! Уңдың һин, ҡартым. Әйҙә, шиғыр хаҡына! *(Баҫып тороп эсәләр).* Туҡай әйтмешләй, дәрес бөткәс уйнарға *ла* ярайҙыр – шиғырға юл бирәйек *(яттан һөйләй):*

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын.
Йыямын да – йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға *ла* мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел –
Көслө *лә* ул, бай ҙа, яғымлы *ла*,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..

Халҡым теле миңә – хаҡлыҡ теле, --
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә – сәсән теле, --

Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Һәм бына – ахун таяҡлы баяғы мәҡәләне уҡығандан һуң яҙғаным:

Халҡым тел тыуҙырған, бөйөк бер тел!
Теле үлмәҫ, үҙе үлмәһә...
Үҙе үлмәҫ – күрер киләсәкте,
Үҙен-үҙе әгәр күммәһә...

Тик ниңә һуң ҡайбер ул-ҡыҙҙары
Ғәмһеҙ ҡарай уның юлына?
Шул ғәмһеҙлек – күҙгә күренмәгән
Көрәк тотмағанмы ҡулына?..

Йә, ҡарт, ни әйтерһең?

Йыһан. Ҡапаҡ, ныҡ ҡапаҡ, Сәләх ағай Кулибай әйтмешләй. Йәғни яҡшының да яҡшыһы.

Рәмил. Баҫмайҙар. Ылғый милләтселек, тиҙәр...

Йыһан. Милләтһеҙҙәр әйтә уны. Тарбаңлаған ике аяҡлылар. Әммә дүрт аяҡлыларҙың да милләте бар.

Рәмил. Ҡарт, ҡарап-ҡарап торам да, шөйлә аптырап ҡуям: тәрән-төпкөл ауылдағы ҡара көтөүсе башың менән ҡайҙан алдың икән был тиклемгеһен?

Йыһан. Үҙең ҡайҙан алдың һуң?

Рәмил *(йылмайып).* Ну һин, ҡарт! Һөйләп ебәр, әләйһә, берәй шиғыр.

Йыһан *(тамаҡ ҡырғылап).* Рифмаһыҙ ғына яҙылған. «Көндәлек дәфтәренән». Шиғыр булыуҙан да бигерәк, әлеге һорауыңа бер килке яуап та булыр, моғайын:

Башҡорт балаһы мин, тирмәлә
тыуып үҫмәһәм дә! Халҡымдың
ярһыу ҡаны тамырҙарымда
ҡайнай... Урал тәбиғәтенең
гүзәллеге, күңел нескәртеп,
шиғриәткә дәртләндертһә лә,
йөрәгемдең ҡапма-яртыһы
оло күкрәү көтөп ҡыҫыла
һәм күҙ төҫмөр итә эйәрле
толпарҙарҙың кешнәп сабыуын...

Ватанымды һаҡлау бурысы
алыҫтарға мине оҙатҡас,
диңгеҙҙәрҙең томан артынан
Урал ҡаяларын күрҙем мин.

Мине улар өндәп торҙолар
ныҡлыҡҡа. Ә йөрәк һыҡтаған
минуттарҙа Урал елдәре
елеп үтеп ят ҡыр, болондар
иңе аша, туған әсәләй
шифалап һәм наҙлап һыпырҙы
йәш әсеһен талған күҙҙәрҙән...

Ил ҡандарын йыйған хөр Әләм —
ҡыҙыл бөркөт — мачта осонда
уттай янып, беҙҙең карапты
милдәр аша ҡыйыу осорҙо.
Ҡорос иҙән табан аҫтында
аунаҡланы, ләкин тубыҡҡа
сүкмәнек беҙ! Әсәй-Ватанды,
Ватан билен быуған Уралды
күреп торҙоҡ дауыл-яуындар
көбө үтә байраҡ йөҙөнән...

Кордон артындағы бәндәләр
миңә ҡарап: “Кем һин? Ҡырғыҙмы,
ҡытайһыңмы әллә?” — тиһәләр,
“Башҡортмон мин! Эйе, ирекле
башҡортмон мин!” — тип әйтә инем,
белһендәр, тип, ят яҡтарҙа ла,
башҡорт тигән титан барлығын...

Ризығымды ҡырҙа бөтөрөп,
ҡыуғас яҙмыш тыуған йортома,
хыялымда мең ҡат көйләнгән
Өфө ҡалаһына килдем мин...

Танышым юҡ ине. Урамдар,
биналар миңә ят инеләр.
“Китапхана” тигән йорт ҡына,
ымлап йәнде, үҙенә саҡырҙы.
Мин индем һәм бер ҙур китапты
асып ебәрҙем... Был хитапта
тупланғайны туған халҡымдың
күңел ынйылары... Уҡығас,
сикһеҙ донъя минең ҡаршымда
асылды, һәм һалҡын биналар
туған булып киттеләр... Шунан
йәшен уты сыйҙы маңлайҙы:

“Юҡ! Тарихһыҙ түгел башҡортом!
Халҡым бөйөк! Тәрән тамырлы!” –
Тип беркеттем утлы күңелгә.
Шиғырҙарҙы минең тикшергән
сал сәсле бер уйсан ағайға
үҙемдең шул саф хистәремде
ҡыуанып һәм оялып һөйләнем...

Рәмил. *Дәәә…* матрос! Башҡортһоң шул, әй, тыуа-тыумыштан. Минең ише генә түгел – партия билетлы башҡортһоң!

Йәмил. Ни хәл итәйем, Хоҙайым шулай яралтҡас.

Рәмил. Тик йәнә бер аптыраҡ: Партия билетлыларыбыҙ барыһы тиң үҙенең башҡортлоғон маңҡортлоҡҡа алмаштырып бөткәндә, нисек таймай минең янда шыҡырайып тораһың? Сер нимәлә?

Йыһан. Сере уның бик ябай… Тор, тәҙрә ҡаршыһына барайыҡ *(килеп баҫалар).*

Рәмил. Йә?

Йыһан. Тызырайып күккә баҡ: унда нимә күрәһең?

Рәмил. Болот.

Йыһан. Шағир болот үтәләй күрергә хаҡлы. Ете төҙә ете тапҡыр әйләнгән йондоҙҙарҙы.

Рәмил. Һе! Әйтәйек, Оло Етегән йондоҙлоғо…

Йыһан. Эйе, ете ырыу халҡыбыҙҙың күккә ашҡан ете йәне. Иң түрҙәге иң яҡты йондоҙҙо абайла.

Рәмил. Тимер Ҡаҙыҡ йондоҙо.

Йыһан. Шағир йондоҙо! Йыһанды тотоп тора, -- таймай ҙа, тайшанмай ҙа! Шағир ҙа әнә шундай.

Рәмил. Их, булаһы ине лә бит!

Йыһан *(дуҫын ҡосаҡлап).* Ҡорҙашҡайым, шундай шағир бит үҙең! Намыҫыңа, халҡыңа тоғролоҡ һаҡлағаның, уңлы-һуллы тайып-тайшанмағаның өсөн -- шағир, ҙур хәрефле ысын Шағир!

Ишек ҡыңғырауы ҡыңғырлай.

Рәмил. Киләләр… кем икән? *(Барып аса – шау-гөр килеп йәш шәкерттәре Болаҡбай менән Тамырбай инә, икеһе лә тупылдатып өҫтәлгә шешә ҡуя).*

Тамырбай. Тыуған көнөң ҡотло булһын, ағайым!

Болаҡбай. Шанлы тыуған көнөң менән, остазым! *(Ҡосаҡлашып күрешеләр).*

Тамырбай. Ағайҙарым япа-яңғыҙ тилмерә – ҡайҙа матур еңгәйҙәрем?

Варя. Беҙ бында, Тамырчик. *(Сафия менән эйәртенешеп тулы тәрилкәләр, рюмкалар килтереп ҡуя, ыгы-зыгы, көлөшөү).*

Болаҡбай. Еңгәйҙәрем һау булһын, улар барҙа ағайҙарым биртенмәҫ!

Тамырбай. Күңелдре кителмәҫ!

Сафия. Ҡәйнештәр ҙә һау булһын, бай булһын.

Варя. Ултырышайыҡ.

Болаҡбай. Табын ишерелеп тора, йәшәһен еңгәйҙәрем!

Сафия *(йырлай):*

Нисек килдегеҙ һеҙ беҙгә,
Батмайынса диңгеҙгә? *(Варя ҡушыла)*
Ҡәҙерле ҡунаҡ һеҙ беҙгә,
Беҙ нисек икән һеҙгә?

Тамырбай:

Һәй еңгәйҙәр, еңгәйҙәр,
Арыу-талыу белмәйҙәр. *(Болаҡбай күтәреп ала)*
Йөҙкәйҙәре көндәй балҡый,
Хәс тә беҙҙең әсәйҙәр.

Болаҡбай *(иҙрәй башлаған Рәмилдең башын ҡалҡыттырып).* Ағайым, бирешмә!

Рәмил. Ахун таяғы…

Сафия. Ә? Ниндәй таяҡ ул? *(Көлөшәләр, Сафия ояла).*

Рәмил. Сафия-Сафияҡайым, башҡайың йәш шул әле. Шундайын елле таяҡ ул ахун таяғы – беҙҙең кеүектәрҙең башына ҡундырыпмы-ҡундыра…

Болаҡбай. Бабич әйтмешләй, думбыр-думбыр думбыра, бабай башҡа ҡундыра.

Сафия. Ауылыбыҙҙа Камал хәҙрәт Дәүләтшин тигән ахун булған, үҙе үлгәс, йәшел таяғы ҡайҙалыр юғалған, тиҙәр ине. Шул таяҡ табылдымы әллә, тим. *(Көлөшәләр).*

Рәмил. И Сафия һылыуым, партияның обкомы тигән йәшел мәсеттең ҡыҙыл мөнбәр ҡашағаһында һаҡлана ул йәшел ахун таяғы.

Сафия. Әлләсе…

Йыһан *(ҡатынын иркәләп).* Рәмил ҡорҙашымдың тапҡыр һүҙе ул. Обком секретарыбыҙ Ахунйәр Исаев иптәште шулай хөрмәтләй.

Сафия. Тәүбә-тәүбә… *(Көлөшәләр).*

Ишек ҡыңғырауы өҙөк-өҙөк өс тапҡыр оҙаҡ ҡына ҡыңғырлай, күмәк ир-ат шау-шыуы.

Варя *(ырғып тора).* Институттыҡылар. Йыйналышып визит яһарбыҙ, тигәйнеләр. *(Ҡаршыларға атлыға, башҡалар ҙа, тороп, бүлмә уртаһына сыға, ығы-зығы).* Инегеҙ, инегеҙ – ишек асыҡ.

Ылауир, Марат, Ғәбсәләм керә, ҡыҙмасалар, бер тауыштан сәләмләйҙәр:

-- Йәшәһен әсәм телле – сәсән теле! Ҡотло булһын Шағирҙың тыуған көнө!

Рәмилгә, Варяға гөлдәмә тотторалар. Артҡы планда Ҡараһаҡал шым ғына тыңлап тора.

Ылауир *(Рәмилде ҡосаҡлап үбә).* Ошо сағыу гөлдәмәләй сәскә атып, мәңге йәшә, мәңге йәшнә, остазым!

Рәмил. Рәхмәт, рәхмәт! Һин бит минең иң яратҡан шәкертем.

Ылауир. Һин – бөйөк остазым, мин – кеселекле шәкертең булып, ижад үрҙәрендә мәңге күкрәйек, ур-ра!

Ир-ат халҡы *(берҙәм):* -- Урраааа!

Ылауир *(Варяны ҡосаҡлап үбеп).* Бөйөк юбилейҙан файҙаланып, ағайым күрмәгәндә генә матур еңгәйемде бер үпәс итәйем әле! Шөһрәтле халыҡ шағирыбыҙ Карам Сахич әйткән бит, “гөлдәргә һыу һибегеҙ”, тип. Шуны иҫтә тотоп, ошо кескәй генә конвертты еңгәйемдең егәрле ҡулдарына һебә ҡылам!

Варя. И ошо ҡәйнешемде! *(Конвертты джемпер кеҫәһенә йәшерә).*

Ылауир. Ҡотланып, ағайымды *ла* ҡотлап, ҡәйнештәреңде *лә* онотма, еңгәйем!

Ғәбсәләм. Ҡара-ҡара, күҙ ҙә йоммай барыбыҙҙың иғәнәне үҙ исеменән тапшырҙы.

Марат. Шылғаяҡтан ни көтәһең, төкөр!

Варя *(Ылауирҙе маңлайынан үбә).* Рәхмәт, иң белдекле ҡәйнешем! *(Сафия янына килә).* Бергә эшләгән дуҫтарым: Марат менән Ғәбсәләм – күренекле фольклорсылар, башҡорттоң атаҡлы “Урал батыр” эпосын баҫмаға әҙерләйҙәр. Ә Ылауир – әҙәбиәтсе, ағайыңдың “Әсәм теле”н тар-мар ҡылған, унан “башҡорт милләтсеһе” яһаған ҡыҙыл танаулы профессор ҡарамағында эшләй.

Сафия. Абау!

Варя. Шулай ҙа егет кеше, Ылауирҙе әйтәм. Ҡулында барын йәлләмәй, ағайым да еңгәйем тип үлеп тора.

Марат *(Тамырбай менән Болаҡбайға бармаҡ янап).* Әһһә, шымсы көсөктәре! Һеҙ ниңә бында?

Ғәбсәләм. Ипләп! Күрмәйһеңме ни… арттарынан ҡалмаған ҡара һаҡалын?..

Марат. Мин әле уларҙы! *(Йоҙрогон йомарлап килә башлай).*

Болаҡбай *(әшнәһенең еңенән тартып).* Тайҙыҡ! *(Шым гына һыҙалар).*

Варя. Йәмәғәт, тынысланайыҡ! *(Ҡараһакалды ҡулынан алга тартып).* Был иптәш, белергә тейешһегеҙ, башҡорт әҙәбиәтенең һөйәрмәне. Ағайығыҙҙың хәлен белешергә беҙгә йыш килә, хатта уның “Әсәм теле”н яттан белә.

Ғәбсәләм. Аҫтан телә, тиһәк, урынлы булыр. Ышлыя аҫтына буҡтай килеп ҡыҫылған.

Йыһан. Йәмәғәт, сығырҙан сыҡмайыҡ әле. Һәр кемдең дә асыҡ ишектән инергә, шағирҙы ҡотларға хаҡы бар.

Сафия. Туҫтаҡтар мөлдөрәмә, тост әйтергә форсат бар.

Рәмил. Эйе, тотайыҡ!

Ҡараһаҡал. Был йортто мин халҡыбыҙҙың һынмаҫ рухиәт усағы тип һанайым, сөнки бында сәсән телле бөйөк шағирыбыҙ йәшәй! Ниндәйен дә юғары рухи байлыҡ! Уға китһә, граждандлыҡ шиғырҙарында ул хатта Карам Сахичтан да

уҙҙырған, мәҫәлән: “Ленин менән Сталин – ҡуш йөрәге халҡымдың!” Былай тип кем әйтә ала? Совет дәүеренең бөйөк шағиры Маяковский ҙа үҙебеҙҙең Рәмил генә! Даһийыбыҙ Ленин хаҡында өҙөлөп бына нимә ти ул:

Поезд елә. Ләкин хыял күптән
Мавзолейҙа, мәрмәр һарайҙа.
Һүрәтенә түгел, үҙ күҙҙәрем
Аҡ йөҙөнә уның ҡарайҙар.

Тыныс йоҡлай… Ләкин белеп ята –
Килгән уға Салауат егете.
Һин бит өҙҙөң уның бығауҙарын,
Һин бит булдың уның өмөтө.

Йәки бына юлбашсыбыҙ Сталин тураһында:

Юғалттыҡ беҙ күҙ-ҡаш араһынан
Иң ҡәҙерле, иң дуҫ кешене.
Аҡма йәшем! Кире ҡайтарырға
Дауаһы юҡ күҙҙәр йәшенең.

Ғүмеремдә өс ҡат күрҙем һине,
Өс ғүмерҙә бөтмәҫ көс алдым.
Аҡтыҡ тамсыһына саҡлы уны
Эше өсөн бирәм Атамдың!

Иғтибар итегеҙ: шағирыбыҙҙың ҙур мәғәнәле йөрәк һүҙе “Атамдың” тип ҙур хәрефле яҙылған!

Туҡтанылар донъялағы иң ҙур,
Иң күп эш эшләгән ҡулдарың.
Туҡтамаҫ һис уйың. Партиябыҙ
Яҡтыртасаҡ еңеү юлдарын!

Ул һүҙеңде үтәр, үтәгәндәй
Һин Ленинға биргән антыңды.
Ленин һәм һин мәңге ҡалырһығыҙ
Ҡуш йөрәге булып халҡымдың!

Йәки бына бөйөк совет державаһының Дәүләт Гербын нисек данлай шағирыбыҙ:

**Ураҡ менән Сүкеш**

Әсәйҙәрҙең көндәй күҙ нурҙары,
Атайҙарҙың ҡойған ал ҡаны
Ураҡ, Сүкеш, Йондоҙ, Башаҡ менән
Нығытылған илдең ҡалҡаны!

Ҡарағоштар, арыҫландар ни һуң,
Ғәйрәт сәсһә Сүкеш һәм Ураҡ!
Ҡояш нурын һирпеп бар йыһанға,
Бар Ер шарын алыр бер урап!

Эйе, аласаҡ, алырбыҙ Ер шарын урап! Совет иле, партиябыҙ ышана: ошондай шиғри ынйыларҙы йымылдатҡан талант эйәһе милли тойғолар сүп-сарына бирешмәҫ, уларҙы ғорур тапап уҙыр һәм артабан да тап ошондай "Ураҡ менән Сүкеш"ле сағыу ынйыларын бүләк итер халҡына! *(Шыйыҡ ҡына ҡул сабыуҙар).* Рәмил туған *(ҡуйынынан ҡандай ҡыҙыл тышлы китап ала),* күңелдәрҙе айбарлаған рухи хазинаң бүҫкәрмәһен, синфи дошмандар уға бысраҡ ҡул һуҙмаһын! Шуның өсөн ышаныслы рухи тимер ҡоршау бүләк итәм һиңә, бына ул – революцияның тимер рыцаре Феликс Эдмундович Дзержинскийҙың ялҡынлы телмәрҙәрен туплаған һиммәтле китап! *(Шыйыҡ ҡул сабыуҙар оҙатыуында юбилярға тапшыра, Рәмил китапты алып өҫтәлгә һала).*

Марат. Бына беҙҙең "Әсәм теле"нә – тимер ҡоршау…

Ғәбсәләм. Тыйыл!

Ылауир *(кеҫәһенән ҡағыҙ сығарып).* Ҡәҙерле замандаштар, әле генә ғорур яңғыраған гүзәлдәрҙән-гүзәл шиғри зың дауам итә: бына мин фәҡирегеҙ ҙә, ялҡынлы йырҙар төйәгендә рухланып, әле генә бешкән икмәктәй мейестән сыҡҡан яңы шиғырымды уҡырға баҙнат итәм! *(Ҡул сабыуҙар).* "Илемдә илемде һағынам" тип атала ул:

Үҙ илемдә үҙ илемде һағынам!
Һағына-һағына һарғаям!
Ҡош Юлдарын күҙем менән байҡайым,
Океан төбөн уйым менән айҡайым –
Үҙ илемдә үҙ илемде тапмайым,
Тапмайым шул, тапмайым…

Үҙ илемдә үҙ илемде һағынам,
Хыялымдың сөмбөлөнә табынам.
Туҙан остоғондай ғына илемә:
"Һин бармы?" – тип табанымдан абынам,
Абынам шул, абынам…
Һағынам...

Киләсәктең киң ҡоласлы эпик поэмаһына кереш был!

Ғәбсәләм. Һеммм… Илемдә илемде һағынам, тиһең инде, ә? Һыҡтанып лаф ораһың, илар сиккә етәһең, әммә асыҡ әйтмәйһең. Һорау тыуа: бик боронғо, тирмәле башҡорт иленме? Ҡәһәр һуҡҡыр Зәки Вәлиди төҙөгән “Башҡорт йөмһүриәте”нме? Әллә юҡһа бөйөк Ленин-Сталин илен күңелкәйең үҙһенмәйме? Бәлки, әле генә ялҡынланып шиғыр уҡыған белгес иптәш үҙе әйтеп бирер? *(Шомло геүләү).*

Ылауир. Юҡ-юҡ! Мин ошо гүзәл илебеҙҙе – совет республикаһын үлеп һағынам!

Ғәбсәләм. Бәй, шунда бот-сатыңды киреп йәшәп ятып, шуны юҡһынаһыңмы? Башыңа тай типтеме?

Марат. Ярар инде, талант эйәһенә ул тиклем ҡаҙалма, кисерәйек бер юлға. Хәмер ене һуҡҡандыр. *(Көлөшөү).*

Ылауир. Ағай, еңгәй, йәмәғәт, ғәфү итегеҙ, мин бында артыҡ ҡала алмайым, бәғзе берәүҙәр барҙа! *(Елтерәп олаға).*

Ҡараһаҡал. Туғандар, йәш кешенең ялҡынлы ижадын кирегә һапламайыҡ. Шиғырҙың төп тотҡаһы – “Ураҡ менән Сүкеш”тәге кеүек үк: лирик герой, ҡайҙа ғына барһа ла, бөгөнгө совет илен, яҡын киләсәктәге яҡты коммунизм маяғын һарыларға һабышып нығ һағына, тиҙерәк шунда барып еткеһе килә. Шулаймы, Рәмил туған?

Рәмил көтмәгәндә сәсәп йүткеренә, Варя менән Сафия: “Шулай, шулай!” – тип йөпләй.

Марат. Шулайын шулайҙыр ҙа, былайы – былай бит әле: ошо гүзәл совет илендә хөрмәтлебеҙ йонсоп сәсәй ҙә сәсәй: тағы ла эш урынынан, балаларын аҫрар эш хаҡынан ҡолаҡ ҡаҡҡан… Һеҙ, Ураҡ-Сүкешле әһелдәр, шул хаҡта уйланығыҙмы?

Ҡараһаҡал. Күмәкләшеп уйлайыҡ. Хатта даһиҙар ҙа оло башын кесе итеп эйелгән, хатта йөгөнөкләп килгән мәлдәр була. Минеңсә, мәҫәлән, юбилярыбыҙ башын эйеп үҙенең оло ҡәләмдәшенә һәм етәксеһенә – Яҙыусылар берлеге рәйесе Карам Сахичҡа барһа, һис тә яҙыҡ булмаҫ ине. Эйелгән башты ҡылыс киҫмәй.

Сафия. Эйе шул.

Марат. Сафсаталы Сахичығыҙҙан эш сыҡмаҫ.

Ғәбсәләм. Әллә үҙе лә шайтанмы инде -- бер юлы ҡырҡ шайтанға яраҡлаша. Башҡорт теле бөтөп барған баш ҡалабыҙға башҡорт мәктәбе астыртыуҙы юллап яҙған ғаризаға ҡул ҡуйыуын һорап барғас, динһеҙ мәхәлләгә мәсет кәрәкмәй, тип ысҡындырҙы.

Ҡараһаҡал. Уныһы – икенсе мәсьәлә.

Марат. Мөхәммәтша Буранғолдо төрмәгә ултыртҡан бәндәнән ни көтәһең?

Ҡараһаҡал. Ғалим башығыҙ менән буталаһығыҙ: Буранғол партиябыҙҙың үҙәк комитеты ҡарары менән ғәҙел хөкөмгә тарттырылды, башҡорт совет әҙәбиәтен башҡорт милләтселеге менән өҙлөкһөҙ һөрһөткәне өсөн. Бигерәк тә “Урал батыр” уйҙырмаһы.

Марат. Иптәшкәй, һеҙ үҙегеҙ уйҙырма.

Ҡараһаҡал. Төп нөсхәһе ҡайҙа? – Юҡ. Тимәк, уйҙырма -- шишка на ровном месте!

Марат. Посмотрим. Ағай-эне, оҙаҡламай ғилми экспедицияға сығабыҙ: Урал артында “Урал батыр”ҙың Мөхәмматша Буранғолов ҡулы менән күсереп яҙылған төп нөсхәһе һаҡлана!

Ҡараһаҡал. Адресы?

Марат. Адресы – сер.

Ҡараһаҡал. Сер. *(Ҡабалан сығып китә).*

Ғәбсәләм. Артыңа ҡарама көлө!

Рәмил. Ай-һай, уҙамандар, тартай теленән табыр, тип, әсе телләнәһегеҙ…

Ғәбсәләм. Әсеһе үҙәккә үтте шул. Башҡорт мәктәбе асыуҙарын һорап йөҙ ҙә ҡырҡ дүрт граждан ҡул ҡуйған ғаризаға – ноль һөҙөмтә.

Марат. Уның ҡарауы Ахунйәр Исаев иптәш эттән алып-эткә һалып сығарҙы: үҙ балаларығыҙҙы унда бирмәйәсәкһегеҙ, провакаторҙар һеҙ! – тип ажғырҙы.

Рәмил. Эш ниҙә? Беҙҙәр ҙә ажғырайыҡ!

Йыһан. Иртәгәнән мәктәп йәшендәге балаларыбыҙҙың исемлеген төҙөп тапшырайыҡ. Улымды мин мотлаҡ шул мәктәпкә бирәм.

Йәмәғәт: -- Бөтәбеҙ ҙә бирәбеҙ!

Ғәбсәләм. Дөрөҫ! Башҡорт мәктәбен астыртмайынса туҡтау юҡ!

Йәмәғәт: -- Туҡтау юҡ!

Варя. Уңыш өсөн, уҙамандар! *(Баҫып тороп тост күтәрәләр).*

Ых-бых итеп хәле бөтөп Ҡасим килеп инә, өҫтө-башы таушалған, ирендәре һәленгән.

Марат. Әргендек, ниңә яман ыхылдайһың, артыңдан ҡара күләгәң баҫтырамы?

Ҡасим. Уф, Ҡараһаҡал… Трамвайҙан төшөүемә яғанан эләктерҙе. Кабинетына һөйрәкләргә маташа, саҡ ысҡынып ҡотолдом. Еңгәй, ҡойоп бир!

Варя. Ҡойор инем дә, ҡояҡайым пустой шул...

Ғәбсәләм. Айныҭҡысхананан сыҡтыңмы?

Ҡасим. Шунан шул. Сыҡҡаным һайын, яғанан ала, Ғайнар ағай өҫтөнән компромат әҙерләй. *(Өҫтәлгә өңөрөлөп, шешәләрҙең төбөндәге тамсыларҙы бер рюмкаға бушата ла ауыҙына түңкәрә).* Ах, етмәне! Еңгәй, бер тәңкә генә биреп тор, иртәгә үк ҡайтарырмын.

Варя. И Ҡасим-Ҡасимушка, һинән ҡайтҡаны бармы… төпһөҙ ҡойонан. *(Джемпер кеҫәһендәге конверттан алып бирә).*

Ҡасим. Мең рәхмәт, ғүмергә онотмамын! *(Сығып китә).*

Сафия. Әхирәткәйем, килгән берәүгә һуңғы һумыңды бүлеп бирергә әҙерһең.

Варя. Талант эйәһе бит… ни хәл итәйем…

Рәмил. Шиғриәтебеҙ донъя кимәленә сығырға лайыҡлы, тип һөйләйбеҙ, ләкин туранан-тура тәржемәселәребеҙ етешмәй; был азамат иһә ике телдә лә һыу һымаҡ эсә.

Ғәбсәләм. Әсене самаһыҙыраҡ эсә шул.

Марат. Эпосыбыҙҙың финалын урыҫсаға тәржемәләргә биргәйнем, Урал батыр монологындағы “Яҡшылыҡ булһын атығыҙ” (йәғни исем-ләҡәбегеҙ) тигәнде ул, баяғы әселе күҙҙәрен асып та ҡарамай, “Пусть станет добро лишь вашим конем” тип ауҙарған, шаҡшыйән!

Ғәбсәләм. Компромат, ти бит әле… Ғайнар ағайҙың да башы өҫтөндә ҡара болоттар ҡуйыра…

Рәмил. Донъя – кәкре мөрйә…

Йыһан. Мөрйәһе кәкре булһа ла, төтөнө тура сыға.

Варя Рәмил шиғырына композитор Рафиҡ Сәлмәнов яҙған көйгә “Минең йондоҙом”до башлай, бөтәһе лә ҡушыла:

Ғүмерем буйы мин бит яңғыҙым,
Эҙләйем һине, якты йондоҙом.
Юғалдың ҡайҙарҙа?
Юл алдың ҡайҙарға?
Һинһеҙ, йондоҙом, юлым бик оҙон…

Ниңәлер күпте көтә күңелем,
Көткәнгә микән күпте киң илем?
Дауыллы йылдарҙа,
Бормалы юлдарҙа
Мин еңел йөклө булмам, һөйөклөм!

Саҡыра тағы алыҫ юлдарым
Юлдашым минең – йөрәк моңдарым.
Тынғыһыҙ көндәрҙә,
Йондоҙһоҙ төндәрҙә
Күрсе мин барын, яҡтырт юлдарым!

**ШАРШАУ**

# ИКЕНСЕ ШАРШАУ

## Икенсе сәхнә

Баяғыса, шағир Рәмил фатиры.

Варя. Ғаилә башлығым балаларҙы детсадҡа илтә китте, хужабикәһе бында, башы ҡатып, эшенә ҡабалана, ә көшәлектә – һуҡыр тин, кухняла һыныҡ икмәк… *(башын ҡушуслап)* нишләргә, нишләргә?!. *(Үрле-ҡырлы йөрөнә).* Көн артынан көн

уҙа, өҫ-баш та иҙерәп туҙа… фатир өсөн утҡа-һыуға түләп торор әмәл юҡ… *(Ярһып).* Шағир, шағир! Илгә билдәле шағир! Башҡортом, тип, алйып йөрөп, тағы эшһеҙ ултыра!.. Нисәнсе тапҡыр инде… ҡыуыла ла ҡыуыла… *(Ишек ҡыңғырауы ҡыңғырлай).* Инегеҙ, асыҡ! Заходите, әгәр башҡорт булмаһағыҙ.

Папка тотҡан Мыйыҡлы-әзмәүер керә.

Мыйыҡлы. Здрасте, беләһегеҙҙер – йорттар идаралығынан *(алан-йолан ҡарана).*

Варя. Белмәгән бармы инде, һеҙҙең кеүек аҫылды.

Мыйыҡлы. Үҙе ҡайҙа?

Варя. Кем?

Мыйыҡлы. Фатир хужаһы йәғни ирегеҙ.

Варя. Балаларҙы детсадҡа алып китте.

Мыйыҡлы. Һеммм… үҙегеҙ генә икән *(бүлмәләрҙе, туалет-ванналарҙы йөрөп ҡарана).*

Варя. Ниңә таң тишегенән? Темеҫкенәһегеҙ…

Мыйыҡлы. Күршеләрегеҙҙән жалыу бар: иҙәндәре, шығырлап, йоҡларға бирмәй, кухня-туалеттарын таҙа тотмай – тараҡан үрсетә, тип.

Варя. Абау… ниндәй тараҡан, ти ул?! Күреп тораһығыҙ бит.

Мыйыҡлы. Дөрөҫ, таҙалыҡ бар. Әммә иҙән буяуҙарығыҙ ҡупҡан, стенағыҙ һарғайған, түшәмегеҙҙән штукатурка ҡойола, унитазығыҙ сатнаҡ, ваннағыҙҙың эмале ҡалмаған – капиталь ремонт үткәреү талап ителә.

Варя. Үткәрегеҙ. Дәүләт йорто һеҙҙең ҡарамаҡта бит.

Мыйыҡлы. Капиталь ремонт теүәл егерме ике йылдан һуң ғына положено, һеҙҙекенә ун биш йыл да тулмаған.

Варя. Нишләргә?

Мыйыҡлы. Үҙегеҙҙең иҫәптән. Йәғни ҙә ки материал хаҡын, эш хаҡын кеҫәгеҙҙән сығарып түләйһегеҙ.

Варя. Ни саҡлым?

Мыйыҡлы. Өс нолле һан, кәмендә.

Варя. Унына хәл етмәҫ.

Мыйыҡлы. Ә иначе – выжт! – фатирҙан.

Варя. Бер түгел өс бала менән, һикһән ете тәңкә эш хаҡым менән – не имеете право!

Мыйыҡлы. Имеем, имеем, матурҡай. Закон бар. Өс ай буйына фатирға, утҡа-һыуға-газға түләмәйһегеҙ, пеняһы тауҙай артҡан, мәгеҙ! *(Өҫтәлгә бер өйөм ҡағыҙ һала).* Ун бишенсе числоға тиклем түләп өлгөрмәһәгеҙ, үҙегеҙгә ҡарап үпкәләрһегеҙ.

Варя *(башын ҡушуслап).* Боже мой, нишләйем һуң, нишләйем?!

Мыйыҡлы. Был эштә боже-може юҡ, әммә бурысты сигертеп торорға була, ыңғайыма килһәгеҙ.

Варя. Әйтегеҙ, һуң!

Мыйыҡлы. Һеҙҙең һымаҡ мәрйәләрҙе яратам *(ҡосаҡларға итә, Варя уның сикәһенә сабып ебәрә).*

Варя. Тараҡан! Вон отсюда! *(Буш шешәне алып).* Башығыҙҙы емерәм! *(Мыйыҡла йәһәт олаға, артынан шешә оса).* Подлец!

Рәмил һәлмәк муҡсай тотоп ҡайтып инә.

Рәмил. Варенька, ниңә ишек шар-асыҡ? Бынауы ниңә аунап ята? *(Шешәне плинтус буйына торғоҙоп ултырта).* Детсадтан ҡайтышлай юл уңды: бер дюжина шешә һатып, ашарға алып ҡайттым *(берәм-берәм өҫтәлгә ҡуя).* Бына сәйлек һөт, бына бүкәнкәй икмәк, бына…

Варя *(һулҡылдауын баҫа алмай).* Бүкәнкә түгел – буханка.

Рәмил. Юҡ, бүкәнкәй, сөнки ул башҡорттоҡо. Башҡорт ҡамырҙы бүкәнләп мейескә һалған, шуға күрә бүкәнкәй тип аталған. Йыһан дуҫыбыҙҙан һора.

Варя. Эй раббым, башҡортом да башҡортом… Бүкәнкәйҙе буш шешә йыйнап йөрөп кенә ашарға ҡалды инде…

Рәмил. Ҡайғырма, Варенькам, башҡорт башым һау саҡта аҫка үлмәбеҙ *(Аҙыҡтарҙы кухняға илтеп килә).* Сәй бешереп, Мәскәүҙәге студент саҡтарҙағылай һайрашып ултырырбыҙ.

Варя. Сәй алып ҡайттыңмы һуң?

Рәмил. Һеммм… йәйгеһен ауылдан ҡайтарған мәтрүшкә…

Варя. Мәтрүшкәне ҡорһаҡ тигән матрешкаға бикләп ҡуйҙыҡ бит инде.

Рәмил. Һеммм… *(Өҫтәлдәге ҡағыҙ өйөмөн алып).* Былары нимә тағы?

Варя. Башҡортлоғоң ҡоһоро... Ноль бөтөн рубль зарплата, мең бөтөн мең рубль квартплата. Пенялары ла арҡан.

Рәмил *(ҡағыҙҙарҙы өҫтәл япмаһы аҫтына ҡыҫтыра).* Түләрбеҙ. Китабым ғына сыҡһын. Гонорар алһам…

Варя. Көтә-көтә гонорарың гонорреяға әйләнде… Китап нәшриәте директорың…

Рәмил. Карам Сахичҡа барырмын.

Варя. И сабыййән башҡортом, аҫтан киҫеүсеңә ышанаһыңмы? Үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле, тип, нәшриәт планынан һыҙҙырҡан һине.

Рәмил. Булмаҫ!

Варя. Әхирәтем әйтте, директорҙың ҡатыны. Башҡортмон тип текә баҫып йөрөйһөң… муйныңды ла бороpҙар.

Рәмил. Минең муйын ныҡ.

Варя. Институтта һүҙ йөрөй: яңы баҫмала "Башҡорт теле һүҙлеге"нән "башҡорт" тигән һүҙҙе алып ташлаясаҡтар. Һәр башҡорттоң паспортындағы "милләте" тигән графаға "рус" тип шаҡыраятасаҡтар…

Рәмил. Уныһына тиклем барып етмәҫтәр, Хоҙай бар.

Варя. Йәшел йорт бында хоҙай! Так что, башҡортом, башҡа сара ҡалманы: КГБ-шник әйтмешләй, ғорур башыңды түбәнселекле эйергә тура килер.

Рәмил. Эйелмәм, башымды ҡыйһалар ҙа!

Варя. Шулаймы? Мин эйелергә тейешме?!

Рәмил *(ҡосаҡларға итә).* Варенькам...

Варя. Кит! Эшемә ашығам! *(Китә).*

Рәмил өҫтәл ҡырына ултыра, тәмәкеһен туҡтауһыҙ бороҙдата. Ҡыңғырау ҡыңғырлағас, барып ишек аса. Һәлмәк кенә сөмкәй тотҡан Йыһан инә.

Рәмил. Кешеме, тиһәм, һин икән дә, ҡарт, Сәғит ағайым әйтмешләй.

Йыһан. Фу! Балта аҫырлыҡ. Ташла шул тәмәкеңде!

Рәмил. Ташламайым! Тартыуым – тартыу, эсеүем – эсеү, башҡа шатлыҡ ҡалманы миңә. Ярай, һинең Сафияң бар.

Йыһан. София саҡ ҡына күстәнәс һалды: әсмүхә цейлон сәйе, гәрәбәләй һап-һары тары ярмаһы. Ауылдан ҡустыһы килгәйне, үҙе ярма ярҙырҙҡан. Варя эштәлер инде, кухняғыҙға индереп бушатайым.

Рәмил. Минең сәйгүн борҡорап йырлай унда – Сафияның цейлонскийы мас килер. *(Китеп, сәйле сәйгүн, сынаяҡтар, икмәк тотоп сығалар, табын ҡорола).*

Рәмил *(һемереп).* Их, Сафия һылыуымдың цейлонскийы! Һиңә рәхәт ул, ҡарт!

Йыһан. Бер ҙә рәхәт түгел әле.

Рәмил. Журналдамы?

Йыһан. Главлит цензураһы ғына етмәгән, корректура обкомдың еҙ иләгенән үткәрелә, күп урындар һыҙып ташлана. "Башҡорт" тигән һүҙ журнал буйынса иң күбе биш тапҡыр ғына ҡабатланыырға тейеш. "Ҡурай", "башҡорт ҡурайы" тигәнде лә ҡыҫҡартып, боронғолоҡто тасуирлаған әҙәби әҫәрҙәрҙә һәм музыка сәнғәте тураһындағы мәҡәләләрҙә генә ҡалдырырға ҡушалар.

Рәмил. Килде ҡиәмәт...

Йыһан. Үҙең әйткән ахун таяғы реакцияһы.

Рәмил. Һин генә булһа ла, бирешмә, ҡарт. Эшең бар, ашың бар – шуларынан ҡолаҡ ҡаҡма. Бына мин, башымды ташҡа һуғып, өй көбәгә хәлендә алйып ултырам. Ҡайҙа ғына барма, кире бороп сығаралар: совет илендә эшһеҙлек юҡ – грузчик булып яллан, урам һепер, тиҙәр... Профессиям буйынса юлдар ябыҡ.

Йыһан. Ижад...

Рәмил. Кемгә хәжәт беҙҙең ижад?! Редакциялар шиғырҙарымды алмай, нәшриәттә китабым ҡаҡланып ята... Бөгөн нисәһе әле? Айлыҡ эш хаҡыңды алғанһыңдыр, ҡарт.

Йыһан. Бер юлы ике айлыҡ буш хаҡы тотторҙолар...

Рәмил. Буштың атаһы үлгән, тиҙәр түгелме?

Йыһан. Түгел шул. Мәскәүҙә һин уҡыған институттан бер студент ике айлыҡ практикаға ҡайтҡан. Шуға урын кәрәк һылтауы менән ваҡытлыса бушаттылар.

Рәмил. Һинең ауыҙҙан йолоп алмайынса ла була ине бит инде.

Йыһан. Баш редакторым, кабинетына саҡырып алып: "Быныһы – цветочки, ягодкаһы ла өлгөрөр, Рәмил арбаһында йырлап йөрөһәң!" – тип оҙатты.

Рәмил. Бер үк балыҡ башы... ҡаңғыра шағир башы...

Йыһан. Шағир рухын башҡорт ҡурайына тиңләп рецензиям сыҡҡайны бит, беләһең. Үҙеңә мәғлүм олпат әһел, обком ҡушыуы буйынса, ҡамсылы мәҡәлә яҙған, баш редактор ҡәләме оҙатыуында журналда сығып килә. Йыһандың хата фекерҙәренә юл асып, редакция яңылышты, икенселәй ундайға юл ҡуйылмаç, тип "тәрән үкенес белдерелгән". Ошонан һуң миңә ҡайҙа барырға?

Рәмил. Китабың?

Йыһан. Үҙемде һиңә тиңләмәйем, әммә быныһы ла хәс тә һинекеләй...

Рәмил. Гел генә былай булмаç, беҙҙең урамға ла байрам килер. *(Ут һүнә).*

## Өсөнсө сәхнә.

Партия өлкә комитеты секретары иптәш Ахунйәр Исаев кабинеты, яҙыу өçтәленә "Т" хәоефләп теркәлгән буй өçтәл, ҡырыйҙараҡ ҙур экранлы телевизор. Ахунйәр яҙышып ултыра. Эске телефон шылтырай.

Ахунйәр. Килдеме?

Аппараттан: -- Килде, Ахунйәр Исаевич.

Ахунйәр. Керсен. *(Өçтәл аçтынан гармун үрелеп алып, "Әпипә"не һыҙҙыра, башын баçып мауыгып уйнай).*

Йыһан *(инеп, аçәрләнеп тыңлап тора).* Һаумыһығыҙ, Ахунйәр Исаевич.

Ахунйәр *(уйнауын өҙөп, башын ҡалҡытып).* Шәп уйныйыммы?

Йыһан. Шәп, Ахунйәр Исаевич.

Ахунйәр. Әйдә, чүгәләгез. Тағын берне сыздырыйым, булмаса *(дәртләнеп тысҡылдата).* Беләсезме, нинди көй бу?

Йыһан. Беләм.

Ахунйәр. Белмисез. Бу – фронт көйе. Волгадан нәҡ Эльбағача шул көйне тартып бардыҡ. Ә бу нәрсә?

Йыһан. Тальянка.

Ахунйәр. Сугубо милли булуы берлә чын интернациональ инструмент бу тальянка! Ә сез ҡурай да ҡурай дисез. Шулаймы?

Йыһан. Шулайҙыр. Сөнки ҡурай башҡорттоң тәрән йөрәк хистәрен ағылдырыҡыс серле ҡорал, мәңгелек милли ҡорал. Ул да башҡорт һуғышсыларын Сталинградтан Берлинғаса рухландырып оҙатҡан.

Ахунйәр. Әммә тальянкаға житми барыбер. Әйтик, ҡурайны бүген кем ғыжылдата? Теше төшкән бабайлар ғына, йәш буын уйлап та бирми. Ауылларға бар: халыҡ нәрсәдә уйный? Тальянкада! Искерде ҡурайығыз. Бүген аны тальянка алмаштыра. Чын-чыннан милли музыка ҡоралыбыз тальянка!

Йыһан. Татарҙыҡы.

Ахунйәр. Нинди "татарныҡы" ул тағын?! Татар ни, башҡырт ни – один черт. Берүк телдә сүләшәбез, берүк жырны жырлыйбыз.

Йыһан. Берүк һымаҡ булһа ла, һәр кемдең үҙенеке.

Ахунйәр *(гармунын өçтәлгә ҡуйып).* Нигә сез, Ырынбурдан бу тарафҡа юлығып, үзегезчә жырлатырға маташасыз? Урыс ағайлар әйтмешли, чит монастырға үз уставығызны өстөрәп керәсез?

Йыһан. Сит түгел – үҙебеҙҙең Башҡортостан. Оло Башҡортостаныбыҙ.

Ахунйәр. Чиләбедән килгән сезнең кебек үк ҡара башҡырт Ылауир туған ни дисәң шуны үти, аттай жигелеп тарта, яхшы атҡа соло да мул.

Йыһан. Һәр кемдең үҙ һолоһо, әгәр намыçлы булһа.

Ахунйәр. Ялғышасыз! Барыбызда бер намус – ленинчыл совет намусы! Ник өндәшмисез?

Йыһан. Уйланам, Ахунйәр Исаевич.

Ахунйәр. Шулай диң! Айн момент! *(Төпкө бүлмәгә китеп, шешә, ике бокал эләктереп сыга).* Партия ағзасымы әле сез? Партбилетығыз кесәдәме?

Йыһан. Кеçәлә.

Ахунйәр *(бокалдарга һалып).* Дусларча предупреждаю: Рәмил кеби эчкечеләргә уҡмашып йөрөүегезне өзмәсәгез, партбилетығыздан язарсыз.

Йыһан. Рәмил минең ҡорҙаш, дуç, фекерҙәш.

Ахунйәр. Тем более. Фикерегез килешми. Башҡырт та башҡырт дисез, ҡурай дисез. Ә безнең республикада йөз илле милләт яши, барсы да гармун уйный. Совет иленең интернациональ музыка ҡоралы бу тальянка! Һәм ул ярыҡ ҡурайны алмаштыра! Алмаштырды! Шушы йылдан башлап, республикада йыл сайын бөтөнхалыҡ тальян бәйрәме гөрләтеп уздырылачаҡ. Беләсезме шуны?

Йыһан. Белмәйем.

Ахунйәр. Белмәсәгез белегез. Белергә теләмәсәгез – белгертербез! Партбилетығыз кесәдә ҡалсын, дисәгез, мона шуны язып чығығыз! Тальянка – барчабызның мили музыка ҡоралы, дип.

Йыһан. Ахунйәр Исаевич, сетерекле мәсьәлә.

Ахунйәр. Шуңарға да сезгә ышанып тапшырам.

Йыһан. Минең хәлдән килмәç. Һеҙ үҙегеҙ – республиканың иң талантлы ҡәләме, бөтәбеҙҙе шаҡ-ҡатырып үҙегеҙ яҙырға тейеш.

Ахунйәр. Шыйғаҡлыйсыз! Күтәрдек! *(Сәкәштереп эсәләр).* Йә, ничек? Затлымы?

Йыһан. Затлының да затлыһы икән, Ахунйәр Исаевич. Табандарғаса йүгерҙе.

Ахунйәр. Шулай диң. Алам-саламны ҡапмый ул Исаич ағайың. Сезнең кебек, дим. *(Шешәне, бокалдарҙы өçтәл аçтына йәшерә).* Эчкәндә дә чамасын белергә кирәк. Һәм дә кем берлән эчәргә ярағанын. Мона мин сезне читтән генә күзәтеп йөрим, хөрмәт итәм. Ауыл баласына хас тыңлаулы, тыйнаҡ булғанығыз өчен. Һич шиксез талантлы шағир булғанығыз өчен. Мона, мәсәлән, шул шиғриәт донъясында нигә Рәмил – беренче, ә шундый уҡ юғары талант иәләре Аланбай, Ылауир һәм Йыһан икенче, хәтта өченче сыман саналып йөри?

Йыһан. Сөнки ысынлап та шулай: Рәмил ҡорҙашым бөгөнгө башҡорт шиғриәте күгендәге беренсе дәүмәл яҡты йондоҙ.

Ахунйәр. Хәтта Карам Сахич та тонығыраҡмы?

Йыһан. Ул да йондоҙ, ләкин күп йәһәттән тоноғораҡ. Рәмил йондоҙо сағыу һәм ул мәңге шулай булып ҡаласаҡ!

Ахунйәр *(өҫтәл һуғып).* Ҡалдырмибыз! Сөрсөп бөткән милләтче! Сез, партия билетлы коммунист, Рәмил заразасыннан жәйелгән милләтчелекне мәтбағада фашлап чығарға тиеш!

Йыһан. Унынһы булмаҫ, Ахунйәр Исаевич.

Ахунйәр. Алайса, сез үзегез милләтче! Милләтчелек төркөменә уҡмашып, баш ҡалада милләтчел башҡырт мәктәбе ачтыртырға дип жиң сызғанып йөрисез, беренче секретарь исеменә коллектив шикайәтнамә ойыштырып, ҡул ҡуйғансыз.

Йыһан. Ғаризаға, -- шикәйәтнамәгә түгел. Милләтселәр ҙә түгел беҙ.

Ахунйәр. Беләбез! Һәм ни эшләтергә дә белербез – минең ҡулға ҡаптығыз! Ҡалабызда йөзәрләгән мәктәп бар, ишекләре шар-ачыҡ – тағын ни кирәк сезгә?

Йыһан. Мин улымды башҡорт мәктәбендә уҡытырға теләйем.

Ахунйәр. Теләсәгез, Ырынбурығызға ҡайтып китегез, шунда уҡытығыз.

Йыһан. Бында ла совет власы.

Ахунйәр. Дөп-дөрес, нәҡ сезнең Ырынбурдағы кебек үк. Мона тыңлағыз *(телефондан һөйләшә).* Алло, Ырынбурмы?

Ырымбурҙан. Тыңлыйым, Оренбург өлкә мәғариф бүлегенең мили мәктәпләр буенча инспекторы Тәржеманов.

Ахунйәр. Тәржеманов иптәш, бездә сезнең данлы өлкәдән үсеп чыҡкан күренекле әдип Йыһан эшли, шуны беләсезме?

Тәржеманов. Беләбез һәм чиксез ғорурланабыз.

Ахунйәр. Аның туған ауылында нинди мәктәп, ҡайсы телдә уҡытыла?

Тәржеманов. Сигез еллыҡ башҡырт мәктәбе иде, дәреслекләр, уҡу-уҡыту әсбаблары житешмәү сәбәпле, ата-аналар жыйылышы ҡарары нигезендә буйылдан башлап бөек рус телендә уҡытуға күчерелде.

Ахунйәр. Аңлашылды, рәхмәт. Хушығыз.

Тәржеманов. Хушығыз.

Ахунйәр *(Йыһанга).* Ишеттегезме? Улығызны мона шунда алып ҡайтып уҡытығыз.

Йыһан. Провакация был!

Ахунйәр. Хәлбуки соңғы сүзегезме?

Йыһан. Һуңғы һүҙем.

Ахунйәр. Соңғы көнегез булмағайы! Китегез!

Йыһан китә, Ахунйәр кнопкаға баҫа. Аппараттан Клараның тауышы: «Тыңлайым, Ахунйәр Исаевич».

Ахунйәр. Керегез. *(Клара инә).*

Клара. Тыңлайым, Ахунйәр Исаевич.

Ахунйәр. Шушы Йыһан дигәннәре журналда эшлиме әле?

Клара. Әлегә юҡ. Үҙегеҙгә мәғлүм: ике айлыҡ түләүһеҙ ялға ебәрелде.

Ахунйәр. Ике айлыҡ ялын чиксез ясағыз – арытабан редакцияларға аяҡ басмасын.

Клара. Ахунйәр Исаевич, өс балаһы, һикһән йәшлек әсәһе...

Ахунйәр. Тем более, арт сабағын уҡытығыҙ. Ауылдан килгән көтөүче генә башы берлән партиядан өстен булырға исәпли. Үтәгез!

Клара китә, Ғайнар инә. Ахунйәр тороп, ҡаршы алып күрешә, ултырышалар.

Ғайнар. Саҡыртканһығыҙ икән. Ҡабалан ғына килдем, врачҡа күренәһем бар.

Ахунйәр. Боевой солдатҡа ни булған? Сталинград тамуғыннан бирешми ҡайтканығызны.

Ғайнар. Күҙҙәрем томанланды, операцияға, тиҙәр.

Ахунйәр. Бәс, сезнең ише очлы күзгә эш харап. Әвәлгедәй, йәш-елкенчәк ижадына күз саласызмы соң?

Ғайнар. Һалғылайым... гонаһлымын.

Ахунйәр. Йәшләрнең ярлыҡаучысы, дип маҡтыйлар – кемнең кемлеген үтәдән күрә, диләр.

Ғайнар. Булғылай.

Ахунйәр. Заманында йәп-йәш кенә шағир Карам Сахичҡа да: «Күр дә тор, үзең тере чағыңда уҡ башҡырт шиғриәтенең тере классигы булачаҡсың» -- дип әйткәнсез.

Ғайнар. Булды ул хәл.

Ахунйәр. Һәм мона күз алдыбызда шул Карам Сахич – халыҡ шағиры, тере классик.

Ғайнар. Был да хаҡ.

Ахунйәр. Анауы Рәмил дигәнне дә чебеш кенә чағыннан уҡ күз алдында тотҡансыз, шиғриәтен хәстәрләп үстергәнсез.

Ғайнар. Йәштән үк балҡыш ине.

Ахунйәр. Хәзерен ничек уйлыйсыз, баһалисыз?

Ғайнар. Бик юғары баһалайым.

Ахунйәр. «Әсәм теле» дигән шыр-тиле, идеясыз шиғырыннан соң дамы?

Ғайнар. Әсәм теле – тәрән идеялы шиғыр. Халыҡтың әсә теле барҙа халыҡ йәшәй, дәүләт йәшәй, тигән һүҙ.

Ахунйәр. «Халыҡ, халыҡ»... Нинди халыҡ?

Ғайнар. Ысын башҡорт шағиры яҙған икән – башҡорт халҡы, тип уйлайыҡ.

Ахунйәр. Мона-мона – башҡырт милләтчелеге!

Ғайнар. Унда башҡорт тип әйтелмәгән, ғөмүмән әсә теле, тиелгән.

Ахунйәр. Әммә зәһәр тел төбе халыҡны боларта, бигерәк тә баш ҡаланың юғары уҡу йортлары студентларын. КГБ-дан сигнал бар: «Тел менән Ҡурай» дигән ойышма төзәргә үҗәтләнгәннәр.

Ғайнар. Ахунйәр Исаевич, йөйһөҙ ерҙән йөй һәрмәп, халҡыбыҙҙың теңкәһенә теймәйек!

Ахунйәр. Бездә бер генә халыҡ – совет халҡы ғына бар. Киләчәктә барысы да бер телдә – бөйөк рус телендә генә сөйләшәчәк, дип, партиябыз программасына язылған!

Ғайнар. Ә ул киләсәктең ҡасан киллере әйтелмәгән. Бәлки – йөҙ, бәлки – мең йылдан һуң ғына беҙҙе бәхетле итер ул киләсәк.

Ахунйәр. Ярый, фәлсәфәгә салышмыйыҡ. Чын фронтовик-коммунистан ишетмәдем бу сүзне.

Ғайнар. Биғәйбә.

Ахунйәр. Димәк, ул Рәмилне, жил-яңғырға тидертмичә, ҡуйында ҡалдырыйыҡмы?

Ғайнар. Бөйөк шағирҙы эт типкеһендә йөрөтөүҙән туҡтайыҡ, лайыҡлы эш бирәйек, интектермәйек.

Ахунйәр. Хай-хай, «бөйөк»кә дә барып життек!

Ғайнар. Эйе, бөйөк. Ауыҙымды тултырып әйтә алам.

Ахунйәр. Хуп-мәйле, үзбәк дуслар әйтмешли. Рәмилнең сыңары Йыһанға нинди баһа?

Ғайнар. Йыһан – әүәлге хәрби моряк, ә хәрби моряктарҙы мин дәһшәтле заманда Сталинград окоптарында күрҙем. Улар һатмай, намыҫын аяҡ аҫтына һалып тапамай.

Ахунйәр. Анысы ярый. Ләкин нинди шағир ул?

Ғайнар. Минең өсөн шағир Йыһан – йыһандағы асылып етмәгән яҡты йондоҙ. Бәлки, уны оҙаҡ-оҙаҡ асырҙар, ләкин ул балҡыясаҡ! *(Тора).* Ғәфү итегеҙ, дауаханаға ашығам, инде кәрәгем бөттөмө?

Ахунйәр. Бөтте. Рәхмәт.

Ғайнар. Биғәйбә. *(Китә).*

Клара менән Варя инә.

Варя. Иҫәнмеһегеҙ, Ахунйәр Исаевич, ҡабул ҡылғанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт.

Ахунйәр *(тороп).* А как же, Рәмил кеби зур шағирның супругасын ҡабул ҡылмаска... Рәхим итеп ултырышығыз, тыңлим.

Варя. Ахунйәр Исаевич, һуңғы сиккә терәлдек: миңә, балаларыма, балаларымдың атаһына ятып үлергә ҡалды.

Ахунйәр. Варвара Васильевна, алай уҡ димәгезче.

Варя. Ниңә шағир Рәмилде эҙәрләйһегеҙ, эшләр эш бирмәйһегеҙ?

Ахунйәр. Турысын әйтеп сүләшикме? Чөнки ул шундый шиғырләр яза, алардан безнеке түгел, советларныҡы түгел, чит-зәһәр аһәң аңки. Үткән заманнарны сағынып әрнү, шуларны кире ҡайтару... Совет власына ҡаршы өнди ул!

Варя. Урыҫ әҙибе Черкасов үткәндәрҙе, декабристар заманын һағынып яҙҙы, шул «Хмель» романын ирем менән бергә мауығып уҡыйбыҙ, бер кем дә уны советтарға ҡаршы тип баһаламай.

Ахунйәр. Клара Тәхәүовна...

Клара. Хәләл ефетеңде әйтәм, ниңә донъяны ул башҡаса – йәғни бына минең һымаҡ итеп күрмәй, гел үҙенең кәкре тырмаһын һөйрәй? Бына мин дә, мәҫәлән, ике вуз тамамланым, комсомолда, хәҙерге заман мөхитендә тәрбиәләндем...

Варя. Рәмил донъяны үҙ күҙе менән күрә, һеҙ күргәнде ул күрмәй. Сөнки ул – Рәмил, Шағир. Уның менән бергә йәшәгәнгә теүәл ун һигеҙ йыл тулды. Шуның һигеҙен сит тупһаларҙы тапап үткәрҙек, беҙ күргәндәрҙе дуҫтарыбыҙ ғына белә... Ниһәйәт, сикһеҙ ауырлыҡтар аша егерме алты квадрат метр алдыҡ – бер түгел биш кешегә шулмы ғәҙеллек?. Яҙыусылар берлегендәге ҡайһы бер «дуҫыбыҙ», Рәмилгә фатир бирмәҫкә кәрәк ине, тип сафсаталай, ә үҙе өс тапҡыр фатир алып өлгөрҙө. Иң талантлы шағир булғаны өсөнмө?! Рәмил теләнеп йөрөмәй, һорана белмәй. Сөнки ул – Рәмил.

Ахунйәр. Маладис. Мин дә шулай итәр идем.

Варя. Шиғриәт өсөн ул йәнен бирә.

Ахунйәр. Беләбез. Без аның безнең берлән тығыз бәйләнештә эшләүен, тирә-яғындағы яҡлы чынбарлыҡны чамалап, безгә кирәклене генә языуын телибез. Мин үзем аны талантлы шағир дип беләм, әгәр шулай булмаса, сүләшеп тә ултырмас идек.

Варя. Шағир ниңә интегә – килер бер рубле лә юҡ.

Ахунйәр. Дөрөсен генә әйткәндә, без аны үзебезнең яҡка аударырға телибез, шуңа күрә рубль берлән түбәлибез. Әгәр ыңғайға килмәсә, нәшриәттән алған биш йөз сум авансасын да кире ҡайыртырбыз.

Варя. Беҙҙең өсөн үлем приговоры булыр ине был.

Ахунйәр *(Кларага).* Дәвамлағыз.

Клара. Ниңә ул һаман мөкиббән китеп тик үҙенекен, башҡортто̆кон ғына йырлай? Хатта балаларығыҙҙы ла башҡорт төркөмөнә биргәнһегеҙ. Ниңә?

Варя. Бәйләнмәгеҙ! Балалары атаһының телен белергә тейеш!

Ахунйәр. Рәмилнең мин биографиясын тикшердем, анда башҡыртлыҡ бик аз. Шунсы ныҡ аптырата. Язсын иде ул татарча – булыр иде башҡача!

Варя. Ул бит Аланбай түгел, ә Рәмил.

Ахунйәр. Аланбай, гәрчә документлары буйынча башҡырт булса да, тәртипле жан – чиста татарча яза.

Варя. Ахунйәр Исаевич, ғәфү итегеҙ, ниңә татар телендә яҙған – маҡтаулы, ә башҡорт телендә яҙған – ҡарғаулы? Ҡағытаһығыҙ.

Ахунйәр. Ҡағытмыйбыз, -- яҡлыйбыз. Интернационалист булыр иде, ичмасам, дибез. Нәҡ Аланбай кебек.

Варя. Балаларыбыҙ хаҡына кисерегеҙ... Эшләү, нәшер ителеү мөмкинлеге бирегеҙ... *(Үкһей).*

Клара. Булды-булды, Варвара Васильевна! Әйҙәгеҙ, үҙем оҙатып ҡуям. Бөтәһе лә яҡшы булыр. Рәмилегеҙгә һеңдерегеҙ: партиябыҙ һыҙған тура юлдан ғына атлаһын.

**ШАРШАУ**

# ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

## Дүртенсе сәхнә

Фатирҙарында Рәмил менән Варя, икеһе лә шат: шағир телестудияға барырға йыйына.

Варя. Телевизорҙан күренергә бараһың, өҫ-башың әҙәм ҡарағыһыҙ. Ун йыл буйы – терһәктәре иҙерәгән бер пиджак. Мә, мингең свитерҙы кей – өр-яңы булмаһа ла, экрандан күҙ буярлыҡ *(өҫтөнән һалып бирә, тегеһе йәһәт кейә).* Галстук та бәйләйек – бөтөнләй күркәмләндең. Ахунйәр Исаевич яҡты йөҙ күрһәтте – шул арҡала эшкә алдылар, бына хәҙер бөтә эфирҙы гөрләтеп шиғыр уҡырға саҡыралар. Хоҙай ҡушһа, китабың да тупылдап килеп сығыр.

Рәмил. Хоҙай ҡушһа ғына шул.

Варя. Йә, көҙәләнмә! Тик бына салбарың, ботинкаларың...

Рәмил. Иҫең китмәһен иҫке сәкмәнгә! Аҫ яҡ барыбер күренмәй. Шулай уҡ бүрек тә...

Варя *(иренең ҡабарынҡы көлтә сәстәрен һыйпап).* Кемдән алдың икән быңдай тулҡын-тулҡын көҙрәләрҙе, тумпыҡ урыҫ танауын?

Рәмил. Һе! Әсәйемдең әсәһе Анна Шадрина бит – шуның бүләгелер.

Варя. Атайың татар икән, тип тә һөйләйҙәр.

Рәмил. Нисәмә йыл бергә тороп, төпсөнгәнең юҡ ине... Эйе, миндә татар ҡаны ла бар.

Варя. Ә үҙең – «башҡорт милләтсеһе»...

Рәмил. «Милләтсеһе» түгел, ә башҡорт. Йәнем-тәнем менән башҡорт.

Варя. Тап минең һымаҡ икән.

Рәмил. Икебеҙ тиң полный интернационалист. Ахун таяғы ерле-юҡҡа бәйләнә.

Варя. Беренсе гонорарыңдан уҡ бәҫле бүрек алабыҙ! Журналда баҫалар бит?

Рәмил. Баҫалар. Айлыҡ эш хаҡым да тып-тып тамасаҡ.

Варя. Хоҙайға шөкөр, балаларҙың күҙе асылды, тауыштары көрәйҙе. Оҙағынан итһен берүк. Тура эфирмы?

Рәмил. Тура эфир.

Варя. Йә Хоҙай, бәлә-ҡазаңдан арала! Тура эфирҙан әйткән һүҙҙе кире ҡайтарып булмай – артығын ысҡындырма.

Рәмил. Ысҡындырмам, тыныслан.

Варя. Нисек тынысланайым? Беләм һине... Ниндәй шиғыр уҡыйһың?

Рәмил. Теләгән берен үткәрмәйҙәр бит инде – патриотик шиғыр. Тексты алдан уҡ алып, еҙ иләктән иләп, рәсмиләштереп ҡуйҙылар – «Салауат батыр» тигәнде.

Варя. Теге строфаны уҡыма, төшөрөп ҡалдыр. «Әсәм теле»нән һуң күрмештәребеҙҙе онотма. Онотмаҫһыңмы?

Рәмил. Онотмам, онотмам! Ниңә һаман тизыйһың?! *(Сығырға ыңғайлай).* Эфирҙан һуң Йәшел йортҡа һуғылам – ахун таяғы саҡыртҡансы, ниңәлер.

Варя. Йә Хоҙай, хәйерлегә юрайыҡ!

Рәмил. Киттем, хәйер-фатихаңда тор. *(Китә).*

Варя. Уф, йөрәккәйем сығып бара! Телефондан серләшергә хеҙмәттәштәрем дә юҡ – әллә ҡайҙа Урал артына фольклор экспедицияһына киткәндәр...

## Бишенсе сәхнә

Урал арты урман араһындағы төпкөл ауыл, ҡарт солоҡсо йорто. Өй хужаһы Солоҡсо, Марат, Ғәбсәләм, Ылауир – өҫтәл тирәләй һырышҡан, Марат алдында ҡағыҙ-ҡәләм.

Марат. Шулай итеп, олатай, Өфө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты исеменә ҡомартҡыны ҡабул ҡылып алабыҙ. Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғолдоң шул турала һиңә төбәлгән, үҙ ҡулы менән яҙып ҡалдырған мәктүб-хатын алдыңмы?

Солоҡсо. Алдым.

Марат. Дөрөҫлөгөнә инандыңмы?

Солоҡсо. Инандым.

Марат. Шул мәктүбте килтереүсе ғалимдарҙың үҙ ҡулына һис ҡарыулашмай, минең ҡулъяҙма-аманатымды тапшырырға бурыслыһың, тиелгәнме?

Солоҡсо. Тиелгән.

Марат. Шул ҡәҙерле аманаттың ошо көнгәсә урмандағы балҡортло солоҡта йәшереп һаҡланыуын кисә генә таныныңмы?

Солоҡсо. Таныным.

Ғәбсәләм. Шулайғас, бар, олатай, солоғоңдан аманатты алып кил.

Солоҡсо. Ҡыш селләһендә солоҡто аса алмайым, уландар, ҡорттарым ҡырыласаҡ. Алла бойорһа, йәйгеһен килерһегеҙ.

Ылауир. Ҡартлас, ҡарыулашма. Йәйгә тиклем кем бар ҙа кем юҡ...

Марат. Солоҡ хаҡын ҡайтарырбыҙ.

Солоҡсо. Һәй уландар-уландар, баштан уҡ шулай әшкәртһәгеҙ ни булды? Ҡомартҡы өйҙә – кисә үк ат саптыртып алып ҡайттым. Хәҙер! *(Күрше бүлмәнән күн тышлы төргәк алып сығып өҫтәлгә һала).* Бына ул, Буранғол ҡорҙашымдың изге аманаты! Бахыр ҡорттарым һәр йөйөн бөтәштергән.

Марат. Их, ысын баллы кәрәҙ еҫе аңҡыны! *(Төргәкте һаҡ тағатып, күн тышлы дәфтәр сығара).* Боронғо көрән ҡара менән ғәрәп хәрефләп яҙылған – бөйөк Буранғол ҡулы! *(Йәйлап уҡый).* «Халҡыбыҙҙың был салдарҙан-сал ҡобайырын 1910 йылдың йәйендә Урский өйәҙе Бөрйән ылыҫы Иҙрис ауылының Ғәбит сәсән һәм Бәләкәй Эткол ауылының Хәмит сәсән ауыҙынан ошо дәфтәргә күсерҙем; менеп килгән арғымағымды Ғәбит сәсәнгә һебә ҡылып ҡалдырҙым.

Ишет быны ҡартыңдан,
Һүҙ булмаһын артымдан;
Белгәнемде әйтмәһәм,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,
Илдең күңеле ҡалыр, тим.

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Боронғоларҙан аманат;
Уға итһәгеҙ хыянат,
Һеҙгә булыр яманат!»

*(Нәүбәттәге бите аса).* «Урал батыр»... *(Әҫәрләнеп).* Урал батыр... Табылды, егеттәр, табылды!

Ғәбсәләм. «Урал батыр» эпосының төп нөсхәһе табылды, урррa!

Ылауир. Урррa!

Марат *(картҡа).* Мең йәшәгер олатай! *(Солоҡсоно ҡосаҡлайҙар).*

Ғәбсәләм. Марат, күҙ ҡараһылай...

Марат *(дәфтәрҙе ҡуйын кеҫәһенә сумырып).* Үлһәм – үлермен, институтҡа ҡайтарып еткерермен. Ғәбсәләм дуҫ, выжт! – ауыл советына, аэродромға шылтырат, «сиңерткә»лә беҙгә урын ҡалдырһындар. Осабыҙ! *(Ғәбсәләм атлыгып сыгып китә).*

Ылауир. Уй-уй, үлтереп теш һыҙлай башланы...

Солоҡсо. Дауаһы янда – солоҡ елеме һылаһаҡ, һә тигәнсе баҫылыр.

Ылауир. Юҡ, фельдшерға бармай булмай, медицина ярҙамы кәрәк *(сыгып китә).*

Солоҡсо. Һәй әттәгенәһе!

Ҡараһаҡал үҙе менән бергә ала-кола кейемле мыҡты ике ирҙе эйәртеп инә, арттарынан – Ылауир.

Ҡараһаҡал. Шыҡайып ҡатығыҙ, тентеү!

Марат. Ни хаҡығыҙ бар?!

Ҡараһаҡал. Хаҡын һеҙҙән һорамабыҙ.

Солоҡсо. Ә шулай ҙа кем һеҙ?

Ҡараһаҡал *(танытмаһын күрһәтеп).* Бына кем беҙ! Дәүләт именлек комитеты майоры.

Марат.Уйлағайным да...

Ҡараһаҡал. Шым! *(Өҫтәлдәге күнде һелккеләп ыргыта).* Ҡулъяҙманы бир!

Марат. Ниндәй ҡулъяҙма?

Ҡараһаҡал. Ниндәйен төшөндөртөрбөҙ *(мыҡты ике иргә ишара ҡыла).*

Ике мыҡты ир: -- Гражданин, тышҡа сығып һөйләшәйек *(Маратты елтерәтәләр, арттарынан Ҡараһаҡал менән Ылауир ҙә йүнәлә).*

Солоҡсо. *Ләхәүлә... (Тәҙрәгә өңөлөп).* Аҙбарға һөйрәнеләр... Һәй, мал-тыуарҙы туҙғытмаһындар ине!

Ҡараһаҡал, Ылауир инә.

Ҡараһаҡал. Ҡартлас, яҡ мейесеңә!

Солоҡсо. Хәҙер, хәҙер! *(Мейескә ут ҡабыҙа).* Кистән тығып ҡуйған утын ни, гөрләп яна. Сәй ҡуяйыммы, уландар?

Ҡараһаҡал. Сәйең-мәйең кәрәкмәй, бир Буранғол яҙып ҡалдырған ҡағыҙҙы!

Солоҡсо *(түш кеҫәһенән алып һона).*Мәгеҙ, мәгеҙ!

Ҡараһаҡал. Ташла утҡа!

Солоҡсо. Ташлайым, ташлайым! *(Ташлай).*

Ҡараһаҡал *(Ылауиргә).* Ә һин, шылғаяҡ, күн тышлы дәфтәрҙе атҡар! Урал-мурал батырын!

Ылауир *(ҡуйынынан сығарып).* Ҡайҙа?

Ҡараһаҡал. Утҡа!

Ылауир. Уй, уныһын булдыра алмайым...

Ҡараһаҡал. Юғиһә, үҙең керәһең утҡа!

Ылауир *(иламһырап).* Ҡулым бармай... зинһар, үҙегеҙ...

Ҡараһаҡал *(Ылауирҙе елкәһенән бөрөп алып, мейес ауыҙына эйелдертә).* Мөртәт, суҫҡа башыңды өтәм, ташла!

Ылауир. Уй-уй, зинһар... *(дәфтәрҙе утҡа ата)* ташланым...

Ҡараһаҡал *(ыҫҡындырып).* Бына шулай. Бар, сүкәй! *(Ылауир өҫтәл ҡырында шыңшып ултыра).* Ҡартлас, ниңә һерәйеп ҡаттың? Кил бында.

Солоҡсо. Килдем, килдем...

Ҡараһаҡал. Беребеҙҙе лә күрмәнең дә, белмәнең дә. Әйтер һүҙең ошондай булыр: «Марат тигәндәре, көпә-көндөҙ күҙенә ен-бәрей күренеп, алмашына башлағайны; аҙбарға сыҡһам, өрлөккә аҫылынған». Төшөндөңмө?

Солоҡсо. *Ләхәүлә...* төшөндөм...

Ҡараһаҡал. Юҡһа, Буранғол ҡорҙашың артынан олағырһың! *(Ылауиргә).* Ә һин, шылағай, ҡалма артымдан! *(Китәләр).*

Солоҡсо. *Ләхәүлә... ләхәүлә...*

## Алтынсы сәхнә

Обком секретары кабинеты, Ахунйәр һәм Ҡараһаҡал, тын ҡалып, кемделер көтә. Рәмил инә.

Рәмил *(ишек төбөндә туҡталып).* Һаумыһығыҙ.

Ахунйәр. Саубыҙ, ултырығыҙ.

Ҡараһаҡал. Һауғайнығыҡ та,түгелде, тиҙәрме әле? Һеҙҙең яҡта?

Рәмил. Беҙҙекеләрҙеке түгелмәй.

Ҡараһаҡал. Әммә шәхсән һеҙҙеке түгелә шул. Совет дошмандары көршәгенә түгелә.

Рәмил. Аңламаным.

Ахунйәр. Аның ҡарауы без сезне яхшы аңладыҡ.

Ҡараһаҡал *(телевизорга төртөп күрһәтеп).* Бөтөн совет халҡы яҡшы аңланы. *(Кассета ҡуя, зәңгәр экранда Рәмилдең шигыр уҡыуы):*

Хас дошмандар әле хөр халҡымдың
Юлдарына күпме таш өймәç,
Батшаларға башын эймәгәнде,
Башҡаларға башҡорт баш эймәç!

Ҡараһаҡал. Ниндәй башҡаларға?

Рәмил. Океан аръяғы залимдарына йәғни.

Ахунйәр. Шыйғаҡламағыз, тел төбегез ап-ачыҡ.

Ҡараһаҡал. Мәскәүгә, Кремлгә баш эймәбеҙ, тигән һүҙ.

Рәмил. Юҡ!

Ахунйәр. Мона радио-телевидение комитетыннан рәсми аңлатма *(ҡагыҙҙан уҡый):*

«В отдел Пропаганды и агитации Обкома КПСС тов. Бурханову У.Н.

С целью постоянного ознакомления телезрителей с лучшими образцами башкирской поэзии мы почти ежемесчно передаем новые стихи башкирских поэтов. Обычно эти стихи читают авторы. В последнем месяце на голубом экране выступили поэты Назар Наджми, Муса Гали, Ангам Атнабаев, Рафаэль Сафин и др. В этот день со своими новыми стихами, которые одобрены в секции пэзии Союза писателей, выступил пэт Рамиль.

В его произведении под названием «Салават батыр», посвященном лауреату Государственной премии тов. Тавасиеву, есть такие строки:

Хас дошмандар әле хөр халҡымдың
Юлдарына күпме таш өймәç,
Батшаларға башын эймәгәнде,
Башҡаларға башҡорт баш эймәç!» --

Аңлатмада мона шулай диелгән. Дөресме?

Рәмил. Дөрөç.

Ахунйәр. Арытабан уҡибыз:

«...Это четверостишие, не отвечающее идейной требовательности нашей поэзии, было вычеркнуто. Во время подготовки передачи (перед трактовой репетицией) в присутствии режиссера Сейфуллина и ассистента режиссера Насретдиновой, старший редактор литдрамы еще раз предупреждал автора о том, что он не должен читать эту строку. Рамиль согласился и дал слово не читать эти строки. Несмотря на неоднократное предупреждение, автор прочитал их в эфире...»

Монысы да дөресме?

Рәмил. Былыһы ла.

Ҡараһаҡал. Ә нишләп уҡыныгыҙ?

Рәмил. Ҡыҙыулыҡ менән киткән... һиҙмәй ҙә ҡалғанмын...

Ахунйәр. Чөнки милләтчелек вирусы берлән зарарланғансыз.

Ҡараһаҡал. Бындай осраҡка ҡарата бөйөк остазығыҙ Максим Горький ни тигән? – «Если враг не сдается, его уничтожают!» Вирус йөрөтөүсе лә беҙҙең враг.

Рәмил. Юҡ ерҙән һәрмәнәһегеҙ. Сүптән сүмәлә өймәгеҙ!

Ҡараһаҡал. Тимәк, сүп икәнен танийһығыҙ. Үкендегеҙме, ғәфү үтендегеҙме?

Рәмил. Уныһын хәтерләмәйем.

Ахунйәр. Телевизионщиклар яҡшы хәтерли *(уҡый):*

«Я, будучи редактором этой передачи, после передачи связался по телефону с товарищем Рамилем и спросил у него: «Почему же Вы, несмотря на предупреждение, прочитали зачеркнутые строки?» Он ответил, что помнил о предупреждении, но прочитал их намеренно...»

Ҡараһаҡал. Подумайте над этим словом: «намеренно»! Что означает это «намеренно», вы понимаете?!

Ахунйәр. Это значит, как я понимаю, автор намеренно шел против нас, против Кремля, против советской власти.

Рәмил. Юҡ! Совет иле, ленинизм байрағы өсөн мин башымды һалырға әҙер!

Ахунйәр. Баш салу тәлап ителми. Шау-шуны юғары даирәләргә житкермичә, ни бары бер шартны үтәргә кирәк.

Рәмил. Ниндәй?

Ахунйәр. Соңғы ваҡытта йәшләрнең яман чирдән болара башлауы сизелә. «Әсәм теле», «башҡыртым» дигән кирәксез сүзләр күбәйеп ките. «Телем менән Ҡурайым» дигән черек ойышмаға уҡмашмаҡчылар. Шул зарарлы ынтылышның башын кисәргә тиешсең.

Рәмил. Поп Гапон ролендәме? Юҡ! Булмай!

Ҡараһаҡал. Уйлағыҙ, уйлағыҙ.

Рәмил. Юҡ. Булмай.

Ахунйәр. Без сезгә эш бирдек, аш бирдек. Үзегез әйтмешли, Дан да булыр, Нан да булыр, башны иә белсәгез. Дәүләт премиясы бирербез, Карам Сахичҡа алмашҡа халыҡ шағиры да ясарбыз. Тағын ни кирәк сезгә?

Рәмил. Бер нәмә лә кәрәкмәй, Намыҫым ҡалһын янымда.

Ахунйәр. Намус, намус... Рюмкаға ғына сыярлыҡ нәрсә бит ул сезләрнең намус. Ана ҡәләмдәшең Ҡасим хәтта ата-анасын рюмкаға салып эчә.

Ҡараһаҡал. Иң яратҡан шәкерттәрең дә йәмғеһе бына бынауы уста – шул бер үк сыбыҡтан ҡыуылған.

Ахунйәр. Шуларға таянасыңмы? Кемең бар?

Рәмил. Халҡым бар.

Ахунйәр. Халҡың да тайғаҡлаячаҡ, муйыныңны борып салсаҡ.

Ҡараһаҡал. Үҙең дә тайғаҡларһың.

Рәмил. Табандарым дағалы, күңел йондоҙом нурлы.

Ҡараһаҡал *(мыҫҡыллап).* Шешә төбөндәме?

Рәмил *(горур).* Йыһан күгендә! Ҡарағыҙ! *(Ҡулын һоноп тәҙрәгә табан йүгерә, тегеләр ҙә, аптырашып, ашығыс эйәрә).*

Ахунйәр. Бу ни тағын?

Ҡараһаҡал. Тәҙрәнән ташланмаһын!

Рәмил. Күрәһегеҙме осһоҙ-ҡырыйһыҙ йыһанды? Әнә тора, балҡып тора йондоҙом.

Ҡараһаҡал. Тфү! Әсә телле астраном!

Ахунйәр. Оло Жидегән йолдозлығы, икән ди...

Рәмил. Иң түрендәге иң яҡтыһы, нурлыһы!

Ахунйәр. Обыкновенный Тимер Ҡаҙыҡ.

Рәмил. Йыһан дуҫым менән минең йондоҙом! – Шағир йондоҙо!

Ахунйәр. Ҡара-ҡара, тилереп барадыр бу.

Рәмил. Таймай ҙа, тайшанмай ҙа – урынында нык тора. Бер кемде лә тайҙырта алмаҫһығыҙ! Һеҙ!

Ҡараһаҡал. Жәл, талантыңдың сыстың башына... Күпме түҙемлек күрһәттем, уртаҡ тел табырға тырыштым.

Ахунйәр. Ә мин соң, мин!

Рәмил. Һеҙҙең менән минең уртаҡ тел булмаҫ! Бер ваҡытта ла!

Ҡараһаҡал. Жәл, жәл... *(Екереп).* Әҙәм аҡтығы! Бөгөн үк эшеңдән ҡыуылдың! Инде ҡатыныңа сират. Бар, катись к чорту! *(Рәмил китә).*

Ахунйәр *(телефонга).* Клара Тәхәүовна, килделәрме?

Клара *(аппараттан).* Килделәр.

Ҡараһаҡал. Ылауир менән Аланбай бармы?

Ахунйәр.Ылыуир берлән Аланбай бармы?

Клара. Бар, бар.

Ахунйәр. Немедленно себерелеп керсеннәр.

Карам Сахич, Ғайнар, Аланбай, Ылауир инә, ултырышалар.

Ахунйәр. Исәнмесез, иптәшләр. Ашығыч чаҡыртып алуымның сәбәбе шул: житди мәсьәлә ҡупты. Мона үзегезгә яхшы таныш куратор иптәшкә сүз бирелә. Иғтибар берлән тыңлағыз, соңра мөһим ҡарар ҡабул ҡылырбыз. Бу сүләшү протоколға теркәлми, чүп тышҡа чығарылми. Тартынмича тирегез фикерләрегезне.

Ҡараһаҡал. Коммунистик идеология өлкәһендә сатаҡлыҡҡа юл ҡуйылды, шуны ашығыс төҙәтеү бурысы тора.

Ғайнар. Ниндәй сатаҡлыҡ икән?

Ҡараһаҡал. Зәңгәр экранды ҡарамағандар булһа... *(Зәңгәр экран ҡабына, унда баягы Рәмил мажараһы).* Йә, кем ни әйтер? Сталинград һуғышы ҡаһарманы, һин! Сатаҡлыҡ түгелме был?

Ғайнар. Ысынлап та, яйһыҙыраҡ килеп сыҡҡан, һаҡһыҙлыҡ бәләһелер. Шағир хатаһын ғәфү итергә кәрәк.

Ҡараһаҡал. Хата түгел – враждебная выходка. Системабыҙға янау. Бынауы талантлы шағирҙар нимә әйтер?

Аланбай. Дөп-дөрес, чыннан да бу враждебная выходка. Чөнки Рәмил безгә очрап: «Прямой эфирны ҡарадығызмы? Йәшел йортның, Кремлнең кирәкләренә бирдем!» -- диде. Мона Ылауир дус шаһит.

Ылауир. Эйе, шулай тине.

Ғайнар. Ышанмайым һарауыҙ себештәргә.

Ахунйәр. Ғайнар Ғилмиевич, рәнжетмәгез яшләрне! Тағын фикерләр бармы? Язучылар берлеге рәисе Карам Сахич?

Карам Сахич. Рәмилде яҡшы beләбеҙ, был ике иптәштең һүҙҙәрендә хаҡлыҡ ярылып ята. Беҙҙең өсөн баш ауырыуы булды ул. Өфөгә килә-килгәненән баш бирмәне, шиғырҙарында иһә йәшәп ятҡан һоҡланғыс совет стройынан ҡәнәғәтһеҙлек, боронғоно һағынып илау, ирекһеҙлектән зарланыу мотивтары йонсотто. Ул үҙен Башҡортостанды, башҡорт халҡын яҡлаусы берҙән-бер гений һанай.

Ғайнар. Сөнки ул ысынлап та гений, арабыҙҙа берҙән-бер.

Күмәге: -- Оһооо!

Ғайнар. Яҡты йондоҙ ул Рәмил! Күрегеҙ ҙә тороғоҙ: Карам Сахич Башҡортостаныбыҙҙың дүртенсе халыҡ шағиры булды, Рәмил иһә бишенсеһе буласаҡ! Мин әйтте, тиерһегеҙ.

Аланбай. Булачаҡ ул бишенчегез нигә бушҡуыҡ очороп чәбәләнә? Нинди Башҡортостан, башҡорт халҡы? Бармы алар? Башҡортлар ничә процент? Башҡортостан дип аталуы фактически бушҡуыҡ түгелме ни?!

Ғайнар. Энем, һин үҙеңдер бушҡыуыҡ.

Карам Сахич. Аланбай, сығырыңдан сығаһың! Ашаған табағыңа төкөрмә. Бергәләп ашайбыҙ бит.

Ахунйәр. Әййе, ҡосарсың, энекәш.

Ғайнар. Беҙҙең атаҡлыға ни, ҡайҙан ялаһа ла аш.

Ахунйәр. Шулай да талант иәсе – икесе дә дим: Аланбайы да, Ылауире дә. Әллә сез, Ғайнар Ғилмиевич, башҡача уйлыйсызмы?

Ғайнар. Бер миҙалдың ике яғы. Тыштан көмөш ялтырай, эсендә ҡара баҡыр.

Ахунйәр. Безидейный әтрәгәләмне яҡлыйсыз. Әллә юғисә Рәмил илә сез үзегез бер мидалның ике яғымы икән?

Карам Сахич. Беҙ – инанған ленинсылар, партиябыҙ программаһына тоғробоҙ. Унда асыҡ яҙылған: Ватаныбыҙҙа бер халыҡ – совет халҡы буласаҡ, бөтөнөбөҙ бер телдә – Александр Сергеевич Пушкиндың, Владимир Ильич Лениндың бөйөк рус телендә һөйләшәсәк! Бөйөк Ватан һуғышында шуның өсөн һуғыштыҡ.

Ғайнар. Сталинград урамдарында мин сәғәт һайын, минут һайын ҡырҡ үлемдәргә ҡаршы барып, киләсәктә дөйөм совет баҡсаһында күкрәп сәскә атасаҡ үҙ халҡымды, үҙ милләтемде, үҙ әсә телемде һаҡлап һуғыштым. Совет иленең һәр бер милләт вәкилдәре лә тап әнә шулай, тап әнә шуның өсөн ҡырҡ үлемдәрҙе инҡар итеп һуғышты һәм еңеп сыҡты.

Карам Сахич. Ғайнар Ғилмиевич, мин дә һуғыштым, ҡайнар ҡанымды ҡойҙом, әммә түш кеҫәмдә Ленин силуэтлы, ҡыҙыл тышлы партия билетын һаҡлап йөрөтөүемде һис иҫтән сығарманым. Ә һеҙ шуны онотобораҡ бараһығыҙ.

Ғайнар. Онотмайым, һәм һеҙгә лә партиябыҙҙың терейәнле программаһын йәнһеҙ ҡағыҙға әйләндереүҙән һаҡланырға кәңәш итәм.

Ҡараһаҡал. Ғайнар Ғилмиевич, һеҙ, Сталинград яугирлегегеҙҙе онотоп, аяныс! – Рәмил кеүектәрҙең серек арбаһында йырлап бараһығыҙ.

Ғайнар. Беҙ халҡыбыҙ арбаһында барабыҙ.

Ахунйәр *(ҡәләм менән графин шыҡылдатып).* Иптәшләр, буш фәлсәфә ҡормыйыҡ, урыны һәм мәле бу түгел. Ғайнар Ғилмиевич, сез үзегезне башҡалардан өстен, сөттән аҡ, судан пак итеп күрсәтергә тырышасыз...

Аланбай. Ник үзенең кем икәнен белми? Башҡаларға баһа бирүдән элек, үз-үзенә: «Кем мин?» -- дип сорау биреп ҡарасын.

Ғайнар. Кем мин?

Атанбай. Плагиатчы син!

Ҡараһаҡал. Ғайнар Ғилмиевич, үҙегеҙҙең оло ике ҡәләмдәштән сигнал бар: Һәҙиә Дәүләтшинаның әҫәрен үҙләштерҙе, тип яҙалар.

Ғайнар *(ырғып тороп).* Ялған! Ҡара йөрәктәрҙең ҡара ялаһы! Карам Сахич яҡшы белә: уның менән шул икәүҙең сейле-бешле ижад емешен секцияла ҡаты тәнҡитләгәйнек, үсен минән алалар.

Ылауир. Билдәле публицист шағир Ҡасим иптәш эшегеҙҙе судҡа биргән!

Ғайнар. Ғәфү... йөрәгем... *(Йөрәген тотоп сығып китә).*

Ахунйәр *(телефонга).* Ғайнар Ғилмиевичны өйенә илтеп ҡуйығыз... ҡадерләп. *(Графинга шыҡылдатып).* Дауам итәбез, иптәшләр.

## Етенсе сәхнә

Баяғы Рәмил фатиры. Рәмил, Ылауир, Болаҡкбай, Тамырбайҙар фәкир табын алдында (араҡы мул). Йәмғеһе ярымиҫерек.

Болаҡбай. Еңгәм ҡайҙа?

Рәмил. Эшендәлер.

Тамырбай. Ошо таң тишегенәнме?

Рәмил. Бәлки, үпкәләп сығып киткәндер. Кисәгенән һуң...

Болаҡбай. Беҙҙә төңкәйеп ҡалдың шул.

Рәмил. Яҙыу ҡалдырған, балаларҙы Рауил ҡустыға илтеп ҡуям, тип. Минең эштән ҡыуылғанды ишетһә...

Ылауир. Бирешмәйек! Шағирҙар бит әле беҙ! Күтәрҙек! *(Эсәләр).* Баш һау булһа, башҡа бүрек табылыр. Ҡап, ағай! *(Сәнскенән ҡаптырта, тағы ҡоя).* Һәп иттек – быныһы ҡәҙерле еңгәйҙең һаулығына *(эсәләр).* Бына шулай. Барыһы үҙ урынына ултырҙы, донъя йәмләнеп китте. Хәтерҙә, Силәбенән Өфөгә яңы килгән сағым, Сәғит Агиш ағай менән кафела бер «ярты»ны асҡанбыҙ. Күңел һулығып илай, был донъяға ни булды – телебеҙҙе ҡыҫалар, башҡортто бөтөрәләр, тип

зарланам, оло ағайымдан кәңәш һорайым, нишләргә икән, тием. Ҡой стакандарҙы мөлдөрәтеп, тине ағайым. Ҡойҙом. Тот, төп-күтәрҙек! – тине. Төп-күтәрә ҡапландырҙыҡ. Шундуҡ күңелдәр йомшарып, донъялар йәмләнеп китте. Йә, нишләргә икәнен белдеңме инде, ти ағайым. Белдем, тимен. Ағайым арҡамдан һөйә: «Бына шулай хәл ителә ул донъялағы иң ауыр мәсьәләләр! Хатта утыҙ етенсе йыл да әнә шулай ал да гөл булды!» *(Көлөшөү).*

Рәмил. Тамырчик, йүгер кухняға, электрсәйгүнде ҡуй!

Тамырбай *(кухнянан кире боролоп килә).* Сәйгүн ҡуйырға электр-ут юҡ. Кранда эҫе һыу юҡ.

Рәмил. Ни булған?

Варя ҡайтып инә.

Варя. Фу! Хәмерйәндәр! *(Өҫтәлгә гәзит ырғыта).* Бөгөнгө матбуғат. Ҡасим тигән йолҡошондоң сафсатаһын подвал тултырып баҫҡандар.

Ылауир *(гәзитте алып).* «Ҡартайғанда ҡарпыған әҙәби ҡараҡ». Вәт ҡаптырғандар!

Варя. Ғайнар ағайыңды Һәҙиә апай Дәүләтшинаның повесын урлап үҙләштереүҙә ғәйепләй.

Рәмил. Ҡәбәхәт, бынан һуң тупһабыҙға аяҡ баҫмаһын!

Варя. Баҫмаҫ та. Тәгәрмәсе алға тәгәрләй унын. Әле юлда осраттым, сәләм әйтеп ҡалды. Өҫ-башы ыҫпайланған, галстук тағып алған.

Рәмил. Ниндәй бәхеткә юлыҡты икән бахыр?

Варя. Комсомол премияһы биргәндәр. Мәҡәләләр китабы өсөн.

Болаҡбай. Вай-вай-вай!..

Рәмил. Беҙҙә эҫе һыу юҡ, ут юҡ. Беләһеңме?

Варя. Белмәҫкә, ниңә мин балаларҙы алып киткән, тиһең?

Рәмил. Эш ниҙә?

Варя. Һуңғы өс айҙа квартплата илтеп түләнеңме һуң? Ай аҙағынаса осона сыҡмаһағыҙ, газды ла, һыуыҡ һыуҙы ла киҫәбеҙ, тип киттеләр.

Тамырбай. Был ни хәл?!

Болаҡбай. Хаҡтары юҡ!

Варя. Ә һеҙҙең ни хаҡығыҙ бар бында шешә ташырға, әҙәм балаһын ағыуларға? Үлтерәһегеҙ бит!

Рәмил. Варенька, тыйыл.

Варя. Эсәһең дә эсәһең, муйыңдан бурысҡа баттыҡ.

Ылауир. Еңгәй, зинһар, һүҙ ҡуйыртмайыҡ. Ағай бында ни при чем. Егеттәр, иртәгә үк кеҫә төптәрен һәрмәп, ағайға фатир өсөн түләрлек иғәнә килтерәйек.

Варя. Иғәнәгеҙ ағайығыҙға кәфенлек булмағайы...

Тамырбай. Тәүбә-тәүбә...

Варя. Киттем.

Рәмил *(сәғәтенә ҡарап).* Ҡайҙа? Эшеңәме?

Варя. Балаларым янына.

Рәмил. Ә эшең?

Варя. Үҙең һымаҡ уҡ осһоҙ-ҡырыйһыҙ ялда мин.

Рәмил. Аңламайым.

Варя. Беҙҙә равноправие бит: шағир эштән ҡыуылғас, ҡатынын да ҡыуҙылар. Айнығас шылтыратырһың *(китә).*

Ыһлауир. Еңгәй, ҡайғырма, ҡайтыуыңа ағайымды, ҡәҙер-хөрмәтләп, как огурчик айнытып ҡуйырбыҙ.

Рәмил. Һәй яратҡан шәкерттәрем, әлдә һеҙ бар эргәмдә!

Болаҡбай, Тамырбай Рәмилде ике яндан ҡосаҡлай:

-- Остазым!

-- Беҙ мәңге-мәңге бергә!

Рәмил. Далеко пойдете, однако. *(Тамырбайҙы маңлайынан үбеп).* Һин – буласаҡ халыҡ шағиры. Ә һин *(Болаҡбайҙы маңлайынан үбеп)* – Яҙыусылар берлегенең рәйесе. Әммә икегеҙ тиң эсеп үләсәк. *(Ҡосаҡсылар тайпыла).*

Болаҡбай. Ужасно!

Ыһлауир. Әммә остазыбыҙ хаҡлы.

Рәмил. Килсе бында, иң яратҡан шәкертем!

Ыһлауир. Остазым!

Рәмил *(Ыһлауирҙе маңлайынан үбеп).* Бел дә тор: сәйәсәттә мине уҙып китәсәкһең, Карам Сахич урынын аласаҡһың.

Ыһлауир. Оһо!

Рәмил. Ул кумирың Башҡортостанды үҙенең ҡара мунсаһында күтенә йәбешкән ҡайын япрағына тиңләп, «урыҫ булмаһам да, урыҫйәнмен!» тип ҡасан да бер аҡтыҡ һулышын алһа, һин дә Башҡортостаныңды осаңдағы саң остоғондай күреп, «татар булмаһам да, татарйәнмен!» тиеп аяҡ һуҙасаҡһың.

Ыһлауир *(үпкәләп).* Шул инеме әйтерең? Ә үҙең?!

Рәмил. Мин ни... билдәле инде... Донъя – кәкре мөрйә...

Ыһлауир *(ҡапыл дәртләнеп).*Әммә төтөнө тура сыға, Йыһан ҡартың әйтмешләй. Мөрйәнең, тим. *(Рәмилгә тулы рюмка бирә).*

Рәмил *(рюмканы тотоп).* Нишләтергә инде быны...

Күмәге: -- Эсергә, эсергә!

Рәмил. Берҙән-бер Йыһан дуҫым ғына, ташҡа бәр, тиер ине... *(Һулҡылдап).* Ауылға ҡайтып киткән... Ат көтөр, ер һөрөр, балаларын үҫтерер... Ә мин... мин... *(эсә).*

Ыһлауир. Ағайыбыҙҙың күшкәте шиңеп бара, йырлайыҡ яратҡанын *(«Минең йондоҙом»до һуҙа башлайҙар).*

Рәмил *(өҫтәл һуғып).* Йырламағыҙ минең йырҙы!

Ғәбсәләм, Ҡасим инә, иҫеректәр. Ҡасим, өңөлөп килеп, өҫтәлдәге тулы рюмканы ҡармай, ауыҙына ҡаплап та өлгөрә.

Рәмил. Ну шельма, бер тәңкә һорарға килдеңме?

Ҡасим. Кәрәкмәй. Ғәбсәләм ағайҙы оҙата килдем.

Ғәбсәләм. Харап булды... башҡортомдоң аҫыл улы, республикабыҙҙың иң ҙур фольклорсыһы... КГБ-ычник үлтерҙе!

Ҡасим. Урал артында Марат дуҫын ерләп ҡайтҡандан һуң башын ҡалҡытмай эсә, хәтәр һөрәнләп йөрөй.

Ылауир. Үҙ башына булмағайы!

Болаҡбай. Ғәбсәләм ағай, тыныслан, тыныслан.

Ғәбсәләм. Тынысланмайым! Ҡоҙғон ояһын туҙҙырасаҡбыҙ! Лаврентий Берияға ла ғәҙел хөкөм табылды!

Боларған Ғәбсәләмде тыйырға тырышалар.

Рәмил. Етте! Мырҙалар, уҙаманды өйөнә тәпәйләтегеҙ.

Болаҡбай, Тамырбай, Ҡасим иҫеректе алып сығып китәләр. Ылауир радиоалғыс кнопкаһына баҫа – эфирҙа яңылыҡ өҙөгө:

-- ...талантлы шағир, һоҡланғыс прозаик, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идара ағзаһы, дәһшәтле Сталинград һуғыштары ҡаһарманы Ғайнар Ғиндулла улы Ғилмиевтың йөрәге тибеүҙән туҡтаны... Мәрхүмде ерләү...

Ылауир *(эфирҙы яба).* Давно пора!

Рәмил. Туҡтаманы – ярылды! Их, гел генә беҙҙекеләр китә... нишләне һуң был донъя?!

Ылауир *(рюмка тоттороп).* Донъяһына төкөрҙөк. Йәшәп ҡалайыҡ! *(Сәкәштерәләр).*

Рәмил. Аҫҡы ҡаттағы Әзһәр күршем... сантехник... Саҡыр, башы сатнай торғандыр.

Ылауир. Әзһәр дуҫ ҡалып торһон. Һуңынан...

## Һигеҙенсе сәхнә

Ғәбсәләмдең фатиры, ҡатыны Әлфиә тәҙрәнән бағып көтә.

Әлфиә. И Илаһым, Ғәбсәләмем лаяҡын иҫереп ҡайтып килә, шешәләштәре менән. Ҡара һаҡаллы әллә ниндәй әзмәүер туҡтаттысы... Ҡасим тигәненә нимәлер бирә... Ишек асып ҡаршылайым.

Дөбөрҙәшеп инеп, Ғәбсәләмде диванға йәпләштерәләр.

Ғәбсәләм. Бисәкәй!

Әлфиә. Әү, күгәрсенем! *(Өлтөрәп килеп етә).*

Ғәбсәләм. Теге «ярты» ҡайҙа?

Әлфиә. Ниндәй ярты – ярттының яртыһы бит инде. Бәлки, сиреге генәлер. Әнә, өҫтәлдә килеш тора.

Ғәбсәләм. Ҡойоп бир азаматтарға.

Әлфиә. Хәҙер, күгәрсенем, хәҙер!

Ҡасим өҫтәл эргәһендә ҡатындың юлын бүлә.

Ҡасим. Туҡта, еңгәй, үҙеңә бер сер сисәм.

Әлфиә. Йә?

Ҡасим. Ағайымдың пистон кеҫәһендәге егерме бишлеген анауы шалопайҙар ҡармап ҡуймаһын. Салбарын һалдыртып ал.

Әлфиә *(йүгерә).* Күгәрсенем, сисенеп ятып серем ит – һалып бир салбарыңды. Энекәштәр, булышығыҙ!

Ғәбсәләм. Китегеҙ эргәмдән!

Диван тирәһендә буталыш барғанда Ҡасим, кеҫәһенән бәләкәс кенә шешә алып, араҡы шешәһенә шыйыҡса өҫтәй.

Ҡасим. Булды, иптәш майор Ҡараһаҡал! Ағай-эне, артыҡ маҙаһыҙламайыҡ, киттектәр!

Ғәбсәләм. Бисәкәй, ҡой!

Ҡасим *(сығышлайы әйләнеп ҡарап).* Күгәрсенеңде интектермә – ҡойоп бир!

Ғәбсәләм. Бисәкәй!

Әлфиә. Етер һиңә!

Ғәбсәләм. Ҡой, тигәс, ҡой! *(Ҡалҡынырға итә).* Әләйһә сығып китәм...

Әлфиә. Ят инде, ят.

Ғәбсәләм. Ятмайым! Ресторанға... Ҡайҙа егерме бишлегем? Әһә, бына!

Әлфиә *(иренең ҡулынан аҡсаны әләктереп).* Теңкәләремә тейҙең! *(Өҫтәлдәге шешәне килтереп).* Мә, туй! *(Шешәнән иренең ауыҙына ҡоя, тегенеһе горҡолдатып йота).* Хәсрәт ҡапсығы!

Ғәбсәләм *(тынысланып бераҙыраҡ ята ла ҡапыл ырғып тороп иҙәнгә ауа).* Уй, үләм! Эс-бауырҙарым яна, үләм!

Әлфиә. Ни булды, ни булды? Аййй! – йән биргән! Скорый! Милиция!

## Туғыҙынсы сәхнә

Баяғы Рәмил фатиры, шул уҡ күренеш, шул уҡ икәү. Рәмил башын табындашының иңенә һалған.

Ылауир. Емеш беште, өлгөрҙө... Остазым, тор!

Рәмил. Йоҡларға, йоҡларға... Варенька, диванға еткерт мине.

Ылауир. Әйҙә-әйҙә, остазым. Тәүҙә туалетҡа барып теге эште теүәлләйек, шунан татлы йоҡоға ла талырһың.

Рәмил. Һәй яратҡан шәкертем! Һәр саҡ аҡыллы булдың *(ҡосаҡлашып атлайҙар).*

Ылауир. Әйҙә-әйҙә, остазым.

Рәмил. Туҡта. *(Тәҙрә яғына ымлап).* Әнә балҡый яҡты йондоҙ... Йыһан менән минең йондоҙом! Әйҙә, тәҙрәгә...

Һлауир. Әйҙә, бәҙрәфкә *(күтәрмәкләп-һөйрәкләп туалетҡа индерә, ишеге ябыла. Туалеттан ярым үкһеп, ярым һулҡылдап илап сыға).* Остазым!.. Бәхил бул... бәхил... Бында мин ғәйепле түгел... үҙең... үҙең! Баш бирмәнең... аш бирмәнең... *(Илай).* Ғүмерем буйы һине маҡтап йырлармын... иң һөйөклө шәкертең булып ҡалырмын... бөйөклөгөңдө данлармын! Остазым... *(Һулҡылдап телефонға бара, йәһәт һөйләшә).* Алло! Булды... Эйе, инструкция буйынса. Тыңлайым! *(Яңынан номер йыя, тауышын үҙгәртеп).* Әзһәр дуҫмы? Рәмил күршең фатирына килеп ет, туалетта авария! Эйе, торбанан һыу сәптерә. Юҡ, үҙе килә алмай, усы менән торба ярығын ҡаплап ултыра. Рәхмәт! *(Устарын ыуғылап).* Табан ялтыратырға! *(Ишекте асыҡ ҡалдырып олаға).*

Эш сумкаһын тотоп Әзһәр инә.

Әзһәр. Ишектәре шар-асыҡ, берәү ҙә юҡ. Үле тынлыҡ... Һәй, кем бар унда? Күршем, һинме? *(Туалет ишеген аса ла тертләп артҡа салҡая).* Әсәкәйем!!! – Рәмил күрше аҫылынған...

Ут һүнә лә аҡрынлап яҡтыра, сәхнәлә ҡайғылы Йыһан:

Бирер инең миңә һин ҡаныңды,
Мин — бирергә әҙер йәнемде.
Шулай инек... Быуаттарҙы аша
Ҡарап һөйләштек беҙ, кәмендә.

...Ҡубарылып болот баш өҫтөндә,
Көндәребеҙ көлмәй башланы...
Төшөрҙөң көс шул саҡ һин бокалға,
Ә мин уны ташҡа ташланым...

“Ташла!” — тинем. Ләкин ташламаның,
Тик ныҡыраҡ уға тоташтың.
Маңлай бәреп кенә таш ватмағас,
Баш ватылһын, тиеп һаташтың.

Әллә ниңә күңел олпатлығын
Һуңғы сиктәргәсә тотманың.
Арыҫланды һырған себендәрҙәй
Һырғайны шул көнлөк дуҫтарың...

Һуңғы тапҡыр ҡорған табынында
Ултырғандар, өҫтәп ҡаныңа.
Улар тайған.
Һулы бокал услап
Ғазраилың килгән янына...

“Ҡаратауға мине ерләгеҙ”, — тип,
Васыятың ҡалған уларға.
Өфө убаһынан уҙалмағас,
Ҡалды инде беҙгә иларға...

Артабан кинотехника файҙаланылып, алыҫтағы тәҙрә өлгөһө яҡыная, киңәйә – Тимер Ҡаҙыҡ йондоҙо балҡыған Оло Етегән йондоҙлоҡло йыһан панорамаһы асыла. Тимер Ҡаҙыҡ йондоҙо һаман ҙурая ла сағыулана, башҡа йондоҙҙар кесерәйә лә юйыла – сағыу балҡышлы оло йондоҙ ғына ҡала.

Диктор тауышы:

-- Йыһан төбөнән донъяға йондоҙ баға, мәңге-мәңге алмашынмаҫ, яҙлыҡмаҫ йондоҙ баға – Шағир йондоҙо!

**ШАРШАУ**

03 – 10. 01.2015.

# БАШҠОРТТАР

## *Драма ике шаршауҙа, ун өс сәхнәлә*

*Данлы Башҡорт дивизияһының дошман тылына тәрән рейды тураһындағы драманы күпте күргән, күпте кисергән халҡымдың изгелекле аяҡ аҫтына һалам, йәне теләгәндәр эйелеп алыр. Бөгөнгөләргә, әгәр зауыҡтары етһә, ошонан һәм интернеттағы сайтымдың "файлы" бүлегенән асып уҡырға мөмкин. Сәхнәгә ҡуйылмағанда ла, ихлас күңелдәр түренә ул күтәрелер, тигән яҡты өмөттәмен.*

**Автор.**

### Ҡатнашалар:

1. Сталин Иосиф Виссарионович.  (Сталин).
2. Берия Лаврентий Павлович.  (Берия).
3. Василевский Александр Михайлович, Ҡыҙыл Армия генераль штабының башлығы.  (Василевский).
4. Поскребышев Александр Николаевич, генерал-полковник, Сталиндың ярҙамсыһы.  (Сталин, Поскребышев).

5. Буденный Семен Михайлович, СССР маршалы, Кавалерия командующийы.  (Буденный).
6. Мехлис Лев Захарович, фронттың Хәрби Совет ағзаһы, Сталиндың ышаныслы “күләгәһе”.  (Һулда Мехлис, Поскребышев).
7. Ватутин Николай Федорович, генерал-лейтенант, Көньяҡ-Көнсығыш фронт командующийы.  (Ватутин).
8. Лелюшенко Дмитрий Данилович, генерал, 1-се армия командующийы.  (Лелюшенко).
9. Борисов Михаил Дмитриевич, генерал-майор, 8-се атлы корпус командующийы.  (Борисов).
10. Сабуров Иван Дмитриевич, полковник, корпус штабы башлығы.

11. Шайморатов Миңлеғәли Минһаж улы, полковник (аҙаҡ генерал-майор),  Башҡорт атлы дивизияһы командиры. (Шайморатов).
12. Ҡадиров Сабир Рәхим улы, капитан, дивизияның политбүлек башлығы урынбаçары.  (Ҡадиров).
13. Фондеранцев Георгий Ефимович, подполковник, дивизияның йыйылма полк командиры.  (Фондеранцев).
14. Хәбиров Сәйфулла Хәбир улы, капитан, дивизияның атлы артиллерия дивизионы командиры.  (Хәбиров).

15. Айратҡолов (Ариткулов) Дәүләт, майор, дивизия штабы комиссары.  (Айратҡолов).
16. Миңлеғолов (Гулов) Мәсрүр, капитан, дивизия разведкаһы башлығы.
17. Ғайсаров Мирза, лейтенант, разведка взводы командиры. (Ғайсаров). 
18. Кузнецов Михаил Ильич, майор, дивизияның махсус бүлек башлығы.  (Уңдан һулға: Айратҡолов, Шайморатов, Ковальчук, Кузнецов).
19. Гитлер Адольф. (Гитлер).



20. Цейтцлер Курт, генерал, Вермахттың ҡоро ер ғәскәрҙәре генераль штабы башлығы.
21. Манштейн Эрих, фельдмаршал, ғәскәрҙәр төркөмө командующийы.  (Манштейн).


(Һулдан уңға: Манштейн, Руофф, Гитлер, Цейтцлер, Кляйст.


(Гитлер, Манштейн).

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ.

### Беренсе сәхнә.

Сталиндың эш бүлмәһе, стенала оло карта.

Сталин, Поскребышев.

Юлбашсының ихтыяры: һөйләшкәндә бер үк кешегә “һеҙ” тип тә, “һин” тип тә өндәшә ала.

Поскребышев *(ҡыҙыл папка тотоп инә).* Иптәш Сталин, ултырышҡа саҡыртылғандар килеп етте.

Сталин *(төрөпкәһенән төтөн боролдатып).* Ни яңылыҡтар?

Поскребышев. Береһе – үҙегеҙгә мәғлүм хыянатсы генерал-лейтенант Власовтың…

Сталин *(ҡырыҫ бүлдереп).* Генерал-лейтенант Поскребышев… хәрби званиеғыҙ буйынса ул һеҙҙең коллегамы әле?..

Поскребышев *(ҡаушап).*Ҡх… ҡхым…

Сталин. Әллә, тим (*төрөпкәһен тегенең күкрәгенә төртөп),* хыянатсылыҡ буйынса ла коллегалармы икән?

Поскребышев. Иптәш Сталин, зинһар… мине яҡшы беләһегеҙ!

Сталин. Беләм, беләм, тыныслан.

Поскребышев. Шул Власовтың штабында әтмәләнеп, дошман матбуғатында баҫып таратырға тәғәйенләнгән бысраҡ опус. “Ни өсөн мин большевизм менән көрәш юлына баҫтым?” тип атала. Судоплатов каналынан.

Сталин. Һе! Икенсеһе?

Поскребышев *(ныҡ уңайһыҙланып).* Икенсеһен, иптәш Сталин, әйтергә телем бармай, шәхсән һеҙгә ҡағылышлы… Власов Ҡытайҙа сағында беҙҙең эшкә ылыктырған Чан Кайши ҡатыны Сун Мейлиндан.

Сталин. Сун Мейлинға ышанырға ярай. Эш ниҙә?

Поскребышев. Мин партияның Өфө губкомында эшләгәндә шундағы башҡорттарҙың бер ғәҙәте бар ине: бер-береһенең ырыуын, ата-бабаһын төпсөнөп, үҙҙәре әйтмешләй, энәһенән ебенәсә тикшерәләр. Икенсе фронт астыртыуҙы тиҙләтергә өгөт-нәсихәтсе итеп Нью-Йоркка ебәрелгән Михоэльс та хәс шулар кеүек…

Сталин. СССР Антифашист комитеты рәйесе Михоэльсме?

Поскребышев. Тап үҙе. Йыуан ҡорһаҡтар араһында ауыҙына ни килһә шуны лығырҙаған…

Сталин. Ҡыҫкараҡ!

Поскребышев. Йыйын йәһүд банкирҙар клубында, СССР-ға ярҙамдарын арттырырға кәрәклеген дәлилләп, имеш, Иосиф Виссарионовичтың үҙенең дә, атаһының да исемдәре йәһүдсә, сөнки ул үҙебеҙҙең йәһүд, Джугашвили тигән ата-баба фамилияһындағы "джуга" ла – боронғо грузин телендә "йәһүд", ә "швили" – "улы" тигән һүҙ, тип сафсата һатҡан…

Сталин (*төрөпкәһенән ярһыулы һура-һура, тура өргән төтөнөнән ярҙамсыһын сәсәтеп)*. Ҡасан килде был ғәйбәт?

Поскребышев. Бынан бер аҙна элек.

Сталин. Ниңә тотҡарланың? Тағы кемгә һайраның?!

Поскребышев. Тартындым… үҙегеҙҙең ышаныслығыҙ Мехлисҡа ғына…

Сталин. Ахмаҡбаш! *(Поскребышевты, елкәһенән бөрөп алып, танауын өҫтәлгә төйә)*. Бына һиңә, бына һиңә! Итексе малайы!

Поскребышев *(танауы ҡанаған килеш ҡалҡынып шыңшый).* Итексе малайынан ишетәм, иптәш Сталин!

Сталин. Һе! Бәхетең, икебеҙ тиң итексе малайы икән шул. (*Салфетка ҡағыҙы ыргыта).* Һөрт танауыңды!

Поскребышев *(иламһырап).* Мин бит һеҙҙең өсөн… иптәш Сталин…

Сталин. Ғәфү ит, Александр Николаевич. Ҡалдыр папканы.

Поскребышев. Рәхмәт, рәхмәт, Иосиф Виссарионович!

Сталин. Мехлис инһен.

Поскребышев. Тыңлайым *(китә).*

## Икенсе сәхнә.

Сталин, Мехлис.

Мехлис *(түбәнселекле эйелеп-бөгөлөп).* Һаумыһығыҙ, Иосиф Виссарионович?

Сталин. Һауғайным да, түгелде, тип әйтә торғайнымы әле теге егерменсе йылда икебеҙ бергә хеҙмәт иткән фронттағы башҡорттар? Ниңә тағы йыландай бөгәрләнәһең, ҡойроҡҡа баҫтылармы? Күптән түгел Ҡырымды башҡөлләй Манштейнға тапшырып ҡайтҡаныңдағылай.

Мехлис. Ғәфү итегеҙ, иптәш Сталин.

Сталин. Күпме ғәфү итергә була? Ун ике көн араһында 350 самолетты, 400 танкыны юғалтып, 176 мең һалдатты (төрөпкәһен үргә төртөп) – ун ете дивизия! – гүргә һалып киттегеҙ.

Мехлис. Генерал Козловтың әрпешлеге, башбаштаҡлығы арҡаһында.

Сталин. Ә һин үҙең ни ҡараның? Фәләнемдең башынмы?!. – баяғы башҡорттар әйтмешләй…

Мехлис *(хужаһының аяғына йығылып).* Мин, мин… һуңғы тамсы ҡанымаса һеҙҙең юлда, иптәш Сталин!

Сталин. Борғоланма! *(Тибеп торғоҙа).* Сталин барыһын да күрә, бер нәмәне лә онотмай.

Мехлис. Иптәш Сталин, беләһегеҙ, Халхин-Голда япон самурайҙарына ҡаршы һуғышта уҡ, “За Родину, за Сталина!” тигән ҡөҙрәтле оранды Ҡыҙыл Армия тарихында башлап мин һөрәнләттем.

Сталин. Һөрәнләттең… Яланғас Ҡырым далаларында һалдаттарҙы окоп ҡаҙып ышыҡланырға кем тыйҙы?

Мехлис. Мин, мин, иптәш Сталин. “Бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә!” тигән бөйөк приказығыҙҙы арттыра биреп үтәнем.

Сталин. Эйе, хатта ярты аҙым да! *(Пауза).* Ләкин арттырып үтәүҙең дә сиге бар. Әгәр һалдат Сталинградта бер нәмәгә лә ышыҡланмай, пуляларға гелән күкрәк ҡуйып алға ынтылһа, еңеп сығыр инекме? Ысын йыртҡыс һин, Мехлис.

Мехлис. Йыртҡыс, ләкин үҙегеҙҙең йыртҡыс…

Сталин. Дөрөҫөрәге, мәңге өлгөр һ螺еллдәүек күләгәм! *(Уйланып, Мехлис яурынына ҡулын һалып).* Ә мин күләгәмә генә ышанам, уның менән генә бәхәскә керәм, иптәш Мехлис…

Мехлис. Һеҙҙең һәр һүҙегеҙ миңә -- алтын аҡыл, иптәш Сталин. Күләгәгеҙ булыуымдан сикһеҙ-сикһеҙ ғорурмын!

Сталин. Күләгәһен күләгәм дә ул, ләкин үҙ күләгәң ҡаплай башланы.

Мехлис. Иптәш Сталин, мин…

Сталин. Эйе, һин! Һыймай башланың күләгәмә! Кем ул һуғыш башланыр алдынан, ҡолағымды туҡтауһыҙ игәп йөрөп, Ҡыҙыл Армияның һәр ун генералынан – туғыҙын, һәр ун полковнигынан – һигеҙен расходҡа сығарттырҙы? Һуғыш барған бер йыл араһында миллион һалдатты ялан хөкөмөнә тарттырып, 157 меңен *(төрөпкәһен үргә төртөп)* – ун биш дивизиялы тулы армия! – кем соҡорға ауҙартты? Бына ниндәй бүләк бирҙең Гитлерға!

Мехлис. Әгәр шулай ҡылмаһаҡ, ҡул күтәреп сығып китерҙәр ине! Беҙгә атырҙар ине… Бигерәк тә нацмендар!

Сталин. Нацмен да совет кешеһе.

Мехлис. Разведка мәғлүмәттәре буйынса, ошо көндә әсиргә төшкән нацмендарҙан -- 90 батальон, үҙтеләклеләрҙән -- ҡалмыҡ атлы бригадаһы, недобиток аҡ генерал Красновтың Дон казактары корпусы теге яҡтан “Хайль Гитлер!” тип ҡысҡыра. Суртан үҙе үлһә лә, теше үлмәй…

Сталин *(төтөнөн ҡуйы боролдатып)*. Был да башҡорт мәҡәлеме?

Мехлис. Егерменсе йылдың алыҫ шаңдауы... Нацмен, тигәндән, Польша кампанияһы иҫкә төштө, иптәш Сталин. Бөгөнгөләй хәтеремдә: кәпәс бәргесләп кенә Варшаваны алырға ынтылған Тухачевскийҙың авантюраһын һеҙ ҡырҡа фашланығыҙ. Уны тотанаҡларға тип ҡәһетләнгән Буденныйҙың атлы армияһын ебәрмәй тотоп ҡалдығыҙ. Әммә Башҡорт бригадаһының командиры Мортазин: “Беҙ – башҡорттар! Барабыҙ!” тип баш бирмәҫкә ҡарғығас, танауын ҡаната һуҡтығыҙ…

Сталин. Боҙоҡ ҡан.

Мехлис. Вот именно! Боҙоҡ ҡанды, бөтә державаға таралмаһын өсөн, ағыҙып ташлап ҡына ҡотолоп була. Ваҡытында етерлек сара күрмәнек…

Сталин. Сара… сара… Һаман етмәйме һиңә? Ҡан еҫе укшытмаймы?

Мехлис. Уҡшытмай, иптәш Сталин, сөнки һәр бер ынтылышым – держава файҙаһына. Борон-борондан сая табиптар булған, боҙоҡ ҡанлы пациентты “кровопущение” яһап дауалаған, укшымаған. Мин – табип. Һеҙҙең егәрле табип!

Стпалин. Да… отменный табип. Тик ниңәлер пациенттарың һуңғы ваҡытта Гитлер дауаханаһында сыуала…

Мехлис *(тамағы ҡарлығып).* Ғыҡ…

Сталин. Ниңә өнөң тығылды? Тыңла, отменный табип *(ҡағыҙҙан уҡый)*: “…в немецкой армии имеется 90 батальонов, из них 26 туркестанских, 15 азербайджанских, 13… *(бераҙ тынлыҡ)* грузинских, 12 армянских, 9 северокавказских, 8 батальонов крымских татар, 7 батальонов волжских татар и других народов Поволжья и Урала. Рьяно воюет Калмыцкий кавалерийский корпус"… Вот! Һине генерал-полковник итеп күтәрҙек, Ҡыҙыл Армияның главный комиссары яһаныҡ, ә һин… ышанысты аҡламайһың.

Мехлис. Иосиф Виссарионович, ғәфү итегеҙ, был бит беҙҙең дөйөм етешһеҙлек… Бөйөк Сталин Конституцияһына, һәр милләт үҙбилдәләнешкә, хатта СССР составынан сығып китергә хоҡуҡлы, тип иҫ киткес һүҙҙәр яҙҙыҡ, эреле-ваҡлы барлыҡ нацмендарҙы тиңһеҙ бөйөк рус халҡы менән тиңләнек. Шул арҡала уғата аҙҙы боҙоҡ ҡан! – ҡыбырҙаған һәр нацmegдың мейеһенә тулыһынса үҙаллылыҡ идеяһы бацилла булып кереп ултырҙы… *(Аҙыраҡ тынлыҡ).* Эх Иосиф Виссарионович, һеҙ бит ошо касафатты даһиҙарса алдан күреп, 1917 йылда уҡ “Правда” гәзитендә: “Развитие капитализма в его высших формах… с его централизующими тенденциями требуют не федеральной, а унитарной формы государственной жизни. Мы не можем не считаться с этой тенденцией, если не беремся, конечно, повернуть назад колесо истории. Но из этого следует, что неразумно добиваться для России федерации, самой жизнью обреченной на исчезновение”, -- тип яҙҙығыҙ.

Сталин *(төрөпкәһенең көлөн өҫтәлдәге көлдөксәгә ҡағып, яңынан тәмәке төйгөсләп).* "Алдан" тигәнегеҙ менән килешмәйем. Ленин минән күп тапҡырҙар элгәре, 1913 йылда уҡ, Шаумянға ебәргән хатында: "Мы -- за демократический централизм, безусловно. Мы против федерации... Мы в принципе против федерации -- она ослабляет экономическую связь, она негодный тип для одного государства", -- тип ҡаты иҫкәрткәйне. Лениндың мин тоғро шәкерте генә.

Мехлис. Шулай була тороп та…

Сталин. Нимә? Әйтеп бөтөрөгөҙ!

Мехлис. Башҡорттоң һеҙ танауын ҡаната һуҡтығыҙ, ләкин, атайҙарса башынан һыйпап, автономия бирҙегеҙ…

Сталин. Сөнки беҙ, большевиктар, һынмаҫ булат ҡоросолай һығылмалылыҡҡа эйә. Шул компромисс арҡаһында Колчактың муйынын һындырҙыҡ, Юденичтың елкәһенә ҡундырҙыҡ. Федератив ҡоролошҡа барыуыбыҙ ваҡытлы сара ине. Икенсе йылында уҡ беҙ ул эренле шырауҙы тәнебеҙҙән һурып ала башланыҡ.

Мехлис. Тик боҙоҡ ҡан аҙаҡҡаса таҙартылмайынса ҡалды, башҡаларға таралды… Шуны Гитлер фашизмы кинәнеп файҙалана… Недобиток аҡ генерал Краснов бына нимә ти *(ҡағыҙҙан уҡый):* "Здравствуй, фюрер, в Великой Германии, а мы казаки на тихом Дону. Казаки! Помните, Вы не русские, вы казаки, самостоятельный народ. Русские враждебны Вам. Москва всегда была врагом казаков, давила их и эксплуатировала. Теперь настало время, когда мы, казаки, можем создать свою независимую от Москвы жизнь. Русских необходимо запереть в рамки старого Московского княжества, откуда началось продвижение московского империализма. Да поможет Господь немецкому оружию и Гитлеру!".

Сталин *(трубкаһын шырпы утынан тоҡандырып, йыш-йыш һурып).* Бына быныһында, Мехлис, һин прав. Казактарҙы, ысынлап та, недобиток көйөнсә ҡалдырғанбыҙ.

Мехлис. Уларҙан тыш… Башҡорт дивизияһы… хәүефләндерә мине.

Сталин. Юҡҡа башың ҡатмаһын. Уның командиры итеп Шайморатовты ҡуйҙыҡ. Ышаныслы.

Мехлис. Ғәфү итегеҙ, Власов та ифрат ышаныслы ине… Шайморатов иһә уның Ҡытайҙағы однокашнигы.

Сталин. Шайморатов Ҡытайҙа Мао Цзедундың Ҡыҙыл Армияһын төҙөнө һәм уны көрәшкә әйҙәне. Беҙ уны Кремль полкының командиры итеп ҡуйҙыҡ. Шайморатов һуғыштың беренсе көндәрендә үк үҙе теләп фронтҡа китте, Мәскәү яны алыштарында генерал Доватор корпусында батырлыҡтар күрһәтеп орден алды.

Мехлис. Власов та орденлы батыр ине. Бөтә гәзиттәребеҙҙә “Мәскәүҙе ҡотҡарып ҡалыусы” тип данланыҡ. Ә хәҙер ҡайҙа йөрөй?

Сталин. Уныһы икенсе мәсьәлә. Шайморатов иптәшкә был ҡағылмай.

Мехлис. Шикләнәм. Ниңә генерал Доватор һәм полковниктары үлде лә, полковник Шайморатов иҫән ҡалды?

Сталин. Ну ты даешь, товарищ Мехлис! Алайһа ниңә Ҡырым кампанияһында генерал Козлов һәм башҡалар үлде, ә Мехлис имен ҡайтты? *(Мехлистың теле тотлога)*. Бына шулай, иптәш Мехлис. Етди ғәйепләрҙән элек ҡайҙа һинең төплө дәлил, ҡайҙа яланғас факттар?!

Мехлис. Воронеж фронтында шул Башҡорт дивизияһы гәзите минең мәҡәләләге “Сталинская стратегия” тигәнемде “Сталинская трагедия” тип ташҡа баҫып сығарҙы.

Сталин. Һе!

Мехлис. Гәзиттең баш редакторы, Ҡарнаев тигән әҙәм аҡтығы, мин штабҡа саҡыртҡас, үҙ-үҙенә ҡул һалды.

Сталин. Һе! Үлмәйенсә штабыңа килеп етһә, ни эшләтер инең икән?

Мехлис. Шунда уҡ атып йығыр инем негодяйҙы.

Сталин (*тауышы йомшарып).* Өфө гәзитенең әрпеш бер редакторы ла, “Сталинград” урынына “Сталин гад” тигән художество ебәреп, Үҙәк Комитетҡа килеп баш орҙо, тигәйнеләр.

Мехлис. Сәсрәттегеҙме башын?

Сталин. Иҫән сағыңда башыңды алып олаҡ, тип өгөтләп, күтенә тибергә ҡуштым.

Мехлис. Ә зерә. Мин булһам… үҙ ҡулым менән…

Сталин *(баш сайҡап)*. Ну и ну!.. нисәүҙең башына еттең?

Мехлис. Һанаманым, иптәш Сталин. Барыһы ла халыҡ дошманы ине.

Сталин. Афарин! *(Уйланып, Мехлис яурынына ҡулын һалып).* Мин йыртмағанда ла – йыртҡысым, мин йоҡлағанда ла уяу күләгәм бит һин…

Мехлис. Уяуҙарҙан уяумын!

Сталин *(төрөпкә менән төртөп).* Күләгәмә боҫмай ғына әйт әле: Поскребышев биргән теге… ҡағыҙ ярпыһын ҡайҙа иттең?

Мехлис. Мин уны төтөнһөҙ яндырып көл яһаным, еҫе-ҡоҫо сыҡмаҫлыҡ итеп.

Сталин *(күҙҙәрен аҡайтып).* Ну?!

Мехлис. Грузия Фәндәр академияһы президентын төнгө татлы йоҡоһонан уятып, фамилияның бик боронғо грузин телендә аслан нимә аңлатҡанын йәһәт төпсөрләтеп алдым.

Сталин. Һәм?

Мехлис. Бик боронғо грузин телендә “джуга” – русса “сталь” икәне кире ҡаҡҡыһыҙ раҫланды. Йәғни сталь – Сталин…

Сталин. Дөп-дөрөҫ. *(Төрөпкәһен ишек яғына төртөп)*. Барығыҙ. Көньяҡ-Көнбайыш фронтта ла ҡорос ҡатылығы һаҡлап, тере күләгәм булып, дүрт күҙ менән аңдығыҙ.

Мехлис. Тыңлайым. Һеҙҙең юлда йәнем фиҙа, Иосиф Виссарионович! *(Китә).*

Сталин *(сыңғырҙаҡ төймәгә баҫып)*. Александр Николаевич, керһендәр, башларға ваҡыт.

Поскребышев *(ишек ҡыҫығынан тасай түбәһе ялтырай).* Тыңлайым.

Хәрбиҙәр төркөмө эркелә.

## Өсөнсө сәхнә.

Сталин, Берия, Василевский, Буденный, Ватутин, Лелюшенко.

Сталин. Һаумыһығыҙ, рәхим итеп урынлашығыҙ.

Инеүселәр. Һаумыһығыҙ, иптәш Сталин *(оҙон өҫтәл тирәләй ултырышалар).*

Сталин. Үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, Сталинградтан һуң ғәскәрҙәребеҙ, көнбайышҡа табан һөжүмде көсәйтеп, бер туҡтауһыҙ алға ынтылды, туғандаш Украина сиктәренә барып еттек. Инде Донбасс тәңгәлендә удар яһап, Украинаны азат итеү, СССР-ҙың әүәлге дәүләт сиктәренә сығыу бурысы тора. Юғары командование Ставкаһы ошо 1943 йылдың 20 ғинуарында “Скачок” тигән шартлы исемдәге һөжүм операцияһы планын раҫланы. Быны бойомға ашырыу Көньяҡ-Көнбайыш фронтҡа ышанып тапшырыла. Иптәш Василевский, ҡыҫҡаса аңлатығыҙ.

Василевский *(күрһәткес таяҡ тотоп, карта алдына баҫа).* Ҡыҫҡаса алғанда, бурыс һәм уның үтәлеше ошондай: Көньяҡ-Көнбайыш фронт армиялары (командующий иптәш Ватутин), Покровск, Старобельск, Краматорск, Артемовск ҡалалары һыҙымындағы линияла дошманға емергес удар яһап, Сталино, Волноваха, Мариуполь йүнәлешендә туҡтауһыҙ дөрөргә; бер үк ваҡытта Каменскиҙан көньяҡ-көнбайыштараҡ Сталино йүнәлешендә көслө һөжүмгә күсергә, дошмандың Донбаста һәм Ростов янында өйөрләнгән тулайым төркөмөн, көнбайышҡа сигенеү юлын киҫеп, уратып алып юҡ итергә тейеш. Операцияның етенсе көнөндә Мариуполде алырға һәм һөҙөмтәлә Запорожье -- Днепропетровск районындағы Днепр кисеүҙәрен ҡулға төшөрөргә.

Сталин. Бурыс аңлашыла. Ленindың “бөгөн башлаһаҡ – иртә, ә иртәгә һуң буласаҡ” тигән ҡанатлы һүҙҙәрен иҫтә тотоп, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға!

Берия. Сталинградта томшоғо ҡанап иҫәнгерәгән дошман иҫ йыймаҫы элек.

Сталин. Иптәш Ватутин, фекерегеҙ? Фронт шуға әҙерме?

Ватутин. Иптәш Сталин, был һорауға бер генә яуап булырға мөмкин: һеҙҙең әмер буйынса беҙ ут һәм һыу кисергә әҙер. Тик шуныһы, һөжүмде тәғәйен ҡасан, ҡайһы сәғәттә башлау мәсьәләһе…

Сталин. Уныһы үҙ ваҡытында иҫкәртелер. Көстәр нисбәте ниндәй?

Ватутин. Дошман яҡтыҡы үҙегеҙгә билдәле – Донбастан ҡолаҡ ҡаҡмаҫ өсөн оло йоҙроҡ йомарлаған. Беҙҙең яҡта: 6-сы, 1-се гвардия, 3-сө гвардия армиялары; 5-се танкылар армияһы, 17-се һауа армияһы. Быларҙан тыш, дүрт танкылар корпусынан, ике айырым танкылар бригадаһынан һәм өс уҡсы дивизиянан хасил хәрәкәтсән төркөм. Йәғни йәмғеһе 29 уҡсы дивизия; йәнә ике уҡсы, бер саңғысы-уҡсы һәм өс танкылар бригадаһы; туғыҙ танкылар, бер механикалаштырылған һәм бер кавалерия корпустары һәм бер танкылар полкы.

Берия. Оһо, иптәш Ватутиндың йоҙроғо ла йомшаҡ түгел!

Ватутин. Ләкин, әле генә әйткәнемсә, ваҡыт факторы… Сталинградтан һуң ылдарыбыҙ 400 километр артта тороп ҡалды, шәхси состав, аҙыҡ-түлек, заманса техника, ҡорал һәм боеприпас йәһәтенән үтә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Уҡсы дивизияларҙың шәхси составы – 60-70%-ҡа, атлы корпустыҡы хатта 30-40%-ҡа ҡалған. Һөжүмгә күсерҙән элек шуларҙы тулыландырыу мотлаҡ.

Сталин. Василевский иптәш, быныһы һеҙгә ҡағыла: тулыландырыу күпмегә һуҙыласаҡ?

Василевский. Билдәләнгән срокка өлгөрәсәкбеҙ, иптәш Сталин.

Берия. Так что, Ватутин иптәш, тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ!

Сталин. 3-сө гвардия армияһы командующийын тыңлайыҡ. Лелюшенко иптәш теләһә ниндәй шарттарҙа ла алға бара, “Гел Алға” тигән хөрмәтле ләҡәп тә алды, буғай.

Лелюшенко. Иптәш Сталин, бер нәмәгә лә ҡарамай, һеҙ һыҙған еңеүле юлдан Донбасты ла алырбыҙ, Днепрҙы ла кисербеҙ – беҙҙең көс тә, дәрт-дарман да етерлек. Минең гвардиясылар һынатмаҫ.

Сталин. Беренсе бурыс – Донбастың алтын асҡысы Ворошиловградты алыу. Семен Михайлович, 1919 йылда һеҙҙең Атлы армия аҡтар тылына тәрән рейд яһап Дебальцевола тимер юлдарын киҫкәс, Луганск усыбыҙға бешкән татлы алмалай өҙөлөп төшкәйне. Генерал Лелюшенко армияһы составындағы 8-се атлы корпус һеҙҙең данлы рейдты ҡабатлай ала. Нисек уйлайһығыҙ?

Буденный. Һм… Бер үк йылғаға ике тапҡыр кереп булмай бит, Иосиф Виссарионович.

Сталин. Ә беҙ, большевиктар, кәрәк саҡта өс тапҡыр ҙа керәбеҙ. Кемдән-кемдән, ә Кавалерия командующийынан көтмәгәйнем бындай һүҙҙе.

Берия. Буденный иптәштән барыһын көтөргә була. *(Ҡағыҙ сығарып).* Бына уның фронттарға ебәргән бер приказы: “Не допускать использование кавалерийских корпусов для самостоятельного прорыва укрепленных рубежей и захвата населенных пунктов”… Быны нисек аңларға?

Буденный. Быны ошолай аңларға: хәҙер 1919 йыл түгел, атлыларҙы ерҙән дә, күктән дә себен урынына ҡырып һалалар. Егерме ике корпустан һигеҙе генә ҡалды, улары ла ярым-ярты. Зенит пушкалары юҡ, авиация ярҙамға килмәй. Воронеж, Сталинград янында данланған Башҡорт атлы дивизияһы Дон далаларында бомбалар аҫтында ҡалып, бер көн эсендә мең баш атын, меңгә яҡын кешеһен юғалтты, ошо көндә тейешле алты мең урынына мең һигеҙ йөҙ генә ҡылыс иҫәптә. Корпустың башҡа дивизияларында ла шул уҡ хәл. Декрет буйынса корпусҡа зенит артдивизионы, 128 танк, 44 бронемашина, хатта гвардия минометтары (“катюша”лар) беркетелергә тейеш, ләкин үтәлмәй…

Ватутин. Семен Михайлович, барыһын да күҙ уңында тотабыҙ, генерал Лелюшенкоға күрһәтмә бирелгән.

Лелюшенко. Армияға беркетелгән 8-се атлы корпус үҙ бурысын намыҫлы үтәп сығыр.

Сталин. Һорауҙар юҡмы? Мәсьәлә сиселде, таралышырға мөмкин… иптәш Бериянан башҡалары *(икеһе генә ҡала).*

## Дүртенсе сәхнә

Сталин, Берия.

Сталин. Лаврентий, нимә был? *(Ҡыҙыл папканан алып өҫтәлгә ҡағыҙ ырғыта).*

Берия *(ҡулына алмай ғына күҙ йүгертеп).* Андрей Андреевич Власовтың писулькаһы.

Сталин. Писулька?! *(Ҡағыҙҙан ҡысҡырып уҡый).* “Я видел, что растаптывается все русское, что на руководящие посты в Красной Армии выдвигались подхалимы, люди, которым не были дороги интересы русского народа. ***СИСТЕМА КОМИССАРОВ РАЗЛАГАЛА КРАСНУЮ АРМИЮ***. ***БЕЗОТВЕТСТВЕННОСТЬ, СЛЕЖКА, ШПИОНАЖ ДЕЛАЛИ КОМАНДИРА ИГРУШКОЙ В РУКАХ ПАРТИЙНЫХ ЧИНОВНИКОВ В ГРАЖДАНСКОМ КОСТЮМЕ ИЛИ В ВОЕННОЙ ФОРМЕ***… Нерешительное, ***РАЗВРАЩЕННОЕ КОМИССАРСКИМ КОНТРОЛЕМ*** и растерявшееся Управление фронтом привело Красную армию к ряду тяжелых поражений”… Ошомо “писулька”? *(Ҡағыҙҙы кире ырғыта).*

Берия. Иосиф Виссарионович…

Сталин. Тилебәрән ашағанмы был Власов?! Ошо буламы стратегик разведчик?! Бөтә эштәребеҙҙең бәҫен ебәрҙе!

Берия. Иосиф Виссарионович, Ҡыҙыл Армияға ҡағылышлы билдәле хаталарыбыҙ тураһында Геббельс белгәнде генә әтмәләй бит ул. Ләкин Андрей Андреевич тәмле пилюлягә ҡушып үҙенекен йотторта, тыңлағыҙ *(ҡағыҙҙы алып уҡый)*: “В последние месяцы ***СТАЛИН, ВИДЯ***, что ***РУССКИЙ НАРОД НЕ ЖЕЛАЕТ БОРОТЬСЯ ЗА ЧУЖДЫЕ ЕМУ ИНТЕРНАЦИОНАЛЬНЫЕ ЗАДАЧИ*** *большевизма*, ***ВНЕШНЕ ИЗМЕНИЛ ПОЛИТИКУ В ОТНОШЕНИИ РУССКИХ***. ***ОН УНИЧТОЖИЛ ИНСТИТУТ КОМИССАРОВ, ОН ПОПЫТАЛСЯ ЗАКЛЮЧИТЬ СОЮЗ С ПРОДАЖНЫМИ РУКОВОДИТЕЛЯМИ ПРЕСЛЕДОВАВШЕЙСЯ ПРЕЖДЕ ЦЕРКВИ, ОН ПЫТАЕТСЯ ВОССТАНОВИТЬ ТРАДИЦИИ СТАРОЙ АРМИИ***. Чтобы заставить Русский народ проливать кровь за чужие интересы, ***СТАЛИН ВСПОМИНАЕТ ВЕЛИКИЕ ИМЕНА АЛЕКСАНДРА НЕВСКОГО, КУТУЗОВА, СУВОРОВА, МИНИНА И ПОЖАРСКОГО***. Он хочет уверить, что борется за Родину, за Отечество, за Россию”. Текстың төп йөкмәткеһенә иғтибар итәйек! Был текста Геббельстың елгә осор кәбәктәре араһына беҙҙең тос бөртөктәр төрөлгән, улар күҙгә бәреләә! Йәғни барлыҡ хаталарыбыҙҙың иптәш Сталин тарафынан тиҙ үк төҙәтелеүен, иптәш Сталин арымай-талмай Тыуған ил өсөн, Рәсәй өсөн, совет Ватаны өсөн дәһшәтле алыштың башында тороуын гитлерсылар ҡоллоғона дусар ҡылынған ябай халыҡҡа, эзоп теле менән генә булһа ла, йәненә үткәҙеп аңлата. Һәм иғтибар итегеҙ: Гитлер фашизмын яҡлау тураһында ярты ауыҙ һүҙ ҙә юҡ, Германия халҡы менән берләшергә саҡыра, ә был иһә һеҙҙең бөтә донъяға аһәңле яңғыраған: “Гитлерҙар килә лә китә, ә герман халҡы, Германия ҡала!” – тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙе ҡабатлау түгелме ни? Тик икебеҙ генә белгән стратегик резидентыбыҙ Власов унда, фашизмдың ояһында, һеҙ үҙегеҙ билдәләгән төп маҡсатҡа өлгәшһә, фельдмаршал фон Бок беҙгә ҡаршы йүнәлтергә тырышып төҙөй башлаған, “Рус Азатлыҡ Армияһы” тип аталған батальондар һәм дивизиялар, Иосиф Виссарионович, һеҙҙең зирәк контроль аҫтында буласаҡ!

Сталин. Власов үҙе контрольдән сыҡмағайы! *(Ҡағыҙҙы алып ҡысҡырып уҡый).* “Ни Сталин, ни большевизм не борются за Россию. Только в рядах антибольшевистского движения создается действительно наша Родина. Дело русских, их долг – борьба против Сталина, за мир, за новую Россию”. Лаврентий, былары ла иптәш Сталиндың ҡанатлы һүҙҙәреме?!

Берия. Гитлерҙың кәшкәй танауына әфйүн төтөнө ебәреү был, иптәш Сталин, тап үҙегеҙ ҡушҡанса… Буржуаз Ҡытайҙың Гоминдан лидеры Чан Кайшиҙы, уның ҡатыны Сун Мейлинды ла Власовтың ошондай уҡ әфйүне тылсымланы, ҡытай халҡын япондарға ҡаршы көрәшкә күтәрҙе. Андрей Андреевич Чан Кайшиҙың үҙ ҡулынан “Алтын Аждаһа” орденын тағып ҡайтты. Һеҙҙең үҙегеҙҙең ҡулдан Ленин орденын алды. Һеҙ үҙегеҙ теләп уны фронт аша көнбайышҡа ебәрҙегеҙ, теләгән бер ысул менән Гитлерҙың йылы ҡуйынына йылан булып үрмәләргә ҡуштығыҙ, Отечество файҙаһына сикләнмәгән пропаганда хоҡуғы бирҙегеҙ…

Сталин. Лаврентий, көҙәлек эштә күңелеңдең ҡорғаҡһыуы күренә. Әммә стратегик разведка тормошонда ла шифриәткә урын барлығын онотоорға ярамай.

Берия (ҡаушабыраҡ). Мәсәлән, иптәш Сталин?

Сталин. Владимир Маяковскийҙы беләһеңме, мәсәлән?

Берия. А как же! "Владимир Маяковский – был и остается великим поэтом советской эпохи", -- был һеҙең ҡанатлы алтын һүҙҙәр, иптәш Сталин.

Сталин *(Маяковский поэмаһынан өҙөк)*. "Мы говорим – Ленин, подразумеваем, – партия,/мы говорим – партия, подразумеваем – Ленин". Дөрөҫмө?

Берия. Дөп-дөрөҫ! Әммә бөгөн ул яңыса яңғырарға тейештер: "Мы говорим – Сталин, подразумеваем, – Отечество,/мы говорим – Отечество, подразумеваем – Сталин".

Сталин. Похвально! Сталин һәм Отечество – айырылғыһыҙ бер үк төшөнсә икәнлеген Берлиндағы стратегик резидентың да танауындағы киртек кеүек яҡшы белергә тейеш, Лаврентий! *(Төрөпкәһенән бер быуа төтөн борлатып алғас).* Михоэльс мәсьәләһен яҡшылап уйлап ҡара. Беҙ уға театр булдырҙыҡ, Советтар Союзының халыҡ артисы исемен бирҙек, ә ул һаман сионизм тирмәненә һыу ҡоя.

Берия. Был мәсьәлә күҙ уңынан ысҡынмай, Иосиф Виссарионович. Хәҙергә йөрөп торһон, антифашист комитетын арыу гына етәкләй. Һуғыш бөткәс тә…

Сталин. Әммә ҡайһы бер мәсьәләләрҙә һуғыш бөтөүен көтөргә һис ярамай. Ниңә Кавказ, Ҡырым, Волга буйы нацмендары Гитлер лагерында ҡотороноп болғана?

Берия. Ундай халыҡтарҙы, территориялары азат ителгәс тә үк, Себергә, йәки башҡа урындарға тулайым һөрөргә тәҡдим итәм.

Сталин. Ҡарарбыҙ. Башҡорт дивизияһына айырым иғтибар кәрәк… хәстәрләгеҙ.

Берия. Хәстәрләйбеҙ, иптәш Сталин. Хәрби Совет ағзаһы Мехлис менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Сығырға мөмкинме?

Сталин. Туҡтағыҙ. Иптәш Мехлис Грузия Фәндәр академияһының архиважный ҡаҙанышы тураһында хәбәр итте, ә һин шуны белмәйһең.

Берия. Беләм, иптәш Сталин, тура Һеҙгә ҡағылышлы. "Джуга" мәсьәләһе.

Сталин. Яңылышаһың, Лаврентий, бөтә совет халҡына, бөйөк ленинсы идеологиябыҙға туранан-тура ҡағылышлы!

Берия. Эйе, архиважный мәсьәлә, дөп-дөрөҫ сиселешле.

Сталин *(уйланып)*. Шул дөп-дөрөҫ сиселеште тәьмин иткән аҡыл эйәһе академикка Ленин ордены бирербеҙ, ә һин уның… *(төрөпкәһен быҫҡытҡылап алғас)* Хоҙай Тәғәлә ожмахына күсеүен тәьмин итерһең.

Берия. Аңлашылды, иптәш Сталин.

## Бишенсе сәхнә.

Растенбург янындағы Гитлер ставкаһында, өҫтәлгә ҙур карта йәйелгән. Гитлер, Цейтцлер, Манштейн.

Гитлер. Сталинград катастрофаһынан һуң, мәңгелек рейхтың яҙмышында хәтәр хәл килеп тыуҙы. Нефткә бай Кавказ ҡулдан ысҡынды, Волга аръяғындағы минераль ресурстар ояһы Уралға буй етмәне. Сталиндың фанатик армадалары Донбасс ҡапҡаһы алдында тора янап. Донбасс хәҙер беҙҙең өсөн үтә зарур ташкүмер һәм металл сығанағы булыу менән бергә уңдырышлы ҡара тупраҡ зонаһы һәм арзан эш ҡулдары биреүсе Украинаның ҡапҡаһы. Ул ҡапҡаға большевиктарҙы үткәрмәү – беҙҙең стратегик бурыс. Тиҙерәк һөжүмгә күсергә, Харьковты кире ҡайтарып алырға кәрәк. Цейтцлер?

Цейтцлер. Дөйөм алғанда, һеҙҙең менән тулыһынса килешәм. Әммә хәҙергә Харьков йүнәлешендә хәрәкәт итеү үтә хәүефле. Рустарҙың көсө икеләтә артыҡ – беҙҙең фронттың оҙонайыуынан файҙаланып, Донбасҡа ярып кереүҙәре ихтимал. Хәҙер унда фронтты фон Манштейндың “Дон” ғәскәри төркөмө тотоп тора.

Гитлер. Фон Манштейн?

Манштейн. “Дон” төркөмөндә ун алты пехота, туғыҙ танкылар һәм ике моторлаштырылған дивизиялар бар. Дошман көстәре күпкә артыҡ һәм Харьковты штурмлауҙы кисектерергә, бөтә ҡеүәтте Донбасс тәңгәлендә тупларға тәҡдим итәм.

Гитлер. Ворошиловград ни рәүешле нығытылған?

Манштейн. Ҡеүәтле өс ҡат оборона ҡулсалары, ҡулса буйлап теҙелгән ут яуҙырғыс “ҡорос ҡалпаҡ”тар. Әммә хәрәкәтсән көстәр етешмәй.

Цейтцлер. Фон Манштейн фекеренә ҡушылам. “Дон” төркөмөн шаҡтай көсәйтеү зарур.

Гитлер. Ярай, Харьков ҡалып торһон. Хәл иткес йүнәлеш артабан Дондан көньяҡтараҡ билдәләнә, “Дон” төркөмөнә “Көньяҡ” төркөм исеме бирелә, төркөм штабы Таганрогтан Сталиноға күсерелә. Ворошиловград участкаһына Франциянан ҡайтарылған СС “Рейх” танкылар дивизияһы, 335-се пехота дивизияһы һәм Ростовтан үҙемдең исемдәге СС “Адольф Һитлер” танкылар дивизияһы беркетелә. Бөттө. *(Тороп).* Ворошиловградтты һуңғы тамсы ҡанға тиклем һаҡларға! Һайль!

Цейтцлер, Манштейн *(дәррәү тороп).* Һайль Һитлер!

## Шаршау.

# ИКЕНСЕ ШАРШАУ.

## Алтынсы сәхнә.

Рейдҡа инер алдынан Белосклеватый – Лысый утарҙары араһындағы фронт һыҙығы, Башҡорт дивизияһы штабы. Дивизия командиры, өҫтөл артында ултырып, картаға билдәләр һала.

Шайморатов, Ҡадиров, Фондеранцев, Хәбиров, Миңлеғолов, Ғайсаров.

Ҡадиров *(керә, шыҡайып, хәрбиҙәрсә тәбриклә.й, Шайморатов өҫтәл артынан сығып сәләмде ала).* Иптәш полковник, дивизия штабының парткомиссия рәйесе, дивизия политбүлек башлығы урынбаҫары капитан Ҡадиров – бойороуығыҙ буйынса килеп еттем.

Шайморатов. Вольно. Беләһегеҙ, алда – ифрат яуаплы бурыс, дошман тылына тәрән рейдҡа керәбеҙ. Һәр беребеҙ икеләтә, өсләтә ауыр йөк күтәрәсәк, ә һеҙгә -- бигерәк тә. Сөнки батальон комиссары Нәзиров дивизияға өҫтәлмә көстәр юлларға ҡайтып китте, генерал Мехлис тарафынан беҙгә ебәрелгән политбүлек башлығы майор Тац ҡаш менән күҙ араһында һыуға батҡан балталай ғәйеп булды. Так что, Ҡадиров, һеҙгә шул вазифаларҙың йәмғеһен бер юлы йөкмәргә тура килә. *(Усы менән тегенең яурын башына шапылдатып).* Ничего, иң баштарығыҙ ҡаты, күтәрерһегеҙ.

Ҡадиров. Үтәйем, иптәш полковник.

Шайморатов. Ултырығыҙ. (*Ултырышалар).* Дивизияның рухи-сәйәси хәле?

Ҡадиров. Как положено – саҡма саҡһаң ут сығырға тора, иптәш полковник. Һәр береһе ҡылыс ҡайрай, көбәк таҙарта, өйҙәренә хат яҙа. Ҡурай моңо һыҙҙыртып та ебәрәләр.

Шайморатов. Ҡурайҙы ҡайҙан алдығыҙ? Һәм ниндәй моң һуҙалар?

Ҡадиров. Красный Яр янындағы аэродромдың көлөн күккә осорғас, фашист самолеттарының ифрат файҙаһы тейҙе – алюмин көпшәләренән ҡурай яһап, “Урал” көйөн тартабыҙ.

Шайморатов. “Урал”!.. *(Баянын үрелеп алып, шул көйҙө яңғырата ла гармунды кире ҡуя, “Уйыл”ды йырлай).* Ҡурайсылар ҡурай, ай, уйнамай/Башҡорт ҡурайҙары булмаһа… Их, үҙебеҙҙең ҡурайҡайға етмәй шул… Кеме иң шәп ҡурайсы?

Ҡадиров. Капитан Миңлеғоловтың разведка взводы командиры лейтенант Мирза Ғайсаров… Йәнсура районы егете. Иң шәп ҡурай ҙа үҫәргәндәререндә -- Йәнсура менән Хәйбуллала үҫә бит.

Шайморатов. Нәзировҡа хат яҙығыҙ: бер ҡосаҡ ҡурай алып ҡайтһын.

Ҡадиров. Үҙе лә яҡшы белә ул быны, иптәш полковник. Хәйбулла башҡорто бит.

Шайморатов. Ә шулай ҙа һуғышсылар зарланамы, нимә тип?

Ҡадиров. Уныһын йәшермәйем: Олатай беләме икән, боеприпас шомотор, карабин һәм автоматҡа берәр комплект ҡына патрон, шуның менән керәбеҙме инде һуғышҡа, тиҙәр…

Шайморатов. Тороп ҡалған дивизия обоздары килеп етергә тейеш. Етмәһә, фашистарҙан тартып алып үҙҙәренә атырбыҙ – шулай тип тынысландыр.

Ҡадиров. Тыңлайым. *(Тороп).* Китергә рөхсәтме?

Шайморатов. Барығыҙ. *(Картаға эйелә).*

Фондеранцев инә, аяғөҫтө тороп һөйләшәләр.

Фондераранцев *(хәрбиҙәрсә тәбрикләп).* Иптәш полковник…

Шайморатов. Ҡыҫҡаса, подполковник, ҡыҫҡаса!

Фондеранцев. Сталинград, Тацински алыштарынан һуң, үҙегеҙ беләһегеҙ, дивизия составы утыҙ процентҡа ҡалды. Һеҙҙең приказ буйынса, Захаров һәм Иҙрисов полктарының ҡалдыҡтары минең полкка уҡмаштырылып, йыйылма полк төҙөлдө һәм ул тулы дивизия исеменән хәрби бурыс үтәргә әҙер. Әммә күңелде ҡыра: ниңә фронт беҙҙе үҙенең үгәй балаһы итеп ҡарай? Күрше ике дивизия йөҙ процентҡа еткереп тулыландырылды, ә беҙҙең өлөшкә -- ноль бөтөн ноль.

Шайморатов. Георгий Ефимович, икебеҙ тиң атылған ҡарт бүреләр, быны аңларға тейеш. Башҡа һорауҙарығыҙ бармы?

Фондеранцев. Юҡ. Аңлашыла.

Шайморатов. Алдағы бурыс һеҙгә мәғлүм. Ошо мәлдә уң флангыла беренсе армия частәре ҡаты бәрелешә -- фашист фронтынан беҙҙең өсөн ярыҡ асырға тейеш. Әҙерлекте көсәйтергә!

Фондеранцев. Тыңлайым. *(Китә).*

Миңлеғолов менән Ғайсаров инә, хәрбиҙәрсә тәбрикләйҙәр.

Миңлеғолов. Дивизияның разведка башлығы капитан Миңлеғолов.

Ғайсаров. Разведка взводы командиры лейтенәнт Ғайсаров.

Шайморатов. Əһә, лейтенант Ғайсаров… беләм, беләм… Иптәш капитан, фашист позицияларын һәрмәп ҡаранығыҙмы?

Миңлеғолов. Ҡараныҡ, иптәш полковник, фриц себен үткеһеҙ кәртәләгән.

Шайморатов. Лейтенант?

Миңлеғолов *(лейтенантҡа).* Рөхсәт, һөйләп бир.

Ғайсаров. Ғәфү итегеҙ, иптәш полковник, фриц та әҙәм балаһы, унын да себен үткеһеҙ тигән кәртәләрендә, әҙәм балаһы ғына түгел, ат үтмәле ярыҡтар бар, бына *(ҡағыҙ сығарып бирә),* һыҙғалаштырып килтерҙем.

Шайморатов *(ҡағыҙҙы күҙҙән кисереп).* Яҡшы. Юлығыҙҙа булығыҙ. *(Тегеләр сыға, корпус командующийы Борисов, уны оҙатыусы Ҡадиров керә).*

Шайморатов *(хәрбиҙәрсә тәбрикләп).* Иптәш генерал-майор…

Борисов *(ҡул һелтәп).* Кәрәкмәй, Минигалей Миназович. Как дела?

Шайморатов. Беҙ әҙер, Михаил Дмитриевич.

Борисов. Шикләнмәйем. Башҡорт дивизияһы, һәр саҡтағылай, корпус башында головной булып керә.

Шайморатов. "Ҡапҡа" асылдымы?

Борисов. Үкенескә ҡаршы, беренсе армия частәре ҡапыл бынан алынып, Ворошиловград эргәһенә ташланды. Буденный ул "капка"ны үҙебеҙгә асырға ҡуша. Шул приказ буйынса, ике дивизия һөжүмгә күсте, ләкин, дошман ҡаршылығын һындыра алмай, кире сигенергә мәжбүр. Приказываю вам немедленно поднять дивизию и проравать вражеский фронт! Бөтә корпус һеҙгә эйәреп керә, мин үҙем – һеҙҙең менән!

Шайморатов. Тыңлайым иптәш командующий. *(Борисов китә).*

Ҡадиров. Әллә яҙмыш, әллә яңылыш, тигәндәй, был юлы ла гел алдан, головная булып барабыҙ…

Шайморатов. Тимәк, ышаныслы. Беҙ – башҡорттар! По коням!

Оран тышта шаңдаулана: “По ко-о-ням!”

## Етенсе сәхнә.

Фронт штабы.

Сталин, Ватутин, Буденный, Мехлис, Лелюшенко.

Тәүҙә -- Ватутин ғына, уның телефондан Кремлдәге Сталин менән һөйләшеүе барьер аша күрһәтелә.

Ватутин. Тыңлайым, иптәш Сталин, фронт командующийы Ватутин телефонда.

Сталин. Һеҙ, Ватутин иптәш, штабта йәбешеп ултырып, әүҙемлекте юяһығыҙ түгелме? Мехлис үҙе фронтты йөрөп сыҡҡан, “Скачок” һеҙҙә “Сморчок” хәлендә икән. Ворошиловград тупһаһында ыштан төбөнә ебәреп сүкәйгәнһегеҙ, атлы корпус дошман тылына кермәгән – маршал Буденный нимә ҡарай?

Ватутин. Атлы корпус дошман тылына ярып керә башланы, маршал Буденный шәхсән үҙе шул ерҙә, иптәш Сталин.

Сталин. Ниңә Ворошиловградты штурмлап алмайһығыҙ?

Ватутин. Унда ҡанлы һуғыш бара…

Сталин. Һеҙ нимә, ҡандан ҡурҡаһығыҙмы?

Ватутин. Манштейнға өҫтәлмә көс – СС “Рейх” танкылар дивизияһы килтерелгән, беҙҙә танкылар етешмәй.

Сталин. Боецтарығыҙ ҡулында гранаталар, яндырығыс шешәләр бармы? Әллә һеҙгә өйрәтергә кәрәкме?

Ватутин. Ворошиловград алыныр, иптәш Сталин.

Сталин. Фронттың теге ҡанатында Поповтың танкылар армияһы ниңә йоҡлай?

Ватутин. СС “Адольф Гитлер” танкылар армияһына ҡаршы Поповтың йөҙ ҡырҡ танкыһы ғына ҡалды, улары ла тырым-тыраҡай, яғыулыҡтары етешмәй. Туплап алырға ваҡыт һорай.

Сталин. Ниндәй ваҡыт?! Адольф Гитлерҙың күләгәһе ҡотоғоҙҙо осорҙомо? Немедленно һөжүмгә! *(Трубканы ташлап юғала).*

Ватутин. Тыңлайым, иптәш Сталин. *(Үҙалдына).* Ах Мехлис, Мехлис… Попов армияһын үлем ҡосағына тапшырыу…

*Лелюшенко керә.*

Ватутин. Иптәш Сталиндың “Гел Алға” тип маҡтаған, һә тигәнсе Ворошиловградты алырға ебәргән батыр генералымы һеҙ? Ниңә һаман бер урында тапанаһығыҙ?

Лелюшенко. Боеприпас бөттө, иптәш командующий. Ә фашистар өҙлөкһөҙ ут яуҙыра, баш ҡалҡытырға бирмәй. Дебальцевонан уларға яңынан-яңы резервтар килә.

Ватутин. Һеҙҙең өсөн иптәш Сталин бойорорға тейешме? Тылығыҙҙы тегендә торғоҙоп ҡалдырып, фәләнсәгеҙҙе ҡалҡытып йүгерҙегеҙме?

Лелюшенко. Виноват, алға ҡарай бергә-бергә йүгерҙек, иптәш командующий. Артты ҡарамағанбыҙ… Атлы корпустың шығырым тулы тылдары беренсе булып килеп етте – боеприпас тейәлгән обоздар…

Буденный керә.

Буденный. Атлы корпус ике километр киңлек юл ярып, дошман тылына үтеп-керә башланы. Дивизиялар кеше һаны йәһәтенән – ҡырҡ биш процент, ат һаны йәһәтенән – утыҙ биш процент, артиллерия һәм миномет йәһәтенән ҡырҡ процент ҡына комплектлаштырылған, боеприпас фәҡәт полк ылауҙарында. Килеп еткән обоздарҙы кисекмәҫтән корпусҡа йүнәлтергә!

Ватутин. Отставить! *(Лелюшенкоға)*. Генерал, обоздарҙы Ворошиловград участкаһына ташларға!

Лелюшенко. Тыңлайым. *(Ашығып сыға)*.

Буденный. Иптәш командующий, фашист танкыларына ҡаршы ҡылыс менән ебәрәбеҙме корпусты!..

Мехлис инә.

Мехлис. Юл буйында дүрт "катюша" сылғау киптереп ултыра, бирегеҙ корпусҡа шуларҙы!

Буденный. Лев Захарович, атырға яҫауы ҡалмаған ҡыҫыр көбәктәрҙең унда, дошман тылында, нимәгә кәрәге бар?

Мехлис. Ҡиәфәттәре менән генә лә боецтарҙың рухын күтәреп йөрөрҙәр. Күтәренке рух – иң ҡурҡыныслы ҡорал! Әле генә тура сымдан ошо хаҡта Иосиф Виссарионович менән һөйләштем.

Ватутин *(ҡул һелтәп)*. Оҙатығыҙ тағып ҡойроҡтарына! Яҫауҙарын, килеп еткәс тә, һауанан осорторбоҙ.

## Һигеҙенсе сәхнә.

Атлы корпус, хәрби бурысын үтәп, Дебальцево янында ҡамауҙа ҡалған. Оборона һуғышы барған Чернухино ҡасабаһында – Башҡорт дивизияһы һәм корпус штабы.

Шайморатов, Ҡадиров, Фондеранцев, Хәбиров, Борисов, Айратҡолов, Ғайсаров. Тәүҙә Шайморатов *(карта өҫтөндә эшләй)* һәм Ҡадиров.

Ҡадиров. Фриц та тынғы белмәй, һөжүм артынан һөжүм. Танауҙары пыр-туҙа ҡанап табан тайҙырғастары, бераҙ тынып ҡалдылар. Яугирҙәр яңы бәрелешкә әҙерләнә.

Шайморатов. Рухи-әхләҡи мөхит?

Ҡадиров. Шап-шаҡтай. Фашист шмайсерҙары беҙҙең ҡулдарҙа ла яҡшы ата, әммә патрондар наҡыҫ.

Шайморатов. Фриц әле бөтмәгән – ҡоралдары ла бөтмәҫ.

Ҡадиров. Һауанан ярҙам көтә-көтә көтөк булабыҙ инде.

Шайморатов. Һауа шарттары насар, самолеттар оса алмай, тинеләр.

Ҡадиров. Иптәш генерал, һеҙгә Юғары Ставканан генерал-майор дәрәжәһе бирелде, корпус командующийының урынбаҫары итеп билдәләндегеҙ. Шул айҡанлы яугирҙәребеҙҙең рухын күтәреп, дәртләндереп алайыҡ.

Шайморатов. Стройға теҙеп ҡуйыпмы? Форсаты юҡ, ваҡыты ундай түгел.

Ҡадиров. Йәтеш бер форсаты бар, иптәш генерал, -- трофей радиоаппарат. Микрофоны яҡшы эшләй. Ошонан тороп шаңғыртһаҡ, фронт буйлап бөтә Чернухиноны аяҡҡа баҫтырыр.

Шайморатов *(уйланып).* Ҡурай кәрәк.

Ҡадиров. Лейтенант Ғайсаров күрше бүлмәлә көтә, ҡурайы-ҡылысы ҡынында.

Шайморатов. Мәслихәт.

Ут һүнеп ҡабына, микрофон алдында өсәү: Шайморатов, Ҡадиров, Ғайсаров. Ҡурайҙан -- “Салауат” маршы.

Ҡадиров *(микрофонга).* Ҡәҙерле һуғышсылар, яуҙа ал бирмәҫ, еңелмәҫ Салауат тоҡомдары! Ишетмәһәгеҙ ишетегеҙ: һеҙҙең атҡан һәр пуля, снаряд фашист йөрәгенә үлемесле ҡаҙалып, иптәш Сталиндың, бөтөн совет халҡының йөрәк-бауырына һары май булып яғыла. Даһи Сталин һәммәбеҙҙең батырлыҡтарын юғары баһалап, дивизиябыҙға рәхмәт хаты күндерҙе, данлы командирыбыҙ, Олатайыбыҙ Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовты генерал-майор дәрәжәһенә күтәрҙе. Уны корпус командующийының урынбаҫары итеп ҡуйҙы. Ур-ра! *(Тышта һөрән: “Ур-ра-а-а!”).* Тыңлағыҙ, Олатай үҙе өндәшә.

Шайморатов *(микрофонга).* Башҡорттарым, биртенмәҫ батырҙарым! “Тыуған илебеҙ өсөн, Сталин өсөн!” тигән ҡөҙрәтле оран менән рухланып дошман тылына яуға керҙек, һуңғы тамсы ҡаныбыҙҙы йәлләмәй фиҙакәр һуғыштыҡ һәм һуғышабыҙ. Ҡыҫҡа ғына арала беҙҙең дивизия, беҙҙең корпус фашистарҙың 62-се, 164-се пехота дивизияларын һәм 17-се танкылар дивизияһын тар-мар ҡылды. Утыҙ алты урында тимер юл полотноларын һәм өс күперҙе шартлатып, дошман көстәренең Ворошиловградҡа ағылыу юлдарын өҙҙө. Ун ике мең һалдатын һәм офицерҙарын үлтерҙе, егерме һигеҙ танкыһын, ҡорал, аҙыҡ-түлек тупланған егерме биш складын яндырҙы, һикһән биш орудие һәм минометын, илле дүрт пулеметын, йөҙ ҙә илле ике автомашинаһын, һигеҙ йөҙ утыҙ ылауын көл итте. 62-се пехота дивизияһының штабын тар-мар ҡылды, әсирлеккә эләккән мең дә дүрт йөҙ һикһән хәрбиҙе һәм Германияға ҡоллоҡҡа оҙатырға тейәлгән бер эшелон

ерле халыҡты ҡотҡарҙы. Фиҙаҡәр көрәшебеҙ Ҡыҙыл Армияның Ворошиловградты немец-фашист баҫҡынсыларынан азат итеү көрәшенә ифрат тос өлөш индерә. Данлы яугирҙәребеҙ! Ошо еңеүҙәребеҙ менән барсағыҙҙы ҡайнар ҡотлайым! Тәрән рейдты тамамлап, дошмандың утлы ҡулсаһын да ҡыйыу ярып сығырбыҙ, тип ышанам! Ур-ра!

Ҡурайҙа дәртле марш ҡабатлана, тышта һөрән: “Ур-ра-а-а!”. Ҡапыл – атыш тауыштары, танк моторҙарының гөрөлтөһө, туптарҙың гөрһөлдәүе.

Шайморатов *(тыңлап).* Маладис, пушкаларҙан капитан Хәбиров төйә.
Ҡадиров. Һөйәктәрен онтаҡлай.

Фондеранцев күренә.

Фондеранцев. Егермеләп танкы ябырыла. Өҫтән бомбалар яуа.
Шайморатов. Һөжүмде кире ҡағырға! Бер аҙым да сигенмәҫкә!

Йүгерәләр, ут һүнә.

## Туғыҙынсы сәхнә.

Корпус штабы. Борисов, Шайморатов.
Борисов рациянан фронт штабындағы Ватутин менән (барьер аша) һөйләшә, Ватутиндың эргәһендә Мехлис тора.

Борисов. Иптәш командующий, корпус үҙ бурысын үтәне, артабан бында ҡалыу мөшкөл, мәғәнәһеҙ. Вәғәҙә иткән ярҙамығыҙ килмәй, корпус ҡамауҙа һуңғы тамсы ҡандарын ҡойоп һуғыша. Дебальцево районынан ҡубынып, рейдтан сығыу йүнәлешендә хәрәкәтләнә башларға рөхсәт һорайым.
Ватутин. Борис Михайлович, бер үк һүҙҙе тизыйһығыҙ. Бына Мехлис иптәш ярҙам итмәксе.
Мехлис. Генерал, паникаға бирелмәҫкә! Ворошиловград, ниһәйәт, беҙҙең ҡулда! Шул айҡанлы иптәш Сталиндың тәбрикнамәһе килде: айырыуса батырлыҡ күрһәткән дивизияларға, шулай уҡ һеҙҙең корпусҡа данлыҡлы гвардия исеме бирелде. Артабан корпус – етенсе гвардия тип, үҙ сиратында дивизиялар ун дүртенсе, ун бишенсе, ун алтынсы гвардия тип йөрөтөлә. Ҡотлайым!
Борисов *(шыҡайып).* Советтар Союзына хеҙмәт итәм!
Мехлис. Ун алтынсы ундамы, саҡырығыҙ.
Шайморатов *(микрофонды алып).* Ун алтынсы Башҡорт…
Мехлис *(өҙөп).* “Башҡорт” тигән һүҙ бөттө, “гвардия” хәҙер! Ун алтынсы гвардия! Ҡотлайым!
Шайморатов. Советтар Союзына хеҙмәт итәм!

Борисов *(микрофонга).* Алло! Алло! Өҙөлдө, хәйерһеҙең… Так что, гвардия исеме менән ысын күңелдән, Минигалей Миназович!

Шайморатов. Мин дә, Михаил Дмитриевич! *(Ҡосаҡлашалар).*

Борисов. Ҡыуаныслы яңылыҡты һәр боецҡа еткерергә!

Шайморатов. Тыңлайым. *(Сығып барышлайы).* Шатлыҡлы хәбәрҙәренә тағып автоматтарға патрон, пушкаларға снаряд, “катюша” ға мина ебәрелһәсе!

## Унынсы сәхнә.

Дивизия штабы, тышта һуғыш гөрөлтөләре.

Шайморатов, Борисов, Фондеранцев, Ҡадиров, Хәбиров, Айратҡолов, Ғайсаров.

Тәүҙә Шайморатов менән Ҡадиров – бер консерванан ҡапҡылап тамаҡ ялғай.

Ҡадиров. Фриц күберәк дөмөкһөн, консервалары ҡалһын, тиҙәр окоптағылар…

Шайморатов. Эш үҙҙәренән тора.

Ҡадиров. Малҡайҙарға ҡыйыныраҡ: Разведчиктар алып ҡайтҡан фураж бөттө, аттар ағас кимерә. Ни тиһәң дә, үҙебеҙҙең башҡорт йылҡыһы түҙемле.

Шайморатов. Башҡорт үҙе лә бөгөлмәй!

Ҡадиров. Бөтөнләтә сохари итеп киптерелгән икмәктәренә “1939” датаһы ҡуйылған, халыҡ шуға аптырай. Тимәк, был һуғышҡа фриц алдан уҡ әҙерләнеп, эшелон-эшелон беҙҙән китмеш ашлыҡтан бешергәндәр. Гитлерға ярҙам иттек бит…

Шайморатов. Гитлерға түгел – герман халҡына ярҙам иткәйнек.

Ҡадиров. Шул уҡ герман шмайсерынан беҙгә ҡурғаш яуҙыра.

Шайморатов (көлөп). Уның ҡарауы бына икмәген ашайбыҙ.

Ҡадиров. Таштай ҡаты, һис кенә лә тәме юҡ.

Хәбиров инә, табынды ҡалдыралар.

Хәбиров *(хәрбиҙәрсә тәбрикләп).* Иптәш генерал, мөрәжәғәт ҡылырға рөхсәт итегеҙ.

Шайморатов. Рөхсәт.

Хәбиров. Танкыларын дөмбәсләнек, пехотаһын окоптағылар ҡырҙы. Иҫән ҡалғандары боролоп ҡасты. Һуңғы снарядты аттым.

Шайморатов. Пушкаларҙы походҡа әҙерләгеҙ.

Хәбиров. Тимәк…

Шайморатов. Беҙҙе бында бәйләп ҡуймағандар ҙаһа… Булған бөтә ҡоралды, хатта тешегеҙ-тырнағығыҙҙы ходҡа ебәрегеҙ!

Хәбиров. Тыңлайым *(Ҡадиров менән бергә ашығып сыға).*

Айратҡолов инә.

Айратҡолов *(хәрбиҙәрсә тәбрикләп)*. Майор Айратҡолов…

Шайморатов. Майор, “катюша” ут ләүкетәме?

Айратҡолов. Ләүкетер ине лә бит, сигаралары булһа. Бушкөбәк итеп ниңә тағып ебәргәндәрҙер, аптыраҡ. Барлы-юҡлы бензинды ғына ашай.

Шайморатов. Булған бензиныңды эсер, юлға әҙерлә. Секретный ҡорал икәнлеген беләһең. Алай-былай булһа…

Айратҡолов. Беләм, үҙем менән ҡуша шартлатырға. Шундай инструкция.

Шайморатов. Бар, майор.

Айратҡолов. Тыңлайым. *(Сыға).*

Фондеранцев инә.

Фондеранцев. Иптәш генерал, беҙ ҡубынырға әҙер. Ҡасан приказ бирелер?

Шайморатов. Уныһы командующийҙан тора. Разведка мәғлүмәттәре? Капитан Миңлеғолов ҡайҙа?

Фондеранцев. Капитан Миңлеғолов батырҙарса һәләк булды, урынында – лейтенант Ғайсаров. Ул бында.

Шайморатов. Керһен.

Фондеранцев сыға, Ғайсаров инә.

Ғайсаров *(хәрбиҙәрсә тәбрикләп)*. Иптәш генерал, лейтенант Ғайсаров. Разведка һөҙөмтәләре…

Шайморатов. Картанан, картанан!

Ғайсаров *(өҫтәлдәге картанан ҡулын йөрөтөп).* Ҡулсаһын ошо балкалар буйлап аша уҙҙыҡ, кире әйләнеп ҡайттыҡ – һиҙмәне. Балкалар тирәһе шыр-туғай – бик һәйбәт маскировка.

Шайморатов. Яҡшы. Хеҙмәтегеҙ өсөн рәхмәт белдерәм, лейтенант.

Ғайсаров. Советтар Союзына хеҙмәт итәм! *(Китә).*

Ашығып Борисов инә, хәрбиҙәрсә тәбрикләшәләр.

Борисов. Ниһәйәт, Ватутиндан рөхсәт алынды. Корпусты ҡамауҙан сығарыуҙы, генерал, һеҙгә йөкмәтәм. Ҡараңғы төшөү менән үк!

Шайморатов. Тыңлайым!

## Ун беренсе сәхнә.

Борисов, Сабуров, Шайморатов, Кузнецов, Ҡадиров.

Фронтҡа яҡынлашҡан корпус штабы 1-се Юлино ҡасабаһында тора.

Тәүҙә икәү – трофей спирт эсеп ҡыҙмасаланған Борисов менән Сабуров.

Борисов. Чернухино ҡапҡанынан ҡойроҡто ысҡындырҙыҡ, ҡапҡан хужаһы ажырайып көтә алда.

Сабуров *(картанан ҡарап).*1-се Юлино ҡасабаһында торабыҙ.

Борисов. Рациянан һөйләштем. Фронт штабының приказы: Ҡыҙыл Армия көнө айҡанлы Лелюшенко уҡсылары менән берлектә Штеревка районында нығынған дошман төркөмөн тар-мар ҡылып, дошман тылына ябырыласаҡ танкыларға юл асырға! Операция барышын иптәш Сталин үҙе күҙәтә.

Сабуров. Бөтөн корпус лава булып дөрәбеҙме?

Борисов. Ун дүртенсе, ун бишенсе дивизиялар һулдараҡ, Иллирия – Степановка линияһындағы нығытмаларҙы йырып, дошман флангаһын иҙә, головная ун алтынсы -- тура Штеревкаға.

Сабуров. Чернухинонан ысҡынғас, быға тиклем ун бишенсе головная ине ләһә?..

Борисов. Обстановка үҙгәрҙе, Шайморатов алға сыға.

Сабуров. Шайморатов дивизияһы “Миус-фронт” нығытмаларын емергәндә үтә ныҡ ҡанһыраны, шуға күрә уртаға ҡуйылғайны... Һәм ниңә мотлаҡ тура Штеревкаға? Разведка яһалмаған…

Борисов. Ваҡыт тар. Армия разведкаһы эшләне, тинеләр.

Сабуров. Минеңсә, Шайморатов күрәләтә мясорубкаға этәрелә.

Борисов. Эх!... Һалсы тағы ла берҙе баяғы спиртыңдан! Ун туғыҙынсы йыл Колчакка ҡаршы Көнсығыш фронтта бергә булдыҡ, Шайморатов мине казак ҡылысынан ҡотҡарҙы… *(Көрөшкәләрҙән эсәләр).*

Сабуров. Что поделаешь, приказ – есть приказ.

Борисов. Шайморатов килеп етергә тейеш, бәлки, был һуңғы күрешеүҙер.

Шайморатов, Кузнецов, Ҡадиров инә.

Шайморатов *(хәрбиҙәрсә тәбриклəп).* Иптәш командующий, саҡырыуығыҙ буйынса килеп еттем.

Борисов *(хәмер башына сығып).* Быларың кем тағы?

Шайморатов. Бик яҡшы беләһегеҙ, дивизияның махсус бүлек башлығы майор Михаил Ильич Кузнецов, политбүлек башлығы урынбаҫары, ваҡытлыса дивизия комиссары вазифаһын башҡарыусы капитан Сабир Рәхимович Ҡадиров.

Борисов (Сабуровҡа күрһәтеп). Ә был – корпус штабы башлығы полковник Иван Дмитриевич Сабуров.

Шайморатов. Һеҙҙең приказ буйынса, дивизия головная булып алғы һыҙыҡҡа сыҡты, ун дүртенсе менән ун бишенсене һулға үткәреп ебәреп, 2-се Юлинола торабыҙ.

Борисов *(иҫерек).* Нимә?! Фәләнсәгеҙҙе торғоҙоп тораһығыҙмы? Бөгөн нисәһе, беләһеңме? Егерме икенсе февраль! Иртәгә Ҡыҙыл Армия көнө!

Сабуров. Вот, именно! Иначе Мехлис… *(ус төйҙәһен муйынына ышҡып)* ҡых!..

Шайморатов. Разведка…

Борисов. Армия разведкаһына ышанмайһыңмы? Һинең алда иң бушаҡ урын! Теге яҡтан фрицты уҡсы полктар емерәсәк!

Шайморатов. Урындағы халыҡ һәм беҙҙең разведка киреһен һөйләй... Уңданыраҡ һәрмәп ҡарарға кәрәк. Ике көн ваҡыт бирегеҙ, иң аҙ юғалтыуҙар менән алып сығырмын корпусты. Хотя бы бер генә тәүлек…

Борисов (ярһып). Ҡурҡаҡйән! *(Пистолет кобураһын һәрмәп).* Бер генә сара ҡала!

Кузнецов *(Шайморатовты ышыҡлап, кобураһына тотоноп)*. Генерал!

Сабуров *(Борисовтың ҡулын кобураһынан айыртып).* Михаил Дмитриевич, тынысланығыҙ.

Борисов *(ҡулын алып, аҡырып).* Приказываю… немедленно… прямо на Штеревку! Вперед! За Родину, за Сталина!

Шайморатов. Тыңлайым. *(Сығып барышлайҙары).* Приказ начальника – закон для подчиненных.

## Ун икенсе сәхнә.

Шайморатов, Фондеранцев, Ҡадиров, Кузнецов, Ғайсаров.

2-се Юлинолағы дивизия штабы урынлашҡан билдәле таш келәт эргәһендә тышта. Тирә-яҡта һуғышсылар төркөмө, ат бышҡырыуҙары.



(Дошман тылына тәрән рейдта дивизия штабы урынлашҡан һуңғы бина).

Ҡадиров. Иптәш генерал, Штеревка ҡаяһына маңлай бәреп ярмайынса, ысынлап та уңданыраҡ алдырыу уңай булмаҫмы?

Шайморатов. Ишеттең бит, приказ.

Фондеранцев. Комиссар дөрөҫ әйтә, мин дә шулай уйлайым.

Кузнецов. Приказды мотлаҡ үтәргә!

Шайморатов. Ғәскәр Штеревка йүнәлешендә ике колоннала хәрәкәт итә. Уңдан – подполковник Фондеранцевтың йәйәүлеләре, һулдан – подполковник Голенев һәм капитан Ҡадиров ҡарамағындағы атлылар. Минең төркөм – уртанан. Һорауҙар бармы? Юҡ. Башҡарығыҙ!

Фондеранцев һәм Ҡадиров китә. Тап шул мәлдә артлы санаға аҡ ат егелгән ылау -- ҡушарлап ултырған, тубыҡтарына ялбыр айыу тиреһе япҡан Борисов менән Сабуров елдереп уҙып бара, һалдат-кучер атты ҡыҙыулатып ҡыуалай.

Борисов *(Шайморатовҡа боролоп ҡарап).* Генерал, йәнә шыр ебәрҙеңме? Ҡойроҡта һөйрәләһең. Алға! Алға!

Олағып күҙҙән юғалалар.

Ғайсаров. Алға ла алға, үҙҙәре боролдо һулға…

Шайморатов. Их лейтенант, яҡыныраҡ килегеҙсе! Шаңғыртығыҙ мәшһүр "Урал"ды.

Ҡурайҙан -- "Урал" көйө.

Шайморатов. Алға, егеттәр! Немец-фашист баҫҡынсыларына үлем! Алға, башҡорттарым!

Ҡараңғылыҡҡа күмелеп һүреләләр. Төрлө тарафтарҙан атыш, снаряд, бомба шартлауҙары – режиссер ҡарамағында.

## Ун өсөнсө сәхнә.

Таң һыҙыла, йәйәүләнгән һуғышсылар төркөмө, фашист фронтын ярып, үҙебеҙҙең яҡҡа сығып теҙелгән.

Фондеранцев. Дивизия бурысын намыҫлы үтәне – фронтты ярып сыҡты. Комиссар Ҡадиров, шәхси состав хаҡында рапорт бирегеҙ.

Ҡадиров. Тыңлайым. Чернухино һәм "Миас-фронт"тан һуң дивизияла меңгә яҡын кеше бар ине, ете йөҙҙән күберәге Штеревка алышында батырҙарса һәләк булды. Данлы командирыбыҙ, һөйөклө Олатайыбыҙ Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатов генерал да ҡалды араларында…

Фондеранцев. Мәңгелек дан уларға, Ватан өсөн ҡорбан булғандарға! *(Пауза).* Пуляларҙы һуңғыһынаса дошманға атып киттек, әммә көбәктәр ҡулда. Саҡмаларҙы сағылдыртып, өс тапҡыр салют бирергә! *(Пистолетын өс тапҡыр үргә сөйөп бойора).* Салют! Салют! Салют! *(Бераҙ тынлыҡ).* Капитан Хәбиров, артдивизион ҡайҙа?

Хәбиров. Аттар ҙа, снарядтар ҙа ҡалмағас, пушкаларҙы балкаға йәшереп киттек, кире барып алырға. Личный составтың бишеһе генә иҫән, улары арабыҙҙа.

Фондеранцев. "Катюша", майор Айратҡолов?

Хәбиров. Майор Айратҡолов "катюша"ны үҙе менән ҡуша шартлатты.

Фондеранцев. Уға мәңгелек дан! Комиссар, дивизия байрағын!

Ҡадиров. *Лейтенант Ғайсаров!*

Ғайсаров (йүгереп алға сыға). Тыңлайым.

Ҡадировтың өҫтөнән тунын һалдырышып, тун аҫтынан кәүҙәһенә уралған дивизия байрағын тағаталар; Ҡадиров тунын кейә һалып, байраҡты икеһе ике ситенән тотоп елберҙәтәләр.

Фондеранцев. Смир-р-но! Ун алтынсы гвардия Башҡорт дивизияһы йәшәй! Напра-а-во! Капитан, лейтенант, дивизия байрағын – алға! *(Бойороҡ үтәлә).*

Ҡадиров *(еңе менән күҙ йәшен һөртөп).* Алға, дуҫтар, алға! Башҡорттар йәшәй, йәшәйәсәк!

Ғайсаров. Йәшәйәсәк!

Фондеранцев. Марш! Марш!

Заһир Исмәғилевтең "Салауат Юлаев" операһынан аһәңле марш – увертюра яңғырай, колонна алға атлай.

Ярым ҡараңғылыҡта диктор тауышы.

Диктор *(ҡатын-ҡыҙ)*. Дивизия командиры Шайморатов Миңлеғәли Минһаж улы, яу ҡырында батырҙарса һәләк булыуы асыҡ билдәле булһа ла, хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенә теркәлә, фашистарға әсир төштө тигән ялған хәбәр таратыла. Республика етәкселәренең һәм дивизия ветерандарының уға үлгәндән һуң Советтар Союзы геройы исеме, ә һуңғараҡ Рәсәй Геройы исеме биреүҙе юллап күп тапҡырҙар юғарыға мөрәжәғәт итеүҙәре эҙемтәһеҙ ҡала…

Рейдтан сығырға үҙ юҫығы менән киткән корпус командующийы Борисов Михаил Дмитриевич снаряд ярсығынан яраланған хәлдә (Сабуров һәм кучер-һалдат үлеп ҡала) әсирлеккә эләгеп, 1945 йылға тиклем фашист концлагерында булып ҡайта. Уның Ҡыҙыл Армия генералы статусы тергеҙелеп, отставкаға сыҡҡанға тиклем ул хәрби академияла уҡыта…

Сталиндың йәшерен Стратегик разведка резиденты Власов Андрей Андреевич үҙенең "Рус Азатлыҡ Армияһы" тип аталған ғәскәре менән 1945 йылдың 9 майында Праганы фашистарҙан таҙартҡас, артабан ниндәй сәйер хәлдәр булғанлығын бәйән итергә ҡабилиәтле урыҫ авторҙарына һүҙ бирәйек:

"…Р**азведчики СМЕРШа**, одетые в парадную форму с орденами, спокойно **ожидали на обочине**, когда машина Власова поравняется с ними. А Власов ехал прямо к ним. Когда машина притормозила, **старший группы спросил у Кучинского, не Власов ли перед ними**? Тот ответил утвердительно. Тогда **старший отдал честь генералу и пригласил его выйти из машины**.

Причем генерал **Власов был одет в генеральскую форму РККА** (старого образца) со знаками различия и орденами. Ошеломленный юрист танковой дивизии попросил генерала предъявить документы. Власов **продемонстрировал** прокурору **расчетную книжку начальствующего состава РККА**, **удостоверение личности** генерала Красной Армии **№ 431** от 13.02.41 г. и **<u>партийный билет члена ВКП(б) № 2123998</u>**.

Находясь в расположении 25-го танкового корпуса, генерал **Власов 12 мая подписал свой последний** «**ПРИКАЗ**» командующего РОА «всему личному составу **о немедленном переходе на сторону Красной Армии**». Вот текст этого «Приказа»:

«Всем… солдатам и офицерам, которые верят в меня, немедленно переходить на сторону Красной Армии. **Военнослужащим 1-й Русской дивизии генерал-майора Буняченко, находящимся в расположении танковой бригады полковника Мищенко, немедленно перейти в его распоряжение. Всем гарантирую жизнь и возвращение на Родину без репрессий**. Генерал-лейтенант Власов».

Ләкин тарихи сәйерлектәр быныӊ менән генә осланмай.

"В **марте 1946** года **Абакумов был назначен заместителем Министра МГБ**. А **7-го мая** 1946 года (**по личному указанию Сталина**) **Абакумов стал Министром Государственной Безопасности** вместо Меркулова.

Поэтому, **окончательное решение об уничтожении Власова**, Буняченко и других руководителей ВС КОНР **принимали лично Сталин и Абакумов**. Вопреки расхожей уличной версии – Берия тут был совершенно ни при чем!

**23-го июля 1946** года **вопрос** о «форме процесса» и «мерах наказания» **обсуждался на Политбюро** ЦК ВКП(б), **под руководством Сталина**. Было принято **решение** двенадцать власовцев судить присутствием ВК ВС СССР в закрытом заседании, без участия сторон, **ВСЕХ ОСУДИТЬ К СМЕРТНОЙ КАЗНИ ЧЕРЕЗ ПОВЕШЕНИЕ И ПОВЕСИТЬ В УСЛОВИЯХ ТЮРЬМЫ**. **Ход судебного разбирательства в печати не освещать**, ограничившись кратким сообщением после исполнения приговора.

**2 августа** 1946 года было **обнародовано официальное Сообщение ТАСС**. Его опубликовали во всех центральных газетах – **1 августа 1946** года генерал-лейтенант Красной армии А.А. **Власов и его 11 соратников были повешены**. По свидетельству некоторых бывших сотрудников спецслужб их **повесили на специальных незатягивающихся петлях**, в которых **смерть наступает в течении 1-2 часов, в тяжелой мучительной агонии**. Таким же **способом в июле 1944 года Гитлер приказал казнить некоторых организаторов и участников заговора** против него. Сталин до конца был жестоким. Где захоронены тела офицеров - неизвестно.

Далее началось вообще нечто несусветное и немыслимое. На следующий день после казни **разразился скандал**, когда Иосиф Сталин увидел свежие газеты. Оказалось, что **Сталин якобы не ждал казни Власова**. Оказывается, **МГБ должен был испросить письменное разрешение на казнь у Военной прокуратуры**. Он и испросил, но ему **ответили** - «**Казнь отложить до особого распоряжения**». Это **письмо и по сей день лежит в архивах**. Наверное, **ждали личного подтверждения от** «**САМОГО**». А **Сталин не захотел открыто брать на себя всю ответственность** и сделал вид, что его якобы обошли.

Именно после этого случая **Абакумов попал в немилость к Сталину** и его **участь**, как **опасного свидетеля**, была **предрешена**. Он **слишком много знал**, как и Власов. 14-го июля 1951 года Абакумов был арестован по обвинению в государственной измене и попытках воспрепятствовать следствию в деле «врачей-убийц» и «еврейских националистов-сионистов».

**23-го декабря 1953** года (после ликвидации Берия) был **арестован** по обвинению в государственной измене и шпионаже в пользу вражеских разведок и **казнен** бывший министр МГБ **Всеволод Меркулов**.

**14-го декабря 1954** года был **расстрелян Виктор Абакумов** – главный координатор и куратор по «делу» генерала Власова. Вместе с Абакумовым были **казнены генерал-майор Леонов** и **следователь Комаров** – лично **допрашивавшие Власова** и его сторонников.

Тогда же по личному указанию Председателя Совета Министров СССР Георгия Маленкова и 1-го секретаря ЦК КПСС Никиты Хрущева были **уничтожены все материалы оперативного ведения следствия** по «делу» Власова, Буняченко и других руководителей ВС КОНР. **Значительная часть материалов следствия** была также **изъята из уголовных дел** и уничтожена. В частности, были ликвидированы **пленки с записью** прослушивания камер и бесед, которые «доверительно» вели с власовцами их бывшие сослуживцы, **отчеты** об этих беседах, **показания** «подсадных» оперативных работников и **инструкции**, полученные ими.

Сталинские последователи **старались окончательно замести все следы** истины о подвиге генерала Власова. Вспомним, что **Маленков до войны руководил Отделом информации ЦК ВКП(б)**, куда **поступали донесения Разведуправления Генштаба РККА** и **Внешней разведки НКВД"**.

Власов хәрәкәтенең архивы Австралияға юлығып эҙһеҙ юғала…

Тағы ла бер сәйерлек:

"Есть во всей этой истории еще один **малоизвестный факт**. Власовские офицеры почти все были казнены или погибли в ГУЛАГе. Но в **1947** г. **рядовые участники РОА**, **находившиеся в советских лагерях**, **были расконвоированы и приравнены к вольнопоселенцам**. **Еще через год почти всех их условно освободили и определили на поселения** с поражением в правах. Это была работа Лаврентия Берии и его спецслужб.

Причем рядовые казаки и власовцы были **освобождены гораздо раньше тех советских военнопленных**, **которые до конца войны просто сидели в гитлеровских лагерях и работали в немецкой промышленности**, а потом были репатриированы в СССР, где вновь попали в лагеря (теперь уже сталинские). Убедительные объяснения этим фактам ни отечественные, ни зарубежные историки до сих пор не нашли"...

Сталин вафатынан һуң НКВД министры һәм бер үк ваҡытта СССР Министрҙар Советы рәйесенең (Георгий Маленковтың) урынбаҫары булған Берия Лаврентий Павлович Кремлдә хакимиәт өсөн йәшерен көрәш барышында Хрущев яҡлылар тарафынан ҡулға алынып, ғәҙел хөкөмгә тарттырылмайынса атып үлтерелә…

## Шаршау

16 ноябрь 2013.

# БОЛАН БАЛАҺЫ

## Драма 3 шаршауҙа

**Авторҙан.** Үткән быуаттың етмешенсе йылдарында “Аҡтирәк – Күктирәк”, “Сөйөмбикә-һылыу”, “Ил Инәһе”, “Болан балаһы”, “Арҡайым”, “Башҡорттар” тигән пьесаларымды ижад итергә ниәтләндем. Тәүге икеһе яҙылып та, бер ҡайҙа ла үтмәгәс, ҡалғандары йә уйланылғын, йә башланған да ташланған хәлендә йөрәгемдә төйөрләнеп йөрөгәйне, һикһән йәшем тулыр көндәрҙә ошоноһон осларға насип булды. Сәхнәгә менмәһә лә, әҙәби әҫәр кимәлендә ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайым.

Ҡатнашалар:

1. Муллахмәт Ҡолахмәт улы Ҡоләхмәтов – танылмаған өҙип, һуғыш ветераны.
2. Гүзәлиә -- Муллахмәттең ҡатыны.
3. Байрас,
4. Наҙлиә -- уларҙың улы менән ҡыҙы, үҫмерҙәр.
5. Вилким Иваныч Киреев – танылған әҙип, партия эшмәкәре, һуғыш ветераны, Муллахмәттең ҡорҙаш уткүршеһе.
6. Тамара – Вилкимдың ҡатыны.
7. Ивис,
8. Вилор – уларҙың улы менән ҡыҙы, үҫмерҙәр.
9. Ганна Михайловна – украин милләтле һуғыш ветераны, элекке военврач.
10. Стреляев – һуғышта махсус бүлек “смерш” (“смерть шпионам”) капитаны.
11. Степан Бондаренко – һуғышта һалдат шағир, Муллахмәттең хеҙмәттәше.
12. Шәфҡәт туташы.
13. Хәрби корреспондент.
14. Егерь.
15. Милиционер.
16. Алкаш Ғәләүи.
17. Санитар.
18. Типтереүсе йәш-үҫмерҙәр төркөмө.

***Ваҡиғалар Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары иҫән, эшсән осорҙа бара. Шаршау асылыр алдынан залға тылсымлы ҡурай моңо – “Илсе Ғайса” көйө ағыла.***

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

**Муллахмәттең ҡышҡы урманға терәлгән дүрт сутыйлыҡ ябай ғына “дача”һы: мүкләнгән шифер ҡыйыҡлы иҫке бүрәнә өй, толь ябыулы лепәшкән мунса, ағас рәшәткә (штакетник) менән кәртәләнгән артҡы планда артҡапҡа, суҡайған таҡта бәҙрәф. Уң яҡтағы Вилким-уткүршеләрҙең урман майҙанын өңөп алған оло ихатаһы ҡара тимер рәшәткәле ҡойма менән уратылған, мунса янында күршеләргә инеп-сығып йөрөмәле ишек бар. Ҡойма аша ялтыр ҡалай түбәле мөһәбәт йорт, зиннәтле мунса, семәрле беседка һ.б. йыһазлы ҡоролмалар күренә.**

Гүзәлиә *(мунсанан атлығып сыға).* Сәсрәп китмәгере малай, элеп ҡуйған миндектәремде тәләфләп бөтөргән бит – мунса яҡһам нишләрмен, йәнә Алкаш Ғәләүигә ялбараһы ҡала инде. Иҫерек баш, тиһәң дә, иҫе дөрөҫ кәнәлийәнең – һәр бәйләме өсөн ат хаҡы һорай, нисек итеп аҡса еткермәк кәрәк! Ир тигәнең *(уткүрше яҡҡа ымлап)* анауынығы һымаҡ көрәп алғыс булһасы!

**Теге яҡтан ҡойма аша Тамараның башы ялбырлап күренә.**

Тамара. Бәй-бәй-бәй, минең иремдә ни эшең? Үҙеңдеке етмәйме?

Гүзәлиә. Етмәй шул, ҡәләме осонан төшөргән берен һинең уҫлап ауыҙлың һупылдатып йотоп торғас. Партияһының Аҡ йортонда елкә кимереп һимереүе етмәгән, әҙип даны, гонорары ла бик кәрәк имеш уға. Минең иҫәрем арҡаһында танылған яҙыусы булды.

Тамара. Тфү, ҡойолдороҡ! Ғүмерегеҙ буйына минең иремдең усын ялап донъя көтөүегеҙ етмәгән икән һиңә, оятһыҙ!

Гүзәлиә. Күн бит, минме оятһыҙ?

Тамара. Тфү, кем иренә артылып быуаҙының?!

Гүзәлиә. Үҙеңде бел, һөйрәлтке! Кем ул обком сәркәтибе менән курортта ятты? Көш-ш-ш! *(рәшәткәгә һөйәүле һуйылды матҡып).* Олаҡ күҙемдән, томшоғоңдо емермәҫем борон!

**Ҡағыҙ-ҡәләмен услап, Муллахмәт уҙаман өйҙән елтерәп сыға.**

Муллахмәт. Етер һеҙгә, етер! Вилким Иванычтан оят.

Тамара. Ояты һеҙгә ҡыйбат, ә беҙгә бото һуҡыр тин уның *(югала).*

Муллахмәт *(ҡатынына).* Был ни хәл, күпме әйтәм…

Гүзәлиә. Һин, тонғанбаш, тәүҙә, ана, уланың-боланыңа әйт! *(Иренең ҡулынан ҡағыҙ-ҡәләмен йолоп, өйгә олаға).*

Муллахмәт. Уланым, боланым!

Байрас. Әү, атайым! *(Йышҡы тотҡан килеш мунсанан сыға).*

Муллахмәт. Ни әтмәләйһең әле?

Байрас. Саңғым һынды лаһа, атайым. Һыңарын юнғылап маташам.

Муллахмәт. Магазинда юҡмы ни?

Байрас. Бар ҙа ул…

Муллахмәт. Йә, ярар, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

Гүзәлиә *(ишектән күренеп).* Мунса яҡһаҡ, йомосҡаһы менән сабынырһыңмы икән?

Муллухмәт. Был ни тигән һүҙ тағы?

Наҙлиә *(әсәһенең артынан һонолоп).* Уланың-боланыңдан һора. Әсәйемдең йыйнап элгән миндектәрен болан балаһына ашатып бөтөрҙө.

Муллахмәт. Ысынмы?

Байрас *(уткүршеләр ягына ишаралап).* Анауы Вилким Иванычығыҙ инәһен атып үлтергәс, асы сеңләп асығып йөрөнө бит… ҡыҙғандым…

Гүзәлиә. Аяҡлы ҡаза булды был болан балаһы!

Наҙлиә. Ҡойма буйыбыҙҙа шуны ашата.

Муллахмәт. Инәһенән етем ҡалып интеккән болан балаҡайын ҡулға эйәләштерҙе шул. *(Улының башынан һыйпап).* Маладис, уланым-боланым, кеше булып үҫкәнһең. Бар, эшеңдә бул. *(Байрас китә).*

Гүзәлиә. Үҫеүен үҫкән дә ул, ботона кейер әҙәм эрәтле салбары юҡ. Тиңдәштәре араһында ыстырам! Көнө-төнө өҫтәл артында суҡайып, ҡағыҙ-ҡәләм туҙҙырып, миндеклек тә тапмайһың, ә маладислап тораһың.

Наҙлиә. Байрасыңды гел иркәләйһең…

Муллахмәт *(ҡыҙының арҡаһынан һөйөп).* Ағайымды, тип әйт, урыҫ булдыңмы әллә?

Наҙлиә. Үҙегеҙ урыҫ мәктәбенә бирҙегеҙ бит.

Муллахмәт. Шунан башҡаһы булмағас…

Наҙлиә. Булмаһын, чортыма ла кәрәкмәй! Әсәйем әйтә, урыҫса уҡыған анауы Вилким Иваныч кем дә башҡортса уҡыған бынауы кем, ти. Һеҙ ҙә Вилким Иваныч кеүек ҙур түрә булырһығыҙ, ти.

Муллахмәт. Күпме туҡыйым: ағай, тип әйт!.

Наҙлиә. Ул үҙе бит, Иваныч, тип әйттертә. Тамараһы ла, әсәйемдең “Сиражиевна” тигәнен яратмай, Сергеевна, тип әйтегеҙ, ти. Эйеме, әсәй?

Гүзәлиә. Миңә тимәгәйе, Иблисиевна булһын.

Муллахмәт. Һе!

**Өйгә һепереләләр. Тимер рәшәткәле ҡойма артында шаян ҡыҙый көлөүе: “Хи-хи-хи!”**

Тамара *(боҫоп тыңлап торган ерендә тертләп).* А?! Кто?! Что?!

Вилор. Это я, Тамара Иблисиевна.

Тамара. Сәсрәмәгере, ауыҙыңа һуҡмағыры! Сергеевна, тиергә телең көрмәләме?

Вилор. Минең өсөн один черт, Иосиф Виссарионович Сталиның әйтмешләй.

Тамара. *Ләхәүлә*, ниңә сурытаһың, ИВИС, тип кенә әйтһәң ни була? Иосиф Виссарионович Сталин тигән бөйөк исемдең баш хәрефтәренән теркәлгән Ивис бит ул. Үҙең дә ВИЛОР ғына.

Вилор. Юҡ, тулы исемем менән өндәшегеҙ миңә! Владимир Ильич Ленин Октябрьская Революция, тип әйтеүегеҙҙе теләйем!

Тамара. Хай-хай, тел биҫтәһе!

Вилор. Мамочка, но я все услышала.

Тамара. Что? Нимәне?

Вилор. Только что һинең менән теләшкән тетя Гузелия, кеше иренә артылып, Байрасчигы менән Назочкаһын үҙ иренән тапмағанмы ни?

Тамара *(ҡыҙының ауыҙын усы менән ҡаплап).* Сеү, сәсрәмәгере! *(ҡулынан һөйрәкләп өйгә алып инеп китә).*

**Ҡойма ишеге янына Ивис килә, ҡабат пәйҙә булған Вилор уны йәшенеп күҙәтә.**

Ивис. Боря, ҡайҙа һин?

Байрас *(мунсанан сыгып).* Боря түгел – Байрас мин.

Ивис. Один черт, ләкин һинең исемдән тел тотлоға. Ярай, Байрас булһын.

Байрас. Шунан?

Ивис. Ултырған да шыуған, Алкаш Ғәләүи әйтмешләй. Теге болан балаһы килдеме әле?

Байрас. Юҡ, ул кисләтеп кенә йөрөй.

Ивис. Шуны күрәһе ине.

Вилор. Байрасчик, не покажи! Болан балаһынан шашлык яһарға хыяллана ул. Тап беҙҙең предок Вилким Иваныч уның инәһен стрелять иткәне кеүек. Атаһынан күргән – стрела юнған, тиҙәрме әле?

Ивис. Не болтай! Иваныч эштән генә ҡайтһын, арт һабағыңды уҡытыр!

Байрас *(көлөп).* Иваныч та Иваныч – атаһы Иванмы ни?

Ивис. Ҡартатаюшкабыҙ Ғилван булғас, Ғилваныч, тип йөрөткәндәр, ти тәүҙә. "Вилким"ға иш килмәй тип, предок үҙе "Иваныч"ҡа шымартҡан, сөнки замана талабы.

Вилор. Байрасчик, ә һинең атаюшкаң ниңә Муллахмәт тә Ҡолахмәт килеш йөрөй, беҙҙең предок әйтмешләй, "махровый башкирский националист" булғаны өсөнмө?

Ивис. Вилор, телеңә баҫып һөрләкмә, матушкабыҙ әйтмешләй. Бар, тай бынан!

Вилор. Һорарға ла ярамай… *(китә).*

Ивис. Киттек, дуҫ, трофейыңды күрһәт.

Байрас. Киттек.

**Иңгә-иң терәшеп, мунсаға йүнәләләр, кире сыҡҡандарында Байрастың ҡулында һыңар көбәкле һунар мылтығы.**

Ивис. Ух әй, патрондары ла бармы?

Байрас. Тулы патронташы ла ята, саң баҫып.

Ивис. Ух әй, Муллахмәт Ҡолахмәтыч шәп һунарсы булғандыр.

Байрас. Юҡ та. Һуғыштан һуң ауылдарында бүре өйөрө үрсеп, колхоздың бер юлы илле һарығын боғаҙлап киткәстәре, шуны ишеткән атайым һунарсылар йәмғиәтенә яҙылған да, ошоно һатып алып, бүреләрҙең кәрәгенә биреп ҡайтҡан.

Ивис. Сулаҡ ҡулы менәнме?

Байрас. Һуғышта ҡыйыу разведчик, мәргән атыусы булған ул.

Ивис. Минең предок та герой – бер частә хеҙмәт иткәндәр.

Байрас. Шулай.

Ивис. Ниңә, минең предок кеүек, бында ла дөңкөлдәтмәй?

Байрас. Бүреләр юҡ бит бында.

Ивис. Болан, ҡуян, ҡоралай?

Байрас. Уларҙы ҡыҙғанабыҙ.

Ивис. Пүстәк! Беҙҙең Иваныч…

**Артҡапҡанан Алкаш Ғәләүи керә. Байрас мылтыҡты йәшерә.**

Ғәләүи *(ҡах-ҡох йүткерә).* "Ич" та "мич", "тыч" та "сыч" – түрәләрҙең "предок"тары эсеп-сысып йәшәгәндәр, тиерһең.

Ивис. Һинең һымаҡмы, Алкаш? Фу, самогон еҫе аңҡый.

Ғәләүи. Үҙеңдән һарҡый, “тыч-сыч”! Нишләп мин алкаш булайым?

Байрас. Миләш тирергә сыҡтыңмы, олатай?

Ғәләүи. Эйе лә, әбейемдең ҡан баҫымын төшөртөргә.

Ивис. Беләбеҙ. Первачыңа төнәтеп, коньяк, тиеп һатырға. Тауыҡ буғы ҡушып эшләһәң, көслөрәк булыр ине.

Ғәләүи *(тумбытыуга игтибар итмәй).* Болан балаһы гиҙә гелән ошонда… Бахыр инәһен бынауының ҡәһәр һуҡҡыр атаһы “ыч” атты бит.

Ивис. Законная лицензия менән ул!

Ғәләүи. Утыҙ етенсе йылда шундай законная лицензия менән минең һикһән йәшлек атайымды аттылар… милләтсе, зәкивәлидовсы, тип.

Ивис. Тап шундай булғандыр ҙа!

Ғәләүи. Ошо ҡойма тирәһен таҡырлаған, бисара. Мал балаһы бит – ашаған еренә ылыға.

Ивис. Эйе, һинең һаҫы апараңа түгел.

Ғәләүи. Бахыр әсәһенә алмашҡа иҫән-һау ғына үҫһен инде. Болан балаһы, тимен.

Байрас. Үҫер, олатай, үҫер.

Ғәләүи. Һин шулай тиһең дә бит…*(Ивисҡа төбәп).* Атаһынан күреп уҡ урынына буҡ юнғандар ҙа бар был донъяла *(китә).*

Ивис *(төкөрөп).* Черт пьяный! Дуҫҡай, башы осона көбәгеңдән гөрһөлдәтәйек берҙе, ыштан төбөнә шыр-ебәрһен.

Байрпас. Ярамай, болан балаһы ҡурҡыр.

**Мунсаға инеп китәләр. Өйҙән ҡулына оло хужалыҡ сөмкәһе тоткан Гүзәлиә, тағылып Наҙлиә сыға.**

Наҙлиә. Әсәй, туҡтасы, ут ҡаптымы әллә?

Гүзәлиә. Ҡапты шул, көндөкөн-көнгә ҡаба. Ыйыҡлатылған бейәләй, көндөкөн-көнгә дөкәндән-дөкәнгә морон төртөп, һеҙҙең туймаҫ тамаҡтарҙы туйҙырырға кәрәк тәһә.

Наҙлиә. Байрасыңды йүгерт, һуң.

Гүзәлиә. Йүгерҙе, ти. Шөғөлөнән йолма, ти бит атаҡайы.

Наҙлиә. Үҙе тәпәйләһен, алайһа.

Гүзәлиә. Кем?

Наҙлиә. Атаҡай, һуң.

Гүзәлиә. Пөш-ш-ш, әйттең һүҙ. Ҡуҙғатырһың ул тутыҡҡан тәрене! Яҙа ла һыҙа, яҙа ла һыҙа, ә әжеренә -- һуҡыр тин. Көткән донъяһын ҡара: дүрт сутыйҙа

ергә сүккән серек өй ҙә лепәшкән ҡара мунса, эт инеп һеймәçлек бәҙрәф... Ыстырам!

Наҙлиә *(әсәһен ҡосаҡлап).* Әсәкәйем, илама! Үҙем барып киләйем!

Гүзәлиә. Бәпескәйем, әхирәттәрең көтә. Бар-бар! *(Ҡыҙының артынан текләп ҡала).* И бала-бала, үҙем, ти бит әле ул. Әсәһенең һәр тин өсөн ҡалтыранып йәшәгәнен белмәй шул... *(Китә).*

**Өй эсендәге Муллахмәт тәҙрәнән “йылт!” итеп ҡарай ҙа юғала. Шул арала ҡурай моңо һыҙылып, “Илсе Ғайса” йыры ағыла тышҡа:**

Аҙаштырған болан балаһылай,
Яңғыҙ башым ситтә интегәм.
Көндәрен дә төнөн йөрәгем яна,
Аңлар икән мине кемгенәм...

**Мунса алдында ҡушарлап баçып торған Байрас менән Ивис быны тын ҡалып тыңлай.**

Байрас.Атайымдың ятҡаны... Яңғыҙы ғына ҡалғанында ошо моңдо донъяһын онотоп һуҙа.

Ивис. Да, понимаю. Моң...

Байрас *(моңайып, аҡрын ғына ҡабатлай):* Аҙаштырған болан балаһылай...

Ивис *(һөйәүле мылтыҡты ҡулына алып).* Болан балаһы... болан балаһы...

**ШАРШАУ**

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### Беренсе сәхнә

**Муллахмәт өйөнөң алғы бүлмә эсе: яҙыу өçтәле, уға ҡаршы яҡта һарғылт клеенка менән ҡапланған аш өçтәленең мөйөшөндә һыңар түңәрәкле тутыҡ электроплитка, оло алюмин сәйгүн. Стенала һауыт-һабалы шүрлек. Төптәрәк иçке диван, тумбочка. Гүзәлиә көҙгө ҡаршыһында ыçпайланып маташа.**

Муллахмәт. Ҡайҙа йыйынаһың?

Гүзәлиә. Тамара ҡорҙой саунаһына саҡырҙы.

Муллахмәт. Бәрәмәс, әле генә сәс йолҡоша инегеҙ.

Гүзәлиә. Һинең һымаҡ үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле түгел бит мин… *(Пауза).* Вилкимым өйҙә юҡ сағында баллап-майлап сәй эсеп, сутылдашып алырбыҙ, тисе.

Муллахмәт. Ғәләүиҙән бер пар миндек ҡайтарттым, сауна-мауналары йыраҡ торһон.

Гүзәлиә. Пөш-ш-ш! Һин-эшкашмағандың ҡара мунсаһында ҡоромланып йөҙөм ҡарайҙы инде.

Муллахмәт. Былай ҙа аҡ түгел инең… эске мөхитеңде әйтәм.

Гүәлиә. Эйе, ҡарҡылдауыҡ ҡара ҡарға эргәһендә тутланып ҡарайҙым шул *(ишеккә ыңғайлай).*

Муллахмәт. Ҡара уны, балы-майы ағыулы булып ҡуймағайы.

Гүзәлиә. Мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгелмен. Ағыуына ҡаршы ағыу табылыр! *(Ишекте шартлатып яба).*

**Ишек шаҡыла *ла*, орден-миҙалдар тағылған яҫы күкрәген киреп, Вилким керә.**

Вилким. Ҡорҙаш, рөхсәтме?

Муллахмәт. Бәй, һиңә *лә* рөхсәт булмаһа… Хай-хай, ҡалайҙарың шанлы шалтырай, ҡорҙаш! Байрам-фәләнмелер, тиһәм…

Вилким *(түшенә ҡарап алып).* Байрам, тиһәң дә ярай. Сталинградта еңеүебеҙ көнө айҡанлы Хәрби дан музейына саҡырғайнылар. Йәш быуынға ысын хәрби батырлыҡтың ни икәнен төшөндөрттөм.

Муллахмәт. Сталинградта булманыҡ таһа, ҡорҙаш, тыш яҡлап һуғыштыҡ. Беҙ-әҙиптәр араһынан берҙән-бер Ғәйнан Әмири ул Сталинградтың уртаһында, тап ут ҡаҙанында ҡайнаусы.

Вилким *(ишетергә теләмәй).* Дошман пүләһе тишеп үтеп ҡайнар ҡаным һеңгән комсомол билетымды иң күренекле урынға изге реликвия итеп һалғандар. Ауыҙҙарын арандай асып, шаҡ-катып тыңланылар. “Советтар Союзы Геройы” бирергә кәрәк олатайға, тиҙәр…

Муллахмәт. Һе-һе, зерә шаҡ-катырғыс шул, пүлә тишкәнеңде әйтәм. Минең һәм бәғзе берәүҙәрҙең яҡшы белеүенсә, остоҡтай ғына граната ярсығы үтәгәйне ул эште.

Вилким. Ҡхым-ҡхым… *(үртәлеп тамаҡ ҡыра).*

Муллахмәт. Госпиталдән дә аҙна-ун көн эсендә сығып киттең.

Вилким. Ялған! Клевета!

Муллахмәт. Ниңә көсәнәһең? *(Ҡорҙашының түшендәгеләргә ишаралап).* Алдап-йолдап алғандарың етмәйме?

Вилким. Күрәм: һинең эс нык көтөрҙәй… башҡаларҙың батырлығынан сыса яҙғансы көнләшеп. Юҡҡамы ни үҙеңде саҡырмайҙар.

Муллахмәт. Һинең изге реликвияңды ҡарарғамы?

Вилким. Хәрби дан музейыбыҙ бушҡыуыҡ өрә, ҡайһы бер экспонаттары яһалма, тип сафсата таратҡанһын.

Муллахмәт. Комсомол билетың реликвия, әлбиттә, ләкин легендаһы -- ылғый бушҡыуыҡ.

Вилким. Һаташаһың, ҡорҙашҡай. Һинең фәстереүҙәреңдең хәтәр психоз икәнлеген ил белә.

Муллахмәт. Кем ул ил?

Вилким. Мәҫәлән, үҙең белгән "смерш" капитаны, ялан госпитале комиссары, фронт гәзитенең яуаплы редакторы.

Муллахмәт. Беләм мин дә уларҙы!

Вилким. Бөйөк атайыбыҙ иптәш Сталин тураһындағы ылғый оторо антипатриотик һүҙҙәрең, зәкивәлидовсылыҡ рухы менән ағыуланған зарарлы шиғырҙарың үҙ ваҡытында уҡ тейешле тәңгәлгә теркәлгән.

Муллахмәт. Эйе шул, тап ана шул зарарлыларымды кем үҙеңдең китабы итеп сығарып маҡталды?

Вилким. Мин уларҙы нык таҙарттым, шуныһына рәхмәт әйт. Әгәр минең пак исем ҡурсамаһа, ҡулъяҙмаңды утҡа яҡмаһам, башың китәсәк ине.

Муллахмәт. Китһә-китһен ине лә! Обкомыңда, КГБ-ла мине ҡара исемлеккә теркәтеп, ғүмерем буйына яҙған беремде йота торҙоң.. Негр итеп ҡулландың мине.

Вилким. Хе-хе-хе! Ысын негрҙар, беләһеңме, дуҫкайым, Америкала ни хәлдә? Сүп һауыттарынан ҡаты-ҡото соҡсоноп туҡланалар, ҡатырғы-картон түшәп, гәзит ҡатлап ябынып, һалҡын асфальттә ҡуналар. Ә һинең – ҡалала йылы фатирың, далала – дачаң, бынамын тигән ғаиләң бар – барыһы минең арҡала. Тағы ни кәрәк һиңә?

Муллахмәт. Тапалған намыҫым кәрәк. Бурһытылған ҡыйыулығым кәрәк!

Вилким. Һуңлап уяндың, брат.

Муллахмәт. Себеш тибергә яҫҡынған ҡомһоҙ ҡоҙғондай, темеҫкенеп керҙеңме? *(Алдындагы ҡагыҙ өйөмөнә усын һалып).* Инде быныһын тәтетмәҫ, тип ҡурҡаһыңмы?

Вилким. Ҡурҡмайым, ҡорҙаш, ҡурҡмайым. Һин үҙең ҡурҡырға тейеш: сулаҡ ҡулың, алдан йөрөгән ҡара һаҡалың менән ҡайҙа барырһың да ғаиләңде нисек аҫырарһың, балаларыңдың өҫтөн бөтәйтерһең? Урыҫ туғандар әйтмешләй,

осаң араһын ҡыҙыл әтәс суҡыһа, тәкәбберлегең осоп, майлаған ҡайышҡа әйләнерһең. Ә мин һине рәнйетмәйем – алған гонорарҙарымдан өлөшөңә көмөшөң аҡмаһа ла тамып тора. Ниңә күҙҙәрең аҡайҙы, дөрөç түгелме әллә?

Муллахмәт. Дөрөç.

Вилким. Бәс, шулайғас?

Муллахмәт *(ҡағыҙ өйөмөн этәреп).* Һуңғы нөктәһен ҡуйҙым, һоғон быныһын да.

Вилким. Быныһы тороп торһон, мөһимерәктәре бар. Йәғни ҙә ки фәлсәфәүи фекер йөрөтөп ҡарайыҡ: икебеҙ ҙә һуғыш ветерандары, бер төптән егелгәнбеҙ, бер табаҡтан ашайбыҙ (ҡәҙеремде белмәһәң дә). Тимәк, тормош арбабыҙ түңкәрелмәçкә тейеш. Бының өсөн тик берҙәм һулыш алыу, бер-беребеҙҙе тотанаҡлау файҙалы. Һуңғы сиккәсә.

Муллахмәт. Йәғни?

Вилким. Белеүемсә, үҙебеҙҙең яугир "Красная Звезда" гәзите килмәй һиңә?

Муллахмәт. Килмәй.

Вилким. Ҡыҙғаныс. Ә мин алдырам, ғүмерем буйына алдырам. Һуңғы һанын әйтәйем, һинең менән минең тормош арбаһына ҡағылышлы зерә лә мөһим хәбәрнамә бар унда. Мә, ҡыҙыл кәләм менән билдәләнгәненә иғтибарыңды йүнәлт *(бирә).*

Муллахмәт *(гәзиткә күҙ йүгертеп).* һе!

Вилким. Нимәһе "һе"?

Муллахмәт. Баяғы бер серек балыҡ башы: ут яуҙырыусы амбразураға күкрәге менән ҡапланған ҡыйыу хәрби корреспондент Вилким Иваныч… Ха-ха-ха!

Вилким. Һаман эсең көтөрҙәйме?

Муллахмәт. Көтөрҙәмәй – сытырҙай.

Вилким. Сытырҙаһа *(гәзиткә бармағын төртөп),* бына был тәңгәлен уҡы: фронт гәзитендә эçе мәлендә үк яҙылған…

Муллахмәт. Үҙең хеҙмәт иткән гәзит ине шул.

Вилким *(иғтибарһыҙ).* Мәҡәләгә абруйлы автор ҡул ҡуйған.

Муллахмәт. Беләм, беләм.

Вилким. Белгәс, ниңә оторaяһың? Быныһы *(яҙыулы бер бит ҡағыҙ һона)* – бөгөнгөһө, үҙеңә яҡшы мәғлүм күренеклеләрҙән-күренекле әһелдәребеҙҙең Мәскәүгә юллаунамәһе. Ышанам, һин уларҙың теләгенә ҡушылып ҡул ҡуйырһың.

Муллахмәт. һе! Ҡушылмайым!

Вилким. Үҙ башыңа ҡарышаһың, ҡорҙашҡай!

Муллахмәт. СССР Юғары Советы Президиумынан һиңә Советтар Союзы Геройы исемен юлларға ҡулым бармай.

Вилким. Һин, тинтәкйән, башыңды шыр-хыялыйлыҡҡа һабыштырып, булған хәлде булманы тип тизырға итәһеңме?

Муллахмәт. Итәм! Сөнки ул хәл булманы.

Вилким. Хәтерлә, иҫәүән: икебеҙ тиң күкрәктән яраланып, ялан госпиталендә бергә аунаныҡ.

Муллахмәт. Быныһы хаҡ. Әммә һинең күкрәгеңдең һум итен генә үҙебеҙҙең граната ярсығы сыйып киткәйне, аҙна-ун көн эсендә бөтәште.

Вилким. Клевета! Дошман ҡотҡоһо!

Муллахмәт. Үҙеңдән булһа ла оял! Алғы һыҙыҡҡа килгәнеңдә капитан Стреляев менән хәмер һемереп, иҫке немец окобына граната ташлап уйнағаныңда яраландың, ярсығын хирург Ганна Михайловна үҙе алып ташланы.

Вилким. Пулемет пүләһе ине!

Муллахмәт. Ярар, шулай ҙа булһын, ти. Ләкин мин ҡул ҡуя алмайым.

Вилким. Сумасшедший һин, факттарҙы йә бутап, йә онотоп бөткәнһең! *(Ҡағыҙҙарын тырнап алып, асыулы сығып китә).*

Муллахмәт *(яурындарын ҡосаҡлап, арылы-биреле йөрөнә).* Эй замана, ысынлап та аҡылдан яҙаммы мин? Барыһы ла бөгөнгөләй күҙ алдымда, күҙ алдымда…

**Икенсе сәхнә**

**Ҡарлы ялан. Пулеметтар тыҡылдай, йәҙрәләр шартлап ярыла. Командирҙың: “За родину! За Сталина!” тигән оранына берҙәм “ура!” ялғанып, рота һөжүмгә күтәрелә. Ҡарҙы йырып дошман амбразураһына ҡаршы шыуышыусы ике яугир: алдан – Муллахмәт Ҡолахмәтов, арттанырак – Степан Бондаренко. Бер мәлгә туҡталалар.**

Муллахмәт *(боролоп ҡарап).* Тырмашаһыңмы, Степка?

Степан. Тырышам, тырмашам.

Муллахмәт. Тын алырға ла бирмәй, зараза!

Степан. Рота лып-ятты.

Муллахмәт. Беҙҙең бурыс – томшоғон тонсоҡтороу.

Степан. Граната ҡалманы.

Муллахмәт *(шинелен һалып бөкләп).* Бына бының менән… Улай-былай була ҡалһа… һин эшен бөтөрөрһөң.

Степан. Аңланым, һаҡлаһын Хоҙай.

Муллахмәт. Эйе, Хоҙай.

**Артабан шыуышалар. Пулемет бер мәлгә тынған арала Муллахмәт, ҡалҡына биреп, шинелен һонған килеш уҡталған ыңғайҙа пулемет ут яуҙырып, амбразураға күкрәге менән ҡаплана. Ҡапыл тынлыҡта көслө “ура!” яңғырай – ротаның атакаға күтәрелеүе. Бер-ике фашистың доттан сығып ҡасыуы күҙгә салына. Степан, атлығып, Муллахмәттең ҡанлы кәүҙәһен ала.**

Степан. Дуҫым, дуҫкайым… *(һулҡылдай).* Пульсе бар! Тиҙерәк, тиҙерәк! *(Яҫы аҡ бинт менән яралының күкрәген гимнастеркаһы тышынан урата).* Түҙ, бәғерем, түҙ!

**Өсөнсө сәхнә**

**Ялан госпитале – яралылар, аҡ халатлылар. Клеенканан ҡанлы алъяпҡыс бәйләгән Ганна инә.**

Ганна *(шәфҡәт туташына).* Ҡаты яралы иҫенә килдеме?

Шәфҡәт туташы. Күҙҙәрен асты.

Ганна. Молодец, ысын баһадир икән! Шуныһы шәп – пуләһе үтә сыҡҡан.

Шәфҡәт туташы. Етмәһә, Степка, тип таптырта.

Ганна. Степан Бондаренко, уның однокашнигы. Һуғыш ҡырынан килтергәйне.

**Тышта ығы-зығы, өндәшеү: “Ганна Михайловна, гәзиттән килгәндәр – яралы янына керергә ныҡыша!”**

Ганна *(палатканың ишек япмаһын ҡайырып).* Шауламағыҙ! Ни йомош?

Корреспондент. Иптәш военврач, Александр Матросов подвигын ҡабатлаған геройҙы күрергә рөхсәт итегеҙ!

Ганна. Шым! Ярамай!

Кореспондент. Бер кәлимә-һүҙе генә кәрәк!

Ганна. Ярамай, тинем бит.

Кореспондент. Бөйөк иптәш Сталинға бәйле һүҙ! Аңланығыҙмы?

Ганна *(уйланып).* Бөйөк иптәш Сталинға бәйле булғас, үтегеҙ. Ике минутҡа ғына.

Кореспондент. Рәхмәт! *(Һаҡ баҫып, яралыга яҡынлай).* Сәләм, герой! Подвигың хаҡында гәзиткә яҙырға килдем. Һөйлә, нисек булды?

Муллахмәт. Шинель ябып тонсоҡторорға иткәйнем дә… боҙға табаным тайып, яңылыш ҡаплана төштөм…

Кореспондент *(Ганнаға әйләнеп ҡарап).* Һаташа… *(Яралыға)* Яңылыш түгел, юҡ! “За Сталина!” – тип оранлағанһың, сөнки бөйөк иптәш Сталинды уйлап ҡанатланғанһың. Шулаймы?

Муллахмәт. Иптәш Сталин иҫемә төшмәне… артта рота баш ҡалҡыта алмайынса ята ине… шуларҙы ғына уйланым.

Кореспондент. Һаташа! На сто процентов һаташа!

Ганна. Етте, сығығыҙ!

**Дүртенсе сәхнә**

**Шул уҡ палата. Бер-нисә көн үткән, Муллахмәттең хәле шөйлә яҡшырған. Эргәһендә Ганна, аҡ халат бөркәнгән капитан Стреляев, күкрәге аҡ бинтланған еңел яралы Вилким.**

Стреляев. Приветствую, солдат. Надеюсь, мине таныйһыңдыр?

Муллахмәт. Капитан Стреляев, “смерш”тан.

Стреляев. Гәзиткә биргән интервьюң эҙенән килдем.

Муллахмәт. Мин интервью бирмәнем.

Стреляев. Әлбиттә, гәзиттә сыҡманы ул, туҡтаттыҡ. Ләкин *(ҡыр сөмкәһен туҡылдатып)* әйткәндәрең бына бында теркәлгән. Бөйөк атайыбыҙ иптәш Сталин тураһында нимә тип ысҡындырҙың?

Муллахмәт. Мин ни бары, ул мәлдә иптәш Сталинды уйларға форсат булманы, пулемет тыҡылдап тора ине, тип кенә әйттем.

Стреляев. Насар, бик насар. Ауыҙыңдан ни сыҡҡанын бөтә палата ишеткән, быны үҙеңдең милләттәшең Вилким Иваныч та дөрөҫләй.

Вилким. Эйе, дөрөҫләйем. Бөйөктәрҙән-бөйөк иптәш Сталиныбыҙ тураһында хилаф һүҙҙәр һөйләнең. Яҙмышың ҡыл осонда тора, ҡорҙаш.

Стреляев. Әйткәндәй, бөтә рота партияла, комсомолда ағза булып тороуынан, изге билеттарын түш карманында тойоуҙарынан бәхетле ялҡынланып: “За Сталина!” – тип дәһшәтле һөжүмгә барғанда ниңә йөрәк тәңгәлеңдә комсомол билетың юҡ ине?

Муллахмәт. Окружениенан сыҡҡанда политрукка тапшырырға ҡушҡайнылар… политрук та, минең комсомол билеты ла сыҡманы…

Стреляев. Ә бына Вилким Иванычтыҡы сыҡҡан.

Муллахмәт. Ул бит рейдта, окружениела булманы… рейдҡа ингән саҡта редакцияһы менән тылда ҡалды.

Стреляев *(тыңламай).* Нәҡ йөрәге тәңгәлендә дошман пүләһенән тишелеп ҡанаған.

Ганна. Ярсыҡтан.

Стреляев. Иптәш военврач, факттарҙы боҙмағыҙ! Үҙегеҙҙең скальпелдән башҡаларын "смерш"ка ҡалдырығыҙ! *(Ганна китә)* Бына шулай. *(Муллахмәткә).* Ул котелда башҡалар ятып ҡалған, ә һин сыҡҡанһың. Быныһының да эҙенә төшөргә кәрәк. Шуларың фашлана ҡалһа, үҙеңә -- каюк, ә һин хеҙмәт иткән частҡа юйылмаҫлыҡ ҡара позор буласаҡ. Усек, һалдат?

Муллахмәт. Усек.

Стреляев. Тимәк, танауыңа яҡшы итеп киртеп ҡуй: һине окоптан сыҡҡаныңда снаряд ярсығы яраланы, ә фашист амбразураһына ташланған герой-военкор -- гвардия капитаны Вилким Иваныч Киреев ине. Тап уның йөрәге эргәһенән фашист пүләһе үтте. Усек?

Муллахмәт. Да… усек.

Стреляев. Так что, төҙәл, һалдат *(Вилким менән эйәртенешеп китәләр).*

**ШАРШАУ**

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### Беренсе сәхнә

**Муллахмәт аш өҫтәлендәге плитанан алюмин сәйгүнде алып, аҡ эмалле кесе сәйгүндең эсен ҡайнар һыу менән сайҡата ла мөйөштәге йыуынтыҡ күнәгенә түгә, шүрлектәге бер-нисә сәй һауытын асып ҡарай.**

Муллахмәт. Әй эттәгенәһе, бер семетем дә ҡалмаған! Байрас, тим, уланым-боланым!

Наҙлиә *(ишек ҡыҫыгынан).* Их, әсәйбикә һаман ҡайтмаған… Уланың-боланың шылды, атай.

Муллахмәт. Саңғыһына ҡайыш таға ине лә…

Наҙлиә. Таҡты ла, артҡапҡанан һыҙҙы ла. Болан балаһы оҙаҡланы, асыҡҡандыр, тигән була.

Муллахмәт. Балаҡайым, үҙе лә болан балаһы шул! Ҡоралайым, инеп һөйләш, өйҙө һыуытаһың!

Наҙлиә. Ваҡыт юҡ, Вилор подругам көтә. *(Тыштан: "Наз, сколько можно ждать?!" тигән түҙемһеҙ ауаз).*

Муллахмәт. Әллә янып барамы, ял көнө ләһә.

Наҙлиә. Ял көнө шул, йыйын йәштәр типтереп ял итергә йыйынабыҙ.

Муллахмәт. Ҡайҙа тағы?

Наҙлиә. Уткүршеләрҙә, конечно. Вилким Иваныч менән Тмара Сергеевна – һеҙ-ҡыҫмырҙар түгел, флигелгә күсенеп, залдарын аулаҡ ҡалдырҙы. Ух, алтын йәштәр киләсәк! Все, атай, киттем! Әсәйбикә ҡайтҡас та уҡ мине һөйөнсөләһен, онотма *(ишек ябыла).*

**Арып-талып, Гүзәлиә ҡайтып инә, ҡулында ауыр хужалыҡ сөмкәһе.**

Гүзәлиә. Ниңә табаҡ-һауыт шалтыратаһың, шул сулағың менән барлы-юҡлы сынаяҡтарымды селпәрәмә итергәме?

Муллахмәт *(тертләп).* Ә?! Ҡайттыңмы?

Гүзәлиә. Үҙең тапмағанды вата беләһең.

Муллахмәт. Башым сатнап бара, әй.

Гүзәлиә. Сатнаһа, уткүршеңә кереп сыҡ – һарҡындыһы ҡалғандыр.

Муллахмәт. Уф, ҡатыраҡ бешереп эсһәм, һыпырып алыр ине лә. Сәй ҡайҙа?

Гүзәлиә. Ҡайҙа булһын, үҙ урынында. Магазинда. *(Сөмкәһенән ике бүкәнкәй икмәк, бер шешә һөт сығарып өҫтәлгә ҡуя. Уткүршеләр яғына ишаралап).* Анауыларҙыҡылай һыуыткысың да юҡ бит һинең, сәйхурҙың! Наҙлиә, ҡыҙым, ҡайҙа олаҡтың? Һөттө соланға сығар, әсеп ҡалмаҫы борон!

Муллахмәт. Ҡыҙыңдың ваҡыты тар…

Наҙлиә. Ваҡытына ҡатыҡ ойотҡанмы ни?

Муллахмәт. Уткүршеләрҙә аулаҡ була, тиме шунда… Ҡанә, үҙем *(һөттө сығарып килә).*

Гүзәлиә. Алты кило бәрәңге, унының ла ярым серек *(сөмкәне дөңкөлдәтеп йыуынтыҡлы күнәк эргәһенә ырғыта).* Быйыл унының ла уңманы бит, исмаһам, һабағында ултырып көйҙө.

Муллахмәт. Яман ҡоролоҡ булды шул.

Гүзәлиә. Ҡоролоҡ булмаҫ ине лә бит, ваҡытында һуғарһаң.

Муллахмәт. Ҡоҙоҡтан һыу китте ләһә, беләһең.

Гүзәлиә. Пөш-ш-ш! Ә ниңә уткүршең Вилким Иванычтыҡы китмәне лә кипмәне? Шәп булһаң, һин дә скважина быраулатыр инең. Кеше тигәнең

күнәкләп тә ташымай – “Ағиҙел” һурҙыртҡысынан выжылдатып сәптертә. *(Йыуынтыҡлы күнәкте тибеп).* Кухняһына ла торба буйлап ҡына үҙе урғыла.

**Муллахмәт, өндәшмәй, ҡағыҙ өйөмлө өҫтәле артында башын тотоп ултыра.**

Гүзәлиә. Иртәрәк булғанғамы, сәй дөкәндәре ябыҡ.

Муллахмәт. Азалия ханым асмағанмы ни?

Гүзәлиә. Пөш-ш-ш! Азалия ханың, асып, тик һине көтөп ята. Әммә аҡсаһыҙ бирмәйем, килһә лә, керетмәйем, ти. *(Ярһып, буш аҡса кеҫәлеген йәгни кошелогын асып иҙәнгә һелкә лә яҙыу өҫтәленә ырғыта).* Мә! Ихтимал, сәйлек һуҡыр тин сығыр!

**Муллахмәт, өҫтәл артынан һурылып, ҡатынының пальтоһын һалдырыша.**

Гүзәлиә. Ипләп, сереп бөткән еңдәре өҙөлөп төшмәһен!

Муллахмәт *(уны яурынынан ҡосаҡлап).* Кәләшкәйем, тыныслан. Бына-бына пенсиям килеп етер…

Гүзәлиә. Һинең хәйерсе пенсияң… күкрәгеңде үтәләй аттыртып ҡайтып… Уҫлап ауыҙ уткүршең, ана, обкомында көрәп алыуы етмәгән, айыуҙай килбәте менән беренсе группа инвалид булып, пенсияның да кәттәһен ҡайырып ашап ята…

Муллахмәт. Ярар, бисәкәй, беҙ ҙә ас ултырмайбыҙ.

Гүзәлиә. Елегеңде һурҙылар…

Муллахмәт. Бисә! Минең елегемде фашист ғәскәрҙәре лә һура алманы.

Гүзәлиә. Уның ҡарауы былар һурҙы, была-а-ар (илай).

Муллахмәт (ҡосаҡлап). Илама.

Гүзәлиә. Уф… Йәшләй генә сәстәремде саллаттың! Кем инем мин, кем инем?!

Муллахмәт. Гүзәлиәм, гүзәлем! Гүзәлдәрҙән гүзәл инең һин, әле лә тап шундайһың!

Гүзәлиә. Һантый! Кешенән оят, ыстырам! *(Итәген күтәрә -- капрон колготкаһы буйҙан-буй ярылған).* Кеше алдында ауыҙ йырып йылмайырға ла тартынам -- күр бына! *(Ауыҙын асып күрһәтә).* Тешегеп йөрөп тештәрем ҡойолоп бөттө -- ҡуйҙыртырға юҡ сара! Ҡасандырғы ҡамытаяҡ көндәштәремә хәтлем: “Гүзәлиә тигән исемең ҡалмаһа, ҡарға күтәреп алып китер ине”, -- ти ҙә бот сабып көлә.

Муллахмәт *(ҡатынын диванга ултыртып).* Әммә намыҫлы йәшәнек… тәүфиҡлы балалар үҫтерҙек.

Гүзәлиә. Намыҫ, тәүфиҡ! Башҡа нимәң бар һинең?! *(Пауза).* Көндәгесә хәйерсе сөмкәмде һөйрәлтеп ҡайтып килһәм, уткүршеләр, туҡталып, ҡара “Волга”ларына ултыртып алдылар. Салон тултырып затлы ризыҡ, заграничный мөлкәт тейәп ҡайтып киләләр, икеһе тиң энәнән-ептән кейенгән, ауыҙҙары тулы алтын. Үҙемдең эт илағыс хәлдән ытырғаныпп, ер ярығына кереп китерҙәй булдым… Һайыҫҡаны ҡолағыма шыҡырыҡлай: ирендең ҡолаҡ итеп кимер, ниңә былай йөрөтә, Вилким Иванычтың һыртарҡаһын ыңғайына һыпырһын, ти. Рәхмәт әйтеп төшкәнемдә тегеһе лә: “Муллахмәт Ҡолахмәтычҡа ҡайнар сәләм, терәлеп торған тоғро дуҫы барлығын онотмаһын!” – тип мөләйем оҙатып ҡалды. Ниңә өтөрәйәһең? Һөймәһәң дә һөйкәнә белергә ваҡыт. Ул кем дә һин кем?!.

Муллахмәт. Шағир мин!

Гүзәлиә. Пөш-ш-ш, китапһыҙ-исемһеҙ шағир. Ә уның китабы бар, исеме бар. Бөтөн республикаға данлы. Профессор Хәсәнәйев тикмәгәме ни уның хаҡта кирбес ҡалынлыҡ монография яҙып: “Заманабыҙҙың бөйөк әҙибе Вилким Киреев Бөйөк Ватан һуғышы ҡырҙарынан уҡ буш ҡул менән ҡайтманы – илебеҙгә, туған халҡыбыҙға “Ут эсенән репортаж” тигән мәшһүр шиғри йыйынтығын бүләк итте. Шунда уҡ ул әҙәбиәтебеҙҙең иң талантлы шағиры булып танылды”, -- тип күккә күтәрә.

Муллахмәт. Бер балыҡ башын сәйнәйһең дә сәйнәйһең, сер итеп кенә сискәнемде хәтереңдә тотмайһың! Яҙыусылар союзына ҡайтарыуын үтенеп, “Фронт яҙмалары” тигән ҡуйын дәфтәремдән аҡка күсереп биргәйнем… ә ул ҡайта һалған да үҙенеке итеп китап сығартҡан, тигәйнем дәһә…

Гүзәлиә. Һуғыштан ҡайтҡас ниңә, ҡуйын дәфтәреңде асып һалып, күҙҙәрен шаҡырайтманың?

Муллахмәт. Әйттем бит, юғалттым, тип… һуңғы тапҡыр ҡаты яраланғанда… Профессорыңдан һора: шундайын да талантлы шағир булғас, ниңә дауам ҡылмаған – беренсе китабынан уҡ өнө тығылған?

Гүзәлиә. Һуғыштан һуңғы ҡатмарлы тормош шарттарына, Ватан мәнфәғәттәренә яуап итеп, шундай уҡ иҫкиткес талантлы проза яҙыуға күсте, ти ул…

Муллахмәт *(өҫтәлдәге ҡағыҙ күбәһенә төртөп).* Бына ята уның “талантлы проза”һы.

Гүзәлиә. Профессор әйтә: “Әммә өмөт итәйек, -- ти. – Ижадының бәрәкәтле тәүге аҙымын талантлы шиғри йыйынтыҡ менән башлаған ырыҫлы әҙип һуңғыһын да шаҡ-катырғыс шиғри китап менән ослап беҙҙәрҙе ныҡ ҡыуандырыр”, -- ти.

Муллахмәт. Һе! Әллә, тим, бисәкәй, ысынлап та ныҡ ҡыуандыртырғамы икән? *(Өҫтәленең йоҙаҡлы тартмаһынан йәшел тышлы ҡалын дәфтәр ала).* Бына ул, ғүмерем буйына яҙҙым. Прозамды һатһам да, шиғырҙарымды бирмәнем.

Гүзәлиә. Бәрәк-Алла, пенсияңды көтөп көтөк булмайыҡ! Ҡанә, эйәһенә илтәйем!

Муллахмәт. Эйәһе бында уның! *(Дәфтәрҙе кире һалып йоҙаҡлай).* Етәр, ҡанымды күп һыуырҙы.

Наҙлиә *(йүгереп инә).* Әсәй! Әсәйем ҡайтҡан! *(Килеп ҡосаҡлай).*

Муллахмәт. Әй әттәгенәһе, онотҡанмын. Әсәйем ҡайтҡас та һөйөнсөләһен, тигәйне.

Гүзәлиә. Бәпескәйем, һөйөнсөләй алмайым бит әле мин. Һин әйткән ерҙә фарцовщик бәндә булманы, милиция эләктерҙе, тинеләр. Икенсе юлы…

Наҙлиә. Эй-й-й, миңә хәҙер үк кәрәк, хәҙер үк! Бөтәһе лә шмоткала, бер мин генә… *(Шыңшый).*

Муллахмәт. Ай Алла, шмотка тигәне ни ул?

Гүзәлиә. Тар балаҡлы буржуй салбары кейәләр ҙәһә, бахыр беҙҙең балалар ғына…

Муллахмәт. Һе!

Наҙлиә. Ниңә әсәйгә етерлек аҡса бирмәйһең?

Муллахмәт. И бала, бала…

**Ишек шаҡыу. Йылдар үтеп олпатланған, сәсе ағарған, әммә һомғоллоғон ташламаған Ганна инә, ҡулында юл сөмкәһе.**

Ганна. Яңылышмаһам, Бөйөк Ватан һуғышы геройы Муллахмәт Ҡолахмәтов ошонда йәшәй?

Муллахмәт. Бәй-бәй, үлеме мин, тереме?..

Ганна. Бер үлеп терелгәнең дә етәр, һалдат, йәшәйек әле. Ҡәҙерле геройым, танымайһыңмы әллә?

Наҙлиә. Әсәй, тора ла “герой” тисе?

Гүзәлиә. Сеү, ҡыҙым.

Ганна *(ике ҡулын һуҙып килә).* Ә мин таныным, таныным!

Муллахмәт *(һонолған ҡулдарҙы үбеп).* Ошо ҡулдар әжәлдән йолдо мине.

Ганна *(ветеранды ҡосаҡлап үбә лә ебәрә, Гүзәлиәгә килә).* Ғәфү итегеҙ… йәп-йәш ҡорҙаштар инек… *(Боролоп).* Бәхеткә күрә, пүлә үтәләй сыҡҡан. Бәһлеүән һалдат инең, шул арҡала тибәрҙек Ғазраилды.

Муллахмәт *(ҡатынына).* Ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерле ҡунағыбыҙ, элекке военврач Ганна Михайловна был. Ә былары хәләл ефетем Гүзәлиә, ҡыҙым-ҡоралайым Наҙлиә, йәнә еткән уланҡайым-боланҡайым бар. Һинекеләр ҙә ишлелер?

Ганна. О ҡорҙаш, бер кемем дә юҡ шул минең, Хоҙай насип итмәне… Ә һин ниндәй бәхетле!

Гүзәлиә. Ҡыҙым, ауыҙыңды асып торма былай – сәй ҡуйыйыҡ, ҡунағыбыҙ һыуһап-сарсап килгәндер *(аш өҫтәле тирәһендә булашалар).*

Муллахмәт. Ганна Михайловна, нисек эҙләп тапҡанһың – бынауы урман төбәгенән? Иркенлә, үҙебеҙҙә ҡуна-төнә торорһоң.

Ганна. Юҡ, ҡорҙаш, ҡыҫҡа ғына араға юлығыуым, ҡунаҡханаға урынлаштым. Ә бында мине яғымлы бер таксист елдертеп килтерҙе. Дачағыҙҙы һорашҡас: "Беләм, Вилким Иванычтың уткүршеһе ул", -- тине. Беҙ белгән капитанмы?

Муллахмәт. Тап шулай…

Гүзәлиә. Зерә лә ҙур түрә ул уткүршебеҙ.

Муллахмәт. Эйе…

Ганна. Быныһы ғәжәп түгел. Ҡайҙа шөғөлләнә?

Муллахмәт. Дөрөҫөн генә әйткәндә, партия өлкә комитетында "шишка на ровном месте".

Ганна. Шундайҙар шешекләнә шул. *(Тауышы үҙгәреп).* Ошо арала "Красная звезда"ла ҡупҡан шау-шоуҙы абайланыңмы?

Муллахмәт. Ул гәзитте әлегебеҙ үҙе килтереп уҡытты.

Ганна. Мәхшәр! Мәсхәрә! Ниңә сыҙап ятаһың?! Асыуымдан түҙә алмай, адресыңды юллап алып, әлегәсә иҫән икәнлегеңдән нык ҡыуанып, сюрприз алып килдем тегеләрҙең ауыҙҙарын ҡапларға *(сөмкәһенән төҫө уңған йәшел һалдат гимнастеркаһы сығарып, ҡуш ҡулында киреләдертеп тотҡан килеш, әйләндергеләп күрһәтә -- ике ягында ла бер үк тәңгәлдән тишек, ҡан ҡатып бурҙатланган).* Таныйһыңмы изге йөрәк ҡаныңды? Алды-арты бер тәңгәлдән тишелгән.

Муллахмәт. Танымаған ҡайҙа ул! *(Ҡулына алып үбә лә, тәңкләп, яҙыу өҫтәленә һала).* Ҡабат terелттең мине, Ганна Михайловна.

Ганна. Операция өҫтәлендә ипләп кенә һалдыртып алғайным.

Муллахмәт. Юғалмауы мөғжизә.

Ганна. Быныһы ҡуйын дәфтәрең: "Фронтовые записки. Стихи", -- тип урыҫса әшкәртелгән.

Муллахмәт. Уй рәхмәт, уй рәхмәт!

Ганна. Был ғына ла түгел әле *(йәшел әрекмән япрағына төрөп киптерелгән серле йомарлаҡ бирә).* Һабына исемең яҙылған, так что…

Муллахмәт *(йәшел көбөн һыҙырып ташлап, ҡара пистолетты ҡулында уйната).* “Тел” ала барғанда дошман тылынан бер фрицты йөкмәп ҡайтҡас, генерал бүләк иткәйне. Музейға тапшырырмын.

Ганна. Тулы магазинлы килеш, абай бул. Хәйер, уныһын үҙең беләһең.

Муллахмәт. Ҡәҙерлем, был тиклемде нисек һаҡлай алғанһың! *(Пистолетты өҫтәл тартмаһына йәшерә).*

Ганна. Осло беҙ ҡапсыҡта ятмаҫ, хаҡиҡәт барыбер асылыр, тип ышандым. Һине ялан госпиталенән тәрән тылға оҙатҡас, корреспонденттар килеп, Александр Матросов подвигын ҡабатлаған ҡыйыу военкор Вилким Иванычтың күкрәгенән пүләләрҙе үҙ ҡулым менән алыуым тураһында ҡултамға ныҡыныылар, ул Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡлы, тип иҫкәрттеләр. Тик барып сыҡманы, буғай, сөнки батальон командиры ҡул ҡуйыуҙан ҡырҡа баш тартҡан. Иҫеңдә тот: ошонда килер алда ғына мин ул подвиг ваҡиғаһын “Красная звезда”ға нисек бар -- шулай яҙып ебәрҙем.

Муллахмәт. Рәхмәт, Ганна Михайловна. Ҡыҙым-ҡоралайым, был ҡәҙерле ҡомартҡыны *(гимнастерканы гәзиткә төрөп бирә)* соландағы шкаф тартмаһына һалып тор.

Наҙлиә. Йә, атай *(китә).*

Гүзәлиә. Рәхим итеп ултырышайыҡ, барлы-юҡлы табын әҙер *(эркеләләр).* Ҡунаҡ-фәлән килһә, тип, һаҡлап ҡына тотҡайным *(шарап ҡуя).*

Ганна. Юҡ-юҡ, мин был нәмәнән азат. Ә һин, һалдат?

Муллахмәт. Үҙ ғүмеремдә бер генә тапҡыр уртланым утлы һыуҙы – ошо изге ҡулыңдан… операция өҫтәлендә…

Ганна. Шунһыҙ шок була ине. Молодец, ҡабатламағанһың икән.

Гүзәлиә. Ҡағыҙ-ҡәләмдән башҡаһын белмәй бит ул.

Ганна. Теге саҡта Бондаренко дуҫың: “Ҡотҡарығыҙ, башҡорттоң талантлы шағиры был!” – тигәйне. Үҙе лә яҙыша ине…

Муллахмәт. Тарас Шевченконы уҡыһам, Бондаренко дуҫымды хәтерләйем…

Ганна. Яҙмышы ла аяныс: фашист әсирлеген йырып сыҡһа ла, Себерҙә серене башы… дәфтәре генә ҡайтты. Шиғырҙарын ҡулдан-ҡулға күсермәләп уҡыйҙар.

Муллахмәт. Шулай беҙҙең яҙмыштар.

Гүзәлиә. Беҙҙең, тиһең, һинең донъяла барлығыңды кем белә?

Ганна. Белерҙәр, белерҙәр. Бондаренконыҡы кеүек, йәш быуын күтәреп алыр.

Гүзәлиә. Алды, ти. Ана, ишетәһегеҙме: ҡотороҡ шайтан таҡмағында типтерә ул заграничный тар балаҡлы йәш быуын.*(Гөрһөлдәүек "типтереү"ҙе тыңлайҙар).*

Ганна. Тап беҙҙәге кеүектер, күҙ һалаһы ине бер.

Гүзәлиә. Эш ниҙә, киттек, әләйһә. Абышҡам, тор, ҡунағыңды ҡултыҡла *(ишеккә йүнәләләр).*

**Икенсе сәхнә**

**Вилким дачаһының залы, тар балаҡлы йәш-үçмерҙәр ярһыу музыканан шашынып борғолана. Ишектән әхирәттәр – Вилор менән Наҙлиә инә, һуңғыһы атаһының баяғы ҡанлы гимнастеркаһын ҡуш ҡулында киреләдертеп тотҡан.**

Вилор. Ивис, туҡтат магнитофонды, мөһим хәбәр! *(Музыка тына, бейеүселәр урындарында ҡата).* Братва, Гузельканың ҡулындағы ҡанлы шмотканы күрегеҙ: үтәнән-үтә тишек *(ҡуш тишек аша бармаҡтарын үткәрә).* Фашист амбразураһына күкрәк ҡуйған предоктың ҡанлы гимнастеркаһы.

Братва. О-о-о!

Бер ҡыҙый. Абау, Вилким Иванычтыҡымы?

Вилор. Уныһы не важно. Важноһы шул: заграничный тар балаҡтар араһында типтерергә ҡайтҡан ул.

Братва. Вау!

Вилор. Гузелька хәҙер шәп театр күрһәтә, сәпәкәйләгеҙ! Музыка!

Братва *(ҡул сабып).* Просим!

**Наҙлиә әхирәте ярҙамында ҡанлы гимнастерканы ыштан рәүешле кейеп, ҡанлы тишеген осаһында уйнатҡылап, ҡоторонҡо бейеүгә ҡушыла.**

Ивис. Стоп! *(Музыка тына).* Бер нәмәһе етешмәй – бына улар! *(Юғары күтәргән ҡулдарында орден-миҙалдар һелкенә).* Предоктың нафталинлы мундирынан стибрил.

Братва. О-о-о, отменно!

Ивис. Гузелька, пушканды тоçҡа миңә. *(Гүзәлиә, туңҡайып, осаһын ҡыйшаңната).*

Ивис. Шикарно! Ҡыҙыл әләмле "Гвардия" ҡалайын пушканың нәҡ тишеге өçтөнә тағабыҙ. "За боевые заслуги" һәм "Отечественная война" тигәндәрен – ике яҡлап ике тәгәрмәскә, бына ошолай. Музыка!

**Типтереү ҡабатлана, Науҙлиә баяғы наградалар тағылған тумпыҡ осаһын уйнатып бейей. Дөйөм хахылдап көлөү, ҡул сабыу. Тап шул мәлдә ишектән Муллахмәт, Ганна, Гүзәлиә килеп инеп шаҡ-ҡата.**

Муллахмәт. Был ни был?! Һаташамдыр, ахыры *(ишек яңағына һарыла).*

Ганна. Хоҙайым!.. Өнөбөҙгә ҡайтайыҡ! *(Муллахмәтте ҡултыҡлап алып сығып китә).*

Гүзәлиә. Ҡыҙым, ни ҡылығың?! Үлтерҙең!.. *(Ҡыҙын төртөп йығып, гимнастерканы һалдырта).*

**Икенсе яҡтағы ишектән күҙҙәре аларған Вилким атлығып керә.**

Вилким. Ивис, каналья, наградаларым ҡайҙа?

Ивис. Вон, тейешле урынында.

Вилким *(Гүзәлиәгә ташлана).* Тукта! Ҡалдыр!

Гүзәлиә. Кәрәге бар ине шалтыраҡтарыңдың! *(Гимнастерканан йолҡоп алып, типтереүселәрҙең аяғы аҫтына ырғыта, Вилким иһә үрмәләп йөрөп йыя).* Киттек, киттек! *(Ҡыҙын һөйрәкләп олаға).*

**Өсөнсө сәхнә**

**Таныш өй эсе, Муллахмәт менән Ганна ҡосаҡлашып илаша.**

Муллахмәт. Йәшәргәме, йәшәмәҫкәме бынан кәйен…

Ганна. Йәшәргә, һалдат, йәшәргә!

Муллахмәт. Теге саҡта ниңә тере ҡалдырҙың мине, Ганна…

**Төҫө-башы ҡасҡан Гүзәлиә менән Науҙлиә инә.**

Гүзәлиә. Абау, был ни хәл? Үҙ өйөмдә ҡосаҡлашып зина ҡылалар!

Ганна. Ғәфү… ғәфү! Изге реликвияны… *(һулҡылдай).*

Гүзәлиә *(гимнастерканы иҙәнгә атып-бәреп).* Бына һеҙгә реликвия… *(ярһып тапай).* Бына! Бына!

Науҙлиә *(әсәһенә ҡушылып).* Бына! Бына!

Муллахмәт. Ҡоралайым, балаҡайым…

Науҙлиә. Все, мин һинең балаң түгел! Байрасың да һинеке түгел!

Гүзәлиә. Ҡыҙым!

Наҙлиә. Вилор подругам кисә атаһы менән әсәһенең әрләшкәнен тыңлап торған. *(Әсәһенә).* Беҙҙе елдән тапканһың һин!

Муллахмәт. Ҡоралайым!

Наҙлиә. Все! Беҙҙең биологик атайыбыҙ һин түгел – Вилор Иваныч икән!

Муллахмәт *(йөрәк тәңгәлен тотоп).* Аһ!.. *(Өҫтәл тартмаһынан көбәген алып, ҡатынына яҡынлай).*

Ганна. Һалдат!..

Муллахмәт *(ҡатынын сәсенән йомарлап).* Ысынмы? Әйтеп ҡотол!

Гүзәлиә. Уй-уй-уй, ирлегең булманы бит…

Муллпахмәт *(ҡатынын дер-һелкетә).* Дөрөҫөн әйт, ысынмы?

Гүзәлиә. Уй-уй, ысын! Атып үлтер тиҙерәк!

Муллахмәт *(ысҡындыра, көбәген кеҫәһенә тыға).* Үҙең дә эрәүерһең. *(Ишек төбөндә кейенеп торған Ганна янына килеп, ашыҡ-бошоҡ кейенә).* Ошондай беҙҙең хәлдәр, ғәфү ит. *(Ҡунаҡтың юл сөмкәһен ҡулына ала).* Оҙатып, ултыртып ебәрәйем *(сығалар).*

Гүзәлиә. Выжт! Күтегеҙгә ҡарама көлө!

Наҙлиә. Әсәкәйем! *(Әсәһен ҡосаҡлап илай).*

Гүзәлиә. Тиҙерәк! Исән саҡта олағайыҡ! *(Ашығып сығып китәләр).*

**Дүртенсе сәхнә**

**Муллахмәт баҡсаһының шул уҡ ихатаһы, төп ваҡиғаларҙың үҙәге -- мунса һәм уға йәнәш ҡоймалар тирәһендә. Саңғыларын яурынына һалған Байрас артҡапҡанан керә.**

Байрас. Боланҡайым-бәләкәсем, тәки эйәреп ҡайттың бит – асыҡҡанһыңдыр инде. Мороноңдо терәп кенә көтөп тор, тәмле әпәкәй апсығам *(саңғыларын һөйәп ҡалдырып, өйгә инеп китә).*

**Уткүршеләр яғында тауыш:**

**-- Ивис, глянь-ка, тегеләрҙең артҡапкаһы артында болан балаһы тора.**

**-- Шым! Разведкаға барайым.**

**Ивис, мунсаға йәһәт инеп, мылтыҡты алып сыға, артҡапҡа яғына тоҫҡай.**

Ивис. Болан балаһы, болан балаһы…

**Икмәк тотоп сыҡҡан Байрас мылтыҡлыға ташлана.**

Байрас. Ивис, туҡта!

**Көбәктән ут бөркөлөп шартлай, болан балаһының әсе баҡырып йығылыуы ишетелә.**

Байрас. Ивис, ни эшләнең, ни эшләнең… бир мылтыҡты! *(Тартҡылашалар, артҡапҡанан кешеләр йүгерешә).*

Ғәләүи. Шәп! Ҡабымлыҡҡа әсвәжий ит!

Егерь. Кем атты?

Вилким *(тимер ҡойма артынан ташланып).* Был ни һорау, мылтыҡ эйәһе ана тора! Минең улым браконьерҙың ҡулынан йолорға тырышты.

Милиционер. Ә шулай ҙа кем -- әйтегеҙ!

Байрас. Мин атманы!

Ивис. Мин түгел!

Вилким. Ишетәһегеҙме, минең улым тут ни при чем!

Ғәләүи. Минеңсә, тап һинең малайың атты, буғай.

Вилким. Молчать, һаҫы апара ҡорто!

Милиционер. Икеһен дә алырға, тегендә асыҡланыр. Егерь, ярҙам ит *(ике үҫмерҙе беләктәренән бер бығауға тоташтыралар).*

Вилким. Произвол! Яуап бирәсәкһегеҙ!

Милиционер. Бирербеҙ. Тәпәйләгеҙ, марш!

**Урам яҡтан Муллахмәт ашығып килә.**

Муллахмәт. Отставить! *(Баш остарына ата, тимер ҡойма артында сыр-сыу ҡубыш, ихата төбөнә ҡасыш).* Ысҡындырығыҙ!

Егерь *(милиционерга).* Бешмәгән, буш кобура таҡҡанһың!

Милиционер. Ә һинең көбәк ҡайҙа?

Вилким. Аҡылдан яҙған, ҡоралын тартып алығыҙ!

Муллахмәт. Кемгә әйтәм?! *(Тағы ата).*

Милиционер, Егерь. Хәҙер, хәҙер! *(Ысҡындыралар, үҫмерҙәр икеһе ике яҡҡа ҡаса, Байрас мунсаға инеп бикләнә).*

Муллахмәт. Инде бынауы ике аяҡлы бурҙайҙы үҙенең тимер рәшәткәһенә сылбырлағыҙ!

Вилким. Не сметь! Беләһегеҙме, мин кем?

Муллахмәт. Инә боланды үлтереп, яуыз өлгө биргән яуыз һин. *(Тәртип һаҡсыларына).* Кемгә әйтәм?!

Милиционер, Егерь. Хәҙер, хәҙер!

Вилким. Сотру в порошок! Мин, мин…

Милиционер. Тыпырсынма, абзыҡай, беләбеҙ. *(Вилкимды ҡойма рәшәткәһенә беркетеп бығаулайҙар).*

Муллахмәт. Ә һеҙ яҡшы сағығыҙҙа тайығыҙ, бегом! *(Милиционер, Егерь табан ялтырата).* Һөләлә-ә-ә! *(Баш остарына атып ҡала. Рәшәткәгә ҡаптыртылған Вилким күҙе аларып ҡоторона, уткүрше ихатаһында илаш, дөйөм сыр-сыу. Тамара ире тәңгәлендә рәшәткәгә ике ҡулы менән тотоноп тулай-тулай сарбайлай).*

Вилким. Сыпраңдама, ысҡындыр!

Тамара. Уф, ҡайһылайтып ысҡындырайым? Йоҙаҡлы бит.

Вилким. Ахмаҡбаш, телефондан шылтырат! Милицияға, психбольницаға!

Тамара. Хәҙер, хәҙер! *(Йүгерә).*

Вилким *(бығауын шалтыратып).* Ух, бәйле эт көнөнә ҡалдырҙылар.

Муллахмәт. Эйе, минең бәйле этем һин.

Вилким. Башыңды серетермен!

Муллахмәт. Ғүмерең буйына миңә бәйле йәшәнең, минең ҡулдан ашаның. Ҡапҡан беренсе ҡалъяң – минең шиғри “Фронт дәфтәре”м булды.

Вилким. Докажи, сволочь!

Муллахмәт *(Ганна килтергән ҡуйын дәфтәрен сығара).* Бына ул! Төп нөсхәһе тамағыңа аҙаҡҡыһы ла булһын, тығын, тығын! *(Биттәрҙе йыртып йомарлап, көбәк осо менән “эт” ауыҙын шаҡара астыртып тыға, төйгөсләй).* Маладис! *(Ҡуйын дәфтәрен уның йөҙөнә бәреп, һалмаҡ ҡына аҙымлап өйгә йүнәлә).*

Вилким *(ҡағыҙ йомарлағын ҡаҡырып-төкөрөп ташлай).* У-у-у, зәкивәлидовсы, милләтсе, артыңды уйла!

Муллахмәт. Артым да, алдым да уйланылған.

**Шау-шоу, машиналар ғыжылдап килеп туҡтай, милиция наряды һәм психбольница санитарҙары эркелә, ә бындағы Вилорға иғтибар юҡ. Өйҙән ҡапыл моңло ҡурай уйналып, “Илсе Ғайса” йыры ағыла. Хәрәкәт туҡтала, шыҡайып тороп тыңлайҙар.**

Санитар. Тамам аҡылдан яҙған – илар саҡта магнитофон уйната.

Вилким *(аҡырып).* Ватып керегеҙ, алып китегеҙ сумашедший бандитты!

**Ишекте ҡайырып үтәләр, моңло йыр кинәт тына. Шул тынлыҡты ярып атыу тауышы яңғырай. Ике санитар Муллахмәттең йәнһеҙ кәүҙәһен ҡарға сығарып һала.**

Беренсе санитар. Хоҙайым ярлыҡаһын, тас маңлайына сумыртҡан.
Икенсе санитар. Психбольница пациенты түгел инде.

**Шул ыңғайҙа сәхнә түңәрәге әйләнеп, мунса яны алғы планға күсә.**

Байрас *(аунап ятып үкһей).* Атаҡайым! Атаҡайым!
Вилким. Тфү! Ахмаҡ! Ул түгел һинең атайың, мин ул һинең атайың!
Байрас *(башын ҡалҡыта биреп).* Атайымдың эте һин! Вау, вау, вау!
Вилким *(нәк сылбырлы эттәй ырғылып-тартылып).* Ыр-р-р! Ваф, ваф, ваф!

**Ошоға ҡушылып йөҙәрләгән эттәрҙең күмәк һауылдап өрөүе, олоуы күмә донъяны.**

**ШАРШАУ**

1975, 07.12.2012.

# СӨЙӨМБИКӘ ҺЫЛЫУ

## Тарихи драма-хроника
## 3 шаршауҙа, 13 сәхнә һәм эпилогта

*Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына арнайым.*

## Ҡатнашалар (бөтәһе лә реаль ваҡиғаларҙағы тарихи реаль шәхестәр):

**Йософ** — башҡорт (нуғай) иленең көньяҡ яртыһының йәғни Бәләкәй урҙаның мырҙаһы, аҙаҡтан кенәз.
**Һылыубикә** — Йософтоң ҡатыны.
**Сөйөмбикә** — Йософтоң ҡыҙы, тәүҙә 14 йәштә.
**Юныс** — Йософтоң өлкән улы, Аҡтүбә ҡалаһы мырҙаһы.
**Йәнсура батыр** — азаматтар башлығы, тәүҙә 16 йәштә.
**Үҫәргән** — Йософтоң Мәскәүгә йөрөмтәл илсеһе.
**Исмәғил** — Ҙур урҙа кенәзе, Йософтоң бер туған ағаһы.
**Тимер** — Исмәғилдең Мскәүгә йөрөмтәл илсеһе.
**Йәнғәли** — Ҡасим ханы Шәйехғәлиҙең аҡылға бер төрлөрәк бер туған ҡустыһы, Ҡазан ханы, тәүҙә 27 йәштә.
**Сафагәрәй** — Ҡазан ханы.
**Ҡушаҡ** — Сафагәрәйҙең, һуңынан Сөйөмбикәнең хан гвардияһы башлығы.
**Мурали бәк** } Сөйөмбикәне Яуыз Иванға һатҡан Ҡазан
**Хоҙайғол уғлан**} олуғтарының етәкселәре.
**Ҡолшәриф** — Ҡазандың баш муллаһы.
**Бойорған Сәйет** — Ҡазан ханлығының баш муллаһы.
**Елена (шәүлә)** — Мәскәү бөйөк кенәзе мәрхүм Василийҙың мәрхүмә ҡатыны, Яуыз Ивандың әсәһе.
**Иван (Яуыз Иван)** — Рәсәй батшаһы, 21 йәштә.
**Макарий** — митрополит.

**Адашев —** Яуыз Ивандың ышаныслыһы. Ҡазан, Әстерхан ханлыҡтарын яулап алыу буйынса дипломатик эштәрҙе башҡарыусы, Ҡазан ҡәлғәһен шартлатыуҙа инженер эштәре башлығы.
**Петр Серебряный** — кенәз, татарса яҡшы белә.
**Кадыш Кудинов** — Мәскәүҙең Бәләкәй урҙалағы илсеһе.
**Вәкил —** Төркиә вәкиле, ғәмәлдә башҡорттарҙы урыҫ дәүләтенә (Мәскәүгә) ҡаршы аяҡландыртыусы шпион.
**Әбей** — Сөйөмбикәнең тәрбиәсеһе.
**Бабай** — Йәнғәлиҙең тәрбиәсеһе.

Бер үк артист 2-3 ролде уйнай ала.

# БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

## 1-енсе сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1532 йыл. Яйыҡ йылғаһына һул яҡлап ҡойған Урта Бүртә йылғаһы тамағында уның уң ярында (хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ҡарай) тәбиғәттең иң хозур бер төбәге. Биналары ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән Кесе һарайсыҡ ҡаласығы һыҙатлана — Йософ мырҙа йәйләүе. Мырҙа һарайы эргәһендә нәҙек манаралы мәсет. Йәмле июнь айы, яйыҡтың ҡусҡыллыҡҡа күмелгән яр буйҙары. Аръяҡта — үркәс-үркәс тауҙар, таҫмаланып офоҡҡа тартылған юл. Һыҙылып таң атып килә, һандуғастар өҙҙөрөп һайрай. Композитор Найыл Ғәлиевтың Шәриф Бикҡол шиғырына яҙған «Оҙата кил» («Һайра-һайра, һандуғасым...») йыры Венер Килмөхәмәтов башҡарыуында тирбәлеп Яңғырай. Алыҫтарға бағып кемделер көткән, һандуғастар моңонан ныҡ болоҡһоған яңғыҙ ҡыҙ һыны.**

**Сөйөмбикә.** Уф Аллаҡай ғынам, ошондалыр, ахырыһы, һинең аҫыл ожмахың! Былбылдарын ғына тыңла: «Ожмах! Ожмах! Ожмах!» — тип сутылдайҙар бит... Ысындыр ҙа был. Сөнки ете ер, ете диңгеҙ аръяғынан килеп киткән мосафирҙар ҙа, бит, тыуған Башҡортостанымды, ҡитғабыҙҙың ожмахы, тип таныйҙар. Их, һандуғаслы гүзәл Башҡортостаным! Ошо йәшемдә генә лә арҡыс-торҡос күп буйланым һине мин. Көньяҡтың эҫе-көйҙөргөс самум елдәре өтөп торған Үҫәргән диңгеҙенән алып (уны «Аҡ-әсә-би» — Каспий диңгеҙе тип тә йөрөтәләр) һалҡын-туңдырғыс ҡар буранлы Төньяҡ боҙло диңгеҙгәсә, Иҙел

ярҙарынан алып Иртыш ярҙарынаса бөтә Башҡортостанымды ҡыҙырырға яҙҙы миңә Хаҡ Тәғәлә. Сөнки ҡайҙа ғына барма — бөтә Урал буйҙары үҙебеҙҙеке. Төньяҡлап Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим һыуҙары бергә килеп тоташҡан тошта, бөтә ҡалаларыбыҙҙың әсәһе булған изге Көн-Өфө ҡалаһында, ошо Бөтә Башҡортостанымдың кенәзе, атайымдың бер туған ағаһы Исмәғил олатам бойороп ултыра семәрле алтын тәхеттә. Көн-Өфөнөң дүрт яғынан дүрт яҡҡа киткән дүрт юл осонда ла Исмәғил кенәздең мырҙалары — беҙҙең туғандарыбыҙ ил тотоп тора. Көнсығышта Иртышҡа ҡойған Тубыл һыуы тамағындағы Эбер-Себер ҡалаһында ла хан тәхетендә — үҙемдең Мамай-Нор-Ҡасим ағайым. Көнбайышта Ағиҙел тамағында — Айсыуаҡ олатайым. Ә иң алыҫ көньяҡтағы Яйыҡҡа ҡойған Саған йылға тамағында — үҙемдең Йософ атаҡайымдың ҡышлауы. Һәм артабан Иҙел тамағы Әстерхан ханлығының ханы ла үҙебеҙҙеке — боронғо Юрматы ырыуы ханы Әлмөхәмәттең «Бала-ҡарға» йырауында йырланып данланған Һалсы хан тигән улының тоҡомдары...

**Көн яҡтыра төшә, йылға аръяғындағы тауҙар араһына тартылған юл асығыраҡ төҫмөрләнә.**

**Сөйөмбикә** *(ҡулын маңлайына ҡуйып).* Ә шулай ҙа яйығымдан ҡала йәнемә иң яҡын йылға — анауы Дөйәтау артындағы Һаҡмар-һыу. Шуның уң ярындағы Бәкәтәр ҡасабаһы. Хәйер, Бәкәтәрҙе һуңғы заманда Йәнсура батырымдың исеме менән Йәнсура тип тә йөрөтәләр. Бөтә тирә-йүнгә данланған Йәнсурамдың ауылы булғанға күрәлер. Бынан утыҙ ғына саҡрым, иртәнге сәйҙән төшкөһөнәсә ат өҫтөндә елдереп барып етерлек. Йәнсура батырымдың утлы һулышы, бейек Аҙанташҡа баҫып йырлаған моңло тауышы ошонда уҡ ишетелеп торғандай... *Ләкин... ләкин...* осоп барып ҡосағына ташланырҙай сара юҡ... Сөнки атайым ҙур инсан — Бәләкәй урҙаның кенәзгә торошло мырҙаһы, ә Йәнсурам, батыр тигән исеме илгә данланһа ла, Бикбау кенәздең бүләһе Түлебай бейҙең азамат улы ғына. Ә атайым... тел төбөнән тиртеүенсә, мине фәҡәт хан кейәүгә бирергә йыйына... *(Аҡ ҡайынды ҡосаҡлап, һандуғас һайрауына иҫереп баҫып тора).* Юҡ, мин барыбер үҙемдекен итәсәкмен, Йәнсурама йәбешеп булһа ла сығасаҡмын! Эйе, сығасаҡмын! *(Уйланып).* Бөгөн була йәйләүебеҙҙә оло һабантуй — бөтә тирә-яҡ ғәләмдән эркеләсәктәр бында. Йәнсурам да бына-бына килеп етергә тейеш. *(Аръяҡҡа тоҫҡалып, ике усын ауыҙына торбаландыртып).* Йәнсура-а-ам, бәғерем, ниңә оҙаҡ көттөрәһең, илдән алда килмәйһең? Һағынып та һарғайып бөттөм инде. *(Йырлай).*

Яйыҡ буйҡайҙары туғай-туғай,

Туғайында һайрай бер турғай.
Иртәләрен һайрай, кисен ҡарғай —
Һарғайып та үлһен, ти, буғай...

**Һылыубикә күренә.**

**Һылыубикә.** Бәпесем, был ни эш? Ниңә улай, тәмле йоҡоңдо бүлеп, яр буйында яңғыҙ-яран йөрөйһөң?

**Сөйөмбикә** *(тертләп).* Абау, ҡотомдо алдың, әсәйем. Ниңә үҙең иртәләнең?

**Һылыубикә.** Әхирәттәрең, булышсыларың ҡайҙа?

**Сөйөмбикә** *(көлөп).* Бошонма, әсәкәйем, улар ана анауы тирәктәрҙең һәр олоно артынан һағалап торалар мине. Бер сулаға яңғыҙымды ҡалдырыуҙарын теләнем.

**Һылыубикә.** Тик шулай ҙа ҡош-ҡорттан хәтәр заман. Ҡояш сығышы яғында — жуңғар-мағул әтрәгәләмдәре, көн байышында үҙебеҙҙең татар-хәтәр болғана. Урыҫ шымсыларынан да тынғы юҡ. Ана тора Алабайтал кисеүе, кем кисмәҫ, тиһең уны?.. Ә һин, шул тәңгәлгә текләп, күҙеңде талдыраһың...

**Сөйөмбикә.** Әсәкәйем, насарға юрамасы. Ул кисеүҙән, аша сығып, бәхеткәйем киләсәк...

**Һылыубикә.** Ай-һай, оло юлдан кем килмәҫ тә кем китмәҫ...

**Сөйөмбикә.** Әсәкәйем, шулай ҙа кемдәр буласаҡ? Бөгөн һабантуйҙа, тим?

**Һылыубикә.** Атайыңдан яҙа-йоҙа ғына сарпылып ҡалды. Әлбиттә, нурлы мәркәзебеҙ Көн-Өфөнән кенәз Исмәғил олатайың, Ҡазандан Бойорған Сәйет, йәнә Мәскәү илсеһе Кадыш Кудинов, Төркиә илсеһе Вәкил, Әстерхандан олатайың Ирзал Ураҡ хан, Һаҡмар тамағы Аҡтүбәнән Юныс ағайың, Ҡаҫмарт тамағы Ҡасанҡы-Саланан Үҫәргән бей бар... Әйткәндәй, Төркиә илсеһе, көрәш майҙанына сығарырға, тип, ҡарарға имәнес әзмәүер кәүҙәле, бер ултырыуҙа бер һарыҡ итен ашап бөтөрөрлөк төрөк батырын килтергән, ти...

**Сөйөмбикә** *(йөрәкһеп).* Ә Бәкәтәрҙән юҡмы ни?!

**Һылыубикә.** Бәкәтәрҙән Йәнсура батыр бына-бына килеп етергә тейеш. Йәнсура батырһыҙ көрәш буламы ни ул? *(Ҡыҙына текләп).* Туҡта-туҡта, ниңә һораның әле?

**Сөйөмбикә** *(оялып).* Үҙең әйтәһең дәһә, Йәнсура батырһыҙ булмай, тип.

**Һылыубикә** *(уйланып).* Унынһы улай ҙа ул... тегенеһе тегеләй шул... Саҡырылмаған ҡунаҡ кемдән дә яман тиҙәр әле?.. Төн уртаһында Ҡазан ханы Сафагәрәй юлығып ишек ҡаҡты, атайыңды тәмле йоҡоһонан уятты.

**Сөйөмбикә.** Ҡазан ханы?! Ни бысағыма йөрөй тағы?

**Һылыубикә.** Беләһең бит ҡазандарҙы: ҡотороноп бер-береһенең боғаҙын сәйнәү, хан артынан хан , яңыртыу менән шөғөлләнәләр. Атайың әйтеүенсә, үҙҙәренең ҡулынан буҡлы йүкә лә килмәгәнләктән, Мәскәүҙең күҙенә тилмереп ҡарап, Василий кенәздең аяғына баш ороп, урыҫ ҡулынан , яңы хан ялбаралар. Иҫеңдәме, әле генә, бит, шул уҡ Мәскәү килтереп суҡайтҡан Ғәбделлатиф ханды ҡыуып ебәреп, ҡырымлы ошо Сафагәрәйҙе тәхеткә ултыртҡайнылар, инде уны ла, әрләп-хурлап, килгән тарафыңа олаҡ, тип бырактырғандар. Меҫкен Сафагәрәй кейәү, ҡатындарын, яҡындарын оҙон ылауға тейәп, бында килеп йығылған... ханлығын кире ҡайтарырға ғәскәр һораптыр инде.

**Сөйөмбикә.** Тамам теңкәгә тейҙе бит инде ошо ғауғалы Ҡазан татарҙары... Әле урыҫ менән уҫмаҡлаша, әле үҙ-ара ҡырҡыша. Былтыр ҙа, шул ханға ярҙамға барабыҙ, тип, Йәнсура батыр балтырына уҡ ҡаҙалдыртып ҡайтты, ә күптәре Ҡазандың Ар ҡырында ятып ҡалды. Әммә-ләкин ҡәҙеребеҙҙе белмәнеләр һәм белмәйҙәр — ауыҙ асҡан һайын, башҡорт тип әйтәһе урында нуғай тип түбәнһетәләр... Башҡорт һөйәген онтаусы тирмәнгә әүерелде был Ҡазан.

**Һылыубикә.** Тәүбә-тәүбә, атайың ишетеп ҡуймаһын, бәпесем. Әле һаман, Ҡазанға ярҙамға йөҙ егерме мең яу бирергә яйым бар, тип ҡаны ҡыҙышып йөрөй, ҡарыулашһаң, һеркәһе һыу күтәрмәй... Исмәғил олатайың ғына ауыҙлыҡлап тотмаһа...

**Сөйөмбикә.** Ҡазанды яратмайым, Исмәғил олатайым яҡлы мин.

**Һылыубикә.** Ҡазан да үҙебеҙҙеке, башҡорттоҡо. Заманында Туҡтамыш хан олатайыңдың мәшһүр улы Оло Мөхәммәт баш ҡала итеп ҡорған, беренсе ханы булған ер.

**Сөйөмбикә.** Ә ни өсөн Туҡтамыш хан олатайым була ул? Йеҙекәй бабамдың ҡан дошманы лаһа...

**Һылыубикә.** Эй бәпесем, был донъяның этлектәрен белмәйһең шул әле һин... Минең Меңле ырыуы ҡыҙы икәнем мәғлүм бит үҙеңә. Ә Үҫәргән башҡорто Туҡҡужаның улы Туҡтамыш хандың әсәһе, бит, тап беҙҙең Меңле ырыуынан, тап беҙҙең үк тоҡомдан... Йәғни Ҡазан хандары ла асылында үҙебеҙҙең башҡорт тоҡомо улар...

**Сөйөмбикә.** Ә Ҡырым ҡарғаһы Сафагәрәй хан?

**Һылыубикә.** Төптән үк уйлай китһәң, ул да башҡорт затынан булып сыға шул, бәпесем. Нәҡ Еҙекәй бабаңдан килгән нәҫел. Ҡыҫҡаһы, ҡайһы татар ханын соҡоп ҡараһаң да, төбөндә башҡорт ята.

**Сөйөмбикә.** Ы-ы-ы... аҙмыш башҡорттар! Бөтәһе лә беҙгә яу.

**Һылыубикә.** Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡтан аҙып та китәләр шул...

**Һарай яғынан Сафагәрәй хан яҡынлай, кесе ярауын башҡарып маташа.**

**Сафагәрәй** *(йырлай).*

Сары талға ҡунып сайрый турғай...
Һы-һы-һы-һы, турғай...

**Һылыубикә менән Сөйөмбикә пырхылдап көлгәс, Сафагәрәй хан абруйлы ҡиәфәт ала.**

**Сафагәрәй.** Бәтәч, бу Жайыҡның сандуғачлары пырхылдап көлә дә беләләр инде әллә?

**Һылыубикә.** Эй кейәү-кейәү, санаһын ҡыйыш тейәү... Ҡазан ҡарғалары юҡ шул бында.

**Сафагәрәй.** И биембикәм, исемә төшөрмәгез! Уҡшыйсым ғына килә... *(Сөйөмбикәгә текләп).* Аб-бау, мона бит ул сандуғач! Сылыуларның сылыуы, нуғайның сандуғачы!

**Сөйөмбикә.** Һин үҙең ул эт ханы, кешене эткә һанама! *(Артына борола).*

**Сафагәрәй.** Бәй, балдызбикәм, бу ни дигән сүз тағы? Бер кемгә дә “эт” дигәнем булмады! Эт ханы да түгелмен.

**Сөйөмбикә.** Ә мин ниңә эт һандуғасы булайым?

**Сафагәрәй.** Аңламыймын синләрне. Мин бит сине эт сандуғачы дип атамадым лабаса? Нуғай сандуғачы, дидем.

**Һылыубикә** *(көлөп).* Эй кейәүкәй, «нуғай» тигәнең эт тә баһа татар-мағул телендә.

**Сафагәрәй.** Тәүбә-тәүбә, кичерегез алайса. Күзнең яуын алырлыҡ мондый саф гөлнө, былбылны, алай дип әйтмәү генә түгел, аның аяҡ астында ятып үзем эт булып аунарға, ҡойроҡ болғарға хәзермен. Аллаһ Тәғәләдән булып, язмыш үзе татлы төш итеп чығарған икән лә юлыма сине, Сөйөмбикә сылыуым. Шушы урында жиргә борон төртөргә, эзләреңне үбеп китергә рөхсәт ҡыл! Сөйөмбикә генә түгел, чын-чыннан ханбикә булырға туғансың — шәһри Ҡазанны балҡытырлыҡ нурлы шәм ҡылса иде үзеңне Ходайым...

**Сөйөмбикә** *(ҡобараһы осоп).* Абау!..

**Сафагәрәй.** Чәчебез чәчкә бәйләнсен иде, дип телисем, жылыйсым ғына ҡала...

**Сөйөмбикә** *(ҡобараһы осоп).* Абау!..

**Һылыубикә.** Тел һөйәкһеҙ, тиһәләр ҙә, саманан ашып китте түгелме, кейәүкәй?.. Ҡырымдан эйәртеп килтергән ҡатының өҫтөнә нәҫелебеҙҙән, бер түгел, ике кәләш алып, хан кейәүебеҙ булдың, өҫтәүенә урыҫ кенәзенең мәрйәһенә өйләндең... Инде балдыҙыңа күҙең ҡыҙамы? Ялпыға ла, ханға ла бер үк шәриғәт хөкөмө түгелме ни? Үҙеңде Ҡазанға саҡырып килтерткән Ҡолшәриф мулла ни ҡарай?

**Сафагәрәй.** Ҡолшәриф мулланың фатихасын алғанмын.

**Һылыубикә.** *Ләхәүлә,* биш ҡатын алырғамы?

**Сафагәрәй.** Нинди биш булсын, урыс кенәзенең ҡызы вафат бит инде...

**Һарай яғында тамаҡ ҡырған тауыш.**

**Һылыубикә.** Әнә, Йософ мырҙа болдорға сыҡҡан, ҡул болғап саҡыра беҙҙе. *(һарайға ыңғайлайҙар, Сафагәрәй һөйләнеп бара).*

**Сафагәрәй.** Үзебезнең мосолманнан алырға иде ниәт, ханлығымда ғәйбәт тамырын кисергә. *(Инеп китәләр).*

**Сөйөмбикә.** Ҡороғоро... һандуғасымды бүлдерҙе... Ҡазан өрәге... *(Аҡ ҡайынға һөйәлеп, һыу аръяғына ҡарап йырлай).*

Ай-һай ҙа ғына тигән, ай, тауышҡа
Ҡаҙ-үрҙәктәр ҡаса ҡамышҡа.
Йырлау ҙа ғына түгел, ай, иларһың
Эскенәйем тулы һағышҡа.

Йәнсураҡай бәғерем, менгән атың
Ерәнҡашҡа икән ал бирмәҫ.
Һинең кеүек илдең азаматы
Йөрәгемә тынғы, ял бирмәҫ.

**Аръяҡта моңло ҡурай тауышы, артынса йыр яңғырай.**

**Йәнсура.** Тыр-р-р, туҡтале, Ерәнҡашҡа! *(Йырлай).*

Һаҡмар һыуҡайҙары бигерәк һалҡын,
Үрҙәк сумып сығыр йылыу юҡ.
Илкәйемдең һылыу ҡыҙҙары күп,
Сөйөмбикә һымаҡ һылыу юҡ.

**Сөйөмбикә.** Уф йөрәгем, йәнекәйем Йәнсурам!

**Боролманан Йәнсура атлығып сыға.**

**Йәнсура.** Сөйөмбикәм, һылыуым!

**Ҡосаҡлашып үбешәләр. Егет, һөйөклөһөн күтәреп алып, ҡосағында килеш зыр-әйләндереп йөрөй.**

**Йәнсура.** Аллаһ Тәғәлә беҙгә ике тамсы һыуҙай ҡушылырға ҡушҡандыр...

**Сөйөмбикә.** Ҡасан, ҡасан?!

**Йәнсура** *(туҡтап, ҡыҙҙың күҙҙәренә текләп).* Аллаһ бирһә, быйыл көҙгә үк яусы көт!

**Сөйөмбикә.** Уф, йәнекәйем, мин ҡурҡам! Атаҡайымдан ҡурҡам: һыңар балаҡлы яусыҡайыңдың һыңар аяғын ҡыҫҡартмаһа ярар ине. Мине ханға бирергә, ханбикә яһарға яҫҡана...

**Йәнсура.** Хандарҙан да ажарлыраҡ Бикбау кенәздең нәҫеле мин! Үҙемдекен итермен!

**Сөйөмбикә** *(Еңел һулап).* Ауыҙыңа бал да май!

**Йәнсура** *(кулдарында ҡабат әйләндерә башлай).* Ә һин үҙең хәҙер үк әйт миңә, йәнем-йәнекәйем *(үбә-үбә):* ризамы? Ризамы?

**Сөйөмбикә.** Уф! Риза! Риза! *(Көскә ысҡынып, һарайсыҡҡа йүгереп кереп китә).*

## 2-нсе сәхнә

**Һарай эсе, Йософ мырҙаның тәхетханаһы. Йософ мырҙа артҡы стенаға һүрәтләнгән төп милли биҙәгебеҙ Донъя Ҡуласаһы — Асаба-Астаҡ (Свастика) фонындағы семәрле тәхеттә ирәйеп ултыра; йәнәш креслоларҙа уң яғында — ағаһы Исмәғил кенәз, һул яғында ҡатыны Һылыубикә һәм өлкән улы Юныс мырҙа. Һабантуйға килгән сит ил ҡунаҡтарын ҡабул ҡылырҙан алда йәшерен ғаилә кәңәшмәһе — дөйөм хәл, сәйәсәт тураһында фекерләшеү.**

**Йософ** *(Исмәғилгә).* Шулай итеп, ағайым, быйылғы һабантуйы ла килеп етте. Тирә-яҡтан халайыҡтар ағылды, Ҡорокүл буйы каруандар, тирмәләр менән тулды. Әммә, барыһынан да бигерәк, ағайым, оло башыңды кесе итеп,

байрамыбыҙға ҡот һәм мәртәбә өҫтәп, бында үҙең килеүең үтә ҙур шатлыҡ. Шуға күрә лә бөтә яйыҡ буйҙары бер тауыштан һине тәбрикләй, хатта, әнә ишетәһеңме, һары һандуғастарыбыҙға тиклем шанлы исемеңде мәҙехләп йырлай...

**Исмәғил.** Бәрәкалла, бәрәкалла, Йософ мырҙам, ауыҙыңа һары май... Ләкин, үҙең беләһең, бер-беребеҙҙе ҡупайтып ултырыр саҡ түгел. Беҙҙең ише аҫыл ирҙәрҙе, байрамдарҙан да бигерәк, донъя ғәмдәре йөрөтә...

**Йософ.** Эйе, ағай-эне бергәләшеп хәл ҡылырҙай эштәребеҙ ҡуйырҙы. Шуға күрә лә, алдан һөйләшеп килешеү, бер төптән тороу өсөн, ошо кесе мәжлескә — Яҡын туғандарҙың табын түңәрәгенә йыйылдыҡ. Заманалар ауырайҙы...

**Исмәғил.** Башҡорт иленә кенәз булыу — майлы бутҡа ашау йәки һимеҙ ҡалъя һоғоноу түгел шул... һиңә генә еңел ул: мырҙа ғына башың менән, минән дә уҙҙырып, май эсендә йөҙгән бөйөрҙәй йәшәйһең. Әнә бит, тәхетең дә ҡайһындай! Төп тамғабыҙ Асаба-Астаҡты, Донъя Ҡуласаһын, ағайыңдан да һорамай, үҙеңдең арҡа терәгең итеп алғанһың!

**Йософ.** Мырҙа булып күпме ҡалырға мөмкин, ағайым?! Бәләкәй урҙаны бирҙең, рәхмәт, мәгәр кенәз дәрәжәһенә күтәрмәй ҡаңғыртаһың...

**Исмәғил. Ағ**айыңдан алда һоғонорға ашыҡма, ашҡа бешерһең... Илебеҙҙең Бәләкәй урҙаһын төрөк менән ҡырымдан кимертмәй тотһаң, сәйәсәттә фәҡәт мине генә тыңлап эш ҡылһаң, Аллаһ бойорһа, шөһрәтле кенәз дә булырһың.

**Йософ.** Төрөк менән ҡырым икенсе мәсьәлә... Урыҫты, урыҫты ниңә әйтмәйһең? һыңар ҡулын көньяғыбыҙға һоноп, балыҡҡа бай Әстерханыбыҙға яҫҡана. Икенсеһе менән төньяҡлап Эбер-Себер ханлығыбыҙҙы ҡармалай...

**Исмәғил.** Урыҫ, үҙең әйтмешләй, ул өсөнсө мәсьәлә. Урыҫ менән һаҡ эш ҡылырға кәрәк. Урыҫ менән уҫмаҡлашып түгел, ә дуҫлашып йәшәүе файҙалыраҡ.

**Йософ.** Ай-һай... Урыҫ булһа атаң — билеңдә булһын балтаң, тигәнде онотмайыҡ, ағайым. Шул кафыр менән бысаҡҡа-бысаҡ килешеп интеккән ут күршебеҙ Ҡазан татарҙарынан фәһем алайыҡ...

**Исмәғил** *(көлөп).* Фәһем, фәһем... Ғибрәт, тип әйтергә кәрәк!

**Һылыубикә.** Эйе шул. Татар барҙа — хәтәр бар. Татар ултырып киткән ерҙе ҡырҡ ҡабат ҡырсып ултыр, тигәнде лә онотмайыҡ, атаһы.

**Исмәғил.** Үҙҙәре йәнәһе, төрки донъяһын кафырлыҡтан ҡурсалап, урыҫҡа бармаҡ янайҙар, ә үҙҙәре иһә шул уҡ урыҫ файҙаһына бер-береһенең боғаҙын сәйнәшеп, ханлыҡты тарҡаталар, хатта хандарын да урыҫҡа һаталар, аяҡ-ҡулдарын бәйләп... Ярҙамға ғәскәр ебәрһәк, күрәләтә урыҫтан ҡырҙырталар... Юҡ! Татар туғанға ҡарағанда урыҫ ызнаком яҡынраҡ.

**Йософ.** Ә шулай ҙа ҡайһы яҡҡа ауышабыҙ, ағайым? Урыҫ тигәнеңдең киләсшәһе тын алырға бирмәй бит: Иҙел буйҙарынан да, Иртыш яҡтарынан да ҡыҫыпмы-ҡыҫа...

**Исмәғил.** Ауышмайбыҙ. Үҙең әйтмешләй, бер төптән торһаҡ, ҡыҫымға бирешмәбеҙ.

**Юныс.** Олатай, киҫәтергә рөхсәт ит. Төркиә, Ҡырым һәм Ҡазандан ғәйре арҡа таянысыбыҙ юҡ. Ағай-эне талашыр, атҡа менһә ярашыр, тигән боронғолар.

**Һылыубикә.** Эйе шул, үҙебеҙҙең төрки туғандарыбыҙ. Етмәһә, өсөһөнөң дә хан-солтандары бауына башҡорт ҡаны ҡатышҡан. Ете ят урыҫ-литау йәки ҡытай-манжур түгел бит. Ҡанҡәрҙәштәребеҙ.

**Исмәғил.** Һе! Дәүләтебеҙ мәнфәғәттәрен яҡлағанда ҡанҡәрҙәшлек артҡа сигеп тора ул... Тарихты онотмайыҡ: үҙебеҙҙең Йеҙекәй бабабыҙ һәм Туҡтамыш бабабыҙ ни өсөн бер-береһенең башына еткән, тиһегеҙ? Ҡазан ханы Илһам бабабыҙҙы бөтә ғаиләһе менән ни өсөн Ҡазан бәктәре һәм олоғтары үҙҙәре үк, арбаға бәйләп һалып, Мәскәүгә һатып ебәргән? Мәскәү кенәзе Василий ни өсөн үҙебеҙҙең күҙ алдында үҙенең ҡан дошманы Ҡырым ханы Миңлегәрәй менән бит үбешеп туғанлашты?.. һәм башҡалар, һәм башҡалар. Әлхасил, ҡәҙерле туғандарым, иң элек беҙгә илебеҙҙең яҙмышын ҡурсалау фарыз.

**Йософ, Һылыубикә, Юныс** *(бер тауыштан):* — Бәрәкалла, бәрәкалла!

**Йософ.** Мин ни тим һуң? Бәйге майҙанына барырҙан элек, үтә мөһим мәсьәләләрҙе ҡап-уртаға һалып, уртаҡ фекергә киләйек, сисеү юлдарын билдәләйек, тинем дәһә. Минеңсә...

**Исмәғил. Иң** мөһимен генә тир.

**Йософ.** Әлеге лә баяғы, уныһы үҙеңә мәғлүм: Ҡазан — Мәскәү мәсьәләһе. Дөйөм төрки донъяһының яҙмышы ҡыл осонда.

**Исмәғил.** Кем арҡаһында, тиһең?

**Йософ.** Ҡитғаны хөсөт баҫты. Әлеге лә баяғы, яуызлыҡ Мәскәүҙән дөрә.

**Исмәғил.** Һеммм... Мәскәүҙән, тиһең инде?.. Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән, ти торғайны мөхтәбәр атайыбыҙ. Ҡарап-ҡарап торам да тағы ла бер ҡарап ҡуям: бәҫле бүркең аҫтында ел уйнамаймы икән, мырҙам? Ул яуызлыҡ тигәнең, бәлки, Ҡазандың үҙендәлер?

**Йософ.** Ызнакомың мәскәүский Василий кенәз тынғы бирмәй Ҡазанға, йыл аралаш, тигәндәй, килеп баҫа. Хаҡ мосолман туғандарыбыҙҙы рәхимһеҙ ҡыра, ауылдарының көлөн күккә осора.

**Исмәғил.** Әнә шул хаҡ мосолмандарың үҙҙәре үк кафырҙың Муром, Тверь, Нижний ҡалаларын барып талауҙы, яндырыуҙы, кешеләрен ҡырыуҙы, ҡатындарын, бала-сағаларын, ҡол ҡылып, Ҡырымға, ғосманлы Төркиәгә олаҡтырыуҙы кәсеп иткәндәр түгелме? Йоҡлап ятҡан айыуҙың өңөнә һөңгө тыҡһаң, ике күҙен ҡан баҫып, ажғырып ырғылмаҫ та ботарлап ташламаҫ, тимә.

**Йософ.** Йоҡлатырһың кафырҙы! Айыуҙан ҡурҡып ятһаҡ, Ҡазан менән Ҡырымды ла ҡабып йотор, Төркиәне лә емтекләр, беҙгә лә сират етер...

**Исмәғил.** Әнә шул сират етмәһен өсөн дә бик ныҡ уйлап эш итмәк кәрәк безгә.

**Йософ.** Без башты баҫып уйлайбыҙ, ә урыҫ баш ҡалҡыта. Әле тағы Ҡазанды ҡазалаған, кейәүебеҙ Сафагәрәй ханды тәхетенән ҡолатҡан. *(Ишек ягына ымлап, уска ус һугып).* Кем унда, керһен Сафагәрәй хан.

**Сафагәрәй керә, тәхет алдында тубыкланып баш ора.**

**Сафагәрәй.**Мәрхәмәтегездән мәхрүм ҡылмағыз, бер үк, и бөйөк ҡайнағаларым! Тәхетемне кире ҡайтарып алырға ғәскәр бирегез. Мөхтәбәр Йософ ҡайнағам! Әгәр дә ки тәхетемә кире-ҡабат ултырсам, хәлбуки үзеңне ханлығымның алтын тотҡасы ясармын. Былбылдай баллы авазлы, ҡояштай нурлы йөзлө, талчыбыҡтай нечкә билле Башҡортостан сылыуын — назлы ҡызың Сөйөмбикәне йәш ханбикә итеп алырмын, өлкән улың Юныс мырзаны Ҡазан бәге ҡылырмын!

**Юныс** *(ыргып тороп).* Бирәйек һылыуымды, бирәйек! Ғәскәр башында үҙем ҡарғып барырмын, шанлы олатайым Сура батырҙай, Ҡазанды ла алырмын!

**Һылыубикә.** Балаҡайым, атайыңдан алда атлығып сыҡма. Ололар һүҙен тыңла.

**Юныс.** Ғәфү итегеҙ *(ултыра).*

**Исмәғил.** Эй бала-бала, йәшең баш икән шул әле... Ә һин, Сафагәрәй кейәү, «ҡайнағаларым» тип өҙәләнгән булаһың да ул, тик ғәмәлдә нисә ҡатының барлығын, уларҙың тәғәйен кем ҡыҙҙары икәнен оноттоң, буғай...

**Сафагәрәй.** Онотмадым! Өчөсө дә синең яҡын ҡәрдәшләрең. *(Бармаҡтарын бөкләп).* Беренчесе — Мамай-Нор-Ҡасим ҡызы. Икенчесе — Ямғырчыныҡы. Өчөнчөсө... өчөнчөсө дә синең Ҡырымдағы чыбыҡ очо ҡан-ҡәрдәшең...

**Исмәғил.** Ә дүртенсеһе?

**Сафагәрәй.** Дүртенчест еҡ инде... Әйттем ләсә, Ҡазанда вафат булды.

**Юныс** *(сәпәкәйләп).* Ур-ра! Тимәк, шәриғәт ҡуша — Сөйөмбикә һылыуымды ханбикә ҡылайыҡ, мин Ҡазан бәге булайым!

**Йософ.** Сеү! Маңҡатанау! Йеҙекәй бабаң нигеҙләгән Аҡтүбәнең мырҙаһы булыу аҙмы һиңә? *(Сафагәрәйгә).* Тор, кейәү-бала, теҙҙәрең уйылмаһын. Ә шулай ҙа ҡыҙым тәтемәҫ һиңә. Һин былай ҙа икеләтә-өсләтә ҡолобоҙ... тфү! — кейәүебеҙ бит инде. Муйыныңдағы ҡыл муйынсаҡ серегәнсе хеҙмәт итерһең. Ә былбылыбыҙ Сөйөмбикә һинән башҡа ла ханбикә буласаҡ, уның ҡунып һайрар талы бейегерәк!

**Сафагәрәй.** Ғәскәр, ғәскәр бирегез, алайса! Әжерен мең мәртәбә ҡайтарырмын!

**Исмәғил.** Былтырғылай итепме? Шул 1530 йылдың 15 июнен әйтәм. Һин кейәү-баланы яуыз урыҫ ҡылысынан һаҡлашырға ебәргән утыҙ мең яугиремде нишләттең?! Ҡазан ғәскәрен ҡәлғәң эсенә ышыҡлап, башҡортто̌кон ҡала тышына ҡуйҙың — урыҫ уҫмағы аҫтына. Үҙең ҡәлғә башынан тамаша ҡылдың, ғәскәреңде ярҙамға сығарманың. Әллә белмәйҙәр тиһеңме?..

**Сафагәрәй.** Ҡазан олуғлары мине тишек кәмәгә ултыртты...

**Исмәғил.** Кәмәнең тишеген әлек ямайҙар уны! Урыҫтар ҡайтып киткәс, Ар яланын ябып ятҡан шәһиттәребеҙҙе нишләттең? Өҫ кейемдәрен һалдыртып алып, мәйеттәрен, ерләмәйенсә, бүреләрҙән кимерттең. Шәп ҡайтарҙың әжерен! *(Ҡукыш күрһәтеп).* Бына һиңә ғәскәр! Дар ағасы янай һиңә!

**Сафагәрәй.** Ә?! Бу ни бу?!

**Йософ.** Бар, башыңды юймаҫ элек, табаныңды ялтырат!

**Юныс.** Атай, еҙнәйемә теймәгеҙ! *(Сафагәрәйҙе терәкләп алып сыгып китә).*

**Сафагәрәй** *(барышлайы әйләнеп ҡарап).* Ә шулай да мин Ҡазанның сағызаҡ оясын туздырачаҡмын! Тәхетне алачаҡмын!

**Рәхәтләнеп көләләр.**

**Йософ.** Кем унда, сәркәтип килеп етһен!

**Ҡағыҙ-ҡәләмен йәтешләп, сәркәтип кереп ултыра.**

**Йософ.** Ҡазан илсеһе Бойорған Сәйет менән Мәскәү илсеһе Кадыш Кудинов инһен.

**Инәләр. Сәләм бирешеү һәм алышыу. Бойорған Сәйеттең һыңар балағы ситек ҡунысынан сығарып төшөрөлгән.**

**Исмәғил.** Бәй, Бойорған Сәйетме, тиһәм *(тегенең балағына төртөп күрһәтә),* һыңар аяҡ һайыҫҡан икәнһең дә.

**Бойорған Сәйет.** Сездә асыл мал бар икән дип ишетеп, бөйөк Ҡазан ханлығыннан шул асыл малны алырға яучы булып килдем сезгә.

**Исмәғил.** Яусы?.. Мәскәү менән яулашыуығыҙ етмәгән...

**Бойорған Сәйет.** Фсү! Кәнис! — урыс дусларың әйтмешли. Мәскәү берлән араны яҡшыртабыз. Синең Ҡазандағы вәкилең Чура берлән берләшеп, үзебезнең Мәскәү яҡлылар фирҡәсен уҡмаштырдыҡ, Истанбул һәм Ҡырым яҡлылар фирҡәсен пыр-туздырып ташладыҡ. Төрөк илә ҡырымлы йыраҡ торсон, инде урыс берлән башҡырт дус безгә.

**Исмәғил.** Тел һөйәкһеҙ, тигәндәй, матур һайрайһығыҙ ҙа ул...

**Бойорған Сәйет.** Ай Алла, кенәз, ышанмасаң, мона Кадыш Кудинов үзе дөрөсләр. Сафагәрәй ханны күсәкләп ҡудыҡ, бөйөк кенәз Василий Ивановичның үзеннән хан сорадыҡ...

**Кадыш Кудинов.** Дөрөҫ, дөрөҫ.

**Исмәғил.** Әммә Ҡазанығыҙҙың кем утынан ҡыҙғанын белеү ҡыйын. Бөгөн — Мәскәү утыны, ә иртәгә — Ыстамбулдыҡы... Ҡолшәриф муллағыҙ ни эшләй, кем утына ҡыҙына?

**Бойорған Сәйет.** Әйтәм ич, бүген безнең учағыбыз ҡызыуыраҡ, бүген безнең жылыға жылына ул. Әммә саҡ булу кирәк. Синең вәкилең Чура батыр әйтмешли, Ҡолшәриф ул нәҡ ике йөзлө хәнжәр...

**Кадыш Кудинов.** Так точно.

**Йософ** *(Бойорған Сәйеткә)*. Ғәфү ит, ярты һүҙҙән бүлдерҙек. Һыңар балағың серенең асылы нимәлә?

**Бойорған Сәйет.** Әйттем ич, синдәге бер асыл малны алырға яучылим, дип.

**Йософ.** Аҫыл малдар күп ул беҙҙә, исеме кем?

**Бойорған Сәйет.** Сөйөмбикәңне соройбоз, шәһри Ҡазан тәхетенә килен итеп төшөрмәккә. Жигетебез зерә дә шәп: Мәскәү үзе килтереп ҡуймыш Жанғәли хан димәкдә. Мона Мәскәү илчесе Кадыш Кудинов үзе дөрөсләр.

**Кадыш Кудинов.** Эйе, Жангали хан бөйөк кенәз Василийҙың ярлығын алып Ҡазанға килеп етте, тәхетенә ултырҙы. Сөйөмбикә ҡыҙығыҙҙы ҡатынлыҡҡа һорауы, шул турала бөйөк кенәз Василийҙан фатиха алыуы ла хаҡ.

**Бойорған Сәйет. Жанғәли** ханның үзеннән дә сезләргә айырым сәләм: Сөйөмбикә туташны ханбикә ясасаҡ, Нуғай иленә айырым иғтибар бирелер, ә шөһрәтлт еныс мырзаны Ҡазан бәге ҡылырбыз, диде ул. Бунысы да Мәскәү белән килешелгән. Мона Кадыш Кудинов дөрөсләсен.

**Кадыш Кудинов.** Дөрөҫләйем, тап шулай.

**Исмәғил.** Тимәк, каруан юлдарыбыҙҙа Мәскәү менән арабыҙға шына булып кереүсе, сауҙабыҙға зыян килтереүсе Ҡазан хөсөтө бөтәсәк?

**Бойорған Сәйет.** Бөтәчәк, бөтәчәк. Синең бездәге вәкилең Чура батыр үзенең кешеләре берлән Ҡазан — Мәскәү юлына саҡка басачаҡ. Малларығызны турадан-тура Ҡазан аша да озата алачаҡсығыз Мәскәүгә.

**Исмәғил.** Уныһына инанып уҡ етмәйем, беләм мин һеҙҙе. *(Кадыш Кудиновҡа).* Үҙегеҙгә мәғлүм: урыҫ иленән хәбәрдар булып торабыҙ, хәлдәрегеҙҙе беләбеҙ. Һуңғы ваҡытта *Ливон* һуғышы арҡаһында урыҫ атлы армияһының менге аттарына ҡытлыҡ кисереүе мәғлүм. Шул уҡ ваҡытта бер нисә йөҙ мең баш йылҡыбыҙҙы баҙарға сығарыу мөмкинлегебеҙ бар. *Ләкин* һеҙҙең тарафтарға

юлдарҙы бер яҡтан — Ҡазан, икенсе яҡтан Тын йылғаһы буйы юлбаҫарҙары бүлә. Бигерәк тә Тын йылғаһының Мәскәү яғынан килеп етеп ҡырт боролошонда. Беҙ шул бөгәлдә каруандарыбыҙҙы ҡурсаларға азаматтарыбыҙҙы ҡаңғыртабыҙ, ауыр матди сығымдар күтәрәбеҙ. Унда хатта Боролош тигән ҡалғабеҙҙе лә ҡорҙоҡ...

**Кадыш Кудинов.** Беләм-бәләм: Воронеж тип йөрөтәбеҙ беҙ уны, ул Боролош-ҡалғагеҙҙе, эйе. Ҡыуаныслы , яңылыҡ хәбәр ҡылайым: бөйөк кенәзебеҙ Василий унда, һеҙҙәрҙең именлеге хаҡына, шул Воронеж ҡалғаһен нығытырға, ғәскәр ҡуйырға бойорҙо...

**Исмәғил.** Бәрәкалла, ауыҙыңа бал да май!

**Кадыш Кудинов.** Тик, бөйөк Исмәғил кенәз, бөйөк кенәз Василийҙың да бер теләген иҫәпкә алһаң ине. Урыҫ иле инде ныҡ ҡеүәтләнде, көнбайышҡа һуҙған ҡулы Ливонияның боғаҙынан матҡып алды. Әммә көнсығыштағы ҡулыбыҙҙы Урал тауҙары кәртәләй...

**Исмәғил.** Урал беҙҙең Аллаһ Тәғәлә үҙе беркеткән аҫаба төйәгебеҙ.

**Кадыш Кудинов.** Беләм-беләм! Беҙ һеҙҙәрҙе, үҙебеҙгә ғүмер-баҡый дуҫ илде, сикһеҙ хөрмәт итәбеҙ. Ерегеҙҙең бер ҡарышына ла кермәй, төньяҡтан урап үтәбеҙ...

**Исмәғил.** Беҙгә итәғәтлек ҡылған, яһаҡ түләгән югра ҡәүеменә баҫып керҙегеҙ, Ҡама йылғаһы буйындағы тоҙға хужа булдығыҙ...

**Кадыш Кудинов.** Ул тоҙҙан, теләһәгеҙ, һеҙҙәргә лә өлөш сығасаҡ. Затлы тауарҙарығыҙҙы тейәп, алыш-биреш ҡылырға Соликамск баҙарына килегеҙ.

**Исмәғил.** Тоҙоғоҙ беҙгә кәрәкмәҫ, үҙебеҙҙең Тоҙтүбә тауының таштоҙо баштан ашҡан. Ашығыҙға тоҙ етмәһә, беҙҙән килеп алығыҙ. Әммә әйтәһе һүҙем шул: беҙҙең менән дуҫ йәшәргә теләһәгеҙ, нәфсегеҙҙе аҙҙырмағыҙ, беҙҙең Иртыш буйҙарына — аҫаба Эбер-Себер ханлығыбыҙға ҡул һуҙмағыҙ. Дуҫлыҡ ике яҡтан да булырға тейеш. Көн-Өфө — Мәскәү ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәһәк, бергә сәскә атырбыҙ. Бөйөк Василий кенәзгә еткерегеҙ шуны.

**Кадыш Кудинов.** Баш өҫтө, мотлаҡан еткерермен.

**Исмәғил.** Юғиһә, беләһегеҙҙер, көнсығыштан беҙгә Ҡытай дәүләте ҡул бирмәксе, манжур-жунғар кәртәләрен емереп. Беҙҙең тауҙарҙағы тимер, баҡыр, алтын-көмөш мәғдәндәренә, ер егенән урғылып ятмалы ер майҙарына күҙҙәре ҡыҙыша... Үҙҙәре яғынан ебәк, ҡорал, дары, сынаяҡ, сәй вәғәҙә ҡылалар. Һеҙҙең менән эш бешмәһә, шул яҡҡа йөҙ бороуыбыҙ бик ихтимал...

**Һылыубикә.** Эйе-эйе, беҙгә бөйөк Сина иленең шау ебәк еләне лә, сәй-шәкәре лә танһыҡ.

**Йософ.** Хаҡ һүҙ.

**Кадыш Кудинов.** Юҡ, ярамаҫ улай. Урыҫ менән башҡорт дуҫлығы ике яҡ өсөн дә файҙалы. Аралар ҙа алыҫ түгел, үҙҙәрегеҙ әйтмешләй, ҡул бирешеп йәшәйек.

**Исмәғил** *(уйланып).* Тағы ла бер "әтнәкә". Олуғ кенәз Василий Иванович беҙҙең Мәскәүҙәге илсебеҙгә ҡазанлыларҙың уға баш ороу ярлығының күсермәһен биреп ҡайтарған... Үҙенән дә өҫтәкләп: «Ниңә башҡорт Исмәғил кенәз татарҙарҙан өлгө алмай, үҙенең һәм иленең яҙмышын беҙҙең ышаныслы ҡулға тапшырмай?» — тигән.

**Кадыш Кудинов.** Әлләсе...

**Исмәғил** *(сәркәтипкә).* Уҡы!

**Йософ.** Тейешле миҡдарын ғына. Дилбегәне ҡыҫҡа тот.

**Сәркәтип.** Бына Ҡазан ярлығынан *(уҡый).* «Олуғ кенәз Василийның бойороғо буйынча, Сафагәрәй ханны Ҡазаннан ҡауладыҡ. Падишаһ безне бағышларға, Ҡазан йортон саҡларға, хан итеп Ҡазанға Шәйехғәлине Жибәрергә була. Без Шәйехғәлидән ҡурҡабыз. Падишаһ Ҡазанға хан итеп Шәйехәүлиәр солтанның уғылы Жанғәлине бирсә иде»...

**Исмәғил.** Етәр! *(Кадыш Кудиновҡа ҡарап).* Беҙ Ҡазан татарҙары түгел! Һәм аҫаба башыбыҙ менән бер кемгә лә бойондороҡло ла, бурыслы ла була алмайбыҙ, хан һорап та бармайбыҙ — үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа был ерҙә! Аллаһ Тәғәлә беҙҙәрҙе ошонда һәм ошолай яралтҡан, уны боҙорға бер кемдең дә хаҡы юҡ. Ошо изге хоҡуҡты беҙ ҡулыбыҙға ҡорал тотоп ҡурсаларға әҙербеҙ. Тоғро юлыбыҙҙа беҙҙе Аллаһ Тәғәлә үҙенең рәхмәтенән ташламаҫ, амин *(дога ҡыла).*

**Кадыш Кудиновтан башҡалар.** Амин! *(Дога ҡылалар).*

**Исмәғил.** Әммә беҙ, башҡорттар, шул уҡ ваҡытта Мәскәү менән, урыҫ туғандар менән мәңгелек дуҫлыҡҡа ант итешергә, ике яҡ өсөн дә файҙалы алыш-биреш, сауҙа ҡылырға теләйбеҙ. *(Мәскәү илсеһенә йөҙ бороп).* Беҙҙең ожмахҡа тиң аҫыл Башҡортостан тупрағында, баяғы ер аҫты мәғдәндәренән тыш, күҙҙең яуын алырҙай йылтыр өйөр-өйөр йылҡылар, көтөү-көтөү һыйырҙар һәм ҡуй-һарыҡтар, һыуҙарыбыҙҙа дөйәләй дулаған, ҡуйҙай һулаған балыҡтар, урмандарыбыҙҙа алтындай ялҡ-йолҡ иткән йомшаҡ тиреле кейектәр, йәйғор ҡауырыйлы ҡош-ҡорттар мыжғып тора. Ҡурҡыу белмәҫ бөркөт йөрәкле яугирҙәребеҙ ат өҫтөндә ҡылыс һелтәп елергә, уҡ атырға, сөймән сөйөргә маһир. Беҙ бер ваҡытта ла, бер кемдән дә үҙебеҙгә кенәз йәки хан һорап бармаясаҡбыҙ, үҙ илебеҙҙә үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрәсәкбеҙ.

**Кадыш Кудинов.** Бөйөк кенәз Василий һеҙҙәрҙе аңлар, һеҙҙәр ҙә беҙҙәрҙе яҡшы төшөнөрһөгөҙ. Бөйөк батшабыҙҙың Ҡазан сәйәсәте ҡазанлылар өсөн генә.

**Исмәғил.** Амин, был йәһәттән үҙем дә уның яҡлы.

**Бойорған Сәйет.** Әй әттәгенәсе! *(Устарын ыуып, төшөргән балағына күрһәтеп).* Димәк, димәк?..

**Исмәғил.** Тимәк, башҡорт иле урыҫ иленең Ҡазанға ҡуйған ханы яҡлы.

**Бойорған Сәйет** *(Йософҡа).* Жыйыйыммы, алайса, балағымны? Ни диб ҡайтып әйтәйем?

**Йософ.** Мәскәү ҡуштаны Йәнғәлиҙе мин дә хөрмәт итәмен. Хандың ҡайнатаһы булыу миңә бик оло шатлыҡ, әммә кейәү муйынына ла — ҡыл муйынсаҡ, тип еткер.

**Юныс.** Мине Ҡазан бәге яһайым тигәнен онотмаһын!

**Бойорған Сәйет.** Ярый, ир муйынында ҡыл муйынчаҡ черемәс. Сабантуйығызны ғына ҡарим да шатлыҡлы хәбәр берлән очам Ҡазанға!

**Йософ.** Хуш иттек.

**Бойорған Сәйет, Кадыш Кудинов.** Хуш *(сығып китәләр).*

**Ишек яғынан тауыш: «ғосманлы Төркиә илсеһе Вәкил әфәнде килеп етте!»**

**Йософ.** Индерегеҙ.

**Илсе инә, ҡулдарын күкрәгенә ҡаушарып, итәғәтле баш эйеп сәләм бирә.**

**Вәкил.** Солтанларның солтаны бөйөк Сөләймән ғалижанапларыннан чуҡдин-чуҡ сәләм сезләргә, ҡан-ҡәрдәшләремез шимал төрөкләренә! Күркәм сабан туйығыз ҡотло булсын! Бер уңайдан бөйөк кенәз Исмәғил ғалижанапларын да очратыуыма бик шатмын.

**Исмәғил** *(көлөмһөрәп).* Вәкил әфәнде аҙыраҡ ҡына , яңылыша, зыян юҡ. Беҙ, шималда йәшәһәк тә, тап һеҙҙеңсә һөйләшә торған төрөк түгелбеҙ, башҡорт булып ҡалғанбыҙ.

**Вәкил.** Биниһая хөрмәтле Йософ мырзаға бөйөк Сөләймән солтаныбызның хитапнамәсен кичә үк күндергән идем. Исмәғил кенәз, Сөләймән солтанның сезләргә дә айырым мәктүбе бар иде. Форсаттан файдаланып, итәғәтле ҡолағығызға шуны укып ирештерсәм ни булыр? Рөхсәтме?

**Исмәғил.** Рәхим ит, ирештер.

**Вәкил** *(уҡый).* «Эй ҡеүәтле, күп санлы нуғайлар! Минең сүземне тыңлап, Ҡазанға ут күршеләр булараҡ, ҡазанлылар белән бер йөрәктән ҡушылсағыз иде! Мәскәүнең падишасы һәм бөйөк кенәзенә ҡаршы Ҡазан өчөн, һәм бигерәк тә үзебезнең боронғо һәм бөйөк динебез өчөн Жаныгызны аями суғышығыз!

Үзегезне рәнжетелүгә дучар ҡылмағыз, ҡүәтле ҡарышығыз! Сезнең хаҡта даими ишетеп торам: динебезгә усал һөүүм ҡылыуына, аны юк итергә ясҡануына ҡаршы көрәшергә телисез икән. һәм мона ни хаҡында бик ныҡ хәүефләнәм һәм ҡурҡам: үз-ара килешми йәшәсәгез, Ҡазанға килгән бәлә сезгә дә килер, юҡҡа чығарсыз һәм урдағыз тарҡалыр». Мәктүб тәмам.

**Юныс** *(ҡул сәпәкәйләп).* Бына бит, бына! Бөйөк төрөк солтаны беҙҙе ҡайғырта!

**Һылыубикә** *(улын кире урынына ултыртып).* Ололар барҙа телеңде тый, балаҡайым.

**Йософ** *(Исмәғилгә).* Беҙ ҙә төрөк солтанына йылы мәктүб яҙып ебәрәйек, ағайым.

**Исмәғил** *(сәркәтипкә бармағы менән ымлап).* Яҙ! *(Әйтеп яҙҙырта).* «Һин, бөйөк бадиша-солтан, беҙҙе түгел, ә үҙеңде ҡайғыртаһың. Һин беҙгә батша ла түгел, етмәһә, сөнки беҙҙең ерҙә һис ни ҡормайһың, беҙҙең менән идара ҡылмайһың һәм беҙҙән бик алыҫта — диңгеҙ аръяғында йәшәйһең; байһың, көслөһөң, мөлкәттәрең башыңдан ашҡан — һис нәмәгә мохтажлыҡ кисермәйһең; ә беҙ иһә фәҡирбеҙ, барлы-юҡлы торабыҙ. Әгәр кәрәк-яраҡтар менән еребеҙҙе Мәскәү батшаһы тәьмин итмәһә, бер көн дә йәшәй алмаҫ инек. һәм уның шул игелеге өсөн беҙ хәйләкәр һәм алдаҡсы ҡазандарға ҡаршы уның көрәшендә уға ярҙамға килергә тейешбеҙ. Гәрсә улар, ҡазандар, менән телебеҙ ҙә, динебеҙ ҙә бер булһа ла, хәҡиҡәт яғында беҙ...»

**Йософ, Һылыубикә, Юныс** *(бер ауаздан).* Эйе, уныһы шулай!

**Исмәғил** *(яҙҙыртыуын дауамлап).* "Беҙгә мәскәүҙәрҙең ҡазандарға ҡаршы барыуына ғына түгел, ә бәлки һинең үҙеңә йәғни батшаларҙың батшаһына ҡаршы барыуына ла ярҙамлашыу хәйерле...»

**Вәкил.** Ай-вай-вай... бу нә сүзең, бөйөк кенәз Исмәғил?!

**Исмәғил.** Илемдең, башҡорт иленең һүҙе был. *(Сәркәтипкә).* Яҙ! Эйе, «...хәйерле, юғиһә беҙгә ҡаршы ла ҡубынырһың. Әллә һин ишетмәнеңме ни ҡазандарҙың мәскәүҙәргә даими ҡайһындай яуызлыҡ ҡылыуҙарын, улар еренә өҙлөкһөҙ ябырылыуҙарын һәм урыҫ кешеләрен һәләк итеүҙәрен? һәм урыҫтар менән ике-ара шартнамәләрен өҙлөкһөҙ боҙоуҙарын, тыныслыҡҡа хыянат ҡылыуҙарын? Ә етмәһә, беҙҙәргә тумбытаһың: урыҫ яғынан ҡазандарға ни булһа, һеҙгә лә буласаҡ, тип. Ә һеҙ нуғай тип атаған башҡорттарҙың иһә һүҙе ошолай: уға (урыҫ батшаһына) буйһоноу һәм хеҙмәт итеү беҙгә һис оят түгел — бөтә байлығы, ҡеүәте менән ул да һинең кеүек үк. Беҙҙең китаптарыбыҙҙа ла, христиандарҙыҡында ла яҙылған бит: ахыры заманда бөтә телдәр ҙә уҡмаша, бөтәһе лә бер диндә һәм бер үк дәүләт ҡулы аҫтында була...»

**Вәкил.** Ай-вай-ау...

**Йософ.** **А**ғайым!..

**Һылыубикә, Юныс** *(бер ауаздан).* Тәүбә-тәүбә!..

**Исмәғил** *(күҙҙәрен уҫал ялтыратып).* Яҙ! Ҡойроғо аҫтына утлы тимер ҡыҫылһын Сөләймәндең: «Уға китһә, урыҫтың христиан дине кеүек тағы ниндәй изге дин бар? Беҙҙең ҡараңғы диндәребеҙҙең бөтәһенән дә яҡшыраҡ, яҡтынан-яҡты ҡояштай нур сәсә ул». Бөттө.

**Вәкил** *(ярһып).* Аллаһы әкбәр! Иманлы Ҡазанның баш имамы Ҡолшәриф хәзрәт дөрөс әйтә: «Ун башҡыртҡа — бер иман»! Әлегәчә ислам нурын танымый суҡыр йәшисез, мәжүсилек ҡараңғылығында ҡаңғырасыз икән лә!..

**Исмәғил.** Миңә тимәгәйе, эт буғы тип атағыҙ, әммә иманыбыҙға ҡағылмағыҙ. *(Мәктүбте биреп).* Һинең бурыс, Вәкил әфәнде, аманатты эйәһенә еткереү.

**Вәкил.** **Ж**иткерермен, түкми-чәчми житкерермен! *(Сығырға ыңғайлай).*

**Йософ** *(урынынан тороп).* Хөрмәтле Вәкил әфәнде, дөрөҫ аңлай күр беҙҙе. Сәйәсәте — сәйәсәт, әммә һабантуй ҡунаҡтарының иң аҫылы булырһың. Бергә-бергә күңел асыуҙан мәхрүм итмәгеҙ беҙҙе.

**Вәкил** *(барышлайы әйләнеп, ҡулын күкрәгенә ҡуйып).* Зур рәхмәт, Йософ мырза. Сабантуйығызда мотлаҡ буламын. Бөйөк Сөләймән солтаныбызның бер кемгә дә майдан бирмәс, бил бирмәс төрөк батырын алып килдем бәйгегезгә. Бер ултыруда бер сарыҡны ашап бөтөрә, бер чиләк шурпа эчә. Шуңа лайыҡлы батырларығыз булса, көч сынашып ҡарасыннар! *(Сығып китә).*

**Шаңҡыбыраҡ ҡалалар**

**Исмәғил.** *Әл-ләл-ләәә!..* Кемде ҡаршы ҡуябыҙ?

**Йософ** *(ҡаушап, башын тырнап).* Әлләсе...

**Юныс** *(ырғып тороп).* Йәнсура батырҙы, әлбиттә!

**Исмәғилдән башҡаһы, бөтәһе бер тауыштан.** Йәнсура батырҙы! Йәнсура батырҙы!

**Исмәғил.** Хуп! Бәйгеләрҙе бөткәнсе ҡарарға форсатым юҡ. Ике батырҙың алышынан башлағыҙ. Еңеүсегә затлы бүләк — үҙемдән!

**Йософ.** Иншалла, шулай булһын, ағайым.

## 3-өнсө сәхнә

**Бәйге ҡырының тамашасылар түрендә ултырған түрәләр ике батырҙың көрәшен ҡарай: Йософ, Исмәғил, Һылыубикә, Юныс,**

**Бойорған Сәйет, Кадыш Кудинов һәм Вәкил. Көрәш үҙе күренмәй, ләкин майҙан халҡының гөжләүе уның зерә көсөргәнешле, киҫкен барышы хаҡында һөйләй. Бер яҡтан — Йәнсура батырҙы, икенсе яҡтан төрөк батырын рухландырып һөрәнләүҙәр, һыҙғырыуҙар ҡолаҡты яра. Шул ыңғайҙан түрҙәгеләр ҙә үрәпсеп, янып-көйөп ултыра.**

**Юныс.** Йәнсура батыр, бирешмә!

**Вәкил.** Батырым, төрөклөгөңнө күрсәт! Нуғайны селкеп сал!

**Йософ.** Йәнсура, билен ысҡындырма!

**Вәкил.** Жаным, изге Ай башлы сөлгөңнө ныҡ бөрөп тот!

**Һылыубикә.** Уф, төрөк батыры тәнен майлап сыҡҡан бит!

**Юныс.** Шамбы һымаҡ шып-шыма!

**Исмәғил.** Төрөк шамбы булһа ла, башҡорттоң үҙлекле киндерҙән һуҡҡан Асаба-Астаҡ башлы таҫтымал-йәтмәһе ҡаты! Йәнсура, кәрәген бир мөртәттең!

**Вәкил.** Бәһлеүәнем, нуғай-истәкне ҡапландырт!

**Майҙанда көсөргәнешле алыш тауышы.**

**Түрҙәгеләр.** Уй-уй!..

**Бөтәһе тороп баҫа, көрәш майҙанында ҡайһылыр батыр гөрһөлдәп ауа.**

**Вәкил.** Ай-вай-ау... Нуғай аҡтығы бәһлеүәнемнең билен сындырды! *(Йөҙөн ҡаплап сүгәләй).*

**Юныс.** Ур-ра! Йәшә Йәнсура батыр! Апкил төрөк һөлгөһөн!

**Йософ** *(күҙ йәштәрен еңе менән һөртөп).* Йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне, иншалла. Атаһы Түлебай артынса уҡ Үҫәргәндең бейе булырға лайыҡ.

**Исмәғил.** Саҡырығыҙ батырҙы, арҡаһынан ҡағайым!

**Иптәш егеттәре менән Йәнсура батыр инә. Бер ҡулында — ике башында ла ярым Ай, Ай уртаһында йондоҙ биҙәкле төрөк батырының һөлгөһө; икенсе ҡулында ике башы Асаба-Астаҡ (Свастика) биҙәкле башҡорт таҫтымалы.**

**Йәнсура** *(итәғәтле баш эйеп).* Бөйөк кенәз, бына еңелеүсе төрөк һөлгөһө! *(Исмәғилдең аяҡ аҫтына ташлай, Исмәғил уны тапай).*

**Исмәғил.** Һәй афарин!

**Йософ.** Мең йәшә!

**Йәнсура.** Ә быныһы үҙебеҙҙең шанлы еңеү таҫтымалы! *(Башҡорт таҫтымалын, биҙәкле баштарын алға һәлендертеп, Исмәғилдең муйынына һала. Майҙан «гөж!» килә, халыҡ тантана итә).*

**Исмәғил.** Рәхмәт, батырым. Башҡорт батшалар шәжәрәһенең ысын алтын ҡулсаһы, Бикбау кенәздең аҫыл вариҫы икәнлегеңде күрһәттең. Һиндәй батырҙары булғанда биртенмәҫ тә бирешмәҫ башҡорт биле!

**Йософ.** Бил бирмәҫ батырыбыҙға минән бүләк — уҡалы аҫыл елән, бәҫле бүрек!

**Ике һылыу ҡыҙ батырға затлы елән, бәҫле бүрек кейҙертә.**

**Исмәғил.** Минән һиңә бүләккә изге ҡомартҡы — Урал батырыбыҙҙың алмас ҡылысы! Ҡара табын башҡорттары ҡойған ысын булаттан!

**Йәнсура** *(ҡылысты үбеп, биленә тағып ала).* Рәхмәт, бөйөк кенәзем. Урал батырыбыҙҙың ҡылысы илебеҙгә намыҫлы хеҙмәт итер. Азаматлыҡ юлында йәнебеҙ фиҙа!

**Йософ** *(йылмайып).* Бына — ниндәй шәп! Инде һиңә бер генә нәмә етмәй, егетем.

**Йәнсура.** Ни нәмә?

**Йософ.** Кәләш. һылыуҙарҙан һылыу кәләш тейешле һиңә.

**Исмәғил.** Күҙләгән һылыуың бармы?

**Сөйөмбикә атлығып килеп сыға.**

**Сөйөмбикә.** Мин ул, мин! Мин ул уның кәләше!

**Һылыубикә.** Абау... бәпесем!..

**Йософ.** Ҡыҙым, ни ҡылығың был? Бөтә ил-ғәләм алдында...

**Юныс.** Әйттем бит...

**Сөйөмбикә.** Бирһәгеҙ ҙә, бирмәһәгеҙ ҙә барам — мин уныҡы!

**Йәнсура** *(ҡыҙ янына атлығып).* Ул минеке! *(Ҡосаҡлашып сығып китәләр).*

**Күмәк тауыш.** *Ләхәүлә,* был ни эш?!

**Бойорған Сәйет.** Күрәләтә йөҙөбөҙгә төкөрҙө...

**Вәкил.** Әйттем бит, ун башҡыртҡа — бер иман!

**Исмәғил** *(көлөп).* Хе-хе-хе... Беҙҙең иман — намыҫыбыҙҙа, ә һеҙҙеке — ҡул осоғоҙҙа. Теләһәгеҙ — тотаһығыҙ, теләмәһәгеҙ — быраҡтыраһығыҙ.

**Йософ.** **А**ғайым, ул тиклем ҡуйыртмайыҡ!

**Бойорған Сәйет.** Бу ни хәл?! Шәриғәт хөкөмө буйынса...

**Исмәғил.** Сеү! Бында беҙҙең үҙ хөкөмөбөҙ. Йософ мырҙа, Һылыубикә килен, шулай уҡ Ҡазан һәм Мәскәү илселәре ошонда ҡалып тороғоҙ *(ҡул һелтәп),* башҡаларығыҙ ат бәйгеһенә - выжт!.

**«Артыҡ бүрәнә баштары" таралыша.**

**Бойорған Сәйет.** Зерә дә йәмсез килеп чыкты... Йә, ни ҡылабыз, кенәз?

**Кадыш Кудинов.** Сөйөмбикәгеҙҙе Жангали ханға килешкәйнек бит инде.

**Һылыубикә** *(иҙән тибеп).* Юҡ, килешеп етмәгәнбеҙ! Ҡыҙҙың үҙенән һораманыҡ!

**Йософ.** Ә мин үҙеңде алғанда һорағайнылармы һуң? Аллаға шөкөр, нисәмә бала үҫтерҙек. Мырҙа ғына булһам да, хан һыйында йәшәйһең. *(Башын тотоп).* Их, Ҡазан ханына ҡайната булырмын, тигәйнем...

**Исмәғил.** Булырһың, әле һуң түгел.

**Һылыубикә.** Ҡазанға бирер ҡыҙым юҡ! Бәпесемдең башын ашатырғамы?

**Бойорған Сәйет.** Сылыубикә ханым, баш ашарға Ҡазанда бүреләр юҡ ич!

**Һылыубикә.** Ҡоҙғон ояһы...

**Йософ.** Тыйыл, тим! Сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа, тигәндәй, ҡыҫылма ирҙәр эшенә! Сәғәте һуҡмайынса, ауыҙыңды йомоп тот — килешеүҙе бәпесеңә белдертмә. Телеңде тешләп йөрө! ЮҒиһә, күрәһеңме анау торған балтаны — сәсеңде лә, телеңде лә башың менән ҡуша бер юлы ҡыҫҡартырмын.

**Һылыубикә** *(илап).* Ил өҫтөндә йөҙөк ҡашындай бәпесеңде... Мөхәббәтен иҫәпкә алыр инең...

**Исмәғил** *(Һылыубикәнең яурын башынан һөйөп).* Киленкәйем, хан ҡайнанаһы булырыңды онотма! Йософоңдо ла кенәз ҡылырбыҙ, Аллаһ бойорһа. Зарурият мөхәббәттән өҫтөнөрәк! *(Бойорган Сәйет менән Кадыш Кудиновҡа).* Бөйөк кенәз Василийға еткерегеҙ: Сөйөмбикә Йәнғәлиҙеке буласаҡ!

**Йософ** *(елкәһен тырнап).* Әй әттәгенәһе... Йәнсураһын нишләтәбеҙ? Әллә, тим...

**Исмәғил.** Бер ниндәй ҙә «әллә-мәллә» түгел! Йәнсура батырҙы тиҙ генә, ололап-ҙурлап, азаматтар башлығы итеп күтәрегеҙ. Баштан-аяҡ ҡоралландырып, монаятлап, ил өсөн изге хеҙмәткә — Тын йылғаһы буйындағы баяғы Боролош *(К. Кудиновҡа)* — урыҫтарса Воронеж ҡәлғәһенә юлландырығыҙ. Мәскәүгә барыр юлыбыҙҙы татар-урыҫ казактары баҫҡынсылығынан йән аямай ҡурсалаһын. Яраларҙы уңалтыусы иң шәп табип — ваҡыт ул.

**Йософ.** Эйе шул. Бер нисә йыл азаматлыҡта интекһә, булыр-булмаҫ һөйөүенән дә һүрелер, шул арала Сөйөмбикәбеҙ шәһри Ҡазандың никахлы ханбикәһенә әүерелер.

**Бойорған Сәйет.** Хаҡ сүз. Шиты-крыты булыр, урыс дуслар әйтмешли.

**Һылыубикә менән Исмәғилдән башҡалары бөтәһе бергә.** Бәрәкалла! Алтын аҡыл!

## 4-енсе сәхнә

**Ап-аҡ олонло Яңғыҙ ҡайын төбөндә Сөйөмбикә башлығындағы ҡыҙҙар төркөмө. Ҡаршы яҡтан егеттәр — Йәнсура батыр башлығындағы азаматтарҙы Тын йылғаһы боролошона алыҫ хеҙмәткә оҙатыу. Ҡыуаҡлыҡтар артында егеттәрҙең менге аттары бышҡыра ла тибенә. Бөтә сәхнә китеүсе егеттәрҙең һәм оҙатып ҡалыусы ҡыҙҙарҙың халыҡ йыры «Ерән ҡашҡа»ны башҡарыуына ҡорола.**

**Йәнсура.** Егеттәр, ярһыу азаматтарым! Йыраҡ, хәтәр юлға сығырға сәғәт һуҡты, аттарыбыҙ ҙа сыҙай алмай сапсына. Көмөш өҙәңгеләребеҙгә баҫҡансы, һөйгәндәребеҙҙең күҙҙәренә яҡын килеп төбәләйек, иң мөҡәддәс һүҙҙәребеҙҙе шыбырлайыҡ.

**Ике төркөм ағылып килеп тоташа, күңелле шау-шоу.**

**Сөйөмбикә** *(һыҡтанып).* Йәнсурам, китәһең... мине ҡалдырып китәһең...

**Йәнсура** *(ҡосаҡлап).* Сөйөмбикәм, һылыуым, ҡалдырмайым мин һине — йөрәгемдең түрендә алып китәм. Әйләнер ҙә ҡайтырмын, көтөп тор.

**Сөйөмбикә.** Үҙәгем өҙөлөр инде...

**Ерәнҡашҡа һуҙып кешнәй.**

**Йәнсура.** Азаматтарым, ваҡыт тар! Ерәнҡашҡам саҡыра!

**Төркөмдәр үҙ урындарына ҡайта.**

**Ҡыҙҙар.** Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ,
Баш күнәккәй, баш күнәккәйҙәрҙе лә ҡулға элеп.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Башын сайҡай малҡайым.

Алдарында һолоһо бөтһә,
Һыҙыла йөрәк майҡайым.
Эй-й... һыҙыла йөрәк майҡайым.
Иҫән генә йөрөп, һау ҡайтығыҙ,
Китәһегеҙ, китәһегеҙ инде лә ҡуҙғалып.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Елдәр тарай ялҡайын,
Эйәрләгән егетеңде
Ташлап ҡайтма, малҡайым,
Эй-й... ташлап ҡайтма, малҡайым.
**Егеттәр.** Йәйләүҙәрҙе ташлап, ҡорал алып,
Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ менеп тә аттарға.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Алдан елер малҡайым,
Эйәрендә егете барҙа
Бойоғоу белмәҫ малҡайым.
Эй-й... бойоғоу белмәҫ малҡайым.
Иҫән генә тороғоҙ, беҙ китәбеҙ,
Йыш яҙығыҙ, йыш яҙығыҙ яуап та хаттарға.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Юл ташламаҫ малҡайым.
Биленән эйәр төшмәһә лә,
Төҫ ташламаҫ атҡайым.
Эй-й... төҫ ташламаҫ атҡайым.
**Егеттәр, ҡыҙҙар.** Йәйләүҙәрҙе ташлап киткән саҡта,
Тимер Ҡаҙыҡ, Тимер Ҡаҙыҡ булыр ҙа юл башым.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Төн юшамаҫ малҡайым.
Ҡом сахраһын үткәндә лә
һис өшәнмәҫ малҡайым,
Эй-й... һис өшәнмәҫ малҡайым.
Тимер Ҡаҙыҡ булһа, һәй, юл башым,
Ерән ҡашҡа, ерән ҡашҡа булыр юлдашым.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Башын сайҡай малҡайым.
Алдарында һолоһо бөтһә,
һыҙыла йөрәк майҡайым.
һуғыштарҙан иҫән ҡайтһам,

Уҡалармын ялҡайын.
Эй-й... уҡалармын ялҡайын.

**Йәнсура.** Азаматтарым, аттарға!

**Ҡыҙҙар.** Хәйерлт ел, хәйерлт ел! *(Йүгереп килеп егеттәрҙе ҡосаҡлайҙар).*

**Сөйөмбикә** *(Йәнсураһын ҡосаҡлап илай).* Ебәрмәйем, ебәрмәйем!

**Егеттәр төркөмө аттары яғына китә, ҡыҙҙар ҙа улар артынан ыңғайлап Юғала. Яңғыҙ ҡайын төбөндә Сөйөмбикә яңғыҙы ҡала.**

**Һылыубикә** *(йүгереп килеп).* Бәпесем, былбылым, был ни эшең?! Ил күҙе алдында егет муйынына аҫылындың, ғаиләне рисуай иттең... Хан дәрәжәһендәге мырҙа ҡыҙы икәнеңде оноттоң!

**Сөйөмбикә.** Уф... йөрәгем...

**Һылыубикә.** Киткәндәр артынан китеп булмай. *(Ҡыҙының арҡаһынан һыйпап).* Онот, бәпесем, онот!

**Сөйөмбикә** *(Ғорур ҡалҡынып ҡарап).* Онотмайым! Һөйөүем — һөйөү, барыуым — барыу! Башыма таш яуһа ла! Барыбер мин уныҡы!

**Һылыубикә.** Тәүбә-тәүбә, бәпесем, һин инде хан кәләше!

**Сөйөмбикә** *(тертләп).* Ә?! Нимә?!

**Алыҫ-алыҫтан «торройҡ-торройҡ!» тигән торналар сыңрауы, артынса уҡ Йәнсураның «Азамат» йыры ишетелә (өнһеҙ тыңлап торалар):**

Алыҫтарҙан, ай, күренгән —
Ирәмәлкәй тауының аҡ ташы.
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

**Сөйөмбикә** *(һыҡтап).* Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

**Һылыубикә.** Бәпесем, атайың ишетеп ҡуймаһын... Ҡазандан яусы килде, беҙ һине Йәнғәли ханға бирергә килештек...

**Сөйөмбикә.** Аһ!.. Йәнекәйем, Йәнсурам!.. *(Ҡайын олонон ҡосаҡлаған килеш һыпырылып йығыла).*

## Шаршау

# ИКЕНСЕ ШАРШАУ

## 1-енсе сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1533 йыл. Ҡазан ҡалаһының хан һарайы. Йәнғәли хан менән Сөйөмбикә бөгөн никахлашып, уларҙың беренсе ҡушылыу төнө. Кейәү һәм ҡыҙ икеһе ике бүлмәлә, ҡушылыуға һуңғы әҙерлек бара. Йәнғәли бүлмәһе, Йәнғәли менән Бабай.**

**Бабай** *(Йәнгәлиҙең билбауын төҙәткеләп).* Әт-тә-тә, билеңдәге ал билбауың ҡалай килешеп тора!

**Йәнғәли** *(маһайып).* Бөйөк кенәз Василий атаҡайым бүләк ҡылған билбау бу!

**Бабай.** Очон нығыраҡ йәшер, башҡырт кәләшең чишә алмый жөдәсен.

**Йәнғәли.** Башҡырт — аңғра сарыҡ, диләрме әле? Үзем чишеп бирмәсәм, очон таба алмас ул.

**Бабай** *(ситкә ҡарап, ауыҙын бәлшәйтеп).* Пыш-ш-ш, синнән дә аңғырараҡ булмас инде. Тәпи басҡаныңнан алып тәрбиәләп, аҡылға ултырта алмадым, хатта үзем аңғыралана башладым... *(Йәнгәлигә).* Аңғыраның аңғырасы ул башҡырт, аңғыра бәрән кебек. Әммә-ләкин бу бикәңне алай дип әйтмәс идем. Жылан аяғын ҡайчылағанға охшой ул.

**Йәнғәли** *(тертләп).* Ҡайчы?! Билбауымны да ҡайчылап ҡыймаса ярар иде, бөйөк кенәз Василий атаҡайым бүләк ҡылған билбауны!

**Бабай.** И бала, шушы мәнесезлегеңә барып, чәчләремне генә түгел, башҡа нәрсәләремне дә ағарттың бит! Жә алайса: астыңдағы туры айғырың түзә алмайынча чапчынса, үзең генә чиш тә ҡуй.

**Йәнғәли** *(көләп).* Һи, исәүәннең исәүәне син, Бабай, ҡайда икәнеңне дә шәйләмисең! Беләсең килсә, минең айғырым атханада — кәнүшнәдә.

**Бабай.** Соң, Ҡасим ҡаласында чағыңда Шәйехғәли дәдәңнең жуан күтле жариәсен ҡочҡаныңда да кәнүшнәдә идеме? Шул бейәгә сикереп менгәнен сизми дә ҡалдың, бала ясап өлгөрдөң.

**Йәнғәли. Һ**и мәнесез! Бейә түгел, ә *(ҡосагын йәйеп күрһәтә)* мона монауындый маржа иде ул. Айғырыма үзе менеп атланды, баланы да үзе ясады. Шуңа күрә ул ҡыз баланы мин алмадым, Шәйехғәли ағайымда ҡалдырдым.

**Бабай.** Бейә ни, байтал ни, маржа ни, бикә ни — один чорт: буйға алып салучысы булса, берсе дә арҡылы ятмый. Синең ханлыҡ бурычың — байталыңа айғырыңны сикертеү, Ҡазан тәхетенә вариҫ туғдыртыу. Ир бала кирәк мотлаҡ.

**Йәнғәли** *(уйға ҡалып).* Анысы шулай да ул, Шәйехғәли ағайым да ҡолағыма туҡыған иде. Әммә бөйөк кенәз Василий атаҡайымнан фатиха алмайынча... Хәзер үк Мәскәүгә илчеләр чаптыртыу кирәк!

**Бабай.** Илчеләр? Ни дип?

**Йәнғәли.** Ошбу сәғәттә кәләш ҡуйынына керергәме, кермәскәме, дип.

**Бабай** *(башын ҡушҡуллап тотоп).* Я Раббым, ни ҡылайым бу пешмәгәнем берлән?! *(Йәнгәлигә).* Баш өстө, күз ачып йомғанчы үтәлер фарманың, ханым. *(Йәнгәлиҙе кәләш бүлмәһе ишеге ягына этәреп).* Ә син тизерәк айғырыңны байталыңа ҡавыштыр, иснәштерә торсоннар. Алай-болай кешнәшкәнче, илчеләребез Мәскәүгә барып ураячаҡ, атаҡайың Василийның фатихасын дәррәү алып ҡайтачаҡ.

**Йәнғәли** *(бармаҡ янап).* Ҡарағыз аны, мотлаҡ күз ачып йомғанчы булсын!

## 2-енсе сәхнә

**Сөйөмбикә бүлмәһе, Сөйөмбикә менән Әбей. Һуңынан Юныс инә.**

**Сөйөмбикә.** Әбекәйем, бындай көнгә ҡалырмын, тип уйлағаным юҡ ине.

**Әбей.** Ни хәл итәһең, балаҡайым, башыбыҙға ла килмәгәндәр алдыбыҙға килә шул. Аллаһ Тәғәлә бойороуылыр инде.

**Сөйөмбикә.** Атаҡайымдың касафаты, нәпсеһен тыя алманы.

**Әбей.** Эй балам, атайың нимә ҡылһын, бөйөк кенәз Исмәғил олатайың үҙе, ил хаҡына кәрәк, тип талап ҡылғас.

**Сөйөмбикә.** Ил хаҡына, ил хаҡына! Бөтәгеҙҙең һүҙе бер. Сөйөмбикә хаҡына, тимәй һис кем. Хатта мине тәпәй баҫкандан тәрбиәләп үҫтергән Әбейем дә.

**Әбей.** Ил хаҡына йәндәрен дә бирәләр бит, балаҡайым. Ә һин гүргә кермәйһең, кейәү ҡуйынына керәһең.

**Сөйөмбикә.** Кейәү тигәнегеҙ йүнле булһасы... Әҙәм тиһәң — һыны юҡ, эт тиһәң — йөнө юҡ, шыр тиле инде шунда.

**Әбей.** Тәүбә-тәүбә, ишетеп ҡалмаһындар. Ханға тел тейҙереү — муйыныңа ҡылыс алыу менән бер. Бигерәк тә быны-быны ҡуйыныңа керергә тейешле кейәүең тураһында.

**Сөйөмбикә.** Ҡуйыным һалҡыная, сирҡанамын мин унан... Их, теге кистә йән һөйгәнем Йәнсураны керетмәнем!..

**Әбей.** Шым! Күпме туҡыйым һиңә: мәңге онот ул исемде! Никахлы кейәүең Йәнғәлиҙе, һылап-һыйпап, иретергә әҙерлән.

**Сөйөмбикә.** Юҡ! Онотмайым Йәнсурамды! Үлгәндә лә “Йәнсурам!” тип йәнемде бирәсәкмен!

**Әбей.** Әстәғәфирулла тәүбә, ханбикәгә килешмәгән көфөр һүҙ... Сеү! Аяҡ тауышы, Юныс ағайың килә.

**Юныс инә.**

**Юныс.** Хәйерле кис, һылыуым, хәйерле кис, Әбекәй.

**Әбей.** Әйҙүк, рәхим итеп түрҙән үт, Юныс балам.

**Юныс** *(ултыра).* Ә һин ниңә ауыҙыңа һыу уртланың, һылыуым?

**Сөйөмбикә.** Нимә тип өндәшәйем, үҙегеҙ мине хан аталмыш шыр тилегә тотторғас.

**Юныс.** Улай тип әйтмә, һылыуым. һин, шыр тиле, тиһәң дә, аҫтында алтын тәхете бар бит уның. Үҙең дә тәхетле булырһың.

**Сөйөмбикә.** Тик бәхетле генә була алмамдыр... Бәхетем минең осто — бик алыҫҡа осорҙоғоҙ һеҙ уны.

**Юныс.** Үҙ бәхетеңде үҙең яһарға тырыш. “Шыр тиле»ңде йүгәнләп-ауыҙлыҡлап мен, ауыҙын шаҡарып тотоп, үҙең теләгән яҡҡа бор, ысын башҡорт һылыуы булһаң әгәр! Ҡазан ханлығын ҡалыпҡа ултыртырһың, урыҫ менән башҡорт араһына өҙлөкһөҙ шына ҡағыусы, ут төртөүсе булыуынан туҡтатырһың, тыныслыҡҡа ҡот килтерерһең, бәлки.

**Сөйөмбикә.** Эй ағайым, Ҡазан ханы итеп, ҡарт булһа ла Ҡасим ханы Шәйехғәлиҙы түгел, ә уның ошо ҡустыһы Йәнғәлиҙе ҡуйған Василийҙы тинтәк тиһеңме әллә? Уның да башы эшләй, беҙҙекенә ҡарағанда ла, моғайын, шәберәк эшләй. Бының артында ни ятҡанын кем белә? Бәлки, яманмы-яҡшымы, мосолман донъяһын яҡлап торған Ҡазан ханлығын эстән ҡаҡшатып юҡҡа сығартыу, артынса уҡ беҙҙе лә йөгөнөкләндертеү өсөн ҡоролған хәйләләр. Хан кейәүегеҙ шул Василий рөхсәтенән тыш бер аҙым да атламай, “Василий атаҡайым” тип кенә тора, тиҙәр. Хәйер, бынытын үҙ ауыҙынан ишеттем...

**Әбей.** Урыҫ булһа атаң — билеңдә булһын балтаң...

**Юныс** *(урынынан тороп).* Ярай, тәрәнгә төшөп киттек... Ә һин, һылыуым, мин әйткәндәрҙе киртеп ҡуй ҡолағыңа. Яҡшы ир-ат иле өсөн утҡа керә, ил хаҡына һин дә түҙ. *(Сығып китә).*

**Сөйөмбикә** *(илай).* Түҙермен, түҙермен... Бөтәгеҙгә үс итеп булһа ла, түҙермен!..

**Ишек шаҡыйҙар, билбауын һөйрәлткән Йәнғәлиҙе Бабай төрткөләп индергәнендә уныһы Әбейгә төкәлә.**

**Йәнғәли** *(йырлай).* Кәләшкәйем, көттеңме,
Зарығып ла бөттеңме?
Билемдәге ал билбауым
Бушаҡ — әллә сүттеңме?

**Сөйөмбикә.** Кейәүкәйем, ник килдең,
Әллә көтә тип белдең?
Икебеҙҙең берен һайлап,
Әбекәйгә төкәлдең.

**Йәнғәли.** Юҡ-юҡ, әбекәй үзеңә булсын! Мотлаҡ син, син үзең кирәк миңа!

**Бабай** *(Йәнгәлиҙең ҡолагына).* Мал-ладис! Айғырың шәп ажғыра — сикерт, балам, байталыңа!

**Йәнғәли** *(айгыр булып кешнәп).* Иһа-һа-һа! *(Сөйөмбикәгә талпына, ләкин кинәт Әбей баҫкан билбауына тартылып йыгыла).* Разбо-о-ой! Василий атаҡайым, миңа уҡтан аттылар!

**Бабай.** *Ләхәүлә,* тор! Уҡ та юҡ, буҡ та юҡ! Сөйөклөм, ҡарале: кейәү-баланың ятағы ана анда *(Сөйөмбикә ултырган карауатҡа күрһәтеп)* — жанайы ҡуйынында!

**Әбей.** Тор, кейәү, тор.

**Йәнғәли.** Тормим! Бөйөк кенәз Василий атаҡайымның изге фатихасы килеп житмәйенчә ҡузғалмим! Илчеләр нигә озаҡлады?

**Бабай.** Илчеләр инде Ҡазанның ҡапҡа төбөндә, сине түшәккә салғанчы, монда да килеп житерләр. Бисмилла, Ҡазан ханлығы хаҡына! *(Бабай менән Әбей Йәнгәлиҙе карауатҡа күтәреп һала).*

**Йәнғәли.** Ҡара ҡашым, жанашым, сузылып ят яныма!

**Әбей.** Ят, кейәү-балам, ят. Донъяһына төкөр ҙә хәләл ефетлек бурысыңды үтәй күр. *(Сөйөмбикәне ятҡыра, Бабайҙы ҡултыҡлап ала).* Киттек-киттек, ҡарт алаша!

**Бабай.** Их, бүлмәләре күп кенә дә дарманыбыз юҡ ҡына... Василийның фатихасын көтөп тә ятмас идек... *(Сыгып китәләр).*

## 3-өнсө сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1535 йыл. Ҡазан хан һарайының тәхетханаһы. Йәнғәли хан, сабатаһын түргә элеп, тәхеттә ирәйеп ултыра.**

**Йәнғәли:** Чабатамның башы тишек,
Әл дә табаны таза.

Ай-ли, чабатам,
Чабатамны яратам!
Чабатамны санламаған —
Алыр миңардан жаза.
Ай-ли, чабатам,
Чабатамны яратам!

**Сөйөмбикә-ханбикә инә.**

**Сөйөмбикә.** Абау! Әғүзе биллаһи минә шайтан и-раззим! Тәхетенә шайтан менгәнме, тип торам... Был ни хәл: сабатаңды тағы түргә элгәнһең! *(Алып ташларға итә).*

**Йәнғәли.** Выжт! Теймә чабатама! *(Ыргып тороп, ҡылысын һурып сығара).* Муйыныңны өзә чабам!

**Сөйөмбикә.** Сап, ҡотолормон, исмаһам. Ә һин, тинтәк, һис юғында ҡатын үлтереп данланырһың.

**Йәнғәли** *(ҡылысын кире тығып, тәхетенә ҡунаҡлап).* Юҡ инде, чапмим! Бөйөк кенәз Василий атаҡайымнан фарман килгәч чабырмын. Ә хәзергә йөрөп тор. Бик тә эшең булмаса, чабатама киндерәү иш.

**Сөйөмбикә.** Татар түрә булһа, сабатаһын түргә элә, тип көләләр сыуаштарың...

**Йәнғәли.** Соңра жылап ҡуймасыннар! Түргә элү генә түгел, тәхеткә дә ултыртырмын! *(Ыргып тороп, сабатаға ҡарап суҡына).* Күрмисеңме, Ҡазан дәүләтен нурларлыҡ чабатам бу. Бөйөк кенәз Василий атаҡайымның дуңғызларын көткәнемдә Василий атаҡайым үзе үрдертеп биргән иде.

**Сөйөмбикә.** Эй Раббым! Василий атаҡайың үлгәнгә лә ике йыл тула бит инде. Ә һин һаман сабатаңды эләһең, үлеккә табынаһың...

**Йәнғәли** *(ярһып).* Үлек түгел! Үлек түгел!

**Сөйөмбикә.** Үҙең үлектер, алайһа...

**Йәнғәли.** Терек мин!

**Сөйөмбикә.** Эсеңдә йәнең булһа, арҡылы ятҡанды буй алып һалыр инең... Тәхетеңде урыҫтан ҡурсаларға тип, Башҡорт иленән Ябынсы Яҫауыл олатайым килеп еткән. Ғәскәренә аҙыҡ-түлек, ҡорал-монаят һорай. Ҡабул ҡылыуыңды көтә.

**Йәнғәли.** Көтсөн. Мин дә Василий атаҡайымның изге фарманын көтәм... ҡайсы бер ки бәндәләрнең муйынын ҡысҡартырға.

**Сөйөмбикә.** Үҙеңдекен ҡыҫҡартып ҡуймаһындар... һарай алдында өйөлөшөп татар, ар, сирмеш, сыуаш бәктәрең шаулаша, ҡоҙғондарҙай ҡайнаша. Сабатаһын түргә элгән түрә беҙгә кәрәкмәй, башҡа хан кәрәк, тиҙәр. Василий

мәрхүмдең улы яуыз Ивандан , яңы хан һорарға ниәтләйҙәр. Күрәҙәсе Гәүһәршат менән Булат бәк ҡоторона...

**Йәнғәли** *(ҡылысын һура биреп тыга).* Керсен алар икесе, кирәкләренә бирәйем!

**Сөйөмбикә.** Эй сабата-сабата... *(Сыга).*

**Булат бәк, Гәүһәршат-күрәҙәсе инә.**

**Булат бәк.** Әссәләмәғәләйкүм!

**Гәүһәршат.** Хәйерле көн!

**Йәнғәли.** Жә, нигә ҡатып ҡалдығыз? Шыҡырыҡлағыз!

**Булат бәк.** Баш өстө, хан, хәлбуки без сайысҡаннардан түгел.

**Гәүһәршат.** Син ничектер, әммә безләр адәм телен беләбез.

**Йәнғәли.** Сүләгез, алайса. Нигә бөйөк кенәз Василий атаҡайымны үле Жанға санийсыз?

**Гәүһәршат.** Чөнки моннан ике йыл элгәре үк ҡатты бит ул.

**Йәнғәли.** Ялған! Бүген генә күрдем мин аны. Бергә йөрдөм!

**Булат бәк.** Төшөңдәме?

**Йәнғәли.** Өнөмдә! Тәмле сүләшеп ултырдыҡ.

**Гәүһәршат.** И ханым-солтаным, алайса үзең дә мәреткә киткән икәнсең. Хәйерлегә генә булсын.

**Йәнғәли.** Минең Жөмлә эшләрем дә хәйерле.

**Булат бәк.** Һе! Ҡазан ҡәлғәсенең диуарлары жимерелде, ҡапҡа төпләре череде. Урыс килсә, усырығы берлән дә аударырлыҡ...

**Йәнғәли.** Аудармас, Василий атаҡайым усыртмас.

**Булат бәк.** Белмим-белмим, Иваны ни диер икән? Хәзердән үк “Яуыз” ләҡәплиләр бит... Башҡырт иле санға суҡмый, чуваш, чирмеш, мордва да баш бирми. Ғәскәр жыйырға кирәк.

**Йәнғәли.** Хуп! Мәскәүгә илче жибәрермен, ни ҡылырға кирәклеген бөйөк кенәз Василий атаҡайымнан үтенеп сорармын.

**Гәүһәршат.** Бөйөк ханым-солтаным, үз башың ҡайда?

**Йәнғәли.** Һе! Минең башым Мәскәүдә — Василий атаҡайымда.

**Гәүһәршат.** И бөйөк ханым-солтаным, үз Ҡазаныңда алай башсыз да булғач, ханбикәңнең ҡуйынында икенче бер башыңны булсада эшләтеп, хан тәхетенә вариҫлыҡҡа башлы уғлан туғдырып бирсәңче? Никахығызға озон ике йыл тула ич!

**Йәнғәли.** Юҡ инде, мине тәхетемнән очорторғамы?! Миңа вариҫ кирәкми, Василий атаҡайым тәхетемә ныҡ ябышып ултырырға бойордо!

**Булат бәк.** Алайса, тәхетең ҡашында безләр — чүп, әллә ҡачан үлек Василий атаҡайың берлән чабатаң ғына ҡот икән.

**Йәнғәли** *(ашҡынып).* Үлек түгел! Үлек түгел!

**Гәүһәршат.** И Ходайым, Ҡазан ханлығының бөтөүенең башы шушыдыр инде. Әле генә хаҡ күрәзәлек ҡылыуым: ун алты йылдан соңра ханлығыбыз юҡҡа чыға — Мәскәү кенәзе бөтөрә... Ун алты йыл ғына ҡалды...

**Булат бәк.** Ауызыңнан жил алсын, шомло жан! Ходай орғоро күрәзәче! *(Сыгып китә).*

**Йәнғәли** *(урынынан тороп, ҡылысын һурып сыгарып).* Бөтмәс, бөтөрмәсбез! Василий атаҡайым берлән без барда!

**Гәүһәршат.** Ха-ха-ха! *(Сыгып китә).*

## 4-енсе сәхнә

**Ҡазандың Жамиғи мәсетендә теҙелеп намаҙ уҡыйҙар, иң алда — башлап уҡыусы мәсет имамы Ҡолшәриф. Намаҙ аҙағында вәғәз тыңлана.**

**Ҡолшәриф.** Бу донъя ҡайда барадыр — анысын Аллаһ белсен. Әммә сез, хаҡ мосолманнар, үзегез күреп торасыз — яңа ханыбыздан уңмадыҡ. Сафагәрәй ханны күсәкләп ҡыуыуын-ҡыудыҡ та, аннан киресенә килеп ҡаптыҡ: урыс Василийның дуңғыз көтөүчесен Ҡазан ханы итеп алдыҡ, тәхетебезнең ҡотон очордоҡ. Әллә тәҡдиребез ҡушты, әллә Мәскәү алдашты... Ҡазан диуарлары инде эт сикереп үтмәле, ҡәлғә эче таяҡ тығып болғаулаған сары сағызаҡ оясындай ҡайнаша, Ҡазан халҡы бер-бересен үкертеп-ачыттырып чаға... Малай ғына Иван патша хәзердән үк Яуызға әүерелде, Ҡазанны алырға ғәскәр артыннан ғәскәр жибәрә. Үсеп кенә житсен әле — ниләр ҡылмас дисегез? Ходай орғоро күрәзәче Гәүһәршатның күрәзәләүе тура килмәгәйе, дим...

**Күмәкселек.** Тәүбә-тәүбә!..

**Ҡолшәриф.** Шуның өчөн тешләрне нығыраҡ ҡысарға, тәхетебезнең очҡан ҡотон ҡайтарырға кирәктер. Кем ултыра анда: ханмы ул, әллә пацанмы, теге Иван әйтмешләй.

**Булат бәк.** Әле генә кереп чыҡтым: үтмәс ҡылычын биленә тағып алған да теше-тырнағы берлән тәхеткә ябышып ултыра. Үзе һаман Василий атаҡайы берлән саташа, биғәйни, бергә чуҡынып йөрөй...

**Ҡолшәриф.** Чуҡынсын. *(Йәмәғәткә).* Шул чуҡынчыҡ Мәскәү яҡлылар ни уйлый? Чура батыр берлән Ҡадыш мырза, мәсәлән? Алар сорап алды бит.

**Сура.** Мәскәүҙән беҙ Шәйехғәли ханды һорағайнык, әммә Василий, үҙенең дуңғыҙ көтөүсеһе Йәнғәлиҙе хан итеп биреп, төп башына ултыртты...

**Колшәриф.** Башкырт иле ни шәйли?

**Сура.** Башкорт иле лә ошондай ук фекерҙә. Шуға күрә Йәнғәли хандың мәрхүм атакайы Василий кенәз менән кауышыуы хәйерлелер...

**Кадыш.** Мин һәм башкалар да шул ук теләктә. Атакайы кырыннан кире әйләнеп кайтмасын иде.

**Колшәриф.** Мәслихәт, хуп. *(Икенсе тарафка).*Ә Хак-Ислам Төркиә, Кырым тарафдарлары? Хәйер, алар исеменнән үзем белдерим: без дә кадерле Жанғәли ханыбызның сөйөклө Василий атакайы берлән мәңге бергә ожмахтамы, тамуктамы калуы яклы. Дөрөсмө?

**Күмәк тауыш.** Дөрөс, дөрөс!

**Колшәриф.** Димәк, ике фиркә дә бер төптән. Шул төплөләр тороп бассын, төпсөзләр ултырып калсын. *(Барыһы ла тороп баҫа).* Хуп, мәйле, жыйыныбыз бер чыбыктан куылған... Инде Булат бәк берлән Чура батыр жәһәт кенә ошбу шатлыклы тәкдирне сарайға — ханыбызның үз колағына ирештереп килсеннәр, ***кире чыкмаслык кылып***. Ә безләр, эчебездән генә сүрәләр укып, ултырып торойоклар.

**Сура батыр менән Булат бәк ашығыс сығып китә. Бер талай вакыттан һуң, тышта шау-шоу, Гәүһәршаттың әсе ауазы: “Жәмәғәт, Ходаға доға кылыңыз — тиле-миле Жанғәли ханны үлтергәннәр!” Дөпөлдәп йүгергән аяк тауыштары, Сура батыр менән Булат бәк атлығып керә.**

**Булат бәк.** Үлтермәгәннәр, ул үзе мәреткә киткән!

**Сура.** Эйе, Василий атакайы янына, мәңге бергә булырға!

**Йәмәғәт.** Аллаһы әкбәр! Бәрәкалла!

**Колшәриф.** Иншалла. Инде сезләргә төп яңалыкны ирештерим: Сафагәрәй ханыбыз әйләнеп кайтты. Кәлғә капкасын ачығыз, оло кәдер-хөрмәтләп, тәхетенә күтәреп ултыртығыз! Жанғәлидән тол калмыш сөйөклө ханбикәбез Сөйөмбикәне Сафагәрәй ханыбызға йәш хатын итеп бирик!

**Йәмәғәт.** Бирик! Бирик!

## 5-енсе сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1547 йыл. Таң һыҙылып килә. Сөйөмбикә ханбикәнең йоко бүлмәһе. Сафагәрәй, түшәктән ырғып тороп, йәһәт кейенә башлай.**

**Сөйөмбикә** *(ҡалҡына биреп).* Ханым, ҡайҙа ҡабаланаһың?

**Сафагәрәй.** Мәчеткә, мәчеткә! Мәчеттән соңра — тәхеткә!

**Сөйөмбикә.** Өс-дүрт көндә бер киләһең, уныһы ла ашыҡ-бошоҡ ҡына... Мәсетең ҡасмаҫ ине. Намаҙыңды ошонда ғына атҡар ҙа иртәнге сәйҙе бергәләшеп эсәйек.

**Сафагәрәй.** Юҡ, булмый. Дәүләт эшләре... Ҡолшәриф мулла болай да: "Бу ханыбыз Жамиғ мәчетенә күзен күрсәтмәс булды, әллә иртәнге намазын ҡалдыра инде..." — дип сүләгән. Касафат тулы Ҡазаннарының тишек төбөн ямар өчөн ашами-эчми, йоҡлами ижтиһад ҡылуымны санға суҡмилар, мәлғүннәр. Ашаған белми — тураған белә, диләр бит синең башҡыртларың.

**Сөйөмбикә.** Бәғзе ҡатындарың менән төшкә тиклем тормай ятҡаныңды ла һөйлә. *(Тора, кейенә).*

**Сафагәрәй** *(Сөйөмбикәне яурын башынан ҡосаҡлап).* И назлы бикәм, әгәр дә алай булсам, бердән-бер уланымыз Үтәмешгәрәйне, син түгел, алар табып бирерләр иде.

**Сөйөмбикә.** Алайһа, ултыр әле янfamа.

**Сафагәрәй.** Йә, ултырдым, ди. *(Ултыра, Сөйөмбикәнең ҡулын усына ала).*

**Сөйөмбикә.** Тыңла мине.

**Сафагәрәй.** Йә, тыңлим, ди.

**Сөйөмбикә.** Дәүләт эштәреңә ҡыҫылмайым, әммә сабыйыбыҙ Үтәмешгәрәй хаҡына киҫәтергә тейешмен.

**Сафагәрәй.** Кисәт, кисәт.

**Сөйөмбикә.** Үҙең әйткән Ҡазаныңдың шул тутығып бөткән тишек төбөн, ямайым тип, уғата ҙурайтаһың, төпһөҙ ҡылаһың, буғай.

**Сафагәрәй** *(ҡулын тартып алып).* Ни сүзең бу?! Ҡара-ҡара, ни сүли!..

**Сөйөмбикә.** Ниңә өҙлөкһөҙ яу артынан яу сабаһың, урыҫ өҫтөнә йөрөйһөң?

**Сафагәрәй.** Йөрөмим, урыс үзе баса безне. Былтыр ғына Ҡазанға кем ябырылды, Хан Ҡапҡасын яндырды? Урыс Иван түгелме?

**Сөйөмбикә.** Ә шуға тиклем кем һуң йыл һайын урыҫ еренә көйәләй һүреп керҙе, ҡоротто? Нижний Новгород, Муром, Мишәр, Гороховец, Балахана, Владимир, Шуя, юрьев, Кострома, Галич, Тотма, Вологда, Үстек, Пирем, Вятка ҡалаларын үкертеп талап, кешеләрен ҡырып, хайран-вайран килтерҙе?

**Сафагәрәй** *(Сөйөмбикәне яурын башынан ҡосаҡлап).* һе, баһадир икән ирең. Ғорурланырға кирәк моңа!

**Сөйөмбикә.** Бәғерем әрней минең.

**Сафагәрәй.** Чуҡынчыҡ урыс өчөнмө?

**Сөйөмбикә.** Үҙеңдең татарҙарың, арҙарың, сыуаш һәм сирмештәрең өсөн. Яу итеп алып китеп, яртыһынан күберәген урыҫ мөсөнән үткәрттең. Ҡараусыһыҙ ҡалған ҡарт-ҡоролары, етем-еһерҙәре Ҡазан урамдарында илашып, хәйер һорап йөрөй хәҙер.

**Сафагәрәй.** Жыласа соң. Кем ғәйепле? Синең имансыз башҡыртларың ғәйепле. Урыс өстөнә барғанымда ғәскәрләрен бирмәделәр, посоп ҡалдылар бер читтә. Юғисә без ул чуҡынчыҡларның тәмам иманнарын уҡыта идек! Баяғы ҡалаларын, берсен-бер ҡалдырми, үзебезнең Ҡазан ханлығына беркетә идек! Хәтта төрөк солтанының киңәшләрен дә тотми бит ул синең атайың Йософ берлән олатайың Исмәғил кенәзләр!

**Сөйөмбикә.** Уныһы миңә ҡараңғы.

**Сафагәрәй.** Исмәғилен әйтим, ике башлы дийү кеби булды бу: йыл сайын миннән ҡырҡ мең алтын, йөз батман бал, туғыз асыл тун бүләккә ҡайырып алуы житмәгән, урыс бөйөк кенәзенең дә ҡазнасын имепме-имә... Анди мөртәт жаннан нинди ярдәм көтәсең?..

**Сөйөмбикә.** Ярҙан осорға ярҙам һорамайҙар... Мәскәү яры үтә текә һәм бейек...

**Сафагәрәй.** Төрөк солтанының сүзен тотоп бергә уҡмашсаҡ, Мәскәүнең үзен пыр-туздырып ала идек, мосолман донъясының дошманы яуыз Иванның башына житә идек...

**Сөйөмбикә.** Эй ханым, үҙ әпипәнде онотоп, ете диңгеҙ аръяғындағы төрөк солтанының һыбыҙғыһына бейейһең. "Мосолман донъяһы" тигәнең дә шул төрөк солтаны инде. Ҡырым ханын да, һине лә яуыз Иванға һөсләтә лә, һеҙ ҡан ҡойошҡанды ҡарап, диңгеҙ аръяғында боҫоп тик ята...

**Тыштан ишек шаҡыйҙар, Сафагәрәй ырғып тора.**

**Сафагәрәй.** Кем ул, таң тишегеннән?

**Ҡушаҡ.** Ғәфү ҡылыңыз, үтә ашығыч хәбәр.

**Сафагәрәй.** Ә, Ҡушаҡ батыр. Кер. *(Ҡушаҡ керә, ҡулында һургыс мөһөрлө ҡағыҙ).* Ни хәбәр, кемнән?

**Ҡушаҡ.** Мәскәүдән. Яуыз Иванның Ҡазан бәге Ҡадышҡа, башҡырт бәге Баубәккә, бөйөк кенәз Исмәғилнең Ҡазандағы вәкиле Чура батырға атап язған ярлығы...

**Сафагәрәй** *(күҙҙәрен аҡайтып).* Атап язған? Олуғ Сафагәрәй ханның башы ашамы?!

**Ҡушаҡ.** Яуыз Иванның йәшерен чапҡынын Ҡазан ҡапҡасы төбөндә тотоп алдыҡ...

**Сафагәрәй.** Башын чаптығызмы соң?

**Ҡушаҡ.** Ҡарбыздай тәгәрләде. Ләкин эш анда түгел...

**Сафагәрәй.** Уҡы. Хәйер, мөһим урыннарын ғына әйтеп бир. Ваҡытым тар.

**Ҡушаҡ.** Яуыз Иван Ҡадыш илә Чураға рәхмәт әйткән...

**Сафагәрәй.** Бәдбәхет! Ни өчөн?

**Ҡушаҡ.** Алар яуыз Иваннан Ҡазан өстөнә ғәскәр жибәрүен сорағаннар, син олуғ Сафагәрәй ханны, шулай уҡ яҡыннарыңнан булған утыз Ҡырым бәген яуыз Иванға тотоп бирергә вәғәдә ҡылғаннар. Яуыз Иван аларға...

**Сафагәрәй** *(түҙемһеҙләнеп).* Ни дигән?

**Ҡушаҡ.** Ханны тотоп үлтерергә бойорған. Үзе тиздән Ҡазан өстөнә киләчәген исбатлаған.

**Сафагәрәй** *(Сөйөмбикәгә).* Мона синең Чура абыйың, башҡыртларың... һич кенә дә Ҡазанныҡы дошманнарымнан ким түгел! *(Аяҡ тибеп).* Тотоп килтерегез сатлыҡ жан Чураны!

**Ҡушаҡ.** Без аларның барысының да ауызына келәп тығып, аяҡ-ҡулларын бәйләп салдыҡ. Теге бүлмәдә генә.

**Сөйөмбикә.** Ханым, ҡыҙмай тор. Ете үлсәп, бер киҫергә кәрәктер. Мәсеткә бараһың бар, намаҙыңды ҡалдырма.

**Ҡушаҡ.** Чураның ҡалтасыннан бер уч көмөш чыҡты, Мәскәү көмөшө. Анысын нишләтәбез?

**Сафагәрәй.** Чүмечкә салып иретегез! Тамағына ҡойорға!

**Ҡушаҡ.** Ханым, күз ачып йомғанчы үтәлер! *(Сыгып китә).*

**Сафагәрәй** *(устарын ыуалап).* Чура-чура, бичура, ҡулыма ҡаптың син, чыра! Мәскәү көмөшөн йотоп, чырадай сызып янарсың!

**Сөйөмбикә.** Ханым, намаҙ сулаһы етә. Ҡолшәриф мулла ни әйтер?..

**Сафагәрәй.** Хода бойорса, Ҡолшәрифнең үзен дә! Теле озая башлады... *(Устарын ыуып).* Мона Чура абыйыңның тамағына ҡыздырылған Мәскәү көмөшөн ҡоям да... *(Ашыгып сыгып китә. Йәнәш бүлмәлә язаланыусыларҙың йән газабы ишетелә).*

**Сөйөмбикә.** Уф... кисерә күр инде беҙҙе, Хоҙайым! *(Урынга ауа).*

## 6-нсы сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1549 йыл. Ҡазан ханының тәхетханаһы. Сафагәрәй ирәйеп тәхеттә ултыра, ике яғында айбалталы ике һаҡсы. Ишек төбөндә лә шундай уҡ икәү. Тышта һарай алдында халыҡ гөжләй, ҡәнәғәтһеҙлек арта:**

— Хан үзенең Ҡазан халҡын онотто!

— Тамағыбыз ач, өс-башларыбыз ялангач!

— Үзенең жараннарын — утыз Ҡырым бөген генә симертә!

— Ҡырымлылары бөтә тирә-яҡ ауылларны талап йөрөй, түзәр әмәл ҡалмады!

— Хатта башҡыртларға барып життеләр, малларын талап ҡайттылар!

— Арлар, чирмешләр, чуашлар баш күтәрә — Мәскәү Яуыз Иванының әләме астына ағыла!

— Ә хан Ҡазан бәкләренең башын кисә, тамаҡларына ҡызған ҡурғаш илә көмөш ҡоя!

— Ҡорал юҡ, монаят юҡ, ғәскәребезнең яртысы ҡырылып бөттө, ҡалғаны ҡачып тарала — ҡәлғәне саҡлар да кеше ҡалми башлады.

— Яуыз Иван ябырылса, кем ҡаршы торор икән?

**Гәүһәршат** *(асы ауаз).* Килсә — килсен, кирәгебезне бирсен иде тизерәк!

**Сафагәрәй** *(һиҫкәнеп).* Ҡушаҡ!

**Ҡушаҡ.** Әү, олуғ ханым? *(Елтерәп инә).*

**Сафагәрәй.** Бу нихәл, ни жанжал?

**Ҡушаҡ.** Сарай алдына бозоҡбаш жаннар сырыған, саҡчыларыбызны таптап узарға итәләр.

**Сафагәрәй.** Бозоҡ башларын кисегез бер ничәсенең!

**Ҡушаҡ.** Саҡчыларның ҡулы барми — үзебезнең әти-әниләр, диләр... Ә аларның үзләренең башына житә алмибыз — ханлыҡның ҡулы ҡыҫҡарды...

**Сафагәрәй.** Бозоҡбашларны мөмкин ҡәдәр алдаштырып тороғоз. Шул арада бәкләребезнең берсен-бер ҡалдырми тәхет төбөнә өйөр — кемнең кем икәнен исләренә төшөрим.

**Ҡушаҡ.** Бик өйөрөр идем дә... бәкләребезнең күпчелегеннән жилләр искән шул. Ханның ҡылычы берлән көмөшлө чүмеченнән өркөп, тәмам юҡҡа чыҡҡаннар...

**Сафагәрәй.** Жир ярығыннан булса да табып килтерегез!

**Ҡушаҡ.** Жир ярығы бик жыраҡта шул, ханым. Ҡул житмәслек яҡларға олаҡҡаннар.

**Сафагәрәй.** Кемнәр алар, ҡайдалар?

**Ҡушаҡ.** Үзең белгән Бойорған Сәйет, Илсыман бәк, Ғабдулла Бахшилар башҡырт илендә Йософ ҡайнатаң ҡанаты астына посҡаннар, Яуыз Иванға ярлыҡ язып, синең өскә яу чаҡырып яталар... Ҡотҡочоларның зур төркөмө Мәскәүдә, яуыз Иванның үзенең жылы ҡуйынында. Йәғни мәсәлән *(ҡуйынынан ҡағыҙ алып),* Табай бәк илә Хажибирде уғлан, Тәүкил бәк, Ағыш муллазадә, Чапҡын мырза, Мамыш Хафиз, Адаш вә Ғәликәй чапҡыннар, Ҡанчура, Борнаш, Тереғол, Көбәк

бәкләр, Ислам мырза, Әбәкче, Хангилде, Шаһчура, Бикчура, Ҡулыш, Ғәликәй мырзалар, Байтал, Ватай-Мамай, Көнкүрчеләр һәм башҡалар, һәм башҡалар, урыс хезмәтенә ялланып, Яуыз Иванға Ҡазанны алуда ярдамлашырға ун меңлек татар ғәскәре туплағаннар...

**Тыштағы шау-шоу көсәйә.**

**Ҡушаҡ.** Ишетәсеңме, олуғ ханым?

**Сафагәрәй.** Жанжал башлыҡлары кемнәр?

**Ҡушаҡ.** Үзең беләсең: Булат бәк, Ҡолшәриф мулла, Мурали бәк, Ходайғол уғлан... Лаф ороп, тәхет ҡашына үткәрүне дәғүәлиләр...

**Сафагәрәй** *(уйланып).* Үткәрегез бересен.

**Ҡолшәриф мулла керә, күкрәгенә ҡулдарын ҡаушарып, баш эйеп сәләм бирә.**

**Ҡолшәриф.** Әссәләмәғәләйкүм, олуғ ханым!

**Сафагәрәй** *(йөҙөн сыйырып).* Вәғәләйкүм, Ҡолшәриф. Ни йомош? Сарай ҡапҡасын ҡағырға батырчылыҡ иттеңме? Башың икеме әллә?

**Ҡолшәриф.** Халыҡ ҡаға, олуғ ханым, нурлы шәһри Ҡазан халҡы. Ә халыҡның башы ике генә түгел — меңәрләгән!

**Сафагәрәй.** Үзеңнең башыңны ҡайғырт — әһле Ислам дип тормамын! Анауы балтачым "керт!" иттереп төгәлләр.

**Ҡолшәриф.** Алладан ҡурҡ! Балталарыңның йөзө чыйырылыр, тәхетең түңкәрелер, олуғ ханым.

**Сафагәрәй.** Бәдбәхет, жылан тел!

**Ҡолшәриф.** Жыландай телемне чығарып сүләргә жибәрделәр дә инде мине сиңа, олуғ ханым! Бигәйбә, ил аһәңен житкерәм.

**Сафагәрәй.** Сүлә! Әммә телеңне ҡысҡа тот!

**Ҡолшәриф.** Ҡысҡасы шул: төрөк солтаны берлән Ҡырым ханының тәртәләре арасында ҡорчаңғы тайдай ҡойроҡ чәнчеп терт-терт юртыуыңны туҡтат. Ханлығыбызны ҡоротоучы Ҡырым чирүеңне ҡайтарып жибәр. Ҡулыңны озон сузма — урыс патшасы берлән килеш. Аның берлән суғышып йәшәү ҡот килтермәйәчәк безгә. Башҡыртларны үзеңә нығыраҡ тарт; ар, чирмеш, чуаш халайыҡларының хәленә кер. Шунсыз ханлығың мандымас, тәхетең жимерелер. Һаман да болай барсаң, бердән-бер вариҫың Үтәмешгәрәйгә ни ҡалдырырсың икән?

**Сафагәрәй.** И мескен, кем өчөн кемнең башы ауырта имеш! Әгәр дә мин урыска ҡаршы тормасам, мәчет манараңны да, һәм үзеңнең башыңны да ҡыскартмаслар дисеңме ни? Бар, жәмәғәт дигән сарыҡларыңа аңғарт: башларын жуймаслары борон бу тәңгәлдән табан ялтыратсыннар! *(Ҡолшәриф сыга).* Ҡушаҡ!

**Ҡушаҡ** *(елтерәп инә).* Әү, олуғ ханым?

**Сафагәрәй.** Ғәскәргә бойороғом: баҡырышҡан бу ике аяҡлы сарыҡ көтөүен типкеләп таратсыннар!

**Ҡушаҡ.** Ғәскәр юҡ, олуғ ханым.

**Сафагәрәй.** Ә?! Нәрсә?

**Ҡушаҡ.** Ғәскәребез баяғы Ҡолшәриф муллаға ҡушылып китте. Сарай алдында балталары өйөлөп ятып ҡалған...

**Сафагәрәй** *(башын тотоп).* Нишлибез?

**Гәүһәршат керә.**

**Гәүһәршат.** Күрегез, күрәзәлегем дөрөскә чыға! Яуыз Иван ғәскәре берлән Ҡазан өстөнә килә. Быйыл уҡ булмаса да, йәренгә баш салачаҡ Ҡазан халҡы. И Раббым, ханлығыбызның ғөмөрө ни бары ике йыл ғына ҡалды... Өф! — тәхетеңнән оч, гонаһ шомлоғо!

**Сафагәрәй.** Кем үткәрде бу яуыз ҡотҡочоно? *(һаҡсыларга).* Айбалтағызны айҡағыз, шаҡшы башын тәгәрләтегез!

**Һаҡсылар.** — Тәгәрләтер идек тә ул, ачлыҡтан киселгәнбез, өйдә бала-чағаларыбыз үлә...

— Айбалтабыз да үтмәс...

**Балталарын иҙәнгә һалып, Гәүһәршат менән бергә сығып китәләр.**

**Ҡушаҡ.** Күрәзәче яңылышмы: Яуыз Иван, чынлап та, безнең өскә килергә ҡүәт жыя...

**Сафагәрәй** *(ыргып тороп).* Йәнузаҡларыңны ал да дәррәү Арча яғына жилдерегез — хан ғәскәре тупларға! Жәһәт!

**Ҡушаҡ сығып йүгерә. Албырғанып торған хан эргәһенә ҡайнағаһы Юныс инә.**

**Юныс.** Был ни хәл, кейәүем, һарайыңда һаҡсы юҡ? Сәсе-башы ялбыраған Гәүһәршат ҡына һине ләғнәтләп уҙҙы.

**Сафагәрәй.** Гәүһәршатмы? Битемә ҡара яғып китте, ҡәһәр төшкөрө...

**Юныс.** Ысынлап та, кейәүем, күҙ-башың ҡара янған, аларған. Хандың ханына боҙоҡ булыу килешмәç. Ҡош-ҡорт күҙенә салынмаçың элгәре, йыуыныуханаңа кер, көҙгөгә баҡ та баш-күҙ ал.

**Сафагәрәй.** Ярар, ҡайнағам, ярар. *(Кереп китә).*

**Икенсе ишектән Булат бәк башын һона.**

**Булат бәк.** Олаҡтымы? Тәһәрәт алырғамы?

**Юныс.** Эйе.

**Булат бәк.** Тәүәккәлләдек! Хәйерле сәғәттә, изге ниәттә! *("Йылт!" итеп йыуыныуханага инеп китә).*

**Юныс.** Хәл ҡылдыҡ!

**Йыуыныуханала дөбөр-шатор нимәлер ауғаны ишетелә, иҙән уртаһында ҡатып ҡалған ағаһы эргәһенә Сөйөмбикә инә.**

**Сөйөмбикә.** Абау, ни булды унда, ағайым? Ниҙер гөрһөлдәп ауҙы... Сафагәрәйем ҡайҙа?

**Юныс.** Шунда инде, ҡайҙа булһын! Иçерек бит, һөрлөгөп йығылғандыр.

**Сөйөмбикә.** Иçерек? Әле генә ап-айныҡ ине бит. Уф йөрәгем... Артынан инәйек!

**Юныс.** Хан артынан инеп йөрөү ярамаç. Хәҙер үҙе Айҙай балҡып килеп сығыр, бошонма.

**Булат бәк** *(йыуыныуханан сыгып).* Бу ни хәл, ханыбыз аяҡ сузған... Йыуыныл ҡына торғанында жан биргән...

**Сөйөмбикә ҡысҡырып илай, кешеләр йүгерешә.**

**Ҡолшәриф.** Жылама, сөйөклө ханбикәм, жылама. Аллаһ Тәғәләнең хаҡ тәҡдиредер. Үтәмешгәрәйеңне хан итеп иғлан ҡылырмыз. Ул балиғ булғанғача, ханлыҡ берлән үзең идара ҡылырсың... *(Ҡултыҡлап алып сыгып китә).*

## 7-нсе сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1551 йыл. Мәскәү батша һарайының тәхет залы, йәш батша яуыз Иван илселәрҙе ҡабул ҡылырға тейеш. Батша тәхетенең һул ҡул яғында ике кресло (батшаға яҡыныраҡ — Елена шәүләһе, арыраҡ батшабикә Анастасия ултырырға тейеш); уң ҡул**

**яғында бер кресло (митрополит Макарийҙың урыны). Иван үҙт еҡ, төпкө ике ишектән бер юлы Анастасия һәм Макарий керә, тәхет алдына үтеп, аяғөҫтө иҫәнләшеп һөйләшә. Ике янда ла ишектәр: береһе оло ишек (илселәр инергә), икенсеһе кесерәк — батша ишеге. Ярым ҡараңғылыҡта батша ишегенән инеп килеүсе мәрхүмә елена шәүләһе күренә, тегеләрҙең һөйләшеүен тыңлап тора. Тора-бара шәүләлегенән уҙып, тереләрсә аралаша башлай. Ике ҡатын әрепләшкәндә Макарий тын ҡалып, ҡулындағы кескәй Инжилына йомолоусан.**

**Макарий.** Ҡхым, ҡхым, хәйерле көн, бөйөк батшабикә.

**Анастасия** *(ҡырыҫ ҡына).* Хәйерле.

**Макарий.** Һаулыҡҡайың арыумы, бөйөк батшабикә, ул-был ереӊ ауыртмаймы?

**Анастасия.** Уныһын бөйөк батшаңдан һораш, атаҡай. Минеӊ ҡайһы ерҙәремде ауырттырғанын ул белә.

**Макарий.** Ҡхым, ҡхым... Батша ҡулы ҡағылған тән тамуҡта янмаясаҡ.

**Анастасия.** Ул һин әйткән тамуҡҡа барып еткәнсе, быныһында көл булырмын, ахырыһы.

**Макарий.** Тәүбә-тәүбә... *(тирә-ягына ҡарана).*

**Анастасия.** Атанан күргән — уҡ юнған, тиме әле ҡырағай башҡорт Семеон Бекбулатович? Хаҡ әйтә, стервец, гәрсә поганый булһа ла.

**Макарий.** Ул инде поганый түгел, мин уны суҡындырҙым.

**Анастасия** *(уйланып).* Иванымдың шаҡшы атаһын әйтәм... мәрхүм бөйөк кенәз Василийҙы...

**Елена** *(яҡынлай биреп).* Тотондо инде, тотондо ҡайнатаһы менән ҡайнанаһының һөйәктәрен сәйнәргә.

**Анастасия.** Ҡатындан туймаҫ айғыр булған, тинеләр... Никахлыһы өҫтөнән йөрөп ҡырҡ кәнизәкте быуаҙытыуы етмәгән, законлы ҡатыны Соломония Сабурованы теге Макар быҙауҙарын ҡыуаламай торған донъя ситендәге монастырға бикләтеп, һарай кәнтәйе елена Глинскаяға законһыҙ рәүештә ҡушылған...

**Макарий** *(үҙ алдына).* Тәүбә-тәүбә! Кенәз Андрей Курбский был хаҡта дөрөҫ шикәйәтләй: "И тогда зачался нынешний Иоанн наш, и родился, в законопреступлению и во сладострастию, лютость"... Йәғни ҙә ки ошо Иван батшабыҙҙың яуызлығы ана шул гөнаһлы яралыуынан килә... Кисер мине, Хоҙай *(суҡына).*

**Елена** *(ярһып, Анастасияға).* Һин үҙең кәнтәй! Ун биш йәше лә тулмаған Иванымдың дыуамал оторогона йәбешеп сыҡтың!

**Анастасия** *(иғтибар итмәй).* Ҡайным Василийҙы әйтәм. Һылыуҙарҙан һылыу Соломонияны *(Елена ягына бармаҡ төртөп)* бына кемгә алмаштырғанын күрегеҙ!

**Елена.** Әрпешийән! Һин һәпрәнән ни ерем кәм?!

**Анастасия.** Бот тиһәң — бото, күт тиһәң — күтт еҡ, тигәндәй, ылғый ҡорошҡан ҡолға. Нимәһенә генә ымһынды икән?

**Елена.** Хәстрүш! Һинең кеүек түшәлеп кенә ятманым. Һәр эшендә ныҡлы таянысы булдым. Беҙ бөтә Рүсиә ерҙәрен бергә туплау, Мәскәүебеҙҙе Рүстең мәркәзе ҡылыу өсөн йәнебеҙҙе аямайынса көрәштек.

**Анастасия.** Ха-ха-ха! 1521 йылда Ҡазандың поганый ханы Сәхибгәрәй менән Ҡырым поганыйы Мөхәммәтгәрәй хан Мәскәүгә дөрөп килгәндә ни эшләнегеҙ? Ҡаланың һәм халҡының яҙмышын Хоҙайғол исемле поганый башҡорттан суҡынсыҡ кейәүегеҙ Петрға тапшырып, себендәй генә йәнегеҙҙе ҡурсалап, урмандағы бесән кәбәне аҫтында йәшенеп ятманығыҙмы? Рүсиәне Ҡырымға буйһондорған мәсхәрәле шартнамәгә ҡул ҡуйып, шул поганый Мөхәммәтгәрәй ханға тоғролоҡҡа ант итмәнегеҙме? Һарайығыҙҙа поганый Мөхәммәтгәрәй хандың һүрәтен изге иконаға йәнәш ҡуйып табынманығыҙмы? Ха-ха-ха!

**Макарий.** Етте-етте! Улары булды ла үтте, Хоҙайға шөкөр. Икенселәй ҡабатланмаһын өсөн, поганый баштарҙы күберәк киҫергә, тим.

**Елена.** Киҫте-е-ек, киҫте-е-ек! Ҡазан ерҙәрен йыл аралаш барып бөлдөрөүҙән тыш, үҙебеҙҙең аралағы боҙоҡбаштарҙы ла мөнтәп бөтөрҙөк. Кенәз Василий Шемячичты, Берсе-Бикләмешевте өйҙәрендә үк тураҡлап дөмөктөрҙөк; Шуйский, Воротынский, Максим Грек, Вассиан Патрикеев кеүек баш бирмәүсе баярҙарҙы әҙәм балаһы бармаҫ ерҙәргә һөрҙөк.

**Макарий.** Эйе... хатта митрополит Варлаамды ла...

**Елена.** Бөтәһе лә Рүсиәнең бөйөклөгө, бүленмәҫлеге хаҡына! 1510 йылда — Псковты, 1513 йылда — Волоцкий төбәкте, ә 1521 — 22 йылдарҙа Рәзән, Новгород-Северский кенәзлектәрен яулап алып Мәскәүгә ҡуштыҡ. Литва бөйөк кенәзлегенән Смоленскиҙы йолоп алдыҡ. Василийымдың ғүмере буйына өҫтөнән тимер көбәһе, башынан торҡаһы төшмәне, ҡылысын да сөйгә элгән сәғәттәре аҙ булды.

**Анастасия.** Уның ҡарауы Иваның ҡылысын һалмайынса менеп ята... таң атҡансы эттәй ыҙалап сыға. Анауы анаһы кеүек, мине лә ҡорошҡан ҡолғаға ҡалдыра инде... Уныһы ғына етмәгән, төн сыҡҡансы әллә нисә тапҡыр, ҡылысын шауҙырлатып, эргәмдән төшә лә, анаһынан ҡалған иҫке кресло алдында

тубыкланып, акылдан яҙғандай илай-илай доға кылып, анаһының шәүләһе менән һөйләшә.

**Елена.** Һин үҙең һерелдәк шәүлә! Тереләрҙән тере мин! Ниңә доға кылмаһын: атаһынан өс йәшендә генә калып, үҙем карап үҫтерҙем. Шуйскийҙарҙың, Курбскийҙарҙың хөсөтөнән ниҙәр генә күрмәнек! Нисәмә-нисә йылдар буйына бөтөн Рүсиә менән идаралыкты бына ошо иңдәремә йөкмәнем.

**Митрополит.** Изгелегең өсөн Хоҙай үҙе ярлыкаһын, анакай.

**Елена.** Кырым хандары әллә нисә тапкыр яндырып үтте Рүсте. Бигерәк тә поганый Казан теңкәгә тейҙе өҙлөкһөҙ. Ниһәйәт, уныһын ауыҙлыклап, поганый Сафагәрәй ханды кыуҙыртып, тәхетенә үҙебеҙҙең Касим курсак ханлығынан суска көтөүсебеҙ Йәнғәлиҙе ултыртып иркен һулағайнык, ике йыл үтер-үтмәҫтән үк, Кырым яклы поганыйҙар уның башына етеп, Мәскәүҙең кан дошманы Сафагәрәйҙе кабат хан яһанылар. Ояларын барып туҙҙырырға хәл юк ине — теште кыҫып түҙергә тура килде. Сөнки шул йылда кенәз Семен Бельский, окольничий Иван Ляцкийҙар Польшаға касып китеп, Сигизмунд королде беҙгә каршы һуғышка которттолар, ул килеп Гомелде алды, Радогоштың көлөн күккә осорҙо. Йыл оҙай һуғыштан һуң, сак солох төҙөшкәйнек, оторого калккан Семен Бельский тағы төрөк солтанына һатылып, төрөк-кырым ғәскәре менәнябырылды... *(Анастасияға).* Һинең кеүек, ат аяғындағы тышауҙай, батшамдың бот араһында уралып ятманым мин.

**Анастасия.** Аслан кемдәргә уралыуыңды беләбеҙ...

**Елена.** Ә бына һин, башкаларға уралмайынса ла, Иванымды мөрәхәтһендерә алмайһың. Күрербеҙ, бөтәһе алда әле.

**Анастасия.** Күрәҙәсеме әллә һин, гонаһ шомлого кәйнәм?

**Елена.** Үтәләй күрәм һине. Ха-ха-ха! Ана, бер дюжина көндәштәрең теҙелгән — бөйөк батшабыҙ, минең көҙрәтле улым, берәһе артынан икенсеһен алмаштыра. Никахлыларынан ғына ла Анастасия Романовна Захарьина-Юрьева, Мария Темрюковна Черкасская, Марфа Васильевна Собакина бер-бер артлы “теге донъя»ға эрәүәләр уның аша, ә Анна Алексеевна Колтовская менән Анна Васильчиковалар монастырға бикләтелгән. Ахыр килеп уларҙың бөтәһен Кремль һепереүсеһененең тол катыны Василиса Мелентьева алмаштырған. Ә һин кайҙа? Хи-хи-хи!

**Анастасия өндәшмәй, креслоһына сүгә.**

**Макарий.** Күрәҙәлек кылыу гонаһ, анакай!

**Елена.** Әммә алдыңдағын самалап эш кылыу һис тыйылмаған. Хатта поганый Казанда ла мәшһүр күрәҙәсе бар — уларҙың мәрхүм Ибраһим ханының

ҡыҙы, мәрхүм Мөхәммәтәмин хандың һеңлеһе Гәүһәршат. Күрәҙәләүҙәре бермә-бер тап килеп тора. Баяғы хәйерһеҙ утыҙ алтынсы йылда ул, бөтә Ҡазан халайығына шом һалып: "Күреһегеҙ: теүәл ун алты йылдан һуң Ҡазан ханлығы тамам юҡҡа сығасаҡ, Ҡазанды урыҫ аласаҡ!" — тигәйне. Ә был иһә Христос тыуған йылдан алып тап мең дә биш йөҙ илле икенсе йылда була, тигән һүҙ. Минең күрәҙәләүемә бермә-бер тап килә ул. Ҡыҫҡаһы, киләһе йыл Иваным Ҡазанды алғас...

**Макарий, Анастасия.** Бирһен Хоҙай, бирһен Хоҙай! *(Суҡыналар).*

**Елена.** Эйе, мең дә биш йөҙ илле икенсе йыл Иваным Ҡазанды алғас, минең күрәҙәлегемдең дөрөҫлөгөнә лә инанырһығыҙ бер юлы.

**Макарий.** Ә шулай ҙа...

**Елена.** Янама, янаһын янғанмын инде, ха-ха-ха! Бына һиңә лә, ҡарт дуңғыҙға, тамуҡ киҫәүе булаһы ғына ҡалды.

**Макарий** *(тертләп).* Ауыҙыңдан ел алһын, анаҡай. Изге Рүсиәбеҙ йөкмәткән бынауы изге тәремде *(муйынындағы тос алтын тәреһен тотоп һелкетә)* Хоҙайыбыҙ һыҙған тура юлдан арымай-талмай илтеү йәшендә әле мин. Шөкөр, быуындарым ҡатмаған, билем бәлйерәмәгән.

**Елена.** Күрәм, дуғалай бөгөлгәнһең, ә аяҡ-ҡулың, майланмаған арба күсәреләй, шығырлапмы-шығырлай... Эй был ғүмер, күҙ алдымдан нисәүегеҙ берәм-берәм эрәүҙе: Варлаам, Сергей атаҡайҙар һәм... бына инде һин, атаҡай... Тәрегеҙ, тим, шул ҡәҙәре ауырмы?

**Макарий.** Дәүләтебеҙҙең оло йөгөн йөкмәп барабыҙ, анаҡай. Әммә шуны баһалау, әжерен ҡайтарыу юҡ...

**Елена.** Бахырланма, атаҡай. Литваға хәрби сәфәрҙәрҙең, Ҡырымға сапҡындарҙың улъяларынан иң кәттәһен кем ҡуш услап ҡарманы? — Сиркәү. Былтырғы Ҡазан яуы табыштарының ҡалъяһын да кем һоғаланып һоғондо? — Сиркәү. Ашаған белмәй — тураған белә, тиҙәр баяғы поганый башҡорттар.

**Макарий**. Сиркәүгә ул бишләтә лә хәләлдер, анаҡай. Кем изге Рүсиәне Куликово һуғышына рухландырҙы? — Сиркәү. Яуыз Мамайҙы еңеүгә кем күтәрҙе? — Сиркәү. Поганый Ҡазанды алғанда ла тәре тотоп сиркәү алдан барасаҡ. Изге Константинополь ҡорамдарын үҙҙәренең поганый кәкре Айҙары менән вәхшәтләгән антихристарҙың тоҡомдарының һөйәге өҫтөндә бына ошо *(муйынындағы тәреһен тотоп һелкей)* изге тәре сафтары рәт-рәт ҡалҡынасаҡ! *(Суҡына).*

**Елена** *(суҡынып).* Бирһен Хоҙай, бирһен Хоҙай!

**Үҙҙәренең креслоларына ултырышалар.**

**Елена** *(ишек ягына ҡарап).* Иваным юҡсы һаман...

**Макарий.** Батшабыҙҙың эштәре зерә ҡуйы, анаҡай. Үҙең әйтмешләй, Ҡазанды аласаҡ батша бит. Әле генә килешләй абайлап үттем: Царь-колокол эргәһендә поганый Ҡазан ҡәлғәһенең ишаратын әтмәләгәндәр ҙә шунын өҫтөнә ғәскәр менән ябырылып, шау-гөр килеп, һуғыш уйыны уйнайҙар.

**Елена.** Эй Хоҙайым, бер аҙ тыйып торһаңсы шул уйындарын!.. Береһе башын яра, икенсеһе аяғын, ҡулын ҡаймылдырта...

**Анастасия.** Ҡәлғә башында тере татарҙы ишаратлап, холоптарымдың өҫтө-башы йыртыла, ҡабырғалары һына...

**Макарий** *(йылмайып).* Һуғыш һыныҡһыҙ булмаç. Ағас ҡырҡҡанда табы оса, тиҙәр бит. Ә бөгөн унда ҡәлғә башында ысын-ысындан казанский тере татарҙар тора, һеҙҙең холоптар түгел.

**Елена.** Абау! Ниндәй тере татарҙар? Әллә баяғы Сөйөмбикә тигәнегеҙ ҡаланы килеп баҫтымы?!

**Макарий** *(көлөп).* Хафаланма, анаҡай, Сөйөмбикәнең ҡулы ҡыҫҡарҙы хәҙер. Ҡазандағы беҙҙең яҡлылар ҡыҫҡартты. Шул уҡ күрәҙәсе Гәүһәршат, Бойорған Сәйет һәм башҡалар... Ә Царь-колокол янындағы ҡурсаҡ ҡәлғә башына әсир төшкән Ҡазан уғландарын баҫтырҙыҡ, Ҡырымдан , яңы хан һорарға китеп барғандарында тотолғандар... Таяҡ тығып болғатҡан йылан ояһы хәҙер Ҡазан. Кемде хан итергә, тип, анаһы — улын, атаһы ҡыҙын белмәй бер-береһен сағыша.

**Елена.** Ҡазан халҡы борон-борондан бушбоғаҙлыҡ ҡылыусан, бер-береһенә яла яғыусан ине шул.

**Макарий.** Сөйөмбикәгә лә улар табаҡ-табаҡ бысраҡ ауҙаралар икән. Сөйөмбикә үҙенең йәнуҙағы Ҡушаҡ менән уйнаш ҡыла, Ҡушаҡҡа ҡатын булмаҡсы, унын менән берләшеп, улы Үтәмешгәрәйҙе үлтермәксе, тип ғәйбәтләйҙәр, ти. Сөйөмбикәнең фармандарын кирегә һаплайҙар икән. Ә был беҙгә мас ҡына: олуғ батшабыҙ Иван Дүртенсе ғали йәнәптәре хәҙер, форсаттан оҫта файҙаланып, Ҡазан ҡаршыһында изге сиркәүле Зөйә ҡәлғәһен ҡороу, ғәскәр туплау ғәмендә...

**Елена** *(суҡынып).* Хоҙайым, хәйерлегә булһын инде...

**Анастасия.** Әйтәм бит, ҡылысын да һалмай, тип...

**Оло ишек артында шау-шоу, олуғ батша Ивандың тауышы: "Адашев, илселәрҙе елтерәт!" — "Хәҙер, олуғ батша ғали йәнәптәре!" Иван атлығып килеп инә, билендә — ҡылысы. Анастасия, Макарий урындарынан торалар, елена ҡуҙғалмай.**

**Иван** *(югереп килеп тәүҙә еленаның, шунан һуң Анастасияның ҡулын үбә).* Иҫәнмеһең, анаҡай. Иҫәнмеһең, кәләшкәй. *(Макарийҙың ҡулындағы тәрене үрелеп ялай).* Хуш килдең, изге атаҡай. *(Тәхетенә ултыра).*

**Елена.** Оҙаҡланың, көттөрҙөң...

**Иван.** Анаҡай, ҡылығым ҡаты булды.

**Макарий.** Ҡылысың үттеме һуң, хе-хе-хе...

**Иван.** Татар муйынынамы? Һе! Өсөһөнөң башын аяҡ аҫтарына бына ошолай *(елкәһенә ҡул төйҙәһен һелтәп күрһәтә)* — керт! — серек кәбеҫтә күсәнеләй ауҙарҙым. Башлыҡтарыныҡы тәгәрмәстәй тәгәрләне!

**Елена.** Хоҙайым, кисер гонаһтарыбыҙҙы! Балаҡай, атаҡайың ундай уҡ түгел ине...

**Иван.** Һе! Атаҡайым Ҡазанды ла алмаған шул. Һеҙ, ярай, икегеҙ тиң теге донъяға эрәүҙегеҙ ҙә ҡотолдоғоҙ, ә мин алты йыл буйына Ҡазан ҡурҡынысы аҫтында яуыз опекундарым ҡулында интектем...

**Макарий.** Әммә бирешмәнең — ҡоростай сынығып өлгөрҙөң, олуғ батша ғали йәнәптәре.

**Иван.** Әлбиттә! Андрей Шуйскийҙың башын киҫтерттем, әшнәләрен әҙәм аяғы баҫмаған яҡтарға олаҡтырттым. Хоҙайға шөкөр, ҡорос ҡылысым ҡулда. Теңкәгә тейгән поганый Ҡазандың да, Ҡырымдың да башына етәсәкмен!

**Елена.** Яҙа һелтәнеп ҡуйма, бер үк, балаҡай...

**Анастасия.** Әйтәм бит...

**Макарий** *(бүлдереп).* Ә мин әйтәм, Хоҙайыбыҙҙың изге сәғәте һуҡты! Икенсе изге Византияның антихристарҙан ҡон алыу ҡылысын олуғ батшабыҙ Иван Дүртенсе ғали йәнәптәре ҡулына Христос үҙе тотторҙо! Изге ҡылыс!

**Иван** *(ҡулын, алдатҡыс нәмә суҡландырҡандай, югары тәңгәлдә һелкеп).* Һәм ҡалъя, изге атаҡай, һәм ҡалъя! Ошо көндә йөҙәрләгән татар бәге, муллалары, поганый Ҡазандарынан ҡасып килеп, минең усымды ялай. Ҡазан муйынына ҡылысымды тиҙерәк сабыуымды һорай. Шанлы ғәскәрем менән барып Ҡазанды алышырға ант итә. Табынымдан ҡалған ваҡ-төйәк ҡалъяға ана шулай һатып та алам мин ул канальяларҙы!

**Анастасия.** Өйөр-өйөр килеп һатылалар шул. Казанскийҙарҙы әйтәм. Намыҫтары юҡ икән мөртәттәрҙең.

**Иван.** Бото һуҡыр тин ул поганый намыҫының! *(Ишек ягына).* Кенәз Петр Серебряный, килтер әле поганый ярлыҡтарын!

**Фолианттар тотоп талмас Петр Серебряный керә, Иван тәхете һәм Макарий креслоһы араһына баҫа.**

**Петр.** Тыңлайым, олуғ батша ғали йәнәптәре.

**Иван.** Талмаслап уҡып ташла әле баяғы бәғзе бер һайланма урындарын.

**Петр.** Баш өҫтө, олуғ батша ғали йәнәптәре. Бына Ҡазан мосолмандарының Бойорған Сәйетенең, йәғни үҙебеҙҙең изге атаҡай митрополит Макарий дәрәжәһендәге дин башлығының һәм йәнә Илсыман бәк, Ғабдулла Бахши тигән ил тотҡаларының бөйөк батшабыҙға ярлығы. Уҡыйым: “Ханыбыҙ Сафагәрәйҙе алып ташлар өсөн ғәскәреңде ебәрһәң, Ҡазан ҡапҡаларын асып ҡуйырбыҙ... Әммә кәрәк-яраҡтарыбыҙға аҡсабыҙ юҡ. Илсең аша беҙгә көмөш тәңкәләр ебәреүеңде бик үтенеп һорайбыҙ”...

**Иван** *(ҡул һелтәп).* Сафагәрәйҙәре дөмөктө инде, баҡыры ла ярап ятыр.

**Петр.** Башҡорттарҙың нуғай тигән Бәләкәй урҙаһынан, Йософ кенәздең улы Ғәли мырҙанан: “Һинең хаҡыңа Ҡырым өҫтөнә яу йөрөнөм... Миңә кеш тун ебәрһәң ине”...

**Иван.** Һыуыр тун да еткән.

**Петр.** Ә бына нур урҙанан — Исмәғил кенәздең үҙенән: “Беҙгә яу булған Ҡазанды тар-мар ҡылабыҙ, һин дә яу сапһаң ине... Мин һинән ҡара төлкө бүрек теләйем”...

**Иван.** Быныһына бүрек янына тун да ҡушып бирегеҙ.

**Петр.** Белекбулат тигәндәре: “Һинең өсөн Ҡазан менән һуғыштым... Аҫ тун менән ҡорос көбә кәрәк ине”...

**Иван.** Ҡырым үләкһәләренән һалдырып алған тутыҡ көбәләрҙең береһен ебәрегеҙ.

**Петр.** Арыҫлан уғландың ярлығы: “Ҡазан һеҙгә яу булған кеүек, беҙгә лә яу. Мин хәҙерендә Ҡазанды яуларға барамын... Миңә алтын ялатылған ҡылыс, һыуһар тун, балыҡ теше, ролдуға ебәрһәң ине”...

**Иван** *(ҡул һелтәп).* Ярар, етәр. Ас ҡорһаҡтары тулмаҫ. Ә шулай ҙа ҡатҡан-ҡотҡан киҫәктәрҙе ырғыта торорға кәрәк. Эт ауыҙына бер һөйәк, ти бит башҡорттар үҙҙәре.

**Елена.** Өргән һәр эткә ҡалъя ырғыта башлаһаң, атаҡайыңдың утыҙ йыл буйына бөртөкләп йыйған ҡаҙнаһы ла етмәйәсәк.

**Макарий.** Эйе, бөйөк батшам. Эйелгән башты ҡылыс сапмай, тиһәләр ҙә, ул эйелгән баш-поганыйҙарҙың тора-бара баш күтәреүҙәре лә ихтимал. Дәһшәтле Мамай яуҙарын онотмайыҡ.

**Елена.** Атаҡай Макарий хаҡ әйтә. Заманында Рүсиәгә баш эйеп килгән поганый башҡорт Олуғ Мөхәммәт тигәндәре аҙаҡ Ҡазанды бина ҡылды ла ҡан дошманыбыҙға әйләнде.

**Иван.** Уның ҡарауы ҡазанлылар шул Олуғ Мөхәммәт хандың бүләре Илһам ханды беҙгә башы-тояғы, нәҫел-нәсәбе менән Иуданың утыҙ көмөш тәңкәһе

хаҡына һатып ебәргәндәр... Ә хәҙергеләре уғата ҡомһоҙораҡ: үҙ ҡорһаҡтарын күпәйтеү хаҡына, ханды ғына түгел, бөтә ханлыҡты ла һатырға әҙер...

**Петр.** Олуғ батша ғали йәнәптәре, әгәр рөхсәт ҡылһағыҙ, ошо урында мин фәкирегеҙ ҙә ҡыҫылырға баҙнат итәм: "Татар — атаһын һатар", тигән мәҡәл йөрөй Ҡазандың үҙендә үк...

**Иван.** Афарин, кенәз, афарин!

**Адашев Алексей инә.**

**Адашев** *(баш эйеп).* Олуғ батша ғали йәнәптәре, Ҡазандан, башҡорттоң ңур һәм Бәләкәй урҙаларынан илселәр килеп етте, керергә сират торалар.

**Иван.** ңур урҙанан башлат.

**Адашев.** Баш өҫтө, олуғ батша ғали йәнәптәре *(сығып китә).*

**Оло ишек асылып, Адашевтың иғланы яңғырай: «ңур урҙа кенәзе Исмәғилдән илселәр — Байтирәк бей менән Тимер уғлан!" Илселәр тәхеттәге Иван ҡаршыһына килеп итәғәтле баш эйә.**

**Байтирәк.** Көн-Өфө ерҙәренең батшаһы...

**Тимер** *(әлеп алып).* Эбер-Себер ерҙәренең батшаһы...

**Икеһе бер ауаздан:**

...һәм бөтә Ҙур урҙаның яҡты көнәсәһе Исмәғил кенәздән Мәскәүҙең һәм бөтә Әрәсәйҙең мәртәбәле олуғ батшаһы Иван ғали йәнәптәренә һәм бөтә Әрәсәй халайыҡтарына бөтә башҡорт халайыҡтары исеменән ҡоростай иҫән-аманлыҡ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәхет-бәрәкәт, илегеҙгә именлек, уңышлы эштәр теләген еткереп, игелекле үҙ ҡулығыҙға Исмәғил кенәздең ярлығын тапшырабыҙ. *(Иван өндәшмәй ала ла эргәһендәге Петрга бирә).*

**Байтирәк.** Исмәғил кенәз, бынан тыш, телдән еткерергә лә бойорҙо: үҙегеҙ беләһегеҙ, башҡорт иле борондан уҡ урыҫ иленә таяныс һәм дуҫ булырға тырышты. Башҡорт иле урыҫ иленә тоҫҡалыусы татар-монгол яуҙарына ла кәртә һәм ҡалҡан булды. Ошо көндәрҙә лә башҡорт иле көнсығыштан темеҫкенеүсе манжур һәм ҡытай баҫҡынсыларын, аҙғын ҡаҙаҡ урҙаларын урыҫ иленә үткәрмәй тотҡарлап тора. Әммә беҙҙең ике араға эренләткес шырау булып ҡаҙалған, башҡорт-урыҫ дуҫлығына зыян килтергән фетнәләр ояһы Ҡазан бар. Олуғ кенәз үҙенең шанлы эштәрендә бына шул хаҡта уйланһын ине, тине бөйөк Исмәғил кенәз. *(Иван башын һелкеп ризалығын белдерә).*

**Тимер.** Исмәғил кенәз һинең менән ихлас дуҫлығының билдәһе итеп һәм ғәскәреңдең иң төп ихтыяждарын ҡәнәғәтләндермәккә ҡулдан килгәнсә өлөш керетәйем, тип, беҙҙең менән бергә илебеҙҙең оло сауҙа каруанын — дүрт мең дә ете йөҙ һатыусыһын юлландырҙы. Улар әле Коломнала көтөп тора.

**Иван.** Хуп! Тауарҙарығыҙ ниндәй?

**Байтирәк.** Әйтәйек, һыбайлы ғәскәрегеҙгә кәрәкле илле мең баш яҡшы ат бар.

**Иван, Елена, Макарий бер-береһенә ҡәнәғәт ҡарашалар, Анастасия уйға сумып ултыра.**

**Иван.** Афарин башҡорттарым! Кенәз, бер ыңғай мыйыҡҡа урайыҡ: Исмәғил дуҫымдың был ярлығында ниҙәр бар?

**Петр** *(өҙөк-өҙөк иншалай).* "Ҡазан миңә йыл һайын ҡырҡ мең алтын, йөҙ батман бал, туғыҙ аҫыл тун яһағы түләп тора. Шуға ла ҡарамаҫтан, икебеҙҙең араһындағы эренләткес шырауҙы алып ташлар өсөн, һинең менән бергәләшеп яу сабырға әҙермен... Минең изге хыялым — Ҡазандың һиңә, һинең Ҡазанға баҫҡынлыҡтарын туҡтатып, ҡитғала ысын тыныслыҡ, дуҫлыҡ мөхите тыуҙырыу. Ул саҡ беҙҙең икебеҙҙең сауҙа каруандары юлы һеҙҙең аша Литвағаса, беҙҙең аша Ҡытайғаса имен һуҙылыр ине"...

**Макарий.** Ысынлап та, изге хыял.

**Елена.** Башҡорттар үҙҙәре үк әйтмешләй: "Иләнмәгән-һуҡмаған — ҡайным, һиңә киндер ыштан"Ға оҡшай шул...

**Тимер.** Бергәләшеп һуғайыҡ: буйлығын — беҙ, арҡауын һеҙ.

**Көлөшәләр.**

**Иван.** Әйткәндәй, беҙ белгән "нуғай" урҙалары булып та, ниңә үҙегеҙҙе "башҡорттар" тип атайһығыҙ?

**Байтирәк.** Сөнки беҙҙең дөйөм халыҡ — башҡорттар, ә әлеге ике урҙаны ла нигеҙләүсе бабаларыбыҙ — башҡорттоң Үҫәргән ырыуы...

**Тимер.** Эйе. Яҙыҡ динле боронғо үҫәргәндәр бүре-эткә табынғанлыҡтан, Сыңғыҙ хан яуындағы илбаҫар татар-монголдар уларҙы "нуғай" йәғни, улар теленсә, "эт" тип атағандар...

**Байтирәк.** Шуны көллө тирә-яҡ ҡәүемдәр ҡабул ҡылып, көллөбөҙгә Нуғай урҙаһы исемен йәбештергәндәр...

**Тимер.** Һеҙ-урыҫтарҙың ләҡәпләүенсә, алман-кармандар ҙа немец — йәғни "телһеҙ" булып йөрөгән кеүек...

**Башҡорттарҙан башҡа бөтәһе лә хахылдап көлә.**

**Иван.** Ҡәҙерле башҡорттарым, Исмәғил дуҫыма ярлыҡ яҙып өлгөрткәнсе, ҡунаҡһарайҙа ҡунағым булып тороғоҙ.

**Байтирәк, Тимер.** Рәхмәт! Баш өҫтө, тәҡсир! *(Икенсе ишектән сығалар).*

**Оло ишек асыла, Адашевтың ауазы: "Бәләкәй урҙа кенәзе Йософтан илселәр — Байһуңғар бей менән Үҫәргән уғлан!" Илселәр инә, баяғылай итәғәтле сәләмләп туҡтала.**

**Үҫәргән.** Аҡтүбә һәм Һарайсыҡ ерҙәренең батшаһы...

**Байһуңғар.** Һәм Әстерхан ерҙәренең батшаһы...

**Икеһе бер ауаздан:**

...һәм бөтә Бәләкәй урҙаның яҡты көнәсәһе Йософ кенәздән Мәскәүҙең һәм бөтә Әрәсәйҙең мәртәбәле олуғ кенәзе һәм батшаһы Иван ғали йәнәптәренә һәм бөтә Әрәсәй халайыҡтарына бөтә башҡорт халайыҡтары исеменән тап-таштай сәләмәтлек, урғылып сыҡҡан шишмәләй бүҫкәрмәҫ ырыҫ-бәхет, ил именлеге, бәрәкәтле хәрәкәттәр теләгеп еткереп, Йософ кенәздең ошо ярлығын игелекле үҙ ҡулыңа тапшырабыҙ. *(Иван ярлыҡты ала ла Петрға тоттора).*

**Үҫәргән.** Заманында һинең мөхтәрәм атаң олуғ кенәз ғали йәнәптәренә уның литва һуғышында оло хеҙмәттәр күрһәткән, олуғ кенәз Василий ғали йәнәптәренән яҫауыл дәрәжәһен алған Ябынсы Яҫауылдың улы буламын һәм һин ғали йәнәптәренә ла атайым һымаҡ уҡ хеҙмәт итергә әҙермен!

**Иван.** Рәхмәт, рәхмәт. Инде килеп минең менән бергә Ҡазанды алышһаң, полковник та булырһың. Шундай данлы атайың ҡайҙа хәҙер? Үҙенең Ҡасанҡый-Сала ҡасабаһында аҡ һаҡаллы бей булып ғүмер һөрәме?

**Үҫәргән.** Ҡазан ҡалаһына яу башы булып китте ул. Унда уны Япанча бәк тип беләләр.

**Иван.** Йәл, йәл... Ҡазанға китеүе, тим... Атайыңа сәләм әйт: беҙҙең яҡҡа сыҡһын һәм, шанлы атаҡайыма тоғро хеҙмәт иткәне кеүек, миңә лә хеҙмәт итһен. Ҡуш усы тулы алтын да көмөш, ауыҙ-мороно бал да май булыр.

**Үҫәргән.** Баш өҫтө, әйтермен.

**Байһуңғар.** Ә мин — һин олуғ батша ғали йәнәптәренә итәғәтле һәм изге уйлы Әстерхандың Ямғырсы хан улымын. Беләһең, ханлығыбыҙ һин олуғ батша ғали йәнәптәренең теләктәшлеһе Йософ кенәз урҙаһы менән берлектә. Әммә

Төркиә солтаны Сөләймән, һәммәбеҙҙе үҙ ҡулы аҫтына ҡармаларға яҫҡанып, өҫтөбөҙгә Ҡырым сиреүен һөстөрә, илебеҙгә үлем, бәлә-ҡазалар килтерә...

**Иван.** Һин әйткән ул Төркиә — Рүсиәнең дә ҡан дошманы. Бергәләгән — яу ҡайтарған, тигәндәй, бер төптән эш йөрөтһәк, Төркиәнән дә үс алырбыҙ, иншалла.

**Үҫәргән.** Беҙҙең Бәләкәй урҙа, үҙең беләһең, Бохара менән уңышлы сауҙа итә. Әммә беҙҙең Әрәсәйгә сығарырҙай аҫыл малдарыбыҙ ҙа мул: өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү һарыҡ, ҡаҡлаған һәм тоҙлаған батша балығы, яйыҡ йылғабыҙ башында йыуып алынған алтын ҡомо... Илдәребеҙ бәрәкәтенә ике-ара хеҙмәттәшлекте үҫтерергә ниәтләп, көнәсәбеҙ Йософ кенәз һынамаҡҡа беҙҙең менән кесе каруан юлландырҙы, унда ике йөҙ һатыусы, өс мең баш яҡшы ат, байтаҡ алтын ҡомо бар.

**Елена.** Бәрәкалла, бәрәкалла! Алтын ҡомона ла эйә табылыр.

**Байһуңғар.** *Ләкин,* ғәфү итегеҙ, Дон буйында боҫоп ятмыш казактарығыҙ шашынды. Юлбаҫарлыҡ ҡылып, каруандарыбыҙҙы талайҙар.

**Үҫәргән.** Эйе шул. Беҙҙең өсөн Мәскәү юлы — яу юлына әүерелде. Ҡырым татарҙарының, Ҡазан татарҙарының йөҙәтеүе етмәгән, инде килеп урыҫ казактары ла кереште.

**Иван.** Казактарыбыҙҙы ауыҙлыҡларбыҙ. Ә Ҡырымдың да, Ҡазандың да татарҙарын бергәләшеп дөмөктөрһәк шәп булыр.

**Үҫәргән.** Быйыл да шул Дон бөгәлендә каруаныбыҙҙы талағандар, кешеләребеҙҙе ҡырғандар. Тере ҡалғандары хәҙер һинең ҡулда икәнлеген ишеттек. Йософ кенәзебеҙ шул хаҡта ла ярлығында ентекле яҙған, әммә телдән дә иҫкәртергә лә мәртәбәле яуабыңды үҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән ишетеп ҡайтырға ҡушты.

**Иван** *(Петрга әйләнеп ҡарап).* Кенәз, мәғлүм итсе беҙгә Йософ дуҫымдың алтын һүҙҙәрен.

**Петр** (урыны-урыны менән тәржемәләй). “Минең дуҫым олуғ батша Иванға Йософ кенәздән сәләм ебәреп, һүҙем шул: Ҡазан бәктәре бынан элек Сафагәрәй ханды ҡыуалап, һинең атаң Василий кенәздән Шәйехғәли хандың туғаны булған Йәнғәли ханды Ҡазанға хан итеп алғайнылар, Ҡазандың яҡшы кешеләрен беҙгә ебәреп, беҙҙең илә яҡынлашыуҙы үтенгәйнеләр. Тәңренең тәҡдире буйынса, Йәнғәли ханға үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙ Сөйөмбикәне биреп, ҡоҙа булышҡайныҡ. Сафагәрәй хан Ҡазандан ҡасҡас, Булат бәк, йорт исеменән уға ярлыҡ ебәреп, уны Ҡазанға ҡайтарҙы. Һинең дуҫың, беҙҙең кейәүебеҙ булған Йәнғәлиҙе үлтерҙеләр; минең ҡыҙымды Сафагәрәйгә бирҙеләр. Сафагәрәй беренсе мәртәбә Ҡазанға килгән сағында уның менән бергә ни бары утыҙ кеше генә килгәйне. Шунан һуң нисәмә йылдар үткәс, әллә ни саҡлы ялпы-яланғас Ҡырым сиреүен саҡырып

килтерҙе. Ҡазандыҡыларҙы төрлөсә ҡыҫа башланы. Ҡазан кешеләре унан шул тиклем ҡыҫынҡылыҡ күреүгә сыҙай алмайынса, икенсе тапҡыр ҡыуаланылар уны... Әммә ләкин өсөнсө тапҡыр уны Ҡырымдан саҡырып алып тәхеткә ултырттылар... Көтмәгәндә уның үлемен ишеттек... Хәҙерендә беҙҙең һиңә тоғро һүҙебеҙ шул: киләсәктә һинең илә дуҫ булһаҡ ине. Шәйехғәли хандың туғаны Йәнғәли илә яҡынлашҡайныҡ. Ләкин уға Алланың ошондай асы яҙмышы иреште. Бына хәҙерендә беҙ һинең тоғро дуҫың Шәйехғәли илә дуҫлыҡта һәм яҡынлыҡта булаһыбыҙ һәм дә уға үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙҙы бирәһебеҙ килә...

Быйыл беҙҙең кешеләребеҙ Мәскәүгә һатыу итергә барғайнылар. Ҡайтҡан саҡтарында Тында тороусы һеҙҙең казак һәм сәврүктәрегеҙ ябырылып, уларҙың ҡайһыларын ҡырып, аҡсаларын талағандар, ҡайһыларын тотоп һиңә илткәндәр. Һинең янда тере булған беҙҙең кешеләребеҙ, төркөм башында Ҡорат Толобай, Буранocc, Йәнсура, Байкилде, Намаҙ, Көнтыуған, Хафиз булдығы хәлдә, ун бер кеше. Бына мин ошо кешеләрҙе сапҡыныбыҙ Байһуңғар илә бергә ебәреүегеҙ хаҡында һиңә баш орамын... Минең өс йөҙ мең яуым бар. Һигеҙ улым бүленеп, быларҙың һәр береһенең унар мең яуҙары бар. Шулар һис бер ваҡыт һинең кешеләрең өҫтөнә барғандары юҡ”...

**Иван** *(тамаҡ ҡырып).* Ҡһыммм, аңлашылды... Әйтелгән кешеләрҙең барыһы ла иҫән-һау, туранан-тура минең ҡарамағымда. Баштарынан бер бөртөк сәстәрен дә төшөртмәй, үҙегеҙ менән ҡайтарып ебәрербеҙ. Каруаныгыҙҙы талаған һәм яуызлыҡ ҡылған казак һәм сәврүктәрҙең кәрәгенә бирербеҙ. Хөрмәтле илселәр, әйтерегеҙ бөттөмө?

**Үҫәргән.** Олуғ батша ғали йәнәптәре, кисерегеҙ, бер генә һорауым бар.

**Иван.** Йә, тыңлайым.

**Үҫәргән.** Көнәсәбеҙ Йософ кенәз ярлығында һаналмыш кешеләребеҙ араһында Бәкәтәр ҡалаһы азаматы — яҡын туғаным Йәнсура ла бар икән. Шуның терелеген үҙ күҙҙәрем менән күрергә ине, әгәр ҙә мөмкин булһа...

**Иван** *(оло ишек яғына).* Керетһендәр, әйтегеҙ! *(Үҫәргәнгә ҡарап).* Дондан Мәскәүгәсә ҡаңғырып килеп еткәнсе, азаматығыҙ шаҡтай таушалған, әлбиттә...

**Елена.** Үҙегеҙ үк әйтмешләй, юл аҙабы — гүр ғазабы бит...

**Петр.** Әммә эсендә йәне бар — шап-шаҡтай.

**Йәнсураны алып керәләр. Йәнсура аптырап ҡарап тора ла Үҫәргәнде ҡосаҡлай.**

**Йәнсура.** Һаумы, ағайым! Һинең яҡты йөҙөңдө лә күрер көнөм бар икән!

**Иван.** Туғандарҙың бәхетле минуттары! Ҡунаҡһарайға ҡайтығыҙ, туйғансы һөйләшегеҙ.

**Үҫәргән, Байһуңғар, Йәнсура** *(бер ауаздан).* Аллабыҙҙың ҙур рәхмәте яуһын һиңә, олуғ батша ғали йәнәптәре! *(Гөрләшеп сыгып китәләр).*

**Макарий.** Вәт басурмандар, уларҙа ла кешелек хисе бар икән!

**Иван.** Шуға күрә лә әйтәм бит, ҡалъя һоғондороу ҙа яҙыҡ түгел.

**Елена.** Ай-һай, еткерә алырһыңмы?

**Иван** *(ҡылысын һура биреп, кире тыга).* Етмәгәненә ҡылысым етә минең!

**Оло ишектән Адашевтың тауышы: "Поганый Ҡазан илселәре Ҡолшәриф мулла менән төмәнлек Йәнбарис Растов, Хоҙайғол уғлан менән Мурали бәктәр олуғ батша ғали йәнәптәренең итек саңдарын ялап баш орорға килгәндәр, үткәрергәме?" Ултырҙаштар бер-береһенә мәғәнәле ҡараша.**

**Иван.** Инһендәр!

**Әйтелгән дүрт илсе, йүгереп килеп, шыңшып илай-илай, Ивандың кәкре башлы ҡыҙыл итеге осона баш ора.**

**Иван.** Ҡалҡытығыҙ серек күсәндәрегеҙҙе, тыңлайым.

**Дүртеһе лә тубыҡлана, дүртеһе лә һүҙ башларға тырыша, буталыш.**

**Иван.** Берәмләп һәм сиратлашып һайрағыҙ.

**Ҡолшәриф.** Бөтөн Рүсиәнең олуғ падишасы, олуғ кенәзе булған мәрхәмәтле Иван Васильевич! Ҡазан жире Аллаһныҡы, шулай уҡ син олуғ кенәзнеке; без исә Аллаһның, шулай уҡ синең ҡолларыңмыз; син, падишаһымыз, безнең турада, шулай уҡ барча Ҡазан жире турасында ҡайғыртып, безгә падишаһ бирсәң һәм дә киләчәктә безгә ничек булырға кирәклекне аңғартсаң иде!.. *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йығыла).*

**Йәнбарис** *(ялгап).* Башларында Ходайғол уғлан һәм Мурали бәк булған хәлдә, бөтөн Ҡазан йорто, муллалары, сәйетләре, шәйехләре, шәйехзадәләре, муллазадәләре, имамлары, хажилары, хафизлары, бәкләре, уғланлары, мырзалары... *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йығыла).*

**Хоҙайғол** *(ялгап).* Эчкеләре һәм тышҡылары, йорттағы һәм йортноң тышындағы казаклары, шулай уҡ чуаш, чирмеш, муҡшы, тархан, мишәрләре вә бөтөн Ҡазан жире... *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йығыла).*

**Мурали** *(ялгап).* Син олуғ падишаһның аларны бағышлауыңны, аларға булған ачуыңны бөтөрөүеңне, Ҡазанға хан итеп үзеңнең дусың Шәйехғәлине

жибәрүеңне, Үтәмешгәрәй ханны исә, анасы Сөймбикә берлән бергә, үз яныңа Мәскәүгә алдыртуыңны үтенәләр... *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йығыла).*

**Иван.** Тимәк, Үтәмешгәрәй ханығыҙҙы һәм Сөйөмбикәне минең ҡулға башкөлләй тапшыраһығыҙ?

**Дүртеһе бергә.** Бирәбез! Аяҡ-ҡулларын бәйләп килтереп салабыз! *(Ҡабат йығылалар. Дүртеһе тиң баш ҡалҡытмай тик ята, тынлыҡ).*

**Иван.** Әллә мәреткә киттеләр инде... Адашев, төрт осаларына!

**Адашев елтерәп килеп, аяғы менән дүртиеһенә лә төртә лә кире китә.**

**Ҡолшәриф, Йәнбарис, Хоҙайғол, Мурали** *(берҙәм баш кәшкәйтеп, тубыҡланып, бер ауаздан ослайҙар).* Олуғлардан олуғ падишаһымыз, без ҡолларыңны рәхимле ярлыҡасаң иде, баш ороп без шул хаҡта табынабыз! *(Илашып, Ивандың аяҡ осона йығылалар).*

**Иван.** Тороғоҙ, иң бәхетле ҡолдарым булырһығыҙ. Мәскәү мәрхәмәте киң — ярлыҡау алырһығыҙ. Һеҙҙең кеүектәргә Рүсиә еренең уртаһынан Ай мәсетле Ҡасим ханлығын да ҡороп биргәнбеҙ. Барығыҙ, ҡайта һалып вәғәҙәгеҙҙе үтәгеҙ. Үҙегеҙ һораған Шәйехғәли ханды бирермен һеҙгә, хан итеп!

**Дүртеһе** *(бер ауаздан).* Мәрхәмәтле падишаһымыз, сезнең өчөн чәчебез берлән жир сеперергә әзербез! *(Эйелә-бөгөлә сығып китәләр).*

**Иван ырғып тора, иҙән уртаһына баҫа. Башҡалар ҙа торалар.**

**Иван** *(ҡанга буялып ҡыҙарган ҡылысын ҡындан һурып сыгарып, югары күтәреп айҡай).* Ур-ра! — Ҡазан минеке хәҙер! Ханлығын да, хандарын да башы-тояғы менән миңә һаттылар! Волганы аша сығам да поганый Ҡазанды алмайынса ҡайтмайым!

## Шаршау

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### 1-енсе сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: 1551 йыл. Ҡазан хан һарайының тәхетханаһы. Яҡшы кейендерелгән, алтын таж кейгән дүрт йәшлек хан Үтәмешгәрәй тәхетендә уйнап ултыра, янындағы креслола — әсәһе, ханлыҡ идарасыһы Сөймбикә, түбәһендә алтын башлыҡ.**

**Үтәмешгәрәй.** Әсәкәйем, тышта уйнағым килә.

**Сөйөмбикә.** Сабыр ит, ҡолонсаҡҡынам. Хан кешегә көйһөҙләнергә ярамай. Ханлығыбыҙҙың бер килке эштәрен бөтөргәс, баҡсала икәүләшеп уйнарбыҙ.

**Үтәмешгәрәй.** Ниндәй эш, бабайҙарҙың баштарын ҡыҫҡартыумы?

**Сөйөмбикә.** Көфөр һүҙ һөйләмә, улым. Хандың эше — баш ҡыҫҡартыу түгел, ә баш һандарын арттырыу, ил менән идара ҡылыу.

**Үтәмешгәрәй.** Ошо тәхеттә атайым бахыр ултырғанда кешеләрҙең баштарын ҡыҫҡартҡан, тамаҡтарын көмөш ҡойоп бөтәштергән, тиҙәр бит һуң. Ҡушаҡ абыйым әйтә.

**Сөйөмбикә.** Атайың иҫке хан ине, ә һин яңы хан булдың. Яңы хандың ҡылығы ла яңыса. Һәр нәмәлә тәртип булырға тейеш. Тәртип тупһанан башлана: бына атайың заманындағы айбалталы әзмәүерҙәр ҙә, ингән берәүҙең ҡотон осортоп, икеһе ике яғында һерәйеп тормай хәҙер. Тәхет ҡотон, ҡурҡыу түгел, һоҡланыу бәрәкәтләй ул.

**Үтәмешгәрәй.** Һоҡланыу тигәнең кем ул, эргәңдә гел уралған Ҡушаҡ абыймы?

**Сөйөмбикә** *(көлөп).* Эй ҡолонсағым, миңә түгел, хан эргәһенә керә бит ул, хан әмерен алырға.

**Үтәмешгәрәй.** Хан кем ул?

**Сөйөмбикә.** Һин үҙең, үҙең, ҡолонсағым. Башыңа алтын таж кейеп, хан булып ултыраһың да!

**Үтәмешгәрәй.** Хан ни тиһә лә, әмере үтәләме?

**Сөйөмбикә.** Һис һүҙһеҙ, еренә еткереп үтәлә.

**Үтәмешгәрәй.** Алайһа, Ҡушаҡ миңә хәҙер үк бер ус өрөк, бер ус Әстерхан сәтләүеге килтерһен.

**Сөйөмбикә.** Баш өҫтө, олуғ ханым. Ҡушаҡ!

**Ҡушаҡ** *(елтерәп инә).* Әү, ханбикәм?

**Сөйөмбикә.** Һине, ханбикәң түгел, ә олуғ хан үҙе саҡырта.

**Ҡушаҡ** *(Үтәмешгәрәйгә баш эйеп).* Тыңлим, олуғ ханым.

**Үтәмешгәрәй.** Хәҙер үк миңә бер ус өрөк, бер ус сәтләүек!

**Ҡушаҡ.** Йәғни... йәғни мәсәлән?

**Сөйөмбикә.** Хан әмере ҡыҫҡа: кисә Бохара каруаны килтергән емештәрҙең сифатын үҙе тикшереп белгеһе килә.

**Үтәмешгәрәй.** Бер аяғың бында, икенсеһе тегендә булһын!

**Ҡушаҡ.** Баш өстө, олуғ ханым! *(Елтерәп сығып китә).*

**Үтәмешгәрәй.** Күҙ асып йомғансы килтереп еткермәһә, Ҡушағыңдың башын киҫерменме икән? Әллә тамағына көмөш кенә ҡойорғамы? Их, ҡыҙғанам бит әле шуны...

**Тулы тоҡтар йөкмәгән ике әзмәүерҙе эйәртеп, Ҡушаҡ инә. Тоҡтарҙы тәхеттең ике янына ҡуялар.**

**Ҡушаҡ.** Рәхим итә күр, олуғ ханым. Бересендә — өрөк, икенчесендә — чәтләүек. Иң Юғары сифатлы, ләззәтле.

**Үтәмешгәрәй** *(һәр тоҡтан берәр ус алып, кеҫәләренә сумыра).* Ҡалай күп! Нисек ашап бөтөрәйем бер үҙем? Әйҙәгеҙ, күмәкләшеп мөнйөйөк!

**Килтереүселәр пырхылдашып көлә.**

**Сөйөмбикә.** Ханыбыҙ тикшермәккә өлгөләр алды. Ҡалғандарын ҡаҙнаға кире илтегеҙ.

**Әзмәүерҙәр тоҡтарҙы йөкмәп сығып китә.**

**Ҡушаҡ.** Тыңлим, тағын да ни бойороҡлар бар, олуғ ханым?

**Сөйөмбикә.** Күҙгә төшкән дегәнәк булды был урыҫтың Зөйә ҡәлғәһе. Нисек көл ҡылырға шуны!.. Шымсылар ебәрелдеме? Мәғлүмәт алындымы?

**Ҡушаҡ.** Алынды. Яуыз Иван Шәйехғәли ханны шул Зөйәгә беркеткән, киләчәктә Ҡазан ханы ҡылырға...

**Үтәмешгәрәй** *(Ҡушаҡҡа сәтләүек атып).* Һәй мәмәй ауыҙ! Ҡазан ханы мин, мин!

**Ҡушаҡ.** Һич сүзсез, һич сүзсез син үзең, олуғ ханым! *(Сөйөмбикәгә).* Атаҡайың Йософ кенәз дә килешкән шуның берлән. Шәйехғәлине Ҡазан тәхетенә менгереп, сине аның хатыны ҡылмаҡҡа димләгән... Киләсе йыл Яуыз Иван Ҡазанны алачаҡ, ди...

**Сөйөмбикә.** Ҡара ниәтен өҙөргә!

**Ҡушаҡ.** Һич шиксез!

**Сөйөмбикә.** Рәсәй менән килешергә лә дуҫлашып йәшәргә теләйбеҙ, тигән ярлығым Мәскәүгә ирешкәнме? Ул тарафтан ни хәбәр?

**Ҡушаҡ.** Ярлығың тапшырылған, әммә аннан жавап юҡ. Шунысы аныҡ мәғлүм: Яуыз Иван киләсе йыл яз башыннан уҡ Ҡазан өстөнә ҡузғалырға жыйына...

**Сөйөмбикә.** Атаҡайымдан ғәскәр һорап сапҡынсы ебәргәйнем...

**Ҡушаҡ.** Ғәскәр юҡ. Фәҡәт башҡырт азаматлары килә — Чулман суын кичкәннәр. Жанчура дигән башлыҡларыннан хәбәр бар.

**Сөйөмбикә** *(һиҫкәнеп).* Ә?! Йәнсура?

**Ҡушаҡ.** Эйе, Жансура. Нигә, танышың идеме әллә, ханбикәм?

**Сөйөмбикә.** Ә... юҡ... Бала сағымда шундай малай бар ине... һағауылдарға ныҡ иҫкәрт: тотҡарлыҡһыҙ үткәрһендәр Ҡазанға.

**Ҡушаҡ.** Баш өстө, ханбикәм.

**Сөйөмбикә.** Иншалла. Зөйә ҡәлғәһен алырға, урыҫ тамырын төбөнән киҫергә кәрәк. Илде ҡоралландырығыҙ.

**Ҡушаҡ.** Илне?! Ҡазна сай — сөңгө сатып алырлыҡ та аҡча юҡ.

**Сөйөмбикә.** Уф... Үтәмешгәрәйем бәлиғ булғансы тип йыйған алтын тәңкәләрем бар ине, алығыҙ.

**Ҡушаҡ.** Анысы — андый да ул, мона ҡәлғә диуарларыбыз жимерек...

**Сөйөмбикә.** Һипләгеҙ. Йәҙрә яуҙыртырға туптарҙы теҙеп ҡуйығыҙ.

**Ҡушаҡ.** Их ханым вә ханбикәм, аларын ҡайдан алиҡ соң?

**Сөйөмбикә.** Был ни һүҙ?! Ҡазан ханлығының суйын туптары, баҡыр туптары етерлек.

**Ҡушаҡ. Ж**итәрлек иде дә ул... Бәкләрең вә уғланнарың ул тупларны урысҡа сатып эчкән!

**Сөйөмбикә** *(урынынан ҡалкынып, әсенеп).* Ә?! Уф йөрәгем! *(Йыгыла башлай, уны Ҡушаҡ килеп ҡосаҡлап ала).*

**Үтәмешгәрәй** *(ыргып тороп).* Әсәкәйем, тәхетең дә, алтын тажың да кәрәкмәй! Был алтын таж тигәндәре бик ауыр! *(Башындагы тажды атып бәрә).*

**Ҡушаҡ.** Ханбикәм, ҡәдерлем, йөрәгеңә алма инде барсын да! Барысы да уңалыр!

**Тышта — дөбөрләү; ишек шартлап асыла, Гәүһәршаттың әсе тауышы: "Айбалталы мәхлүҡләр, тотҡарламағыз мине, ханға әйтәсе сүзем бар! Күрәзәчелек ҡылдым — барығыз да сатлыҡжан! Үтәмешгәрәй илә аның анасы Сөйөмбикәне Яуыз Иванға сатҡансығыз!"**

**Гәүһәршат** *(сәсе-башы туҙгыган хәлдә атлыгып керә, Сөйөмбикәне ҡосаҡлап торган Ҡушаҡты күреп, күҙен яман аҡайта).* Жәмәғә-ә-әт, ни күрәм?!. Көпә-көндөз

тәхетханада ханыбызның күзе алдында зина ҡылып яталар! Үз күзләрем берлән күрдем: Сөйөмбикә берлән Ҡушаҡ уйнаш ҡыла!

**Тышта шау-шоу, тауыштар:**

— Уйнашчыларны тотоғоз! Таш ороп үлтерегез!

— Юҡ! Сөйөмбикә берлән Үтәмешгәрәйне Иванға тотоп бирергә, Ҡушаҡның жанын жәһәннәмгә очорорға!

**Ҡушаҡ сығып ҡаса. Сөйөмбикә, улын ҡосаҡлап, тәхеткә әүшәрелә.**

**Сөйөмбикә** *(илап).* И Илаһым, күрәһеләрем бар икән... Ниңә тыуҙым был донъяға?!. Ниңә килдем ҡоҙғондар ояһына?!.

**Үтәмешгәрәй** *(сарылдап илай).* Әсәкәйем, илама...

**Сөйөмбикә.** Ҡушаҡ!

**Бөкөрәйеп бөткән Әбей инә.**

**Әбей.** Әү, ни булды, балаҡайым?

**Сөйөмбикә.** Үҙемдең форсатым юҡ, ҡолонсағымды, алып сығып, баҡсала уйната тор.

**Әбей баланы етәкләп сығып китә. Баштан-аяҡ ҡоралды Йәнсура инә.**

**Йәнсура.** Әссәләмәғәләйкүм, олуғ Үтәмешгәрәй хан! Аһ, тәхете буш икән дә... Хәйерле көн, ханбикә Сөйөмбикә!

**Сөйөмбикә** *(албырғанып).* Уй, кемде күрәм? Йәнсурам... һинме был?!

**Йәнсура.** Мин, мин, Сөйөмбикә һылыуым! *(Ҡосаҡларға итә, ләкин Сөйөмбикә этәрә).* Оло афәттәргә тарыуыңды ишеткәс, ете ер, ете һыу аша осоп килеп еттем.

**Сөйөмбикә.** Осоп барып ҡаршы ала алманым, ҡанаттарым ҡананы... Уф... Атайым ғәскәр ебәрҙеме, ебәрәме?

**Йәнсура.** Атайың Ҙур урҙаға Исмәғил кенәз ҡаршына барып ҡайтҡайны... Ике урҙа берләшеп, йөҙ егерме мең ғәскәр менән урыҫ өҫтөнә дөрөргә өгөтләгәс, Исмәғил кенәз яман итеп ажғырған. "Артыңды уйлап эш ҡыл! Яуыз Иванға яу асһаҡ, үлектәребеҙҙе күмергә кәфенлек тә етмәҫ!" — тип кире бороп ҡайтарған... Шунан һуң мин, үҙемдең иң ышанычлы азаматтарымды йыйып, һине алып ҡайтырға тип атлыҡтым. Төкөр был Ҡазанына — ҡоҙғондар ояһына! Йәмле Яйыҡ

буйҙарың, Һаҡмар буйҙарың һағынып-зарығып көтә һине. Әүәлгеләй, илебеҙҙең былбылы булып иң юғары талпынырһың, Үтәмешгәрәйеңде лә хур итмәбеҙ. Егет ҡорона кергәс, Аллаһ бойорһа, Сура олатайы кеүек, дер-һелкетеп Ҡазанды алып бирербеҙ, тәхетен ҡайтарырбыҙ... Остоҡ, былбылым! Ҡазан артында ҡарурманда азаматтарым көтә!

**Сөймбикә.** Эй Йәнсурам, Йәнсурам! Әле лә элеккеләй — егет килеш икәнһең. Ә күпме һыуҙар аҡты, елдәр иҫте... Сәстәребеҙгә сал да ҡуна башланы...

**Йәнсура.** Ә һин һаман былбылһың, йөрәгемә ҡунып һайраған аҫыл ҡошһоң, Сөйөмбикәм... *(Ҡосорға итә).*

**Сөймбикә** *(этәреп).* Юҡ, ярамай... Аҡҡан һыуҙар ҙа, елдәр ҙә кире ҡайтмаҫ... Хан анаһы, ил менән идара ҡылыусы мин, Йәнсураҡайым... Үтәмешгәрәйемдең тәхетен бәхетле ҡылырға бурыслымын!

**Йәнсура.** Ҡылайыҡ һуң!

**Сөйөмбикә.** Ханлығыбыҙға урыҫ-ҡандошман янай — миңә ғәскәр, ғәскәр кәрәк, Йәнсурам! Азаматтарыңды килтер, Йәнсура батыр! Ҡушаҡ батыр менән ҡушарлап ҡуш ҡанатым булырһығыҙ. *(Ишек ягына).* Кем унда, Ҡушаҡты саҡырығыҙ!

**Әбей инә.**

**Әбей.** Балаҡайым, Ҡушаҡ батыр юҡ инде... Фетнәселәрҙән өркөп, үҙенең Ҡырым сиреүен алып ҡасты.

**Сөйөмбикә.** Эй Раббым, ҡанатым ҡайырылды...

**Йәнсура.** Мин бер үҙем ҡуш ҡанатың булырмын. Әйҙә, остоҡ!

**Сөйөмбикә.** Юҡ! Үтәмешгәрәй хан китһә, Ҡазан ханлығы бөтә. Таш яуһа ла, беҙ бында ҡалырға тейеш.

**Йәнсура.** Алайһа, азаматтарымды килтерәм, фетнәселәрҙең йәндәрен йәһәннәмгә осорам!

**Сөйөмбикә** *(торайып).* Килтер!

**Йәнсура ашығып сығып китә. Сөйөмбикә, йөрәкһеп, ишекле-түрле йөрөй.**

**Сөйөмбикә.** Йәнсурам ҡалай үҙгәргән, сырайына һыр ҡунған... Хәйер, үҙем дә шулаймындыр... Икебеҙ ике ер ситендә... Йәшлегебеҙ киҫелде, гөлсәскәләй ҡороно... *(Йырлай, могайын, Сәлих Сәйдәшев көйө).*

Йәмле Яйыҡ буйҙарында

Ҡалды баллы таң ғынам.
Йәнем һөймәҫ сит илдәрҙә,
Ситлектәрҙә ҡаңғырам.

Аҡҡош инем йәйләүҙәрҙә,
Шоңҡар инем ҡышлауҙа.
Ҡанаттарым ҡайырылды,
Аяҡ-ҡулым тышауҙа.

Атаҡайым аҙаштырҙы,
Һатты ғәзиз башымды.
Алтын ситлек ҡыҫаһында
Ағыҙамын йәшемде.

Аҡ яулыҡ, зәңгәр шәл,
Үтә ғүмерем бигерәк жәл.
Баҙарҙарҙа һатыла торған
Малдар кеүек беҙҙең хәл...

**Ишек төбөндә шау-шоу, башы-күҙе аларғандарҙың бер төркөмө тәхетханаға бәреп керә. Араларында ғауғалы Мурали һәм Хоҙайғол, Ҡолшәриф, Петр Серебряный.**

**Мурали.** Ханбикә, выжт! Идаралығың тамам!

**Хоҙайғол.** Ҡайда Үтәмешгәрәйең?

**Әбей.** Бында, алып инеп киләм бит. *(Үтәмешгәрәйҙе етәкләп керетә).*

**Мурали.** Сөйөмбикә, Үтәмешгәрәй, тыңлағыз. Шушы мәлдән башлап сез хан да, идарачы да түгел. Тәхетхананы ябабыз. Ҡазан халҡы сезнең икегезне дә мәрхәмәтле олуғ патшамыз Иван Васильевичка тапшырырға ҡарар ҡылды.

**Ҡолшәриф.** Шәйехғәли хан ҡуйынына керәсең, яңадан ханбикә буласың!

**Хоҙайғол.** Көш-ш-ш, Мәскәүгә!

**Петр.** Эйе, мәрхәмәтле патшамыз Иван Васильевичның фарманы буйынча, сезне алырға килдем.

**Сөйөмбикә.** Аһ!.. *(Үкһеп-буҫлығып йығыла, уны күтәреп торғоҙалар ҙа, ике ягынан ҡултыҡлап, ишеккә ыңғайлаталар. Үтәмешгәрәй сарылдап илай, уга һарай ҡатын-ҡыҙҙары ҡушыла).*

**Әбей.** Йәмәғәт, сеү! Шым ҡалығыҙ! Ханбикәгеҙ сеңләп хушлаша!

**Тауыштар:**

— Ни ди? Чеңли, диме?

— Ни икән ул чеңләү? Безнең татарда юҡ ласа ул?

**Ҡолшәриф.** Һәй хәсисләр, шуны да белмисезме? Башҡыртның ҡайғылы жырауыдыр ул сеңләү!

**Сәхнә шым ҡала, Сөйөмбикә сеңләй.**

**Сөйөмбикә.**

Эй Хоҙайым! Осорһаңсы ошонда
Әсәм телен белгән осҡор ҡошоңдо!
Осһон ине ул ҡош атам-инәмә,
Ҡыҙҙарының хәсрәткәйен һөйләргә...

Хоҙай орһон Шәйехғәли-яһилды —
Бысаҡһыҙ ҙа телгеләне йәнемде!
Төшһөн уға ләғнәтем! һәм — бәддоға
Мине һатып ебәргән ҡазандарға!..

**Петр** *(күҙ йәштәрен һөртөп һамаҡлай).*

Шомланмасы, бер үк, ханбикә һылыу!
Иламасы нескә талдай һығылып!
Илтмәйбеҙ бит һине мәсхәрәләргә, —
Мәскәү үҙе көтә һине һағынып!

Бөйөк хөрмәт ҡаҙанырһың Урыҫта —
Ултырырһың һарайҙың иң түрендә!
Ҡолдарыңа бойороусы булырһың,
Булғаныңдай ошо Ҡазан ерендә.

Йәш егеттәр — хан улдары күп беҙҙә —
Кейәү һайлап алыу һинең иректә.
Һинең кеүек гүзәл гөл бит иң яуыз
Батшаның да таш бәғерен иретә...

**Сөйөмбикә** *(алтын башлыгын атып бәрә).*

Сафагәрәй, хужам, һөйөклө ханым!
Өҙөлөп һөйгән һылыу ханбикәңде күр!
Мал хәлендә әйҙәлә ул... Эй ханым,
Ҡол булғансы, алһын ине мине гүр!

Улың менән бергә беҙҙе илтәләр
Ытырғаныс телле урыҫ иленә...
Эй бәғерем, беҙҙе һатҡан Ҡазандың
Урыҫ ене һуҡһын биртек биленә!

Ҡарышырлыҡ хәлем инде ҡалманы,
Ҡазаныңды фетнә уты ялманы...

Аһ бәғерем! һөйөклө ханым минең!
Асы сеңләүемә ҡолаҡ һалһаңсы,
Тәрән ләхетеңде миңә асһаңсы,
Мәңгелеккә ҡуйыныңа алһаңсы!..

## 2-нсе сәхнә

**Сәхнә түңәрәге әкрен генә әйләнә. Иң алдан — Петр, уның артынан — ике ҡатындың ҡултыҡлап оҙатыуындағы Сөйөмбикә, ә иң арттан мыҡты ир-егет Үтәмешгәрәйҙе күтәреп бара.**

**Петр** *(туҡталып).* Ханбикәм, соңғы тапҡыр Ҡазаныңа күҙ салың, ҡайғыңды түгеп ҡалың.

**Сәхнә — әйләнеүҙән, кешеләр атлауҙан туҡтай: алыҫта асылған панорамаға текләйҙәр. Унда мәсет манаралары сурайған Ҡазан ҡалаһы.**

**Сөйөмбикә.**

Хәсрәтемде илап кемгә түгәйем?
Улымамы — гонаһһыҙ сабыйыма?
Атамамы? — Ул Яйыҡ аръяғында!
Һөйләйемме ант боҙған ҡазандарға,
Сабый ханын дошманға һатҡандарға?..

Ләғнәт яуһын, ләғнәт шаҡшы ҡалаға! —
Тик шул теләк булыр минән Аллаға!..

Ҡазан, Ҡазан! Туҡталды һиндә аҙан!

Шулдыр инде башыңа етер ҡазаң!..
Ҡуҡырайтып манаралар теҙмәһен,
Ханың тажы ауғанын да һиҙмәйһең!
Биғәйни, һин — етем ҡалған тол ҡатын...
Сәсен йолҡоп илар хәлдә дәүләтең...
Аһ!.. — ҡушылып сеңлә миңә, гүр-ҡала, —
Шанлы көндәреңде инде үрт ала!..

**Петр.** Да-а-а... Шәһри Ҡазанның көннәре санаулы ҡалды...

**Ҡала өҫтөн, ысынлап та үрт алғандай, ҡанһыу-ҡыҙыл шәүлә томалай. Сәхнә түңәрәге хәрәкәткә килеп әйләнә, кешеләр баяғы атлауҙарын дауамлай.**

## Шаршау

## ЭПИЛОГ

**Ҡартайып салланған — мыйығын, ҡаштарын, сәсен ап-аҡ бәҫ ҡаплаған кенәз Петр Серебряный буш офоҡҡа бағып тора.**

**Петр.** Сөйөмбикәнең асы ҡарғышы төштө — мәғрур Ҡазан ҡалаһы тар-мар ҡылынды. Ҡазан ханлығы ер йөҙөнән юйылды. Күрәҙәсе Гәүһәршаттың күрәҙәләүе көнө-йылынаса теп-теүәл һәм тап килде. Бәндәләргә ғибрәт булһын ине был...

**Ут һүнә.**

## Шаршау

12 июль 2004 йыл.

# АҠТИРӘК -- КҮКТИРӘК

## Моңло-көйлө драматик хикәйәт, 2 шаршауҙа, 6 күренештә

**Ҡатнашалар:**

**Сәлих** — хәрби хеҙмәткә алынырға торған йәш егет, урта белемле, колхоздың йылҡы көтөүсеһе.

**Сәлисә** — бик һылыу һәм уңған ҡыҙ, трактор бригадаһы бригадиры, Сәлихтең һөйгәне.

**Урал** — йөҙ йәшәр ҡарт, Сәлисәнең ҡартатаһы; иҫе дөрөҫ, күҙе үткер, тик әбейе генә юҡ; бригадала ҡамыт-ызбурый йүнәтеүсе.

**Ишмырҙа — "**Ышаныҡ" ҡушаматлы тиҙ ышаныусан колхозсы, 45 йәштәрҙә. Фин һуғышында ҡатнашҡан, түшен тултырып йылтыр-мылтыр значоктар тағып йөрөй.

**Сафура** — Ишмырҙаның ҡатыны, төҫкә-башҡа һылыу, әммә имеш-мимеш хәбәр ташыусан, ирен баллы телләнеп еңеүсән; бригадаға икмәк һала, көн дә ауылдан бригада ҡыр ыҫтанына ире янына килә. "һайыҫҡан" ҡушаматлы, 40 йәштәрҙә.

**Ким** — ("Коммунистический интернационал молодежи" тигән түшкә тағылмалы ҡалай билдә атамаһынан яһалған исем) уларҙың үҫмер улы, тракторҙарға һыу ташый.

**Ғәли** — район башҡармаһының финанс бүлеге агенты (финагент) — дәүләткә халыҡтан һыҙырып һалым-налог йыйыусы, «ғәләмәт" ҡушаматлы, ҡамыт аяҡлы әҙәм; ғәййәр большевик, ОГПУ сексоты (йәшерен хеҙмәткәре), урындағы халыҡтың тын алышын күҙәтеү, "контра»ға ҡаршы көрәшеү өсөн, партия райкомы һәм ОГПУ тарафынан вәкил итеп ебәрелгән. Түрәлеккә үрләү — төп маҡсаты. Үҙен юғары дәрәжәгә ҡуйып ҡаты һөйләшә, тотҡан ерҙән һындыра. Ҡатыны ташлап киткән, хәҙер һылыу Сәлисәне ҡармаҡларға маташа.

**Остап** — Ҡыҙыл Армия бүлегендә старшина, ҡорал йүнәтеү оҫтаһы, һуғыштағы Ишмырҙаның йән дуҫы, ҡорҙашы.

**Оксана** — Остаптың ҡатыны.

**Мопра —** (МОПР — “Международная организация помощи революционерам” тигән түшкә тағылмалы ҡалай билдә атамаһынан яһалған исем) уларҙың үҫмер ҡыҙы, Ким менән йәштәшерәк.

**Шмультке —** фашист генералы.

**Вальтер —** майор, фон Шмульткенең адъютанты.

**Ҡарауыл башлығы —** фашист, генерал ҡарауылынан.

**Бригадмилиция —** төбәк милиционерының йәшерен исемлегендә торған, милицияға булышлыҡ итеүсе, еңдәренә ҡыҙыл бәйле мыҡты ир-ат.

Егеттәр, ҡыҙҙар, беҙҙең һалдаттар, фашист һалдаттары.

Ваҡиғалар 1941 — 1942 йылдарҙа Һаҡмар буйы Ҡаҫмарт тамағындағы бер колхоздың ҡыр ыҫтанында һәм фронтта бара.

Текстағы шиғри өлөштәргә (йырҙарға) композитор көйҙәр яҙһын.

# БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

## Беренсе күренеш

**Түбәһе күккә олғашҡан һылыу аҡтирәктәр һәм күктирәктәр ике ярын йәшел таҫмалай ҡаймалаған йәмле Һаҡмар буйы, ҡырҙа эштән һуң халыҡ йыйналып уйнай торған ҡалҡыу аҡлан. Таң һыҙылып килә, боролоп-боролоп аҡҡан уйсан һыуҙың йөҙөн таң нурҙары яҡтырта, тирәктәрҙә меңмең ҡоштар мәҙех әйтә. Колхоз бесәнгә төшкән, ҡайҙалыр аҡлан артында яҡын ғына бригада ҡыр ыҫтаны. Йоҡоға сумған ыҫтан яғында — аттарҙың кешнәгәне, моңло бутыл сыңлауҙары салына ҡолаҡҡа. Ыҫтан яҡлап аҡлан аша берләм һыу юлы төшә, бына унда беренсе йән эйәһе — ҡамыт аяҡ-боттарына аҡ кальсон-ыштан ғына кейгән, билдән өҫ яғы яланғас Ғәләмәт Ғәли, таҫтымалын болғай-болғай, атлығып килеп сыға.**

**Ғәли** *(һөрәнләп).* Оһһо-һооо, бына мин! Һандуғастарҙы һайраҡҡан, илде хеҙмәткә ҡуҙғатҡан донъя тотҡаһы Ғәлимен!

**Һандуғастар һайрауынан шып-туктай, һыҙылып килгән таң нурҙары ҡараңғылана төшә. Яңғыҙ ҡарға ғына ҡарҡылдап ала.**

**Ғәли.** Көшшш, тамағыңа таш торғоро! Кемгә тауыш биреүеңде белмәйһең! *(Күкрәгенә баш бармағын төртә-төртә).* Райфинагент был! Райфинагент ҡына түгел,

ә ҡып-ҡыҙыл большевик — ВКП(б)-ның һәм ОГПУ-ның колхоздағы ышаныслы вә ҡөҙрәтле вәкиле һәм сос сексоты Ғәли Ғәлич булам мин!

Карманымда — партияның ал билеты:
Бойороҡтар биреү — минән, эш — һинеке!
Көсөң тулы түгеләме был власҡа?
Налог, заем, пеня керһен киң ҡоласҡа!
Ватан өсөн тунап алам итте, майҙы,
Йөнөн йолҡоп, һығып сығарам күкәйҙе.
Шыңшыу-мыңшыу, недоимка бөтһөн, долой! *(Залға бармаҡ төртөп).*
Кем ул унда, контра һөйләп, ҡотҡо һалай?! *(Залға бармаҡ янап).*
Бер ҡунысҡа тығырмын ҡуш аяғыңды,
Һалып бирмәһәң ҡаҙнаға... баяғыңды! *(Күкрәк төйөп).*
ВКП(б) тарихын мин яттан беләм!
Шуға күрә совет илен һаҡлай беләм!
У-у-ух!

**Таҫтымалын башы өҫтөндә вертолет пропеллереләй болғап, Ғәли һыу буйына йыуынырға төшөп китә, сәхнәлә — Урал.**

**Урал** *(ҡолас йәйеп тәбиғәткә өндәшә).* Һаумы, һаумы, аҡ донъям! *(Ғәли барҙа ҡараңғыланған донъя ҡапыл яҡтырып китә. Ҡулын күкрәгенә ҡуйып, дүрт тарафҡа баш эйә).* Әссәләмәғәләйкүм, ерем-һыуым-күктәрем! Әссәләмәғәләйкүм, урмандарым-ҡырҙарым! *(Ҡапыл кәкүк сақыра, һандуғастар сутылдап һайрап ебәрә).*

Мин — Урал ҡарт, Урал ҡарт,
Күп йәшәгән Урал ҡарт.
Йәшем теп-теүәл йөҙҙә (лә)
Нығ баҫып торам ерҙә.
Һаҡалымды һәрмәйем (дә)
Тирә-яҡҡа ҡарайым.
Ейәндәргә ядкәр итеп
Ошо йырҙы йырлайым:

Дуҫтарым, туғандарым һеҙ, күкрәп йәшәп ҡалығыҙ,
Ейәнсәр, ейәндәрем һеҙ, һөйөп-йәшнәп ҡалығыҙ.
Тыуған илгә ут ташланһа, үлемесле яу башланһа,
Йәнегеҙҙе аямағыҙ — ил ҡурсарға барығыҙ.

Тыуған ил ул бер генә бит, аҡтирәкле ер генә бит,
Күктирәкле ер генә бит — ҡәҙерен белеп янығыҙ.
Эй тыуған ил, тыуған ил дә ата-бабам торған ер,
Ата-бабам эскән һыу ҙа йөрәктәр шуға ярһыу.
Ейәнсәр, ейәндәрем һеҙ, һөйөп-йәшнәп ҡалығыҙ (шул),
Мөхәббәттең бер саҡтыһын был ҡартҡа ла һалығыҙ.
Их!
Саҡтыланып янырмын да йәш кенәһен һайлармын,
Ике йөҙөнсө йәшемдә һандуғастай һайрармын (шул),

их! Инде, тим, мәңгелек кәләш ҡуйынына кереп ятырҙан элек, ата-бабаларҙан килгән изге йоланы үтәйем — йөҙ йыл буйы йомоп тотҡан серемде илгә сисәйем...

**Таҫтымалын муйынына һалып, һыу буйынан менеп килгән Ғәли күренә, ағас артына боҫоп тыңлай.**

**Урал.** Әһә-һәәәү!.. Тәбиғәткәй-әсәкәй!.. Нимә ул сер, тиһегеҙме?

**Тәбиғәт тауышы.** Нимә ул се-е-ер?! Нимә ул се-е-ер?! Нимә ул се-е-ер?!.

**Ғәли.** Әһ-һә! *(Устарын ыуып).* Ҡаптың, ҡарт карп, ҡармаҡҡа!

**Урал.** Бабаларҙан аманатҡа ҡалған ***булат балдаҡ*** ул.

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Булат балдаҡ? Быныһы ни ғәләмәт?

**Урал.** Ҡөҙрәтле лә, мәрхәмәтле лә, йәшәтеүсе лә, үлтереүсе лә, һөйҙөртөүсе лә, көйҙөртөүсе лә бөйөк тылсым эйәһе ул булат балдаҡ.

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Вәт ғәләмәт. Стоп! Һуңғы икеһе исключительно полезно.

**Урал.** Их! *(Ҡуйынынан ҡыҙыл ҡумта сығара).* Бына ул! Шундай ул булат балдаҡ: Урал батыр үҙе уны изге Атас тауыбыҙҙың магнитлы ҡоросонан ҡойған. Изге йәндәрҙе магниттай үҙенә тартырлыҡ, шаҡшыларҙы бырақтырырлыҡ көс биргән. Булат балдаҡ утта янмай, һыуҙа батмай. Булат балдаҡ кейгән ҡулды ҡурғаш киҫмәй, ҡорос сапмай...

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Мистика! Ағыулы дин ҡалдығы! Ә дин артында ята, билдәле, *(бармаҡ янап)* контрреволюция ҡотҡоһо!

**Урал** *(ҡыҙыл ҡумтанан алып, саҡтыланып-сәсрәп торған балдаҡ үтәләй залға баға).* Бының үтә мин ни күрәм: ана бара алыҫ бабам Бикбау кенәз — бармағында булат балдаҡ...

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Кенәз?! *(Маңлайына һуғып).* Стоп! 1921 йылда советтарға ҡаршы баш күтәргән Амантаев бандит менән Охранюк-Черскийҙың Йылайырҙағы “Башҡорт кенәзлеге”н һағына был ҡарт бүре!

**Урал.** Ә был яҡта , яңы быуат, һуңғы быуат: алдығыҙҙа баҫып торған был бабағыҙ ҡулындалыр яугир булат: мин алышам Петроградта — ҡыҙыл ғәскәр Нуриағзам Таһиров йәнәшәһендә! Ә унан һуң Варшауғаса — Муса батыр Мортазин бригадаһында...

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Вәт дошман! Яуыз буржуаз милләтселәрҙең фашланмаған ҡалдығы! Мифический булат балдаҡ ҡотҡоһон халыҡҡа һалып... *(маңлайына һуғып ала)* дөрөҫ һығымталайһың, алтын баш! — эврика! “Булат балдаҡ” тигән йәшерен контрреволюцион ойошма төҙөгән был! *(Маңлайын туҡмап).* Уйла, һоро матдә, уйла — деталдәрен кәрәк эҙләп табырға! ОГПУ-ға, шаҡ ҡатырып, килештереп яҙырға!

**Урал.** Их, ҡартайылды шул саҡ ҡына!.. Булат балдаҡты бирерлек ир затым юҡ артымда...

**Ғәли** *( үҙ алдына).* Ахмаҡбаш! *(Баш бармагын үҙенең күкрәгенә төртөп).* Бына тора ул ир заты нәҡ ҡаршыңда!

**Урал.** Әммә яугир Сәлисә ейәнсәрем бар — шуға биреп ҡалдырам булат балдаҡты. Ейәнсәрем үҙе һайлаған кейәү-балаға кейҙертер яугир булатты.

**Ғәли.** Ҡарағыҙ ҡарт дуракты, ҡайһындай шарт уйлап тапты! Но-ләкин... но-ләкин... “балдаҡ — кейәү-балаға” тигәне бик важно! *(Маңлайына һугып).* Эврика! Баш бирмәгән ейәнсәре минең ҡармаҡҡа ҡапты! *(Ыҫтанга ҡарай йүгерә).*

**Урал.** Ҡулдарымды ҡаушарам — булат балдаҡты ейәнсәремә тапшырам. *(Ыҫтан ягына китә).*

**Тирәклектән, ҡаса-боҫа, тигәндәй, ирле-ҡатынлы Ишмырҙа менән Сафура сыға. Сафура ҡултығы аҫтына ап-аҡ ҡаҙмендәр ҡыҫтырған.**

**Ишмырҙа.** Ҡуйсы инде, танһығым, ебәр инде, алтыным, кеше күрә бит, ялҡыным. Ниңә көн дә йөрөйһөң?

**Сафура.** Бәй, был ни һүҙ?! Мейес тултырып бригадаға көн дә икмәк һаламмы — һалам! , яңы бешкән икмәк көн дә килеп етергә тейешме — тейеш! Икмәк юлында ир менән ҡатын ҡауышыуҙан Совет иленә ни зыян?

**Ишмырҙа.** Сеү, Ким улыбыҙ килеп сығыр.

**Сафура.** һе! Бәпесебеҙ ауыҙына кәнфит ҡабыр ҙа шылыр.

**Ишмырҙа.** Исмаһам, ошо оса мендәреңде йөрөтмәсе, алтыным.

**Сафура.** Ошо оса мендәремдә дөрләй йөрәк ялҡыным. Оса мендәрһеҙ нишләр инең, көмөшөм, — ҡаҡҡа терәлер ине танһыҡ өлөшөм.

**Ишмырҙа** *(ҡатынының тыгыҙ осаһын һыйпап).* Тәүбә, тиң! Алтыным барҙа ҡаҡҡа ятаммы һуң инде мин!

Алтынҡайым, алтыным,
Ярһыу йөрәк ялҡыным.
Үткән төндә күҙ алдымда
Бриллианттай балҡының.

**Сафура.**

Көмөшкәйем, көмөшөм,
Үҙемә төшкән өлөшөм.
Өлөшөмдө ҡыҫып ҡосоп
Ләүкетергә тейешмен! *(Ҡосаҡлап, агас араһына тарта).*

**Ишмырҙа** *(аяҡ терәп ҡарышып).*

Алтынҡайым, алҡынма,
Көпә-көндөҙ талпынма.
Өс көндә бер кил, йәнейем,
Тыңла хоҙай хаҡына!

**Сафура.**

Алҡыныуым — алҡыныу,
Көн дә киләм был ергә.
Хызырильяс үҙе ҡушҡан
Көмөшөмдө һөйөргә! *(Ҡосаҡлашып бейейҙәр).*

**Ишмырҙа.**

Их, их алтыным!

**Сафура.**

Их, их көмөшөм!

**Икеһе бергә.**

Алтынҡайым,
Көмөшкәйем,

Минең ғәзиз өлөшөм! *(Сығып китәләр).*

**Сәхнәлә Сәлисә, Урал ҡарт. Икеһе тиң бошонҡо.**

**Урал.** Шом һалдың, ейәнсәрем. Булат балдаҡ йолаһын боҙорға итәһең...

**Сәлисә** *(үҙәге өҙөлөп).* Әйттем бит, ҡарттайым... Булат балдаҡ бойора, тип, нисек итеп ялҡынымды баҫайым?

**Урал.** Ялҡын һүнер ҙә ҡабынып, егеттең дә шәберәге табылыр.

**Сәлисә.** Бармы илдә унан да шәберәге?!

**Урал.** һе!.. Әммә-ләкин атайыңдың ***башын ашаған*** бәдбәхет балаһы ул.

**Ыҫтан яғынан Ғәли килеп ағас артына боҫа. Өҫтөндә — район етәкселеге кимәлендәге хәрбиҙәрсә фасонда теґелгән мундир-костюм, аяҡтарында — гармун күректәрелəй һырлы йылтыр хром итектәр.**

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Ә?! ***Башын ашаған***? Бешереп ашағанмы?!

**Сәлисә.** Артынса уҡ үҙенең дә башы киткән бит, ҡарттай. Икеһе тиң ҡорбан — шомло утыҙ етенсе йыл ҡорбандары.

**Урал.** Ләкин атайың өҫтөнән шикәйәт яҙыусы — Сәлихтең атаһылыр.

**Сәлисә.** Атаһы өсөн балаһы ғәйепле түгел — “бөйөк атайыбыҙ” Сталин әйтә быны.

**Урал.** Төкөрөп бирәм мин һинең ул... кемеңә!

**Ғәли ағас артынан атлығып сыға.**

**Ғәли.** Молчать, ҡарт контра! Иптәш Сталинға төкөрҙөң! *(Сәлисәгә).* Ә һин, ҡыҙыл яулыҡлы бригадир, ҡарт контранан күрәләтә төкөртөп тораһыңмы?! Икегеҙ тиң ярый халыҡ дошмандары!

**Урал.** Үҙең дошман... әпсәңде мур ҡырғыры!

**Сәлисә.** Вәкил иптәш, үҙегеҙ төкөрҙөгөҙ!

**Ғәли** *(күҙҙәрен алартып).* Минме?! Райондан килгән вәкилме?!

**Сәлисә.** Төкөрҙөгөҙ! Икебеҙ күреп торҙоҡ! Телегеҙҙе тыймаһағыҙ...

**Ағаслыҡтан Ишмырҙа, Сафура йүгереп сыға.**

**Сафура, Ишмырҙа.** Был ни хәл, ни ғауға?!

**Ғәли** *(ҡанатланып).* һикерәңдә бирегәрәк, һайыҫҡан! *(Ишмырҙаһы яғына бармаҡ төртөп).* Тиле тилегәненеңде лә килтер! Хөкөм залында свидетелдәрем

булырһығыҙ. Бына как раз бынау икәү ошо урында бөйөк атайыбыҙ иптәш Сталиндың йөҙөнә сыртлатып төкөрҙө.

**Сафура** *(тирә-ягына ҡаранып).* Ә?! Бында Ысталин юҡ бит.

**Ғәли.** Һайыҫҡан! Контралар ауылы! Иптәш Сталинһыҙ бер ҡарыш та, бер иле лә ер булмай был донъяла! Юҡҡа сығарғаның өсөн һин дә яуап бирерһең!

**Ишмырҙа** *(ҡатынына).* Әйттем бит, телеңде тешләп йөрө, тип! Ысынлап та шыҡырыҡ һайыҫҡан һин! *(һуга).*

**Сафура.** Уф, ҡан көсәгән ҡоҙғондарҙан ҡайһылай ҡотолайым? *(Илай).*

**Ишмырҙа, Сафура сығып китәләр.**

**Ғәли** *(Урал менән Сәлисәгә).* һөрһөп бөткән милләтселәр! *(Уралга).* Улың, халыҡ дошманы булып, 58-се статьяға эләгеүе етмәгән, инде килеп ейәнсәреңдең башын болартаһыңмы? Как ясный день асыҡ миңә! һәм ап-асыҡ булыр ул ОГПУ-ға! Мортазинсы башкиҫәрҙәр! Советтарға ҡаршы баш күтәрергә , яңы ғәскәр йыяһығыҙ?! *(Бармаҡ янап).* "Булат балдаҡ" йәшерен ойошмаһы...

**Сәлисә.** Телең ҡороғоро!..

**Урал.** Тфү, бәдбәхет!

**Ғәли.** Төштөммө эҙегеҙгә?! Ха-ха-ха! *Ләкин... (камыт аяҡтарын ҡайсылатып йөрөнә)* ул ҡәҙәре ҡан эскес түгел мин дә, ғәфү итә лә беләмен... Сәлисә туташ хаҡына. Шулай. Эшегеҙҙе ОГПУ-ға еткермәй, шиты-крыты ҡылып ҡалдыра алам... булат балдаҡты үҙемә бирһәгеҙ әгәр.

**Сәлисә** *(ҡуйынынан ҡыҙыл ҡумтаны сыгарып).* Алһын, тамағы тығылһын ҡоҙғондоң...

**Урал.** Туҡта, балам... *(Ҡыҙыл ҡумтаны кире урынына һалдырта).*

**Ғәли** *(зәһәр көлөп, ҡосагын йәйеп).* Кил, кил, Сәлисәкәй һылыуҡайым — балдағыңды үҙең менән ҡуша ғына кейергә ризаҡайым!

**Сәлисә.** Тфү!

**Урал.** Мөртәт!

**Ғәли.** Ха-ха-ха! Барыбер минеке булырһың!

**Урал менән Сәлисә — бер яҡҡа, Ғәли икенсе тарафҡа олағалар. һыу буйынан, сейле-бешеле көй Ғәләмәте һыҙғыра-һыҙғыра, Ким менеп килә. Ыҫтан яғынан Сәлисә тауышы.**

**Сәлисә.** Ки-и-им, тим, Ки-и-им! Ҡайҙа олаҡтың?

**Ким** *(шып-туҡтап, сак ҡына ҡолаҡ һала ла, ҡуш бармагын ауыҙына ҡабып, әсе һыҙгыра).* Бында мин, апайым!

**Сәлисә килеп етә, бошонҡо.**

**Сәлисә.** Егеүле атың тора, үҙең юҡ. Тракторҙарға һыу кәрәк. Әллә ҡайҙа эт һуғарып йөрөйһөң.

**Ким.** Ҡамыт аяҡ вәкил осраны бая...

**Сәлисә.** Абау, ярамай улай, Ғәли Ғәлич, тип кенә әйт.

**Ким.** һе! Шул ҡамыт аяҡ миңә, күҙҙәрен май урлап ашаған бесәйҙәй мызылдатып: “Слушай, Значок, бынамын тигән ҡыҙыл һаплы еҙнәй бәкеһе алғың киләме?” — тигән буласы...

**Сәлисә.** Уф! *(Йәшел үләнгә сүгәләп).* Ултыр әле, ҡустыҡайым, яндарыма, ял булһын йәндәремә. *(Ким дә ултыра, Сәлисә уны яурынынан ҡосаҡлай).* Сәлих ағайыңды осратманыңмы?

**Ким.** Юҡ, ***осратмайым*** мин уны.

**Сәлисә.** Ниңә?

**Сәлих.** Ҡарттайым асыулана. *(Үләнгә салҡан төшә).*

**Сәлисә** *(ҡустыһы йәнәшәһендә салҡан һуҙылып).* Их! Күрәһеңме Көн сығышы яғындағы анауы яҡты йондоҙҙо?

**Ким** *(ҡыуанып).* Күрәм, күрәм! һин дә, тап миндәй, көпә-көндөҙ йондоҙ һанайһың икән, апайым!

**Сәлисә.** Саҡ ҡошона әүерелеп Күккә осҡан боронғо бәхетһеҙ малай, — ә “Астрономия” дәреслегендәге сағыу Сулпан-йондоҙ ул...

**Ким** *(ырғып тороп, төртөп күрһәтә).* Апай-апай, ана тора, йым-йым итеп, Көн байышындағы Күк ситендә Суҡ ҡошо — яҡты Зөһрә-йондоҙ! Ҡарттайым әйтә, ата-әсәһе ҡарғышынан Саҡ, Суҡҡа әйләнгәндәр, мәңге ҡауыша алмаясаҡтар, ти, улар. Күрәһеңме?

**Сәлисә.** Уф, күрәм... *(Тора. Моңайып, Саҡ, Суҡ бәйетен көйләй).*

Беребеҙ — уң яҡта, беребеҙ — һул яҡта,
Бергә булаһым килә шул саҡта...
Өйгән кәбәнде елдәр тарата,
Ҡауышам, тигәндә, ҡапыл таң ата...

**Ким.** Апайым... Ҡарттам әйтә...

**Сәлисә** *(иҫен йыйып).* Ярай, ҡустым, эш күп. МТС-ҡа юлланам. Өйгә һуғылыр ҙа әмәл юҡлыҡтан, һиңә бик ҙур бер үтенесем бар ине. Үтәрһеңме?

**Ким** *(пионерҙарса салют биреп).* һәр саҡ әҙер, апайым!

**Сәлисә** *(булат балдаҡлы ҡыҙыл ҡумтаны тоттороп).* Ошо ғәзиз аманатты,бер кемгә лә күрһәтмәй алып ҡайтып, әсәйем ҡулына тапшыр, түрҙәге һандыҡ төбөнә һалып ҡуйһын.

**Ким.** Бирнә һандығыңа!

**Сәлисә** *(үҫмерҙең танауына ҡағылып).* Салют!

**Ким** *(булат балдаҡлы ҡыҙыл ҡумтаны салбар кеҫәһенә тығып).* Салют! *(Йүгерә).*

**Сәлисә** *(моңайып).*

Мәҙрәсәләрҙә китап кәштәһе,
Саҡ менән Суҡтың бейетен ишетәһе... *(Йөрәкһеп).*

Их Сәлихем, Сәлихем, икебеҙҙең араларҙа ята шул ҡара упҡын!.. *(Ике усы араһына башын ҡыҫып, йөрөнә).* Ах был ҡәһәрле утыҙ етенсе йыл, утыҙ етенсе йыл... бер-беребеҙҙең баштарын ашауҙар... Атайым менән һинең атайың бер-береһен төрмәгә ултыртмаһа, шәүләләре арбыҙға ҡара упҡын һалмаҫ ине, ҡарттайым да исемеңде ишеткәндән ҡарғана башламаҫ ине... *(Иламһырап).* Булат балдаҡлы ҡыҙыл ҡумта ла хатта, Саҡ менән Суҡ араһын Ҡояш бүлгәндәй, бер-беребеҙҙән айыра... *(Ашығып китеп бара).*

**Бушап ҡалған аҡланға Ким ҡабат йүгереп килә. Туҡталып, ҡуш бармағын ауыҙына ҡабып, ҡолаҡ ярғыс һыҙғыра.**

**Ким.** Малайҙа-а-ар! Малайҙа-а-ар! Эҙләшергә килегеҙ! Их! Эшкә тигәндә береһе лә юҡ. *(Булат балдаҡлы ҡыҙыл ҡумтаны кеҫәһенән сығара).* Быныһы ла шылып төшөп ҡалмаһын тағы — кәрәгемде бирер апайым!.. *(Ҡыҙыл ҡумтаны ағас сатаһына ҡыҫтыра).* Салғы бәкемде тапҡансы, тороп торһон ошонда.

**Ғәли яҡынлай.**

**Ғәли.** Кемдт еғалттың, Значок?

**Ким.** Кемде түгел, бәкене. һәм мин Значок та түгел әле.

**Ғәли.** Бәй, Ким ни ҙә Значок ни? “Коммунистический интернационал молодежи” тип ауыҙ тултырып әйтәйемсе, булмаһа. Ниндәй бәке ул, ҡыҙыл һаплы еҙнәй бәкеһен минән ҡабул ҡылып алмағанһың бит әле.

**Ким.** Алам, тип тә тормайым. Урал ҡарттайым яһап биргән шул салғы бәкем һау булһын. *(Үлән араһынан һәрмәнә).*

**Ғәли.** Салғы бәке?! Кемде салырға?

**Ким.** Кемде, тип ни. Тауыҡ-фәлән салырға ла яраҡлы.

**Урал.** Тауығы аңлашыла. Фәлән тигәне кем ул? Атап әйттеме ҡарттайың?

**Ким.** Әйтте, ти, һиңә. Беҙгә ҡарыһүҙ һөйләй ул.

**Ғәли.** Кемдәргә ул — "беҙгә"?

**Ким.** Кемдең ҡолағы бар — барыһына ла.

**Ғәли** *(үҙ алдына).* Факт, йәшерен агитация! *(Үҫмергә).* Аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа бармы ул ҡарыһүҙҙә?

**Ким.** Ҡыҙылдар юҡ, ә аҡ йөҙлө, аҡ күңелле Урал батыр яҡлы аҡтар ҙа ҡара йөҙлө, ҡара күңелле Шүлгән яҡлы ҡаралар ғына бар унда. Ҡара-ҡаршы һуғышалар.

**Ғәли.** һем... *(Ағас сатаһындағы ҡыҙылға күҙе төшөп, яҡынлай).* Кемде кем еңә?

**Ким.** Ҡараларҙы аҡтар еңә. *(Үлән араһында имгәкләй).* Бәкем-бәкем, табылсы, ҡулҡайыма ҡағылсы!

**Ғәли.** Аҡтар?! *(Үҙ алдына).* Факт, антисоветчина! *(Ағас сатаһына яҡын уҡ килеп, ҡыҙыл ҡумтаны танып).* Эврика! Ҡыҙыл... *(телен тешләй).*

**Ким** *(башын ҡалҡытып).* Нимә?

**Ғәли.** Ҡыҙыл һаплы булмаһа ла, ағас һаплың шөйлә күҙгә салына — *(бармаҡ төртөп күрһәтә)* ана-а-ау әрем төбөндә.

**Ким.** Ҡайҙа? *(Тороп йүгерә).*

**Шул арала Ғәли, ҡыҙыл ҡумта эсенән булат балдаҡты алып, — ул күҙҙе сағылтып балҡый, — түш кесәһенә сумыра. Ҡыҙыл ҡумтаны кире урынына ҡуйып,аҡландан тая.**

**Ким** *(боролоп килеп).* Бәке түгел, шәүләһе лә юҡ унда. *(Ҡыҙыл ҡумтаны сатанан алып, ҡуйынына тыға).* Бынауы ерҙә генә бер һәрмәйем дә...

**Сәлих килә, үлән араһында үрмәләүсе Кимде көләмһерәп ҡарап тора.**

**Сәлих.** Әй, ҡара томшоҡ, ниңә бында хорхолдап ер һөрәһең?

**Ким** *(тертләп).*Ә?! *(Тора).* һин бирмәгән еҙнәй бәкеһен эҙләйем.

**Сәлих.** Тәүҙә биреү кәрәктер апайҙарҙы.

**Ким.** Тау артынан эҙлә ундай тайҙарҙы! *(Китә башлай).*

**Сәлих** *(үҫмерҙең усына ҡыҙыл һаплы бәке һала).* һоп! — эләктер ҡыҙыл һаплыны. Бирәү, имеш, апаһының һаҡсыһы!

**Ким** *(шатланып бейей).* Ура! Үҙем икән өс йөрәктең асҡысы!

**Сәлих.** Өс йөрәк?! *(Үҫмерҙе яғаһынан ала).* Ниндәй өс йөрәк?!

**Ким.** Уй-уй! Береһе бөркөт, береһе аҡҡош, ә өсөнсөһө өйрәк!

**Сәлих** *(үҫмерҙе елтерәтеп).* Өйрәге кем ул?! Әйтеп ҡотол!

**Ким.** Уй-уй! Аҡҡошонддо тибергә килә сөрәгәй өйрәк... ҡамыт аяҡтарын һөйрәп!

**Сәлих.** Шашма!

**Ким** *(ыҫҡынып тая).* Бәкеңдән ҡолаҡ ҡаҡтың, апайҙан да аҙашма!

**Сәлих.** Был ни хәл, был ни һүҙ?!.

**Ғәли күренә.**

**Ғәли.** Хе-хе-хе! Берәүкәйҙең маңлайына үҫәсәк тиҙҙән мөгөҙ.

**Сәлих.** Нимә?!

**Ғәли.** Төймә! Буйың етмәҫтәйгә теймә! Үрҙәгегә үрелмә! *(Түш кеҫәһенә һуғып).* Сәлисәкәй үҙе керҙе бынауы йөрәк түренә.

**Сәлих.** Ха-ха-ха!

**Ғәли.** Блоха!

**Сәлих.** Үҙең кем?!

**Ғәли.** Кемлегемде беләһең. И напрасно көләһең!.. *(Күкрәк һуғып).* Вәкил тигән исемем, мыйыҡ үҫтергән — есемем. Районыбыҙ майҙанында көсләһә мин көсләнөң! Ҡулым балда, телем майҙа, эшемдән илгә файҙа. Һайлап кәләш алырлыҡ, һайрап ғаилә ҡорорлоҡ. Илдәге иң аҫыл ҡыҙҙың һөйөүенә торорлоҡ.

**Сәлих.** Бөркөтһөң һин, беләмен, тик ябалаҡ йөнө менән төләйһең. Ниңә ташлап китте хәләл ҡатының?

**Ғәли** *(маһайып).* Үҙем ситкә ҡарпыным. Башың йәштер, алтыным.

**Сәлих.** Беләм ҡыҙған табаны, унда ҡарпыған балыҡ-табанды. Йә ала күҙ суртанды.

**Ғәли.** Ә һин үҙең кем инде — көҙгөнән бер күр инде. Ат көтөүсе башың менән тиң күрәһең вәкилде!.. Мыйығың да сыҡмаған, хеҙмәт итеп ҡайтмаған. Йүнле эшкә кермәгән, ныҡлы нигеҙ ҡормаған. Тәжрибәң юҡ һөймәгә, ҡатын ҡосоп күрмәгә... Хатта йәшлек ялҡының да түгел һиңә кәңәшсе, ә хөрт юлға сәбәпсе.

**Сәлих.** Шунан, суртан киҫәге?

**Ғәли.** Утыҙ етенсе йылҡайҙы иҫлә әле! *(Бармаҡ янап).* Атаң эше — иҫтә әле! Илле һигеҙенсе елле статья — үҙеңә лә шып-ята!.. Так что, Сәлисәне мин һөйәм, ә һин тирәккә һөйән.

**Сәлих.** Ха-ха-ха, кәмит ҡорҙоң дабаһа! Ҡайҙаһығыҙ, кешеләр, бушлай кәмит күрһәтәләр! *(Йүгерә).*

**Ғәли.** Кемгә — кәмит, кемгә трагедия. *(Бармаҡ янап).* Ҡанлы йәштәр ағыр ике күҙеңдән —это тебе говорю я! *(Йөрәкһеп, аҡлан буйлап йөрөнә).*

Вәт ғәләмәт! Был ҡыҙҙарҙа аҡыл йоҡа:
Егет, тиеп, күҙе ҡыҙа төптө юҡҡа! *(Устарын ыуғылап).*
Бөгөн-иртән олағыр был армияға!
Һылыу ҡыҙҙы алыу кәрәк тәрбиәгә!
Һөйһә һөйһөн минең кеүек бер бәһлеүән —
Балда-майҙа йөҙөп йәшәр ине гелән. *(Елкәһен ҡашып алғас, баш бармағын күкрәгенә ирәүән төртөп).*
Ысынлап та, бындай шәп йәр бармы, ҡайҙа?!
Үҙем буйҙаҡ, ҡулым балда, телем майҙа!
Юғарының фарманында эш йөрөтәм,
Ярлығайым бәндәләрҙе, йә серетәм!
Кем был Сәлих?! Кем ул Урал?! Кем Сәлисә?!
Өсөһөн бер юлы бөрһәм дә хәл етә!
Сыҡмай ҡалһа миңә хәләл ефетлеккә,
Был ҡыҙ һалыр тоташ ауылын этлеккә:
“Булат балдаҡ” тигән контр ойошманы
Яҙып бирһәм... целый ауыл — ил дошманы!
Ха-ха-ха-ха!
Магаданда майҙан иркен — барактар шәп.
Мәңгелек боҙ — мәңгелеккә булыр түшәк! *(Йөрөүенән туҡтап, һуҡ бармағын башы өҫтөнә күтәрә).*
О! Был ҡыҙҙы ебәрмәм тик ул боҙ яҡҡа —
Ауылдары менән керер был тоҙаҡҡа! *(Эске түш кеҫәһенән булат балдаҡты алып, балҡышынан хайран ҡалып).*
Вәт ғәләмәт! Ағаң алғыр ҡуллы хәҙер!
Ус төбөндә уйнатырға илде әҙер!
*(Ҡамыт аяҡтарын ҡайсылатып бейей).*
Баҡтыртырмын, күҙгә төртөп был балдаҡты!
Сөнки вәкил иптәш һөйләмәй алдаҡты!
“Үткән төндә был аҡланды буйлағанда,
Ҡыҙҙар менән балдаҡ һалыш уйнағанда,
Сәлисәкәй үҙе алды мине һайлап —
Һөйөү итеп уска һалды булат балдаҡ!”
Эйе, эйе, шулай булды, шулай булды!
Урал ҡарттың һамаҡлауы ҡулай булды!
*(Залға боролоп, балдаҡ божораһы үтә тамашасыға баға).*
Белдегеҙме, быны үтә мин ни күрәм?
Йөҙ йәшәр ҡарт тора унда, йөҙө һүрән.

Ҡыҙым, бирҙең ата-баба балдағын, ти,
Тик үҙеңде биреп кире алаһың, ти.
*(Балдаҡты усына йомарлап, шул йоҙрогон башы осонда болгай-болгай ярһып).*
Вәт ғәләмәт! Минең ҡулда был мөғжизә!
Мин һинеке! Һин минеке, — кил, Сәлисә!
Ха-ха-ха! *(Тирәклеккә олаға).*

**Ҡурҡыштан төҫтәре ҡасҡан Сафура менән Ишмырҙа ағас араһынан сыға.**

**Сафура.** Күрҙеңме?

**Ишмырҙа.** Күрҙем.

**Сафура.** Үҙ ҡолағың менән ишеттеңме?

**Ишмырҙа.** Ишеттем.

**Сафура.** Инде бынан һуң мин әйткәндең һәр береһен һайыҫҡан шыҡырыҡлауына һанамаҫһыңмы?

**Ишмырҙа.** һанамаҫмын, һанамаҫмын! Ниңә йәнемде алаһың... бынауы ҡыҙыу бесән эше ваҡытында?.. һынған салғымды алмаштырырға ҡайтҡан ғына арала...

**Сафура.** Ярар, башҡа нәмәң һынмағас, миңә шуныһы ла еткән... Туҡта әле! “Илдең булат балдағын Сәлисә ҡамыт аяҡ вәкилгә биргән, бесәнде бөткәс тә никахлашалар икән”, — тигән оторо хәбәремә лә ышанаһыңмы инде хәҙер?

**Ишмырҙа.** Ышанам.

**Сафура.** Ошонан һуң да ошо хәләл бисәңде “шыҡырыҡ һайыҫҡан” тиһәләр, шуға ла ышанырһыңмы, әллә ышанмаҫһыңмы?

**Ишмырҙа.** Ышанырмын, ышанырмын.

**Сафура.** Уф ошоно!.. Бәлеш ауыҙ! *(Сеңләп).* Эй Илаһым, “Ышанам”дан башҡаны белмәгән Ышаныҡ Ишмырҙаға ниңә сәсемде бәйләнең, фин һуғышынан ҡайтыуын көтөп ниңә зарығып ултырҙым?! Ниңә башҡа йүнлерәккә сыҡманым?!.

**Ғәли күренә.**

**Ғәли.** Был ни ғәләмәт? Әле генә ауылға ҡарай осҡан оса мендәре — килеп тә еткән илдән элгәре! *(Сафураны сиңәртәй бармағы менән генә саҡырып).* Һайыҫҡан, тәпәйлә бирегәрәк!

**Сафура.** Йә, килдем. Ни кәрәк?

**Ғәли.** Ауылда ни хәбәр бар? Контра һөйләп һамҫымаймы паникерҙар? Шыҡырыҡла шуларҙы.

**Сафура** *(еңел һулап).* һөйләй, вәкил, һөйләй, бөтәһе лә ***кантура*** һөйләй. Шул тиклем күп итеп һөйләй.

**Ғәли.** Ҡолаҡ ярып ҡысҡырма, яй ғына шыҡырыҡла. Ни тиҙәр?

**Сафура** *(бармаҡтарын бөкләп).* Беренсенән, уттай ҡыҙыу бесән өҫтөндә көпә-көндөҙ ***кантурала*** эшем эйәһе ултырмаҫ, ултырғысҡа ҡамтарылған ҡамыт аяҡлы бер вәкилдән башҡаһы, тиҙәр. Булдымы бер ***кантуралы*** һүҙ?

**Ғәли.** Ҡых!.. Шунан, икенсенән?

**Сафура.** Өтәләгән был бөркөт аҡтығы ниңә, тиҙәр, күкәй һәрмәмәй ауылдан-ауылға темеҫкенеп, кантураға к...те йәбешеп ҡатты, тиҙәр. Булдымы икенсе кантуралы һүҙ?

**Ғәли** *(Ишмырҙаға ике күҙен аҡайтып).* һин! Кем ҡатыны был? Фин кампанияһында һыналған сержанттыҡымы? Почему допустил до этого?! Политграмота һеңдермәйһең һайыҫканыңа?! *(Сафураға).* Контора түгел, ә контра, тим мин! Контра!

**Сафура.** Аһ-аһ, икеһе бер һап та бер ҡалып түгелме ни? Ғәләмәт ни ҙә Ғәли ни?

**Ишмырҙа** *(бисәһенең бөйөрөнә төртөп).* Көмөшөм, уйындан — уҫмаҡ, тигәндәй... Тыйыл, тим.

**Сафура.** Бәй, вәкил иптәш телемдән тарта лабаһа...

**Ғәли** *(уртын сәйнәп буҙарына, ҡәләмен, блокнотын сығара).* Ҡых!.. Шыҡырыҡ һайыҫҡан! һин бит әле — бригадаға әштер-өштөр әсетеп икмәк һалыусы? Сеп-сей ҡамыр ашатып, хеҙмәт фронтындағы ударниктарҙың бүҫеренә контрудар яһаусы!..

**Ишмырҙа** *(бисәһенең янбашынан һөйөп).* Әллә-ләәә! Минең бисә белә ул контрударҙы ҡайһылайыраҡ яһарға!

**Сафура.** Эй вәкил, вәкил! Әсе менән татлыны, йомшаҡ менән ҡатыны шәйләп еткермәйһең шул. Бригада халҡы әйтә, был хөрмәтле вәкилдең, ти, ҡамыт аяҡтарын берәй кантуралағы үҙе кеүек үк һорһоған бер тол ҡатынға ғына ҡамтармай, далала сапҡан тай-тулаҡ Сәлисәне ҡороҡлайым, тип ымһынып, ҡороғо һынмағайы... Ҡыҙҙың ҡылығы — ҡаты, ә ҡатындыҡы, *(ҡаҙмендәрен ҡабартып)* ух-ли! — бына ошондай татлы ул!

**Ғәли.** Тфү! *(Китергә итә).*

**Сафура** *(вәкилдең китель сабыуына йәбешеп).* Вәкилкәйем, туҡтасы, тел ҡысыта бик асы. һығыла унда өсөнсө бер тәлгәшле хәбәр ботағы, иң тәмле лә иң елле бер кантуралы ҡуҙағы.

**Ғәли** *(туҡтап).* Йә, тиреп бөтөр, кәнәлйә.

**Сафура.** һәй хәтер... *(вәкилсә, маңлайына һуғып)* Ғәләмәтиә... Бөгөн иртән иләк һорап ингәйнем теге күршегә — персиҙәтелдең тайыш табан әрпешенә.

Райондың үҙенән ябырылмыш ҡыҙыл яғалы менән ултыра хужа... Хәрби комиссар, тинеләрме үҙен?..

**Ғәли** *(һиҫкәнеп).* Ә?! Мине һораманымы?

**Сафура.** Һораны, әммә юҡлығыңды яҡшыға юраны.

**Ишмырҙа** *(киҫәтеп).* Алтыным!..

**Сафура.** Сабыр ит, телем ҡысыта, тинем бит! Эйе, бер нөктәгә текләп ултыра ике хужа, икеһен дә баҫҡандай оло нужа.

**Ғәли.** Ҡыҫҡараҡ! Оҙон һүҙең не нужна!

**Сафура.** Ҡыҙыл яғалы әйтә, мирный дагауар тип Молотов менән Риббентроп ҡул ҡуйған, Ысталин бабай менән Гитлер бабай икеһе бергә ыраҫлаған серек ҡағыҙ ярпыһы — бото һуҡыр тиндер, ти, хаҡы.

**Ғәли** *(тирә-яғына ялт-йолт ҡаранып).* Но-но, шайярррма!

**Сафура.** Ай-Ҡояш, ҡаршымда ҡамыт аяҡлы ҡорҙаш, усымда өс бөртөк ярррма! Ҡыҙыл яғалы әйтә, РККА-ға тигән аттарҙы ваҡыт, ти, дағаларға... йәғни быныһы ҡағыла ат көтөүсе Сәлих мырҙаларға. Тимәк, көнбайыштан Гитлер бабай итәгебеҙгә ҡуҙ һала — гирман тағы ҡуҙғала... Әрәсәйҙе яуларға...

**Ғәли** *(күҙҙәре аларып).* Молчать! *(Уртын сәйнәп).* Ух паникер, контра! *(Сығып йүгерә).*

**Сафура.** Йүгер-йүгер, ҡамыт аяҡтарыңды ҡайсылатып! Башҡаларҙан элегерәк барып өлгөр. Фин һуғышындағы минең герой бабайым һымаҡ, ҡалай-ҡолай значоктар тағып ҡайтырһың, бәлки. *(Ирен ҡосаҡлай).*

**Ишмырҙа.** Бушҡа ысҡындырҙың, әй.

**Сафура** *(моңайып).* Яуыз Гитлер бәйҙән ысҡына инде. Уф, тағы ла айырылышырға...

Һауаларҙа осҡан аҡҡоштарҙың
Алдарында ҙур-ҙур шәһәр бар.
Ҡалыр микән бәғерем, ҡалмаҫ микән —
Яу башлана, тигән хәбәр бар...

**Ишмырҙа.** Әрнетмәсе йөрәгемде, алтыным...

**Сафура.** Йә, бөттө-бөттө, көмөшөм! *(Ҡосағын йәйеп).*

Кил-кил, көмөшөм,
Көл-көл, көмөшөм!
Үҙең әле йәр саҡта,
Түҙем әле бар саҡта
Йомшаҡ яҫтыҡ яҫтайым,

Ҡаҙмендәрҙе һалайым,
Ауыҙыңды баллайым (да)
Ҡосағыма алайым, һәп! *(Ҡосаҡлай).*

**Ишмырҙа.** Киттек, бисәкәй! *(Ҡыҫып ҡосаҡлай).*
**Сафура.** Уй! Билкәйемде өҙәһең!

**Ҡуйы ағаслыҡҡа кереп сумалар. Аҡлан бер ни тиклем һил ҡала, һандуғастар ҡотороп йыр түгелдерә. Атын бәйләгән тирәк төбөндә Сәлих күренә, башын һәлендереп, моңайып тора.**

**Сәлих.** Их, йөрәккәйгә үткәреп сутылдайҙар! Ниңә былай тулыша икән күңел? Тулышмаҫ та ине күңел, түҙеп торорлоҡ түгел... сөнки көллө ыҫтан ыҫлай бер хәбәр — Сәлих ебегән, тиҙәр... Үткән төн ҡосағында, мин яланда сағымда ошо изге аҡланда балдаҡ һалыш уйналған, ти; Сәлисәкәй һылыу балдаҡ һалған, ти... һәм сөрәгәй өйрәкте... Ғүмерлек йәр ҡылған, ти... һөйөнсөһөн шыҡырыҡ һайыҫҡан килтерҙе, тереләтә үлтерҙе... Их Сәлисә, Сәлисә... Белһәмсе шуны кисә!.. Түҙгеһеҙ һыҙлай йөрәк... Их!.. Ҡыйын икән бигерәк... Күрешергә килмәне, мине бар тип тә белмәне... Йөҙ йәшәгән ил абыҙы Урал да, мине күрә һалғас та, арҡаһы менән бороллдо... Их, арабыҙға атайҙарҙың гөнаһ шомлоғо керҙе!.. *(Йоҙроҡтарын төйөп).* Етте! Аттарҙы өйөрәм дә үҙем уйынға киләм. Ух, булат балдаҡ өсөн берыңғай кәрәктәренә бирәм! *(Атын муйынынан ҡосаҡлап).* Их Ерән ҡашҡа, ерән ҡашҡа, беләһеңме, кем типте минең башҡа?!. Үҙәккәйҙе бына нисек өҙә бит ул һантыйҙар — һин яратҡан апайҙар! Их! Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы! Һин дә хәрби, мин дә хәрби — беҙ икебеҙ ҙә хәрби; яугир тревога уйналыр — ил походҡа ҡуҙғалыр, сөнки фашист шашына. Әммә тәүҙә ныҡ ышҡып алабыҙ суҡмарҙы бындағы шаҡшыға — булат балдаҡты хурлағандың башына. Ә шунан — ултырған да шыуған: *(Ерән ҡашҡаны битенән һөйөп)* икәүләшеп китәбеҙ Көн байышына..., яңы герман һуғышына... *(Башҡорт халыҡ йыры "Ерән ҡашҡа"ны йөрәгенән әкрен генә һыҙылдыра).*

Йәйләүҙәрҙе ташлап, ҡорал алып,
Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ менеп тә аттарға,
Ерән ҡашҡа атҡайым да
Алдан елер малҡайым,
Эйәрендә егете барҙа
Бойоғоу белмәҫ малҡайым,
Эййй... бойоғоу белмәҫ малҡайым.

**Сәхнә аҡрын ғына ҡараңғылана.**

## Икенсе күренеш

**Шул уҡ аҡлан, кис. Яланда эш туҡталған, бесәнселәр эштән ҡайтып, киске тамаҡҡа ашаған. Ыҫтан яғында күмәк халыҡ ығы-зығы килә, яҡында ғына аттар кешнәгәне, моңло баҡыр бутыл сыңлауҙары ишетелә. Бөгөн халыҡ, аҡланға йыйылып, бер аҙ күңел асып алмаҡсы — уйынға әҙерлек бара. Шаршау асылғанда Сафура менән Урал көрәгә күтәреп килеп сыға.**

**Сафура.** Уф, әле икмәк һалырға, әле ҡымыҙ бешергә... Колхоз эшенә егелә-егелә билем талды, еҙнәкәй.

**Урал** *(таҫтымалы осон ҡатындың тығыҙ иңбашына һелтәп).* Уфылдама, балдыҙҡай, бейә нәҫеле егелгән һайын һомғоллана ғына бара ул, баллыҡай.

**Сафура** *(ҡытығы килеп).* Уй-уй! Ҡара уны, Ишмырҙа бажаң күреп ҡалһын!

**Урал.** Дүрт аяҡлынан — кәзә менән кәзә татыу, ике аяҡлынан — бажа менән бажа татыу, тигәндәр боронғолар. Бажа менән беҙ нисек тә, бажҡылдашып, уртаҡ тел табышырбыҙ.

**Сафура.** Эй, һин дә инде, йөҙ йәшәгән еҙнәкәй! Балдыҙыңды ҡытыҡларға ярай шул бер телең бар.

**Урал.** Улай тимә, балдыҙҡай. Еҙнәйеңдә һинең өсөн башҡа бәрәкәттәр ҙә бар, етерлек! Ҡых!.. *(Ҡатындың бөйөрөнә төртә).*

**Сафура.** Уй, һынымды ҡатырҙың ғуй, еҙнәкәй, үлтерҙең! Йөҙ йәшәгән еҙнәкәйҙә миңә кәрәкле ни булһын?

**Урал.** Уныһын белгең килһә, еҙнәйеңә яҡын кил, көрәгәңдән һалып бир.

**Сафура** *(туҫтаҡҡа ҡымыҙ ҡоя).*

Эй еҙнәкәй, еҙнәкәй,
Йөҙ йәшәгән еҙнәкәй.
Балдыҙыңдың ҡымыҙынан
Ауыҙ итсе, еҙнәкәй.

**Урал.** Һәй рәхмәт төшкөрө, ҡыҙҙар ҡулынан күптән эскән юҡ ине! *(Йилап ҡына һемерә).*

**Сафура.**

Һәй еҙнәһе, еҙнәһе,
Нисек унан биҙәһе!
Ят ҡыҙҙарға күҙе төшһә,
Йөрәккәйҙе өҙәһе.

**Урал** *(ауыҙын еңе менән һөртөп).* Ас-са!.. *(Бейей).*

Их балдыҙҡай, балдыҙҡай,
Йөҙөң Ҡояш, ҡашың Ай.
Һин балдыҙҙы күреү менән
Йәш йөрәгем шашынай.

**Сафура** *(бейергә төшә).*

Еҙнәкәйем — еҙнәкәй,
Егет икәнһең тәкәй.
Еҙнәкәйҙе, кәләш димләп,
Өйләндерербеҙ, бәлкәй.

**Урал.**

Димсе диңгеҙ кистерә,
Ҡалта бауын систерә.
Балдыҙҡайым кеүек кәләш
Көтөп йөрәк һикерә.

**Сафура.**

Еҙнәкәйем, еҙ атым,

**Урал.**

Балдыҙҡайым, ҡанатым.

**Сафура.**

Балдыҙ сәмен,

**Урал.**

Еҙнәй ғәмен

**Сафура, Урал.**

Хоҙай үҙе аңлаһын.

**Сафура.** Етте-етте, еҙнәкәй! Оҙаҡламай аҡланға ил эркелер, затлы бүләктәрен тейәп персиҙәтел үҙе килер — ҡабымлыҡҡа ҡаҡлаған ҡаҙы турайым. Ә һин, еҙнәм, табын-фәлән ҡорғансы, ҡымыҙлы көрәгә төбөндә ошолай күҙле бүкән булып ҡына ултырсы.

**Урал.** Балдыҙҡай, ниндәй бүләктәр хаҡында ләпелдәйһең?

**Сафура.** Аһ-аһ, шуны ла белмәйһеңме? Их һин, йәп-йәш кенә көйөңә, иҫәүәнләнә башланыңмы, еҙнәкәй!.. Был аҙнала бесәндә шәп эшләгәндәрҙе ударник итә, ти, колхоз. Ҡыҙҙарға — күлдәклек ситса менән еҫле һабын, ирҙәргә кәстүм-салбар, ти.

**Урал.** Ә беҙгә? Ҡасан, ҡайҙан күрәбеҙ һуң шуныһын?

**Сафура.** Хи-хи-хи, персиҙәтел сығарып күрһәтер уныһын. *(Китә).*

**Сәлисә инә.**

**Сәлисә.** Ҡарттай, Сәлих күренмәнеме?

**Урал.** Күрмәгәнең хәйерлерәк, балаҡай.

**Сәлисә.** Бынау ҡарттам һул аяғынан торған инде әллә?

**Урал** *(арҡаһын биреп).* Сәлих менән булһағыҙ, минән булыр бәддоға. һис ыриза түгелмен!

**Сәлисә.** Уф!.. *(Ҡуш ҡуллап башын тота, иламһырап).* Ә һуң минең йөрәгемдең ризалығын... һорانыңмы?

**Урал.** Юҡ! Ата-бабалар йөрәген тыңланым мин. Ҡушмай быны булат балдаҡ йолаһы!

**Сәлисә.** Эй Илаһым!.. *(Илап сығып китә).*

**Бер ҡулына — ҡамыт, икенсеһенә шөшлө тотоп, "Ҡарттай!" тип ҡысҡыра-ҡысҡыра Ким инә, ҡулындағыларын ҡарт алдына ырғыта — бау-шыуын йүнәтергә.**

**Ким.** Ур-ра, кәмит була! Бөтә халыҡ себен кеүек йыйыла.

**Урал.** Ни бысағыма һөрәнләйһең, ниндәй Хәмит?

**Ким.** Хәмит түгел, кәмит! Сәлих ағайым, дүрт ат егеп, тамыр-имән йолҡтортоп алған, бала башындай юнып суҡмар һаплаған. Сөрәгәй өйрәктең мейеһен сәсрәтәм, ти! Йәмәғәт, диҡҡәт ит, була бөгөн шәп кәмит! *(Олаға).*

**Урал** *(баш сайҡап).* һәй, һайыҫҡан балаһы булмай ҡалғыры, ауыҙыңдан ел алғыры!

**Ултыра, ҡамыт менән шөшләһенә тотона. Ҡыҙып-ҡыҙып эшләй. Ҡуҡырайған Ғәләмәт Ғәли инә, ҡара бирсәткә кейгән. Саҡ ҡына "төшөрөп", ҡыҙмасаланыбыраҡ алған, буғай.**

**Ғәли** *(карттың эшен күҙәтеп).* Шөшлә, тиһең инде?

**Урал.** Эшле. Ситтән тороп ҡына күҙәтсе түгел, ошо бәғзе берәүҙәрҙәй.

**Ғәли.** Кем ул "ошо"?! Контра һөйләйһең, ҡарт!

**Урал.** Туп-тура көйләйем, брат.

**Ғәли.** Ә шулай ҙа аҙым һайын абына шөшләкәйең.

**Урал.** Минең кеүек йөҙҙө үтһәң, нишләрһең, кешекәйем?

**Ғәли.** Ҡых!.. Ошо йәшеңә етеп, холера ла, сибирская язва ла алманымы?.. Ҡарт кимек бит очень йәтеш үләткә кимерергә.

**Урал** *(вәкил аяҡтарына күҙ һалып).* һин әйткән ул ваба менән мөстән-юрға яр аҫтына ҡамыт аяҡлыларҙы ғына елдерә.

**Ғәли** *(уртын сәйнәп, бер урында тапанып).* Бынының ла контра, ҡартласик.

**Урал.** Эйе, туп-тура, братик.

**Ишмырҙа, Сафура һ.б. эркелә. Халыҡ тамаша ҡыла.**

**Ғәли.** Ә шулай ҙа ҡыҙыҡ бит, әй. Ошо йәшеңә етеп, тымау ҙа төшмәнеме?

**Урал.** Бер тапҡыр ҡаты тымаулап, бер тапҡыр сөскөрҙөм, буғай.

**Ғәли.** Ҡасан?

**Урал.** "Был тымау ҡайҙан төштө икән" тип аптырап, танауымды еңем менән һөртөп кенә торғанда, Микулай батшаның кәнтәй ҡатыны Александраның оҙон сәсле поп һөйәркәһен — Гриша Распутинды Орлов кенәздәр боҙ аҫтына батырған, имеш, тигән хәбәр килеп төштө. Тымауымдың Ғәләмәте...

**Ғәли** *(һыҙғырып).* Кәм тигәндә сирек быуат! Ә сөскөрөүең?

**Урал.** Сөскөрөүем ыңғайына Микулай батша үҙе тәхеттән осто.

**Көлөшөү.**

**Урал.** Ҡай берәүҙәр өсөн зерә һәләкәтле сыға минең сөскөрөү.

**Ғәли.** Интересно, оч-чень интересно! Ошо урында ейәнсәреңдең өҙөлөп-өҙөлөп һөйгәне, илдең бынамын тигәне — буласаҡ законный кейәүең үҙе ҡаршыңда баҫып торһа, ни эшләр инең, ҡартласым? Сөскөрөр инеңме, әллә бейер инеңме?

**Халыҡ һағая.**

**Урал.** "Балаҡай, шөшлөң һыныҡ түгелме?" — тип һорар инем.

**Ғәли.** Шөшлөһөҙ ҙә үткән булһа? *(Көлә).*

**Урал.** Шөшлөһөҙ генә үтмәй ул. Туҡта, ниңә эсең ҡатып көләһең әле? Әллә үҙеңдең шөшлөһөҙ кейәү була яҙғаның иҫеңә төштөмө?

**Ғәли.** Ха-ха-ха, әле генә кейәүең булырға торғаным тышҡа төрттө.

**Сафура.** Ҡара-ҡара, әллә тилереп бара?!

**Ғәли.** Тилереп барам шул, тилереп барам, һайыҫҡан! Булат балдаҡлы һуҡ бармағымдың ҡытығынан оч-чень тилереп барам! Оч-чень! Граждандар! *(Ҡулындағы ҡара бирсәткәне һала — бармағында булат балдаҡ атҡыланып нур сәсә).* Өйөрөлөгөҙ, һантыйҙар, свидетелдәрем булырһығыҙ... тантаналы туйымда! Күҙегеҙ сағылмаһын, ха-ха-ха!

**Күмәк тауыш бер юлы.** Булат балдаҡ?!. Ах!..

**Сафура** *(халыҡҡа).* Әйттем бит! Әйттем бит!

**Ғәли** *(тантана ҡылып).* Күрегеҙ, булат балдаҡ кем ҡулында, — йоҡлап сыҡтым эйәһенең ҡуйынында! *(Ҡара бирсәткәһен кейеп, йоҙроғон юғары сөйөп).* У-ух!.. Сәлисәкәйҙең йөрәге лә бына ошонда хәҙер — тибәлер лөбөр-лөбөр, ха-ха-ха!

**Сафура.** Әстәғәфирулла тәүбә! Ата-бабаның булат балдағын элгәндәр ҡоҙғон тырнағына!.. *(Үкереп илап ебәрә).* Бөгөн-иртән яу ҡубынһа, нишләрбеҙ?!. Сәлисәгеҙ юҡҡа ғына һалған тиһегеҙме булат балдағын?.. Ир-ат олағып бөтмәҫе элек татымаҡсы мөхәббәттең ҡаймағын... Ә мин... ә мин... урта бармаҡтай ирем була тороп... әллә ҡайҙа әрәм булып йөрөйөм!.. Ишмырҙа-а-ам, ҡайҙа һин, Ышанығым! *(Йүгерә).*

**Урал** *(тороп).* Сәлисә! Ейәнсәрем!

**Сәлисә.** Әү! *(Өлтөрәп килеп етә).*

**Урал.** Ысынмы шул?

**Сәлисә.** Юҡ! *(Икеләнеп).* Белмәйем... Бер нәмә лә белмәйем...

**Ғәли.** Һөйөклө кәләшкәйем, нисек инде... белмәйһең? Бөгөн-иртән хәләл ефетем булырға йөрөйһөң үҙең.

**Сәлисә.** Ҡәбәхәт! Уф, тыным ҡыҫыла... *(Быуылып йығыла башлай. Күтәреп алып китәләр).*

**Ғәли** *(Сәлисәгә ташланып).* Бәғерем, күҙ нурым... Һыу эсерегеҙ, йомшаҡҡа ятҡырығыҙ. *(Кире килә).* Күрҙегеҙме, кемдең башына кем типте?! "Миңә кейәүгә сыҡмаһаң, йәнеңде алам, тип ҡурҡытып, ни хәлгә килтереп еткерҙе был һылыуҡайымды әҙәм аҡтығы Сәлих — әҙәм ите ашаусы халыҡ дошманының балаһы!

**Күмәк тауыш:**

— Әҙәм ите ашаусы?!

— Сәлихтең атаһымы?!

**Ғәли.** Тап үҙе! ОГПУ-нан достоверный мәғлүмәт! Төрмәлә тештәрен сөйгә элеп ултырғанда шул Сәлихтең атаһы, әҙәм ите ашаусылар бандаһына ылығып, Сәлисәнең атаһын тотоп һуйған. Төн сыҡҡансы ботарлап, итен бешереп ашағандар, Сәлихтең атаһы уның башын ашаған...

**Күмәк тауыш:**

— Ах!..

— Егерме беренсе йыл аслыҡтағы кеүек икән...

— Булмаҫ!

**Ғәли.** Йөҙ йәшәр Урал ҡартығыҙҙан можно төпсөп һорарға. *(Уралға).* Дөрөҫөн әйт, ҡартласик: "Сәлихтең атаһы атайыңдың башын ашаған", — тинеңме ейәнсәреңә?

**Урал.** Тинем, "башын ашаған" тинем. Ләкин "бешереп ашаған" тип әйтмәнем...

**Халыҡ ҡайнаша, бил ҡайышына суҡмар ҡыҫтырған Сәлих атлығып сыға, ләкин суҡмарын һурып алып ҡалалар.**

**Сәлих** *(Ғәлигә ташланып).* У-у-ух, выжданһыҙ, мейеңде сәсрәтәм хәҙер! *(Вәкилде яғаһынан алып быраҡтыра).*

**Ғәли** *(ятҡан еренән милиция һыҙғыртмағын сөрөлдәтеп).* Үлтерәлә-ә-әр! Бригадмилиция!

**Еңдәренә ҡыҙыл бәйле мыҡты ирҙәр йүгерешә, бер нисәһе Сәлихтең ҡулдарын артҡа шаҡара, икеһе ауыҙы ҡанға батҡан Ғәлиҙе күтәреп торғоҙа. Шау-шоу.**

**Ғәли** *(ҡара бирсәтҡәле ҡулы менән башы осонда яһил бармаҡ янап).* Ҡых!.. Йыйын халыҡ дошмандары! Ҡоротормон тамырығыҙҙы! Сволочь! ОГПУ һәм

райком вәкиленә ҡул күтәреү — совет власына ҡул күтәреү ул! *(Сәлихкә төртөп күрһәтеп).* Алып китегеҙ халыҡ дошманын, туп-тура ОГПУ район бүлегенә! Капитан Ғәскәров иптәштең үҙ ҡулына! Ҡағыҙ көйләп бирермен. *(Ҡара бирсәткәле йөҙрогон болғап).* Илтеп еткермәһәгеҙ, целиком ауылығыҙҙың башына етәсәкмен! *(ЫНҒырашып йыгыла).*

**Халыҡ:** А-а-ай!..

**Сәлихте алып китәләр.**

**Ишмырҙа.** Их-ма!.. Әй, кем! Күрмәйһегеҙме ни, ник аңшайып ҡаттығыҙ? Яҫтыҡ яҫтағыҙ вәкилде... йәфҡәлләргә... ай, юҡ! — бәхилләргә! Йәне сыҡҡанға оҡшай, бәрәкалла...

**Сафура.** Уй-уй! *(Өтәләнеп).* Хәҙер, Ышанығым, хәҙер! *(Ҡабаланып йүгерә. Әйләнеп ҡарай).* Ясин сығырға кәрәкмәҫме? Башы осона Урал еҙнәкәйҙе лә саҡырығыҙ!

**Урал.** һә-һә-һә... Китегеҙ, сөскөрөгөм тота башланы!

**Ут һүнә. Бер талай тын торғас, ҡараңғылағы тауыштар.**

— Әй әттә генәһе, вәкил терелә ҡалһа, ни тип яуап бирербеҙ? Сәлих ҡасты бит әле!

— Ерән ҡашҡа юрғаһына менеп осто!

Бригадмилиция:

— Ҡыуып етергә! Тоторға!

— *(һыҙғырып).* Тотторҙо, ти, ҡойроғоноң ҡыл осон! Ерән ҡашҡаға етер менге тыумаған әле, ҡустым!..

**Аҡрынлап яҡтыра — Ай ҡалҡа. Һаҡмар буйындағы билдәле аҡлан. Донъя тын.**

**Сәлисә** *(ҡоштар сутылдауын моңайып тыңлап тора).*

Һаҡмар буйы йәмле бигерәк —
Аҡтирәк тә күктирәк.
һинең кеүек аҫыл-зирәк
Донъяға тыуа һирәк.
Ҡыҙ йөрәге — булат балдаҡ,
Аңларһың, булһаң зирәк.

Яна, тиһәң, ялҡыны юҡ —
Ялҡынһыҙ яна йөрәк...

Уф, һурылып-һурылып сығып бара йөрәккәйем. Сәлихем киткән яҡҡа, Саҡ-ҡошом осҡан яҡҡа... Хатта Тәңрем тыйғанда ла күкрәк ситлегемде ярып сығыр ул, Суҡ-ҡош булып осор ул Саҡ-ҡошомдоң яғына, янына...

Иртән тороп һыуға барһам,
Килә Саҡ, Суҡ тауышы.
Саҡ,Суҡ тауышы түгел ул,
Беҙҙең йөрәк ҡағышы:
Са-аҡ!
Су-уҡ!
Са-аҡ!
Су-уҡ!
Ҡара төндө ярып сыҡ!
Ике йөрәк ҡауышырлыҡ
Ярһыуыңды алып сыҡ.

Сәлихем! *(Илай).* Һинең менән минең хәлдәр Саҡ менән Суҡ кеүек шул... Ниңә аҡҡош беләктәремде һоноп муйыныңа һарылманым, ата-бабалар йолаһының ҡолона әүерелдем?!. Хәйерһеҙ сәғәттә иҫем китеп йығылып, вәкил-яуыз ялаһының тантанаһына юл ҡуйҙым?!.

Ҡыҙ балалар тыйнаҡ була,
Эсендә ут янһа ла.
Саҡ, Суҡ кеүек, ғүмеркәйе
Төн ҡабында ҡалһа ла.

Уф йәнем, Сәлихем... *(Йөрәкһеп).*

Һөйөр булһаң, Суҡҡайыңды
Аҙаштырып илатма.
Таң атҡанда йөрәккәйем
Сеңләп-сеңләп уята:
Са-а-аҡ!

**Берләм юлдың йылға яҡ осонан икенсе моң ҡушыла — алыҫтағы Сәлих.**

**Сәлих.**

Су-у-уҡ!

**Сәлисә.**

Са-а-аҡ!

**Сәлих.**

Су-у-уҡ!

**Сәлисә, Сәлих.**

Ҡара төндө ярып сыҡ!..

**Сәлих күренә, йөрәкһеп, Сәлисәгә табан килә, Сәлисә лә уға ҡарай талпына. Туҡталалар. Талпыналар. Туҡталалар. Талпыналар. Әммә аралар йыраҡ.**

**Сәлих.**

Алыҫтарҙан һағынып ҡайттым, һағынып ҡайттым,
Суҡҡайым, Суҡҡайым. *(Тирәклеккә төртөп күрһәтеп).*
Әнә тора Ерән ҡашҡа, ерән ҡашҡа
Атҡайым, атҡайым.
Лимон төҫлө һарғаябыҙ, һарғаябыҙ
Бит инде, бит инде.
Үбәйемсе алмалай ал, алмалай ал
Битеңде, битеңде.

**Сәлисә.**

Уй Сәлихем, кеше килер, ҡарттам күрер —
Ярамай, ярамай!

**Сәлих.**

Сәлисәкәй, йәнем-бәғерем, ҡарттаң беҙгә

Ҡарамай, ҡарамай! *(һағайып, тирә-яғына ҡарана).*
Бөтә донъя йомған күҙен, йомған күҙен *(күҙ йома)* —
Йом һин дә, йом һин дә!

**Сәлисә** *(күҙ йомоп).*

Сәлихем дә йомған күҙен, йомған күҙен —
һәм мин дә, һәм мин дә!

**Күҙ йомошоп, ҡулдарын һоношоп, бер-береһенә ynталалар, сәхнә лә "күҙ йомоп" ҡараңғылана.**

**Сәлисә, Сәлих.**

Уй Сәлихем!
Уй Сәлисәм!
Ярар микән?
Ярар, иркәм!

**Нимәлер дөһөрҙәп ауа, сәхнә ҡапыл күҙ сағылтып яҡтыра; ике йәш йөрәк араһында, һерәйеп, Сәлисә ҡаршыһында — Урал ҡарт, Сәлих алдында ҡамыт аяҡ Ғәли тора.**

**Урал.** Ейәнсәрем, ас күҙеңде! *(Ҡосаҡлап ала).* Аҡылһыҙлыҡ эшләмә!

**Сәлисә.** А-а-ай!..

**Ғәли** *(һыҙғыртмағын сөрөлдәтеп).* Бригадмилиция, алығыҙ халыҡ дошманын!

**Сәлих** *(үҙен тотҡан кешеләрҙән ысҡынырға тырышып).* Һин үҙең — ил дошманы!

**Бригадмилиция кешеләре, халыҡ йүгерешә. Дөйөм ығы-зығы.**

**Сәлисә.** Сәлихем!..

**Сәлих.** Сәлисәм!..

**Ут һүнә.**

## Өсөнсө күренеш

**Шул уҡ аҡлан, киске сула, ләкин инде күңелһеҙ икенсе көн. Бесәнселәр гөрләтеп уйын ҡормаҡсы, әммә осо осҡа ялғанмай. Бер ситтәрәк Урал ҡарт ултыра бошоноп.**

**Тауыштар:**
— Ҡыҙҙар, егеттәр, ниңә улай, һыу уртлағандай шымдығыҙ?
— Уйнап күңел асайыҡ!
— Егеттәр армияға китһә, һағынырбыҙ бер юлы!

**Егеттәр.**

Һаҡмар буйҡайҙары киртләс-киртләс,
Киртләстәре китер боҙ киткәс.
Гөрләп торған Һаҡмар буйҙарының
Йәме китер микән беҙ киткәс.

**Ҡыҙҙар.**

Һаҡмар буйҡайҙары туғай-туғай,
Туғайында һайрай буҙтурғай.
Иртә лә генә һайрай, кис тә һайрай,
Айырылмаһаҡ ине, ти, буғай.

**Ҡуҡырайып Ғәли килә.**

**Ғәли.** Отставить! *(Йыр өҙөлә).* Был ниндәй паникерство, пессимистик шыңшыу? Бөйөк атайыбыҙ Сталин етәкселегендә капитал донъяһын дөрөп алға барғаныбыҙҙа фәҡәт халыҡ дошмандары ғына шыңшырғы тейеш! Хәҙер үк ер һелкетеп бейей башларға! Ут сәсрәтеп баҫырға! Баҫкан һайын, ер шарының теге яғында капитал донъяһында бөйөк Максим Горький яҙған һары Иблес ҡалаһының нигеҙҙәренән кирбестәре ҡубып күккә сәсрәһен!
**Ҡыҙҙар:**
— Ғәли ағай, үҙең бер баҫып күрһәтсе!
— Бәлшәүиктәр нисек сәсрәтә икән?
**Егеттәр:**
— Ғәли Ғәлич, просим!
— Бәлшәүиктәрсә бер баҫмаһаң, ҡыҙҙар яратмаҫ үҙеңде!

**Ҡурай шаңғырай, күмәк бейеү ҡайнай.**

**Күмәк йыр.**

Һаҡмар буйы — һыулаулыҡ,
Бергә-бергә булайыҡ.
Йәш ғүмерҙәр үтер-китер —
Уйнап-көлөп ҡалайыҡ.

**Ғәли** *(елкенеп бейергә төшә).*

Мин — егет — яңғыҙ башым,
Күҙем дә ҡара ҡашым.
Арағыҙҙа уйнаҡлайҙыр
Ала торған кәләшем.

**Күмәк йыр.**

Ҡатыны ҡасҡан егет,
Ҡатыны ҡасҡан егет!
Һиңә тигән аҫыл кәләш —
Минең ҡартәсәм кеүек,
Ха-ха-ха! *(Ғәли, ҡуҙга баҫҡандай, ситкә сиргый, артынан йыр оҙата).*

Ҡамыт аяҡ кем тиһәгеҙ,
Ғәләмәт Ғәли була.
Һөйгән йәрең ташлап китһә,
ОГПУ-нан юлла. *(Йыр тына).*

**Күмәк тауыш.** Егеттәр, ҡыҙҙар, “аҡтирәк — күктирәк” уйнайыҡ, һөйгәндәрҙе барлайыҡ!

**Ғәли** *(йылп! итеп килеп сыга).* Не позволю шышы-бышы уйнарға!

**Егеттәр.** Ә һин, ҡара бирсәткә, ҡағылма беҙҙең ҡыҙҙарға! *(Күкрәк кереп ҡаршы килә башлайҙар, ләкин , яңы ваҡига булә быларҙы).*

**Тауыш. А**ғай-эне-мыртыҡай, , яңылыҡ! Сәлихте алып киткән теге бригадмилиция ҡайтты әйләнеп.

**Еңдәренә ҡыҙыл бәйлеләр ашығып майҙанға уҙа, бөтәһе лә бошонҡо.**

**Ғәли.** Тапшырҙығыҙмы ОГПУ капитаны ғәскәровҡа? Ҡайҙа расписка?

**Ҡыҙыл бәйле.** Расписка бирмәне... ***хәрби комиссар.***

**Ғәли.** Ә?! То есть как? Почему хәрби комиссар?

**Ҡыҙыл бәйле.** То есть так. Потому хәрби комиссар. Ул, Ҡыҙыл Армияға яҡшы аттар әҙерләп биргәне өсөн, Сәлихтең ҡулын ҡаты ҡыҫты, ҡайнар рәхмәтен белдерҙе. Үҙең килеп шәп иттең, тине. РККА-ға бөгөндән, бик ашығыс, немец телен яҡшы белгән һинең кеүек аҫыл егеттәр кәрәк, ҡәҙерле иптәш Сәлих Таңатаров, тине. Хәҙер үк киске поезға ултыраһың да — аллюр туп-тура Мәскәүгә, махсус мәктәпкә, тине. Тирмәнсебеҙ немец бабайҙан өйрәнеп, фашист телен һыу кеүек эсә ине бит.

**Ғәли** *(баш сайҡап).* Не может быть! Ылғый дошман козняһы! Ниңә тура ОГПУ капитаны ғәскәровҡа илтмәнегеҙ ҡағыҙҙы?

**Ҡыҙыл бәйле.** Капитан Ғәскәров ул ҡағыҙыңды уҡып та торманы, уҫал һүгенеп, күҙ алдыбыҙҙа йыртып ташланы. Ул ғына ла етмәһә, өҫтөнә төкөрөп, аяҡтары менән тапаны. Әгәр ҙә иптәш Ғәли Ғәлич ошо эҫе мәлендә үк добровольно фронтҡа китмәһә, — каюк! — уға урын Магаданда, тине. Шунан һуң, Сәлихтең арҡаһынан һөйөп, көллөбөҙҙө баяғы хәрби комиссарға ебәрҙе.

**Ғәли. Клевета!** Обман!

**Ҡыҙыл бәйле.** Һуғыш ваҡытында обманларға... башыбыҙ түгел болван.

**Күмәк тауыш:**

— Ә?!

— Һуғыш?!

— Кем менән һуғыш?!

**Ғәли.** Отставить! Вражеская пропаганда өсөн, беләһеңме, Уголовный кодекста нисәнсе статья?!

**Ҡыҙыл бәйле.** Ышанмаһаң, *(ҡуйынынан оло конверт сығарып тоттора)* бына ҡара — эсе тулы повестка. Беҙ ҙә үҙ повесткаларыбыҙҙы алдыҡ. *(Башын баҫып сығып китә. Ҡатын-ҡыҙ, бала-саға сыулап илай).*

**Ғәли** *(конверттан ус яҫыһындай ҡағыҙҙы алып уҡығас, байтаҡ ҡына тын ҡалып, тамағы ҡарлығып, халыҡҡа иғлан ҡыла).* Иптәштәр! Совет иленең арыҫлан йөрәклеләре, тыңлағыҙ! Юғарынан телефонограмма килде, бына ул. *(Уҡый).* "1941 йылдың 22 июнендә, иртәнге сәғәт дүрттә, Гитлер Германияһы ғәскәрҙәре, һуғыш иғлан итмәйенсә, мәкерле рәүештә беҙҙең дәүләт сиктәренә һөжүм ҡылды, тыныс ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы утҡа тотто... Яуыз фашизмға ҡаршы совет халҡының Ватан һуғышы башланды"...

**Халыҡ.** А-а-ай... *(Сәхнә ҡатып ҡала).*

**Ғәли.** Повесткаларҙы таратып алығыҙ ҙа ошонда уҡ теҙелегеҙ, иптәштәр. *(Повесткалар ҡулдан-ҡулға тарала).* Ә мин үҙем... үҙем... *(күкрәк һуғып)* добровольно китәм тура фронтҡа! Ура! *(Халыҡ өнһөҙ).*

**Ким** *(тамаҡ ярып).* Ур-ра-а-а! *(Дәртләнеп ырғандай — вәкил тирәһендә "самокат" яһап әйләнә. Көлөшөү).* Мин дә доброволь китәм!

**Сафура.** Сеү, тамағыңа таш тормағыры!

**Ир-ат, ҡатын-ҡыҙ бер-береһенә ыҡталып ҡосаҡлашалар.**

**Урал.** Бына был булыр алыш... баш һалыш.

**Сафура** *(үкереп илай).* Уй хәсрәтле башҡайым, уй зарлы мендәркәйем!.. Ап-аҡ яҫтыҡтарға кемде һалырмын, көмөшөмдәй ниндәй көмөш табырмын?.. Ишмырҙаау, ҡайҙа олаҡтың, мәлғүн?! *(АҒаслыҡҡа уҡтала).*

**Сәлисә.** Берҙән-берем, ғәзиз йәрем иҫән ҡалһын, Илаһым.

**Бөтә сәхнә.**А-а-ай!..

**Егеттәр, ҡыҙҙар.**

Ил ғәме ауыр бигерәк,
Күтәрергә иң кәрәк.
Айырылышыу минуттары
Етә, буғай, иртәрәк.
Аҡтирәк — күктирәк,
Йөрәктәр яна көйрәп.
Һөйә биреп, һөймәй ҡалыу
Ҡыйын икән бигерәк...

**Сәлисә.**

Гитлер яуы ябырыла —
Ватан ут, яраларҙа.
Ҡауышырға яҙмағандыр
Беҙгә тиҙ араларҙа.

**Бөтә сәхнә.** А-а-а-й!..

**Урал** *(сафҡа теҙелгән, китергә йыйынған ир-атҡа).* Урал батыр тоҡомдары, ғәзиздәрем, Ватан өсөн изге яуҙа Еңеп ҡайтып ҡыуандырығыҙ йөҙ йәшәр

бабайығыҙҙы! Берлинға барып етеп, дәжжал ояһын туҙҙырығыҙ, ҡара ҡурғаш пүлгә ҡойған ил нәфрәтен Гитлерҙың ҡара йөрәгенә атығыҙ!

**Күмәк тауыш.** Амин! Ошо булһын антыбыҙ!

**Ир-ат аҡрын ғына ҡуҙғала, оҙатыусылар эйәрә. Ағас араһынан Ишмырҙа, ҡаҙмендәрен ҡултыҡлаған Сафура атлығып сыға.**

**Сафура.** Ышанығым, тим, Ышанығым!.. Үҙеңде өҙөлөп-өҙөлөп һөйөүемә, мәңге онотмаҫыма ышанаһыңмы?

**Ишмырҙа.** Ышанам, ышанам.

**Сафура.** Әгәр ҙә, тим, минең хаҡта ғәйбәт ишеттерһәләр, Сафураң һине онотҡан икән, тиһәләр, шуға ышанырһыңмы?

**Ишмырҙа** *(ҡул һелтәп).* Ышанырмын, ышанырмын. *(Китеүселәргә барып ҡушыла).*

**Сафура.** Ышанма, ышанма! Ышаныҡ Ишмырҙа булһаң да быға ышанма!

**Бөтә сәхнә.** А-а-а-й!..

**Танауын трактор майы ҡарайтҡан Ким, хәле бөтөп, йүгереп килеп етә.**

**Ким.** Туҡтағы-ы-ыҙ, мин дә китеүселәрҙән! *(Атаһы артынан тағылып, башҡалар ыңғайына маршҡа баҫып бара).*

**Сафура.** Ки-и-им! Значогым! Сәсрәп кенә китмәгере, сәсрәп кенә китмәгере! Атайыңдан элек үҙең тығырға булдыңмы ни башыңды тамуҡ утына?! *(Сафтан һөйрәп алып, түбәләй-түбәләй, кирегә елтерәтә, Киме шарылдап илай).*

**Бөтә сәхнә.** А-а-ай!..

**Сәхнә төбөндә ҡанлы ялҡын ҡабына, болоттар аҡтарыла, халыҡ һыҡтап хушлаша. Китеүселәр, сәхнә буйынан йырлап уҙып, сәхнә артындағы ҡанлы ялҡын ҡосағына ағыла. Башҡорт халыҡ йыры "Ерән ҡашҡа" күмәк тауыштан һыҙыла. Урал ҡарт, Сәлисә баҫҡан урындарында ҡатып тора.**

**Ҡыҙҙар.**

Иҫән генә йөрөп һау ҡайтығыҙ,
Китәһегеҙ, китәһегеҙ инде лә ҡуҙғалып.

**Ҡыҙҙар, егеттәр.**

Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Елдәр тарай ялҡайын.
Эйәрләгән егетеңде
Ташлап ҡайтма, малҡайым,
Э-э-эй... ташлап ҡайтма, малҡайым.

**Егеттәр.**

Йәйләүҙәрҙе ташлап, ҡорал алып,
Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ менеп тә аттарға.

**Егеттәр, ҡыҙҙар.**

Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Алдан елдер, малҡайым.
Эйәрендә егете барҙа
Бойоғоу белмәҫ малҡайым.

**Бөтә сәхнә.** А-а-ай!..

**Сәлисә.** Ҡарттайым! Аҙашты булат балдаҡ... хәйерһеҙҙең ҡулында... *(Илай).*

**Урал** *(ҡыҙҙың башынан һыйпап).* Илама, ейәнсәрем. Булат балдаҡ аҙашмай ул. Утта янмай, һыуҙа батмай торған булат балдаҡ ул! Лайыҡһыҙын ситкә ҡаға, лайыҡлыһын эҙләп таба торған булат балдаҡ ул!

Бахырҙарын илдең хурлап,
Батырҙарын илдең нурлап,
Булат балдаҡ ҡайтыр урап!

**Күмәк йыр.**

Батырҙарын илдең нурлап,
Булат балдаҡ ҡайтыр урап!

**Сәхнә төбөндә ҡанлы ялҡын дөрләй, болоттар ҡубарыла, халыҡ ҡанлы ялҡынға ҡарай ағыла ла ағыла, аҡрын ғына ут һүнә.**

## Шаршау

# ИКЕНСЕ ШАРШАУ

## Дүртенсе күренеш

**1942 йылдың яҙы, фронт һыҙығында эҢер. Тирә-яғын аҡҡайындар ҡаймалаған аҡлан, ҡусҡыл үлән. Ваҡыт-ваҡыт снаряд һыҙғырыуҙары, гөрһөлдәп ярылыуҙары. Һирәк-һаяҡ ат кешнәгән, танк моторҙары гөрләгән тауыш. Күренеүенсә, бында ғәскәр туплана, һөжүмгә әҙерләнә. Өсөнсө күренештәге сәхнә төбөн алһыулаған ҡанлы ялҡын бында ла көллө сәхнәне монарлаған. Ҡуйы ҡара һаҡал үҫтереп, билен бөкөрәйтеп "бабай" төҫөнә кергән обоз һалдаты Ғәли, карабинын беләгенә элеп, үҙ алдына өҙгөләнеп һөйләнә.**

**Ғәли.** Эх-ма!.. Тылдағы санчасть кухняһында "бабай"ҙарса шухыр-мухыр ғына йөрөп-ятҡанымда, обозға олаҡтырҙылар... Өҫтәүенә, патрон тейәлгән арбамда фашист тылына рейдҡа кереп китергә... Ғәзиз башҡайымды харап итергә... Эх-ма!.. Ниңә яртылыҡ юлда ултырып ҡалманым?! Йәки йөктө соҡорға ауҙарып ҡайтманым?!. *(Күҙ йәштәренә төйөлөп).* Минән башҡалар ҙа етерлек тамуҡ ауыҙын тығырға!.. Тере килеш, тере килеш кәрәкле мин Ватанға! *(Илап, залға төртөп күрһәтеп).* Унда мине һөйгән йәрем, һөйләйһе телмәрҙәрем, яуаплы вазифам көтә! һөйгән йәрһеҙ, телмәрһеҙ, вазифаһыҙ *(залға төртөп күрһәтеп)* миллион-миллион аңыш быҙауҙарҙың кәүҙәләре лә етерлек был мясорубкаға тығырға! Ә мин *(үкһеп)* мин бит донъяла тик берәү генә, берҙән-бер генә!.. Уникум!.. *(Илау ҡатыш ярһып).* Ни эшләргә?! Ни ҡылырға?! Юҡ! *(Карабинын ҡулына алып).* Быҙау түгел мин күрәләтә тамуҡ киҫәүе булырға!

**Ишмырҙа йыры һыҙылып ишетелә башлай, сәхнә түңәрәге яй ғына әйләнә — бөксәйгән "бабай" Ғәли һыны ағастарға ышыҡлана. Автоматын арҡаһына аҫып, ап-аҡ ҡайынды ҡосоп йырлап торған Ишмырҙа биләй сәхнәне.**

**Ишмырҙа.**

һеҙҙе ҡурсап көн-төн утҡа инәм,
Һаҡмар һыуым, тыуған яҡтарым.

Һөйөүемде илгә алып ҡайтһын
Өсмөйөшлө һалдат хаттарым.
Ҡайырырбыҙ ҡара яуҙы,
Ватан иркен тын алыр.
Һәләк булһаҡ онотмағыҙ,
Ултыртығыҙ ҡынагөл.
Смоленскиға килеп еттек,
Ҡаһым түрә үткән эҙҙәрҙән.
Хәбәрҙәрҙе беҙҙең белерһегеҙ
Иртә-кисен иҫкән елдәрҙән... *(Автоматын агаска һөйәп, ултыра).*

Их Сафурам, Сафурам, ала һайыҫҡан ғынам! Һине күрмәгәнгә инде икенсе йыл... Күпме уттарҙы кистем, күпме ҡандарҙа йөҙҙөм... Бөгөн-иртән дивизия дошман тылына — рейдҡа инергә тора. Беҙ, разведчиктар, алдан кереп китәбеҙ... И-и-их, ҡапыл һуғыш бөтһөн ине лә фәрештәләй аҡ түшле һайыҫҡаным, ап-аҡ ҡаҙмендәрен ҡосаҡлап, *(ҡайын төбөнә төртөп күрһәтә)* бына ошонда осоп килеп төшһөн ине... белер инем нисегерәк билен өҙгәнсе ҡыҫырға! *(Күҙҙәрен йомоп).* И-и-их!.. һағындырҙың, һайыҫҡаным, ҡолаҡ төбөмдә бер өҙләкһеҙ шыҡырыҡлауҙарыңды һағындым. *(АҒас башында һайыҫҡан шыҡырыҡлай).* Һайыҫҡаным, һайрауҙарың ниндәй моңло һинең! Туҡта!.. *(Үкенеп).* Их, осто!.. Шыҡырыҡланы ла осто. Шым! һаҡ бул, атлы разведка! Кемдер килә. *(Ыргып тороп автоматын ала, ҡуйы саукалыҡҡа боҫа).*

**Бәләкәй сумаҙан тотҡан, арҡаһына автомат аҫҡан Остап күренә.**

**Остап.** Йә, ҡорал оҫтаһы Остап Бондаренко, тылсымлы ҡорамалдарыңды күтәреп, утлы һыҙыҡҡа килеп терәлдең йәнә. *(Тирә-ягына ҡарана).* Һәй, гүзәл дә һуң был урында ул һыҙыҡ!.. Хәҙергә гүзәл, эйе, ә бер-ике көндән көлгә әйләнәсәк. Күпме ожмах ҡосаҡтарын тамуҡ яһап үтте был утлы һыҙыҡ! *(Сәхнә төбөнә төртөп күрһәтә).* Көнбайышҡа табан алдан ҡанлы ут валы тәгәрләп бара, уға тағылып Остап бара... Мәскәү янынан уҡ бара ла бара. Әммә гүзәл Днипро буйҙары, ҡыйыҡтарына ҡауҙы ҡоштар оя ҡорған шәкәрҙәй ап-аҡ хаталар күренмәй һаман... Был утлы вал уларҙы ла көйҙөрөп үтерме икән? *(Сумаҙанын ҡуя, аҡҡайынды ҡосоп моңая).*

Ой Днипро, Днипро, зәңгәр һыуым,
Күктәр зәңгәрлеге күҙеңдә.
Алыҫтан һағынып килә улың,

Юлдары ялҡында, төтөндә.
Әсәйем Украинам,
Тупрағың күкрәктә.
Шул тупраҡ фашисҡа
Үс-нәфрәт дөрләтә.
Ой Днипро, Днипро, һағышым һин,
Күҙҙәрең мөлдөрәй йәш менән.
Йәнемде бирермен һинең өсөн,
Дошманды еңергә ашҡынам.
Әсәйем Украинам,
Иңрәүең ҡолаҡта.
Ҡара яу еңелер,
Ҡалмаç ил ҡоллоҡта.
Ой Днипро, Днипро, күҙ нурым һин,
Төçөңдө ут аша күрәмен.
Таңдарың саф, тыныс атһын тип,
Уттарға, һыуҙарға керәмен.
Әсәйем Украинам,
Ораның йөрәктә.
Ил барҙа беҙ эйә
Еңелмәç ҡөҙрәткә.

Их Оксана, Оксана! *(Хыялланып).* Хәтереңдәме, Оксана, Днипроның бейек яр башы, шәкәрҙәй ап-аҡ хаталар, йәйге тымыҡ кистәр... Икебеҙ тиң эштән арып ҡайтып, ҡояш кеүек сағыу һары көнбағыш сәскәләре аçтында яй ғына мөңгөрләшеп ултырып ашай инек. һин миңә, саҡ ҡына асыуланған булып, сирекле шешәнән тукһан алты ат ҡеүәтлене ун дүрт ҡырлы стаканға ҡолон күҙеләй мөлдөрәмә тултырып бирә инең. Мин уны төбөнәсә түңкәреп, ауыҙҙы бына ошолай итеп һөртөп, өçтөнән һары һарымһаҡлы сусҡа майы менән баçтырыҡлап ҡуя инем дә, әүешеп иңгә яҡкан һары көнбағыш сәскәһен һыйпай-һыйпай, хатала һинең зәңгәр күҙле ҡыҙыбыҙ Мопраны наҙлап йоҡлатыуыңды, үҙебеҙгә лә йомшаҡ урын һалыуыңды көтөп ултыра инем. Ә ҡыйыҡта инә ҡауҙы ҡыштыр-ҡыштыр оя үрә ине... Күп тә үтмәй, баҡса яҡҡа асыҡ тәҙрәнән һинең йоҡомһораған моңло иңрәүең ишетелер ине: “Оста-а-ап, йәнем, мин яттым. Ниңә һаман инмәйһең?..”

**Ағас араһынан Ишмырҙаның башы күренә.**

**Ишмырҙа.** “Оста-а-ап, йәнем, мин яттым. Ниңә һаман инмәйһең?..”

**Остап** *(һиҫкәнеп).* Ә? Нимә?! Оксана... *(Ишмырҙаны таный).* Һәй буласаҡ Ишмырҙа ҡоҙа!

**Ишмырҙа.** Салют, буласаҡ Остап ҡоҙа! *(Ҡосаҡлашалар).*

**Остап** *(сәхнә төбөнә төртөп күрһәтеп).* Тағы теге яҡтанмы?

**Ишмырҙа.** Шул яҡтан. Ә һин, ҡоҙам, ҡайҙа Юғалып торҙоң?

**Остап.**. Үҙең белгән Ҡара Торна һаҙлығында ағас пушкалар ҡорҙом, көбәктәрен фашисҡа ҡарай борҙом. Күҙҙәрен тондорорға.

**Ишмырҙа.** **Ағ**ас? *(Көлә).* Шыршы тубырсыҡтары һалып атырғамы?

**Остап.** Бер генә ып-ысын “катюша” йырлап йөрөп тора шул тәңгәлдә. Аратирә фашистарҙың кәйефенә сиртергә лә күҙҙәрен буярға.

**Ишмырҙа** *(һуҡ бармагын ауыҙына арҡыры ҡуйып).* Т-с-с-с! *(Кеҫәһенән коньяк сыгарып сөйә).* Бына һиңә шул “катюша”ның көлөнә әйләнмеш фрицтарҙан күстәнәс.

**Остап.** Һоп! *(Тотоп ала, этикеткаһына күҙ һала).* О-о-о, француз коньягы! *(Үҙ сиратында фляғаһын сисеп алып, ҡапҡасына араҡы ҡоя ла Ишмырҙага бирә).* Французлыҡы тыловиктарға ҡалһын, үҙебеҙҙекенә сылатайыҡ тамаҡты. Булдыҡ шәп! *(Ишмырҙа — ҡапҡастан, Остап фляганан сәкәштереп эсәләр).*

**Ишмырҙа.** Булайыҡ шәп: икебеҙҙең дә йән дә, аяҡ-ҡул да, баш та һәм... башҡаһы ла булһын теүәл!

**Остап.** Нимә, Ишмырҙа ҡоҙа, “һәм башҡа”һыҙ ҡалһаң әгәр, ҡатының ҡабул ҡылмаҫ тип шөрләйһеңме?

**Ишмырҙа.** У-у-у, Остап ҡоҙа, минең ҡатын бөтә яҡлап бөтөн булғанды ярата!

**Остап.** Минеке лә һинекенән кәм түгел. *(Көрһөнә).* Тик үҙҙәрен генә Хоҙай теүәл ҡалдырһа ине.

**Ишмырҙа** *(бармаҡ янап).* Әллә Хоҙай тураһында шулай хәтәр уйлайһың?..

**Остап.** Хоҙайҙан да бигерәк, Иблес ҡурҡыта мине. *(Араҡы һалып бирә).*

**Ишмырҙа** *(араҡыны тотоп).* Иҫеңдәме мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ беренсе йыл, етенсе ноябрь, Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙаны?

**Остап.** Уң яҡта Кремль, даһи мавзолейы... һинең менән бер сафта граниттарға шыҡылдата баҫып барабыҙ.

**Ишмырҙа.** Трибунанан юлбашсы үҙе өндәшә, Мәскәү янына килеп еткән яуыз дошмандың муйынын бороп ташларға саҡыра.

**Остап.** Парадтан утҡа керҙек, ысынлап та фашист дивизияларының муйынын борҙоҡ.

**Ишмырҙа.** Шул көстө беҙгә кем бирҙе? Ышаныс!

**Остап.** Эйе, ышаныс.

**Остап, Ишмырҙа** *(яурындарына ҡулдарын һалышалар).*

Оло яуҙар кискәндә, утҡа-һыуға ингәндә
Терәк булды беҙгә ышаныс.
Һөйгән йәрҙәр алыҫта беҙҙәт еғалтҡан саҡта
Кәрәк булды беҙгә ышаныс.
　　Ышаныс, ышаныс,
　　Йәшәйбеҙ ныҡ ышанып.
Пүлдәр жыйлап үткәндә, күкрәктәрҙе тишкәндә
Һаҡлап килде беҙҙе ышаныс.
Ҡан эсендә йөҙгәндә, ут эсендә түҙгәндә
Ҡөҙрәт бирҙе беҙгә ышаныс.
　　Ышаныс, ышаныс,
　　Йәшәйбеҙ ныҡ ышанып.
Тыуған илгә ышанһаҡ, һөйгән йәргә ышанһаҡ,
Яуҙы еңеп ҡайтыр ышаныс.
Ышанығыҙ беҙгә лә, тыуған ил һәм һөйгәндәр,
Ирҙең тоғро анты — ышаныс.
　　Ышаныс, ышаныс,
　　Йәшәйбеҙ ныҡ ышанып.

**Остап** *(араҡы ҡоя).* Бер нәмәгә генә беҙ ышанманыҡ — беҙҙең еңелеүгә. Ошо ике нәмә өсөн — ***ышаныу*** һәм ***ышанмау*** өсөн! *(Сәкәштереп эсәләр).*

**Ишмырҙа** *(биҙәп сигелгән сепрәк янсыҡ, бер бөкләм папирос ҡағыҙы сығарып һала).* Көйрәтеп тә алайыҡсы, ҡоҙаҡай, — беҙ янғансы, ул янһын! *(Ййлап тәмәке төрәләр).*

**Остап.** Һм-м-м... *(Ишмырҙа һалған папирос ҡағыҙына иғтибар итеп).* Ҡара әле, буласаҡ ҡоҙа, ҡайһы телдә яҙылған был каракуль? Хәрефтәре — урыҫ, ә үҙен уҡыуы ыҙа.

**Ишмырҙа** *(ҡул һелтәп).* Ә!.. Беҙҙең телдә. Между прочим, унда һүрәтләнмеш әҙәм аҡтығы — минең ауылдаш тағы.

**Остап.** Бәй, ниңә “әҙәм аҡтығы”?

**Ишмырҙа.** Фашист листовкаһы ул. Генерал фон Шмультке ҡул ҡуйған. Баяғы шул әҙәм аҡтығы, имеш, бөйөк арийҙар яғында ғәййәр мосолман легионы ойоштора, һәммәбеҙҙе легионға саҡыра.

**Остап.** Бик хәтәр ҡағыҙ бит был.

**Ишмырҙа.** Бото бер тин беҙҙәргә. Шул сүп тейәлгән машинаны яндырҙыҡ. Бер усламын хәжәткә ҡалдырғайным, рәхәтләнеп көйрәтәм.

**Остап.** Ниңә ундай тайғаҡ юлдан китте икән ул? Ауылдашыңды әйтәм.

**Ишмырҙа.** Үҙемдең дә баш ҡатҡан. Бик сая, белемле, аҡыллы егет ине. Һуғыш сыҡҡас та, немец телен яҡшы белә тип, илдән элек алып киттеләр үҙен.

**Остап.** Да-а-а... үҙебеҙҙең разведкала йөрөмәйме икән ул?

**Ишмырҙа.** Белмәйем, белмәйем...

**Остап.** Да-а-а... *(Сәсәй-сәсәй төтәтеп, янсыҡҡа күҙе төшөп).* Янсыҡтың да янсығы икән тағы.

**Ишмырҙа.** Сафурамдың ҡул төҫө.

**Остап.** Ә минекеләр...

**Ишмырҙа.** Сафурам яҙа, беҙҙең төпкөл ауылға ла Украинанан ҡасаҡтар килгән, ти, бит, әй. Бәлки, тим...

**Остап.** И-и-их!.. Шулай булһын ине лә...

**Яҡында ғына танк моторы гөрөлдәй.**

**Остап** *(ҡапыл маңлайына һуғып).* Пардон! Танкистарға прибор ҡуйып биргәйнем, бер шөрөбө кеҫәмдә тороп ҡалған. Мин — хәҙер! *(Автоматын, сумаҙанын алып йүгерә, листовка өҫтөнә ҡуйған фляғаһы тороп ҡала).*

**Ишмырҙа.** Туҡта! Вәт Ғәләмәт! *(Ситкә төкөрөп).* Тфү, Ғәләмәт Ғәли әйтмешләй!

**Остап киткән яҡта мылтыҡ шартлай.**

**Ишмырҙа** *(автоматына йәбешеп).* Остап! *(Мылтыҡ атҡан яҡҡа йүгерә).*

**Аҡланға ҡупшы хәрби кейемле ҡыҙ килеп сыға — күршеләге танкылар ғәскәренән дошман тылына разведкаға китергә йыйынған Сәлисә ул.**

**Сәлисә** *(табын янында туҡталып).* Вәт Ғәләмәт: табыны бар, ә хужаһы юҡ. Хатта фляғаһының ауыҙы ла ябылмаған. Разведка күҙенән ҡарағанда, бында ике кеше булған. Ике кеше бер кешенән шөрләп тайҙымы? Икеле. Дөрөҫөрәге, миңә танытырға теләмәгәндәрҙер үҙҙәрен. Ни өсөндөр мылтыҡ та шартланы, етмәһә. Ҡойроҡтарына баҫырғамы? Юҡ, ярамай. Үҙеңдең махсус задание менән дошман тылына үтергә килгәнеңде, армия разведкаһы лейтенанты икәнлегеңде онотма, Сәлисә иптәш. Бында һинең йөҙөңдө лә мөмкин тиклем аҙ кеше күрергә тейеш... Бөгөн бында — лейтенант, ә иртәгә ҡоҙғондар ояһында — обер-лейтенант!

*(Табындағы фашист листовкаһын ҡулына ала).* Был ни тағы? *(Уҡый).* "Штурмбанфюрер Сәлих әфәндә Хәмиди"?! *(Йөрәген тотоп).* Уй Аллаҡайым!.. Һүрәте лә уныҡы... үҙенеке!.. *(Ҡағыҙҙы усында йомарлап йүгерә).* Уй Сәлихем!.. Һинме Хәмиди?!. *(Күҙҙән юғала).*

**Ағас араһында ыңғырашыу, һүгенеү. Ниндәйҙер бер ҡыҙыл әрмисте елкәһенән бөрөп, автомат тотҡан икенсе ҡулының беләгенә уның карабинын элеп, Ишмырҙа елтерәп килеп керә. Ҡыҙыл әрмис оҙон ҡара һаҡал ебәргән, бөтмөш ҡартҡа оҡшап бөкөрәйгән. Ул — Ишмырҙаның ауылдашы, баяғы Ғәләмәт Ғәли үҙе. Ишмырҙа уны танымай.**

**Ғәли.** Уй-уй, елкәмде умырҙың ғуй! Мин — обоз һалдаты, мин һеҙгә тылдан ҡорал килтерҙем, ебәрегеҙ мине, иптәш сержант!

**Ишмырҙа.** Һалдат түгел — самострел һин! Үҙ ҡулыңды үҙең атып, рейдтан янтайып ҡалырға самаланың, әҙәм аҡтығы! *(Һелкеп ырғыта).*

**Ғәли.** Иптәш сержант, мин үҙемде атманым. Арҡамдағы вещмешогымдан үрелеп икмәк алғансы ғына , яңылыш атылып китте.

**Ишмырҙа.** Мөртәт! Үҙ ҡулыңа икмәк үтә атҡанһың! Дары эҙе ҡалмаç, врачтар белмәç, тинеңме?!

**Ғәли.** Уй ҡулым, уй ҡулым... *(Ҡулына иғтибар итеп, шаҡ ҡатып үҙ алдына).* Вәт ғәләмәт, ниңә ҡаны сыҡмай һуң?..

**Ишмырҙа.** Шаҡшы! Хәҙер үҙеңде... ошонда уҡ... *(Автоматын тоçҡай).* Теҙлән!

**Ғәли.** Уй-уй иптәш сержант, атма, сержант, зинһар, ҡарт-ҡороно рәнйетмә! *(Тубыҡлана, йөгөнөкләп килеп, Ишмырҙаның аяҡтарын ҡосаҡлай).* Обозник мин — бабаймын! Зинһар, бөтөрмә мине! *(Аптырап, үҙ алдына).* Вәт Ғәләмәт, ниңә ҡулда яра юҡ?.. *(Баш сайҡап).* Булат балдаҡ һаҡлаған! Уй-уй, бармағым һыртҡа ҡарағанғуй!..

**Ишмырҙа.** Бармағың да тап үҙең һымаҡ икән! Ултыртайыҡ һыртлашты урынына. *(Тегенең бармағынан тарта).* Быуыны ғына сыҡҡан бит.

**Ғәли.** Уй-уй, бармағым төҙәйҙеғуй... Бармағым... *(Аҡырып).* Ҡайҙа минең балдағым?!

**Ишмырҙа** *(юғары сөйөлгән ҡулында булат балдаҡ сатҡыланып нур сәсә).* Бына ул, ауылыбыҙҙан урланған булат балдаҡ! Ҡараҡ! Был ҡап-ҡара һаҡалды ла берәүҙән урланыңмы?! *(һаҡалынан тартып торғоҙа).*

**Ғәли.** Уй-уй, Ишмырҙа туғаным!..

**Ишмырҙа** *(төкөрөп).* Тфү, Ғәләмәт Ғәли! Ҡара һаҡалмы, тиһәм, ҡара эсле һин икәнһең, ҡәбәхәт! Йәнеңде алайым әли!

**Ғәли** *(турайып, бармаҡ янап).* Шалишь, брат, алҡымыңдан кодекс алыр урап! *(Ҡулын һонол).* Ҡайҙа самострел, ҡайҙа ҡан? Намыҫлы боецҡа яла яғаһың, дошман!

**Ишмырҙа.** Бәй-бәй-бәй, кем дошман?!.

**Ғәли.** Кем тип ни, әллә теге Сәлих дуҫыңдың фашистарға һатылыуын белмәйҙәр, тиһеңме? Үҙең дә уның артынан тайырға йыйындыңмы? Бир булат балдағымды!

**Ишмырҙа** *(Ғәлиҙе, елкәһенән бөрөп тотоп, карабинын муйынына элеп, арт һанына тибеп осора, Ғәли олага).* Бына һиңә булат балдаҡ! Осрашһаҡ, икенсе осаңа кирза табан мөһөрөнөң икенсеһен дә алырһың ҡабат!

**Аҡрын ғына ут һүнә лә ҡабат ҡабына, аҡланда Сәлисә яңғыҙ үҫкән аҡҡайынды ҡосаҡлап илап тора.**

**Сәлисә.**

Баҙар барҙым, алма алдым,
Алмалары һау микән.
Сәлих йәнем, Сәлих бәғерем,
Йөрәк өҙгөс яу икән.
　　Аҡтирәк — күктирәк,
　　Йөрәктәр яна көйрәп.
　　Бер күрергә зар булыуы
　　Ауыр икән бигерәк.
Күптән инде хәбәрең юҡ,
Был хәбәрең хаҡ микән?
Булат балдаҡ — һиңә ят зат,
Ә һин уға ят микән?..
　　Аҡтирәк — күктирәк,
　　Йөрәктәр яна көйрәп.
　　Саҡ, Суҡ һымаҡ тилмереүҙәр
　　Ҡыйын икән бигерәк.

**Сәхнә ҡабат аҡрын ғына ҡараңғылыҡҡа сума.**

## Бишенсе күренеш

**Төн, күктә тулы Ай йөҙә. Урмандағы элекке пионер лагеры (бина маңлайында “Пионерлагерь “Луч” тигән яҙыуы һаҡланған), ә хәҙер фашистарҙың , яңы төҙөлә башлаған “мосолман легионы” штабы. Ишек башында ярым Ай һүрәтле йәшел флаг һәм булат балдаҡ символын аңлатҡан аҡ бутал түңәрәк элеүле. Немецсә һәм ғәрәп яҙыулы башҡортса белдереү: “Булат балдаҡ” исемле мосолман легионы”. Асыҡ тәҙрәнән күренгән иркен залда ярты стенаны иңләгән “фюрер” портреты. Тамашасы ҡаршыһында бинаның бик күп эске һәм тышҡы ишектәрҙән ғибәрәт ҙур залы, тышҡы ишек алды, ихатаны ураҡҡан оторо тимер сыбыҡлы бейек ҡойма. Пулемет вышкалары. Бер ситтәрәк айырым ҡарауыл бинаһы. Ихата төпкөлөндәрәк ҡойма буйын бейек әрем баҫҡан, шул тарафҡа “йәйәүле” һуҡмаҡтар һуҙылған. Ул яҡ, моғайын, батшалар һәм генералдар ҙа йәйәүләп бармалы мөйөш. “Мосолман легионы”н ойоштороусы генерал Шмультке, уның адъютанты майор Валтер, “легион”дың фашист ғәскәри кейемендәге командиры Сәлих тышҡы ишек алдында баҫып тора. Генерал “легион” эштәрен тикшерә килгән, улар бында, моғайын, яҡшы ғына һыйланып алған. Генералдың яңағы аҡ яулыҡ менән бәйләнгән — теше һыҙлай. Киске тәбиғәт менән хозурланыу һиҙелә. Генерал Шмультке портфелен ҡулынан ысҡындырмай йөрөтә — унда йәшерен ҡағыҙҙар.**

**Шмультке.** Йәшел әләм, ярым Ай... Ләкин йылтыр дүңгәләге ни бысағыма?

**Вальтер.** “Булат балдаҡ” ул, генерал... Азиаттар хөрәфәте.

**Сәлих** *(үҙ алдына һыҙланып).* Булат балдаҡ... Булат балдаҡ...

**Вальтер.** Хөрәфәти булат балдаҡ, имеш, азиаттар илен, таралтмай, бер ҡорға туплап һаҡлай, ә дошманды үҙенең утлы божораһы эсенә уратып юҡ итә. Тупһаларына иҫке-моҫҡо ат дағаһы ла ҡаҙаҡлай азиаттар.

**Шмультке.** Ҡырағай ил, ҡырағай ҡәбиләләр... Вермахт майоры Вальтер дөрөҫ һөйләйме, Селих Хәмиди әфәнде?

**Сәлих** *(һынын ҡатырып).* Дөп-дөрөҫ, генерал әфәде. Һайль Һитлер!

**Шмультке, Вальтер.** Һайль Һитлер!

**Вальтер.** Хөрәфәттәрен дә рейхҡа хеҙмәт иттертә белергә кәрәк, генерал. Рейх ҡоросонан сүкелгән булат балдаҡ божораһына ҡорланып тупланһын да азиаттар, вермахттың дәһшәтле ҡоралы ярҙамында большевиктарҙы булат балдаҡтай уратып алып, быуып дөмөктөрһөндәр.

**Сәлих.** Ур-ра! Һайль Һитлер!

**Шмультке, Вальтер.** Һайль Һитлер!

**Шмультке.** Быныһы ла хөрәфәт ҡалдығымы — ваҡытынан элек “ура!” һөрәнләү. *(Төртөп күрһәтеп).* Ошо хәйерһеҙ ерҙе ҡаплаған ике метр ҡалынлыҡ

ҡара тупраҡтан алып анау Айға тиклем арала бөтә нәмә ҡараңғы, ҡырағай. Һеҙ шул хаҡта яҡшы беләһегеҙме, Сәлих әфәнде?

**Сәлих.** Бик яҡшы беләм, генерал әфәнде. *(Тап генерал торған тәңгәлгә төртөп күрһәтеп).* Ошо ерҙән алып анау Айға тиклем беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡырағай.

**Шмультке.** Бая беҙҙе һыйлаған бифштекс та, минеңсә, ҡырағайлыҡтан уҙмаған. Эстә полк оркестры уйнағандай боларта.

**Сәлих.** Генерал әфәнде, француз коньягылыр ул.

**Шмультке.** Йәл, уларҙың икеһенән дә әлегә допрос алып булмай. *(Сәлихкә төбәлеп).* Бәлки, был допросты һеҙҙән башларға кәрәктер?

**Вальтер.** Генерал, Сәлих әфәнде һеҙҙең өсөн шундайын ныҡ тырышты. Килеүебеҙгә махсус һимерткән алты айлыҡ сусҡа һуйҙы, уны вермахттың һыналған шеф-повары Ганс Кохтан бешертеп-әҙерләттерҙе. *(Ҡойма ягына төртөп күрһәтеп).* Ә һыйҙан һуң йәйәүләп бараҡай урынды, үҙегеҙ өсөн персональный эшләтеп, һуҡмағына ҡом һиптертеп ҡуйҙы.

**Сәлих.** Генерал әфәнде, һеҙҙең өсөн унда бөтә уңайлыҡтар бар. *(Ситкә боролоп).* Һаҫы көҙәндәр! Сей һурпаны яҡшы әҙерләттем мин! Ҡорһағығыҙ көтөрҙәй башлаһын әле! Шеф-повары Ганс Кох булһа ла, ярҙамсыһы үҙебеҙҙең Брыкалов Иван бит.

**Вальтер.** Нимә?

**Сәлих.** Шеф-повар Ганс Кохты әйтәм, ысын арий, ысын ашнаҡсы икән. Бер кемде лә яҡын ебәрмәй, баштан алып ахырынаса ашты үҙе әҙерләне.

**Шмультке.** Вальтер, иҫәпкә ал. Шеф-повар Ганс Кохҡа веромахттың тимер тәреһен тағырға ваҡыт.

**Вальтер.** Тыңлайым, генерал.

**Шмультке.** Ә шулай ҙа бында... *(ҡорһагын тотоп)* ниндәйҙер йылан борғолана.

**Вальтер.** Йылан башына урыҫ водкаһын ҡойорға кәрәктер, тим, генерал.

**Шмультке.** Вальтер! Ысын арий өсөн һәр нәмәнең үҙ хәйерле сәғәте бар. *(Эсен тотоп).* Ой!

**Вальтер.** Бәлки, рәхим итеп, Сәлих әфәнде үҙе ҡаҙҙырткан баяғы гүзәл бәҙрәфхананың ҡыҙыл таҫмаһын киҫерһегеҙ, генерал, хи-хи!

**Шмультке.** Һеҙ бер ҡасан да ысын немец була алманығыҙ, Вальтер. Ысын немец һәр нәмәнең үҙ сәғәте, үҙ минуты, үҙ секунды һуғыуын көтә. Ул һәр эшен ярты секундҡа иртәрәк тә, ярты секундҡа һуңыраҡ та түгел, ә бермә-бер үҙ секундында башҡара. Һеҙҙең тамырҙарығыҙҙа ысын арий ҡаны түгел, ә Мюнхендәге атайығыҙҙың һаҫы һыраханаларында һатыла торған шыйыҡ һыра заты тибә.

**Вальтер.** Но-но, генерал! Атайымдың шул һыраханаларында Еңелмәҫ фюрер Адольф Һитлер партияһының рухы сынығып сыҡҡанын онотмайыҡ.

**Шмультке.** Һайль Һитлер!

**Вальтер, Сәлих.** Һайль Һитлер!

**Шмультке.** , яңы тәртип һәр нәмәне минутында, секундында үтәүҙе талап итә. Өйрәтегеҙ, Вальтер, Сәлих әфәдегә , яңы тәртип ҡанунын. *(Бер ситкәрәк китеп, вата-емерә "Катюша" көйөнә һыҙгыра).*

**Вальтер.** Үтәйем, генерал! Сәлих әфәнде, юғары цивилизациялы илдәрҙә был деликатный мәсьәләгә нисегерәк ҡарайҙар, беләһегеҙме? Генералға тәғәйенләнгән деликатный ишек төбөндә ғәййәр пост торорға тейеш. Автоматлы һалдат. Аңлашыламы?

**Сәлих.** Аңлашыла, майор әфәндем. Тик минең легионда, үҙегеҙгә мәғлүм, әле булһа үҙемдән башҡа берәү ҙә юҡ бит әле. Уҙем торайыммы?

**Вальтер.** Бындай тайярлығығыҙҙы генерал тейешле баһалар. Әммә рейхҡа һеҙҙең тиҙерәк мосолман легионы төҙөп биреүегеҙ мотлаҡ. Посҡа ысын вермахт һалдаты торор. Ә һеҙгә бер көтөү мосолман әсирҙәрен ҡыуып килтерербеҙ. Исемлектәре әҙер. Вермахт һағы аҫтында ошо лагерҙа уларҙы өйрәтеп, большевиктарға ҡаршы яуға алып инерһегеҙ. Яҡшы һуғышһағыҙ, шеф-повар Ганс Кох кеүек, рейхтың тимер тәреһенә ирешерһегеҙ. Ишек башығыҙҙа ла бынауы ҡырағай әләм түгел, ә вермахттың свастикалы флагы эленеп торор. Ә хәҙер... ҡалған ҡалъя менән шнапсты хәстәрләгеҙ.

**Сәлих.** Ҡалғанын бит генералдың ҡарауылы ҡайыҙланы.

**Вальтер.** Сәлих әфәнде!..

**Сәлих.** Үтәйем, майор әфәндем. *(Китә).*

**Шмультке** *(тағы ҡорһағын тотоп).* Ҡыйын миңә, Вальтер.

**Вальтер.** Аңлайым, генерал. Мәскәү янында рустарҙан арт һанығыҙға алғандан һуң ифрат ҡыйын булып китте шул.

**Шмультке.** Молчать! Кемдең арт һанына?

**Вальтер.** Бер һеҙҙең генә түгел, генерал, икебеҙҙең дә. Ҡыҙыл Армия бөтәбеҙҙең дә арт яҡҡа шәп иттереп типте.

**Шмультке.** Вальтер, беләһегеҙме, әгәр ошонда һеҙҙең урында башҡа бер-берәү булһа, ни эшләр инем мин хәҙер?

**Вальтер.** Беләм, генерал. Кобурағыҙҙан парабеллумығыҙҙы һурып алыр инегеҙ ҙә бөтә обойманы ошонда *(маңлайына күрһәтә)* бытлыҡтырыр инегеҙ. Ләкин һеҙ хәҙер уны эшләй алмайһығыҙ. Сөнки был баш һеҙҙең өсөн ҡиммәтле — миллион марка тора. Ә ул миллион, беләһегеҙ, миллионер атайымдың бойомонда. Был баш юғалһа, тимәк, генерал фон Шмульткенең Швейцария банкыһындағы шул ҡыштырлап торған бер миллион рейхсмаркаһы юҡҡа сыға.

**Шмультке.** *Ләкин* минең нерваларҙың да сиге бар, Вальтер.

**Вальтер.** Ҡурҡмағыҙ, генерал, әгәр ошо рус фронтынан иҫән-аман табан тайҙырһаҡ, нерваларҙы шау алтындан ҡуйҙыртырбыҙ. Минең һыра короле атайҙың алтындары етерлек.

**Шмультке.** Яҙыҡ аңланығыҙ, Вальтер. Мине хәҙер бөтөнләй икенсе нәмә борсой.

**Парад аҙымы менән шаҡ-шоҡ баҫып автоматлы ҡарауыл башлығы һәм һалдат үтә, "генерал һуҡмағы"на пост ҡуйыла.**

**Вальтер.** Нимә ул, генерал?

**Шмультке.** Бына ошо беҙ "ҡырағай" тип атаған, 1941 йылдың 22 июнендә үҙебеҙ блицкриг яһап баҫып кергән хәйерһеҙ ер ул, Вальтер ҡәҙерлем.

**Вальтер.** Да-а-а. Был ҡырағай ер үҙенең шпигы менән водкаһы өсөн үтә ҡиммәт хаҡ ала. Фюрер әйткән балсыҡ аяҡлы рус колосы ниңә ҡоламай һаман?..

**Шмультке.** Тимәк, аяҡтары ла, башы ла башҡа заттан булып сыға.

**Вальтер.** Уларҙың танкылары көслө, "катюша"лары бар.

**Шмультке.** Ой!.. *(Яңағын тота).* Бында мәсьәлә ҡоралда ғына түгел, Вальтер. Ҡорал эргәһендә уларҙа беҙгә мәғлүм булмаған тағы ла бер серле ҡөҙрәт бар.

**Вальтер.** Ах, шуны белергә ине!

**Шмультке.** Бына шунда тора ла шул мәсьәлә.

**Вальтер.** һеҙ әйткән был ҡырағай илдең барлыҡ милләттәре болғанып баш күтәрер, бер-береһен суҡмар менән иҫәнгерәтә һуғып тарҡалыр, рустар яңғыҙ ҡанһырап тороп ҡалырға тейеш ине. Әммә улар һаман бергә уҡмаша, шанлы арий һөйәктәре онтала. Беҙҙең башҡа ҡайҙан килеп сыҡты был аңлайышһыҙ ил?

**Шмультке.** Ил түгел был, Вальтер, *(ишек башына төртөп күрһәтеп)* ысынлап та һынмаҫ булат балдаҡ!.. Ҡайһылай ғына ябырылһаҡ та, булат балдаҡҡа бәрелеп теш ҡыйрала. Ни эшләрбеҙ, аҙаҡ килеп, булат балдаҡ үҙебеҙҙе, божоралап, уратып-ҡамап алһа? Рейхтың үҙен божораһында быуһа шул булат балдаҡ?!.

**Вальтер.** Атайым һуҡҡан баяғы алтын божора беҙҙе яуыз булат божоранан ҡотҡарыр, генералым, әгәр хәйерле сәғәттә йоҡлап ҡалмаһаҡ.

**Шмультке.** Вальтер! Ниңә ҡалтырайһығыҙ?

**Вальтер.** Өшөй башланым, буғай, генерал. Ҡара Торна һаҙлығынан зәһәр ел өрә.

**Шмультке** *(хәйләкәр бармаҡ янап).* Алдашмағыҙ, ҡурҡаһығыҙ.

**Вальтер.** Унынһы ла булһа булыр, генерал. Кисә генә шул Ҡара Торна һаҙлығынан был яҡҡа гөпөлдәтте. Майор фон Гельмут батальонынан көл генә борҡоп ҡалды.

**Шмультке.** Тимәк, авиаразведка мәғлүмәттәре дөрөç: Ҡара Торна һаҙлығында рустарҙың , яңы оборона линияһы. Был, Вальтер, беләһегеҙме, нимә хаҡында һөйләй?

**Вальтер.** Мәскәү янында ла тәүҙә линия төҙөлгәйне. Шунда бер заман “катюша”лары...

**Шмультке** *(яңағын баçып).* Ой катьюша! Ой тешем! Вальтер, аспирин! Иçемә төшөрмәгеҙ!

**Вальтер** *(аспирин бирә).* Генерал, ғәфү итегеҙ, рәхим итегеҙ! Беҙҙең шанлы һалдаттарыбыҙҙың һөйәген онтаған ул яуыз рус ҡатынының исемен башҡаса иçләмәм, телгә алмам. Исеме лә ҡәһәрле бит суҡынғандың: “катю”...

**Шмультке.** Ой!

**Вальтер.** Беҙҙең тештәрҙе ҡоя.

**Пауза.**

**Шмультке** *(ҡорһағын баçып).* Был сәғәттә мине ҡурҡытҡан нәмә — минең эсемдә, Вальтер. Һеҙҙеке лә эсегеҙҙә.

**Вальтер.** Унынһына ышанам.

**Шмультке.** Ләкин беҙгә ысын немец булып ҡалырға кәрәк, Вальтер. Ысын немец һәр нәмәнең секунды һуҡкансы түҙә.

**Вальтер** *(ҡорһағын тотоп).* Һеҙҙеңсә, ул ҡасан һуғырға тейеш?

**Шмультке.** Был мәсьәләлә һәр бер ысын немецтың үҙ изге секунды бар. Ой! *(Ҡорһағын тотоп бөгөлә).*

**Вальтер.** Улайһа, минең изге секундтың тап һуҡкан мәле, генерал.

**Шмультке.** Майор, ҡайҙа ашығаһығыҙ?

**Вальтер.** Генерал, баяғынан ҡалған бифштекс менән водканың тағы ла бер рәхәтен күрәйек, тим.

**Шмультке.** Майн һо-о-от, мин һеҙҙе аңламайым! *(Бөгөлөп төшә).* Майор, минең эс бора!

**Вальтер.** Генерал, мин дә һеҙҙе аңламайым. Эсегеҙ борһа, әнә персональ юлығыҙ, почетлы ҡарауылығыҙ. Өп-өр-, яңы бәҙрәф, тим.

**Шмультке.** Вальтер, һеҙ бер ваҡытта ла ысын арий була алмаçһығыҙ. *(Турайып).* Тик мин һеҙҙе кисерәм. Атайығыҙ хаҡына! Мин һеҙгә ысын арий түҙемлеген күрһәтәм.

**Ишекте ҡаты ябып, залға үтәләр, ишек башындағы “булат балдаҡ”, доңғорҙап, сөйҙән ысҡынып төшә. “Һайль Һитлер!” тип, залдағы Гитлер портретын тәбрикләйҙәр. Сәлих, башҡа ишектән тышҡа йүгереп сығып, аунап ятҡан “булат балдаҡ”ты күтәрә.**

**Сәлих.** Их... мәсхәрәле кәмит уйнау ялҡытты, хатта ялған булат балдаҡ ишараты ла күтәрә алмай быны! Ә мин күтәрәм... *(“Балдаҡ”ты, Айлы әләм туҡымаһын бөрөштөртөп, уның һабына кейҙерә).* Бына шулай. Сабыр бул, разведчик Сәлих, түҙергә күп ҡалманы! Оҙаҡламай был сөйҙә лә үҙебеҙҙең ураҡ-сүкешле ҡыҙыл байрағыбыҙ елберләр! *(Башҡа ишектән бинаға инеп китә).*

**Залда Вальтер, Шмультке.**

**Вальтер.** Генерал, инде миңә үҙ хәжәтемде башҡарырға рөхсәтме? *(Араҡы ҡойоп эсә, ҡаба).* Бәлки, генералым, һеҙ ҙә *(генералдың ҡорһағына төртөп)* ундағы боролош йыланығыҙҙың муйынын борорһоғоҙ? Бер стакан водкаға бер ус аш тоҙо һалып. Эс киткәндә рустың иң шәп сараһы.

**Вальтер араҡы һалып бирә, генерал эсә.**

**Вальтер.** Һут, генерал. *(Ике бокалға ҡоя, береһен генералға бирә).* Быныһы ла иш янына ҡуш булыр, Сәлих әфәнде әйтмешләй. Рус водкаһы ул ҡөҙрәтле — ҡаҡшап ҡойолорға торған теште лә, эсте лә баҫа бер юлы. Салют! Фюрерҙың теш һәм эс һаулығына!

**Икеһе бер юлы “Һайль Һитлер!” тип тәбрикләп эсә. Йырлап, төрлө ишаралар яһап бейейҙәр.**

**Шмультке.**

Беҙ шәп немец, беҙ арий —

**Вальтер.**

Ҡурҡмайбыҙ, ҡурҡмайбыҙ!

**Шмультке.**

Беҙ алдан да, беҙ арттан да

**Вальтер.**

Юртмайбыҙ, юртмайбыҙ!

**Шмультке.**

Беҙ уртанан, беҙ уртанан

**Вальтер.**

Барабыҙ, барабыҙ.

**Шмультке.**

Шуға баш та, аяҡ та һау —

**Вальтер.**

Ҡарағыҙ, ҡарағыҙ!

**Шмультке.**

Мине көтә банкыла бер

**Вальтер.**

Миллион, миллион!

**Шмультке.**

Вальтер башы иҫән ҡайтһа, —

**Вальтер.**

Юлың йүн, юлың йүн! *(Бармагын башына төртөп).*
Минең башты,

**Шмультке** *(бармағын башына төртөп).*

Минең башты

**Икеһе бергә.**

Һаҡлайыҡ, һаҡлайыҡ!
Булат балдаҡ алҡымынан
Таяйыҡ, таяйыҡ!

**Музыка тына, был икәү табынға өңөлә. Тап шул мәлдә стеналағы "фюрер" портреты баштүбән әйләнеп китә лә доңғорлап иҙәнгә ниҙер төшә — күҙҙәре аҡайған был икәүгә табан сәйер "булат балдаҡ" — билгә ҡуйып әйләндермәле спорт балдағы тәгәрләп килә. Шашынған фашистар, баштарын ҡаплап, иҙәнгә ауа.**

**Шмультке.** Ой! Майор, большевистик булат балдаҡ!
**Вальтер.** Ахтунг! Партизан булат балдаҡ!
**Икеһе бергә.** Диверсия!

**Диван артына шыуышып йәшенәләр, сәхнә тын ҡала; шул тынлыҡты емереп, сылт-сылт секунд һуғыуҙары ишетелә. Ишектәрҙең береһенән залға Сәлих йүгереп инә, ялт-йолт ҡарана.**

**Сәлих.** һе! Шайтаным дөбөрҙәйме, тиһәм... пионерҙарҙың спорт балдағы икән. Шуныһының шуныһына тиклем сыҙай алмай һикерә! *(Балдаҡты алып сығып китә).*

**Тышта ҡойма буйында ҡапыл Ишмырҙа хасил була, ул разведкала йөрөй.**

**Ишмырҙа.** Ышандым. Ҡулымдағы булат балдаҡ ҡөҙрәтенә ышандым. Әҙәм балаһының башы һыймаҫтай тишеккә лә һыйып үтә алыуыма ышандым. Танау тартып ҡалды постары. *(Ишек янындағы белдереүгә ҡарап).* һе, "Булат балдаҡ исемле мосолман легионы", имеш! Күрһәтербеҙ беҙ һеҙгә мосолманды! *(Бармағында булат балдаҡты балҡытып).* Бына ул булат балдаҡ! Ошо мосолман һеҙҙең ҡорал келәтенә әле генә бынамын тигән лютеран мина һалды. Инде икенсеһен ошо ҡоҙғон ояғыҙға ла йәпләштерҙе. Ишетәһегеҙме, келт-келт таҡмаҡлап тора. Күп тә

үтмәç, бейетер — көлләгөҙҙө күккә осорор... хоҙайығыҙ “майн һоот” янына! *(Әрем араһынан боçоп барып, “персональ” һаҡсыны бәреп йыға, ышыҡҡа һөйрәп ташлап, фашист кейемдәрен кейенеп килеп сыға ла поска тора, ләкин ҡулында дискылы үҙ автоматы ҡала).* Майн һоот, быныһына ла ышандым!

**Залда Вальтер башын ҡалҡыта, секунд һуғыуҙары тына.**

**Вальтер.** Майн һо-о-от, большевистик булат балдаҡ, тигәнегеҙ — спортсмен балдағы булып сыҡты. Һеҙҙең изге эс-ҡарынығыҙҙың ҡотороп быҡырлауынан башҡа ҡаты шартлау ишетелмәне, буғай, генерал? Ун өс секунд үтте.

**Шмультке.** Ысын арий ҡорһағына ла еңел түгел был илдә.

**Тороп, өç-баштарын ҡағыналар. Тышта, ҡарауыл бинаһы яғынан сығып, ҡоймаға ҡарай ашығып йүгергән фашист һалдаты күренә. Автоматын — ҡорһаҡ тәңгәленә, билбауын — муйынға элгән; салбар төймәләрен ысҡындырып, бөрмәһенән ҡуш ҡуллап тотҡан.**

**Фашист һалдаты.** Майн һо-о-от, майн һо-о-от, ҡорһаҡта шайтан болара — ашҡа әллә касторка һалып ашаттылар инде... Уф, нисек барып етергә! *(Ышыҡлана, шатырлау).*

**Ишмырҙа.** Түтүт! Тәпәйҙәрен ҡайсылатты аçыл ҡош!.. *(Фашист һалдаты артынан китеп, бер аҙыраҡ торғас, ҡулдарын оҙон таçмалы туалет ҡағыҙына һөртә-һөртә ифрат рәнйеп килеп сыға).* Хәшәрәт! Һаçы көҙән! Шундайын да шатырлатып урғылта пушкаһынан — суска ҡалъяһын мылтыҡ майына мансып тыҡшынған, тирһең!.. *(Урынына баçа).*

**Юлда йәнә,баяғыса, салбарын бөрмәһенән ике ҡуллап тотоп йүгереүсе икенсе фашист һалдаты.**

**Ишмырҙа.** Хоҙайым, быныһына ла ни булған тағы? *(Фашистың артынан китеп, йәнә лә, баяғылай, йөҙө йәмерәйеп килеп сыға).* Тфү, быныһының да эсе ҡойола!

**Өсөнсө һалдат менән дә шул уҡ хәл.**

**Ишмырҙа.** Былайһа, бер юлы бер взвод “тел” алып ҡайтам икән штабҡа!

**Сәхнә барышында был ваҡиға һаман уйнала тора, һөҙөмтәлә бөтә ҡарауыл командаһы бәҙрәфтә “һеңеп” ҡала. Бер үк ваҡытта — йәнәшәле рәүештә —**

**залдағы табын янында ҡабат пәйҙә булған генерал менән майор күренеше лә дауамлана.**

**Шмультке** *(араҡынан күңелләнә төшөп).* Беләһегеҙме, Вальтер, мин һеҙҙе был рус тамуғынан ҡайһылай ҡурсалайым?

**Вальтер.** Бер миллион маркағыҙҙы ҡурсалағандай.

**Шмультке.** Ә һеҙ шуның ҡәҙерен белмәйһегеҙ. Генералығыҙҙы иркәләмәйһегеҙ. *(Майорҙың бөйөрөнә төртә).*

**Вальтер.** Хи-хи... Генералым, урыҫ водкаһы артынан аслан нимә теләгәнегеҙҙе яҡшы беләм мин! Анауы бүлмәләрҙең береһенде сюрприз көтә һеҙҙе, үҙем ойоштorҙом. Бынамын тигән тәтәй ҡош! Һеҙҙе ысын арий яһаған тап ошо изге сәғәткәсә алтын ситлектә бикләп тоторға, коньяк менән аҡрын ғына ҡыҙҙыра торорға ҡуштым мин уны шеф-повар Ганс Кохҡа. Хатта Сәлих әфәнде лә белмәне.

**Шмультке** *(ҡорһағын тотоп).* Түҙеп булмай, ой Вальтер...

**Вальтер.** Айн момент! *(Төпкө ишектәрҙең береһенә йүнәлә).*

**Генерал һыҙланып торғанда, оҙон күлдәкле һәм ярайһы уҡ ҡыҙмасаланмыш бер һылыуҙы етәкләп, Вальтер килә; ул һылыу —Сәлисә.**

**Шмультке.** Майн һоот, бына был сюрприз! *(Осколоҡ тота).*

**Вальтер.** Генерал, таныш булығыҙ, легионға үҙе теләп яҙылған беренсе мосолман һылыу — Сәлисә туташ була был.

**Шмультке.** Документ!

**Вальтер.** Генерал, обер-лейтенант Сәлисә туташтың империя канцелярияһынан бирелгән аусвайсында рейхскомиссар Кубенең үҙ ҡултамғаһы бар! Ул беҙгә ғәййәр легионды нығытырға ебәрелгән.

**Сәлисә.** Генералым, һеҙҙең менән танышыуға бик шатмын!

**Шмультке** *(Сәлисәнең ҡулын үбә).* Һут, һут! Беҙгә йәнегеҙ һәм... ***тәнегеҙ*** менән бирелеп хеҙмәт итерһегеҙ, тип уйлайым.

**Сәлисә.** О генерал, һеҙҙең өсөн...

**Шмультке** *(ҡыҙға рюмка тоттора).* Танышыу хөрмәтенә, Сәлисә туташ.

**Сәлисә** *(эсеп, рюмканы ырғыта).* О! *(Генералдың муйынына һарыла, үрелеп үбергә итә).* Генерал, ҡасан мине батыр яҡташым Сәлих әфәнде Хәмиди менән таныштыраһығыҙ?

**Шмультке.** О Сәлисә туташ, һеҙ мине рәнйетәһегеҙ! Тәүҙә икәү ныҡлап танышайыҡсы.

**Сәлисә.** О генерал!

**Шмультке.** Майор, Сәлисә туташты ана тегендә — минең бүлмәгә керетеп урынлаштырығыҙ. Беҙ уның менән төрлө донъя хәлдәрен һөйләшербеҙ.

**Сәлисә** *("һауа аша үбеү" оҙатып хушлаша).* Эм-м-мү, генерал!

**Шмультке.**Эм-м-мү, туташ!

**Вальтер Сәлисәне генерал күрһәткән бүлмәгә илтеп килә.**

**Вальтер** *(устарын ыуып).* Хи-хи!.. Генералым, алма тулышып өлгөрҙө, өҙөп ҡабаһы ғына ҡалды. Тешегеҙ ҡамашмаҫ микән?..

**Шмультке** *(бармаҡ янап).* Ҡорт булып төшөргә уйлаһағыҙ, ҡарағыҙ уны, майор!

**Вальтер.** Генерал!.. Легион тағы бер яугиргә артҡанға шатланамын.

**Сәлих инә.**

**Сәлих.** Генерал әфәнде, һеҙҙең өсөн юл хәрездәре әҙер.

**Шмультке** *(бармағы менән ымлап саҡырып).* Килегеҙ әле бирегәрәк, штурмбанфюрер Сәлих әфәнде Хәмиди. Ниңә беҙҙт елға тиҙерәк оҙатырға йыйынаһығыҙ? Теге саҡта генерал Борисов атлылары өҫтөнә һибергә әҙерләткән бер миллион листовканы ла партизандарҙан үртәтергә шулай хәстәрләнегеҙме? һеҙ фюрерҙың ышанысын аҡларға тырышмайһығыҙ.

**Сәлих.** Генерал әфәнде, мин аҡлайым, мин үҙ ҡулдарым менән...

**Шмультке.** Молчать! Фюрергә һеҙҙең ҡулдарығыҙ кәрәкмәй. Фюрергә генерал Борисовтың эстән тарҡатылған атлы корпусы, уның генерал Шайморатов кеүек командирҙары кәрәк! Улар тиҙерәк лагерҙа, бына ошонда булһын!

**Сәлих.** Үтәйем, генерал!

**Шмультке.** Болван, нимәне үтәйһең?

**Сәлих.** Генерал Шайморатовтың атлылары тиҙҙән бына ошонда булыр.

**Вальтер** *(ус төйҙәһен Сәлихтең муйынына ышҡып).* Әгәр тап шулай булмаһа, беләһегеҙме, азиат, һеҙҙең баш бына ошолай ҡыххх... *(Араҡы бирә).* Мәгеҙ, түңкәреп ҡуйығыҙ, буласаҡ ил тарханы.

**Сәлих эсә.**

**Вальтер.** һут, инде йырлап ишеттерегеҙ. Генерал әфәнде бындай моментта азиат моңдарын ярата... ул ысын арий ашҡаҙанын яҡшыраҡ эшләтә.

**Шмультке.** һуҙығыҙ, Сәлих әфәнде.

**Тыңларға йыйыналар, моңайып баҫып торған Сәлих “Аҡтирәк — күктирәк”те йырлап ебәрә. Тышта һағалаған Ишмырҙа, тәҙрәгә һарылып, әҫәрләнеп тыңлай. Йырҙың аҙағынаса ул автомат көбәген Сәлихкә тоҫҡап тота.**

**Сәлих.**

Һаҡмар буйы йәмле бигерәк —
Аҡтирәк тә күктирәк.
Һинең һымаҡ аҫыл-зирәк
Донъяға тыуа һирәк.
Аҡтирәк — күктирәк,
Йөрәктәр яна көйрәп.
Булат балдаҡ беҙ икәүҙе
Тапһын ине тиҙерәк.

**Ишмырҙа.** Был ни хәл, кем был? Былмы теге листовкалағы Сәлих әфәнде Хәмиди?!

**Вальтер.** Браво, Сәлих әфәнде, браво!

**Ишмырҙа** *(көбәкте Сәлихтән ситкы бороп).* Юҡ, ҡулым бармай атырға. Ышанмайым. Ышаныҡ Ишмырҙа булһам да ышанмайым! Ошо тамуҡ төбөндә лә үҙенең изге аҡтирәктәрен, күктирәктәрен йөрәгендә йөрөткән йән эйәһе иленә хыянат итерме?! Юҡ! Ул да, әлбиттә, минең һымаҡ уҡ, махсус эш үтәп йөрөй. Ул — ысынлап та үҙебеҙҙең разведчик! Юҡҡа ғына алмағандыр булат балдаҡ исемен! *(Бармағынан булат балдаҡты һурып).* Тимәк, булат балдаҡты тапшырырға бурыслымын үҙенә? Тик... нисек итеп?.. Әһә, булды! УҢайлы мәлен тура килтерәм дә тәмәке янсығыма бәйләп ырғытам — бөрмә бауына тағып. Үҙе аңлар ҡалғанын. *(Шул ниәтен үтәргә әҙерләнә).*

**Залдағылар һөйләшеүе үҙ ағышында бара.**

**Шмультке.** Был шыңшыуҙа Россияның тынмаҫ ҡарлы бурандары, ас бүреләр олоуы, бррр... Майор, башлағыҙ мин ятаҡанды! Тик киҫәтәм: минең тешкә теймәҫлек башҡарығыҙ.

**Вальтер.** Сәлих әфәнде, һеҙҙең тауыш көр — йырҙы күтәреп алығыҙ. Тик, абайлағыҙ, яуыз рус әбей батшаһының исемен атамағыҙ!

Расцветали яблони и груши,

Поплыли туманы над рекой.

**Сәлих** *(ҡушыла).*

Выходила на берег Катюша...

**Шмультке** *(пистолеттан түшәмгә атып).* Ой! Тешем! Вальтер, аспирин! *(Бөгөлөп төшә).*

**Вальтер** *(Сәлихкә).* Әйттем дәһә, яуыз рус әбей батшаһының исемен атамаҫҡа, тип!

**Шмультке.** Ой! Вальтер, эсем бора!

**Вальтер.** Генерал, изге секундығыҙ һуҡты!

**Тыштағы Ишмырҙа шул арала бауына булат балдаҡ тағылған тәмәке янсығын тәҙрәнән Сәлих тәңгәленә ырғыта.**

**Ишмырҙа.** Булат балдаҡ, бар, тәгәрлә батырыңа!

**Тышта тәҙрә янына фашистарҙың ҡарауыл башлығы йүгереп килә, "Һенде һоһ!" тип аҡырып, автоматының төйҙәһе менән Ишмырҙаны йыға һуға.**

**Ҡарауыл башлығы** *(тәҙрәгә башын тығып аҡыра).* Аһтуң! Рус диверсанты! Залға мина ташланы! Радиошнурлы мина! *(Ситкә ташланып, ергә ята).*

**Шмультке** *(иҙәндәге тәмәке янсығына төртөп күрһәтеп).* Радиомина! Вальтер, минең арттан! *(Портфелен онотоп ҡалдырып, тышҡа ташлана).*

**Генерал менән майор, елтерәп сығып, ҡарауыл башлығы эргәһенә йығыла. Сәлих, иҙәндәге "мина"нан күҙен ала алмай, залда баҫып тора.**

**Сәлих** *(булат балдаҡ бәйләнгән янсыҡты алып).* Булат балдаҡ! *(Балдаҡты, ысҡындырып, бармағына кейә).* Ҡайҙан килдең һин миңә, булат балдаҡ?! *(Янсыҡҡа сигелгән яҙыуҙы уҡый).* "Батырым Ишмырҙама — матурың Сафураңдан". Их! Үҙебеҙҙең Ишмырҙа, үҙебеҙҙең Сафура!..

**Тышта генерал аҡыра.**

**Шмультке.** Вальтер, портфель!

**Вальтер** *(башын ҡалҡытып).* Штурмбанфюрер Хәмиди, портфелде сығарығыҙ!

**Сәлих портфелде алып, икенсе ҡулында “шнурлы” тәмәке янсығын юғары күтәреп тотоп, яй ғына атлап сыға. Сәғәт секундтары дәһшәтле сылтылдай.**

**Шмультке.** Аһтуң, радиомина!

**Вальтер** *(пистолетын тоҫҡап).* Сәлих әфәнде, туҡтағыҙ! *(Сәлих туҡтай).* Портфелде ергә ҡуйығыҙ! *(Сәлих портфелде ҡуя).* Радиоминаны ҡапҡа аша алып сығып китегеҙ, марш!

**Сәлих.** Тыңлайым, майор әфәнде. *(Шәп-шәп атлап ҡапҡанан сығып китә. Ул киткән яҡта — шартлау).*

**Шмультке.** Ауыр тупрағы еңел булһын ҡырағайҙың. *(Ырғып тороп, портфеленә йәбешә; иҫһеҙ ятҡан Ишмырҙаға тибеп).* Ошомо рус диверсанты?

**Ҡалғандары ла ырғып тора.**

**Ҡарауыл башлығы.** Эйе, тап үҙе, генерал әфәнде!

**Вальтер.** Болван, ул бит үҙең ҡуйып киткән часовой.

**Ҡарауыл башлығы.** Был часовой ул түгел, майор әфәнде, был — рус диверсанты. Күрегеҙ автоматын *(алып бирә).*

**Шмультке** *(күҙҙәрен алартып).* Һыу һибеп айнытырға, допросҡа әҙерләргә.

**Ҡарауыл башлығы.** Үтәйем, генерал әфәнде.*(Ишмырҙаны һөйрәкләп маташа).*

**Вальтер.** Болван, ҡайҙа ҡарауыл?

**Ҡарауыл башлығы.** Ҡарауыл юҡ... майор әфәнде. Мин үҙ сиратымда күҙ элеп алғансы, ҡарауыл юҡҡа сыҡҡан.

**Ишмырҙа ҡаты ыңғырашып, тороп ултыра; аяғына ла баҫа.**

**Шмультке** *(Ишмырҙа яғына ымлап).* Тәүҙә һорарға, унан һуң дарға!

**Вальтер.** Дарға түгел, генерал, ә ватер-клозетҡа! Бәҙрәф хәшәрәттәренә баштүбән сумып тонсоҡһон.

**Шмультке.** Был да шәп аҡыл.

**Ишмырҙаны төрткөсләп килтерәләр.**

**Шмультке.** Диверсант, әйтеп ҡотол, ниңә бында тоттоң юл?

**Ишмырҙа** *(ишек янындағы белдереүгә ымлап).* Мосолман легионына яҙылырға.

**Шмультке.** Молчать! Әйтеп ҡотол шулай ҙа: рустарҙың , яңы оборона линияһы ҡайҙа?

**Ишмырҙа өндәшмәй.**

**Шмультке.** Телеңде әгәр сисмәһәң, беләһеңме, мин һине ни эшләтәм? Атмайым да, аҫмайым да, ә тере килеш ватер-клозетҡа быраҡтырам.

**Ишмырҙа.** Быныһы ҡыҙыҡ. Нимә һуң ул... ватер-клозет?

**Шмультке.** һеҙҙең ҡырағай-варвар теленә күсергәндә, бәҙрәфтең аҫҡа өңөлгән тишеге була ул.

**Ишмырҙа.** һеммм... Телемде сисһәм, ватер-клозетҡа ебәрмәҫһегеҙме?

**Шмультке.** Ебәрмәҫбеҙ, ысын рыцарҙарса атып ҡына үлтерербеҙ.

**Ишмырҙа.** Ҡара Торна һаҙлығында рустарҙың линияһы.

**Шмультке.** Был һүҙеңде ни менән инабатлайһың?

**Ишмырҙа.** Бөйөк "мосолман легионы"на хәҙер үк, ошо урында уҡ бер взвод һалдат етәкләп килтерәм. Башы-тояғы менән. *(Әремлеккә күрһәтеп).* Улар ана анауҙа — саҡырыуымды ғына көтөп яталар.

**Фашистар бер-береһенә ҡараша.**

**Ишмырҙа.** Үтәргә рөхсәтме?

**Шмультке.** Үтә, ләкин алдыңдан да, артыңдан да, ян-яғыңдан да унар автомат тоҫҡалғанды онотма.

**Ишмырҙа.** Бер мосолман бәндәһенә ниңә шул тиклем күп автомат?

**Ишмырҙа, бәҙрәф яғына юлланып, кителле килеш аҡ кальсонда ғына ҡалған һәм һыу юлындағы ҡаҙ бәпкәләреләй бер-бер артлы теҙелгән бер өйөр фашист һалдаттарын — бәҙрәф юлына китеп "һеңгән" баяғы ҡарауыл командаһын алдағыһының муйын бауынан етәкләп, башҡорт халыҡ йыры "Каруанһарай"ҙы йырлап килеп сыға. Фашистарҙың ҡулдары артҡа шаҡарып — бил ҡайыштары менән, ә ул ҡайыш остарынан икенсеһенең муйынына үҙҙәренән һалдыртылмыш салбар балаҡтары менән бәйләнгән — процессия боронғо бығаулы ҡолдар баҙарын хәтерләтә. Марш уйнай, мәсхәрәле теҙем генерал алдына етеп туҡтай.**

**Ишмырҙа.** Генерал әфәнде, ҡабул ҡылып алығыҙ яугирҙәрҙе. Тик легионға етер алдынан һәр береһе шыр ебәрҙе.

**Вальтер.** Бөйөк арий еҫенән тертләп ҡурҡкандыр азиаттар.

**Шмультке** *(танауын аҡ ҡульяулыгы менән баҫып,ҡарауыл башлыгына).* Фу! Был ниндәй һаҫы швайны? Ҡайҙан килеп хасил булған был тиклем күп рус иваны?

**Вальтер.** Ошолармы Россия мосолмандары?

**Ҡарауыл башлығы.** Генерал әфәнде, улар рус иваны ла түгел, мосолманы ла түгел, ә үҙебеҙҙең ысын арий ҡарауыл командаһы.

**Ишмырҙа.** Так точно, үҙегеҙҙең һаҫыҡ фрицтар.

**Вальтер.** Молчать!

**Шмультке.** Ватер-клозетҡа хәҙер үк баштүбән сумғың килмәһә, әйт: был тәҙрәнән ниндәй мина ырғыттың?

**Ишмырҙа.** Ҡыҙыл Армияның “булат балдаҡ” тигән иң-иң секретный минаһын.

**Вальтер.** Булат балдаҡ?!

**Ишмырҙа.** Булат балдаҡ һеҙҙе уратып алды, шартлап күккә осаһығыҙ ғына ҡалды!

**Шмультке.** Алып китергә!

**Ҡарауыл башлығы.** Үтәйем! *(Ишмырҙаны, автомат көбәге менән төрткөсләп, ҡарауыл бинаһы ягына алып китә).*

**Шмультке** *(мәсхәрәле өйөргә).* Смирррно! һеҙ кем? *(Вальтерга).* Ниңә өндәре сыҡмай?

**Вальтер.** Генерал, шанлы һалдаттарыбыҙҙың ҡулдары шаҡарылған, ауыҙҙарына туалет ҡағыҙы тығылған.

**Шмультке.** Сисергә, таҙартырға!

**Бойороҡ үтәлә.**

**Шмультке.** Болвандар, автоматтарығыҙ ҡайҙа?

**Команда** *(бер тауыштан).* Ватер-клозетта, генерал!

**Шмультке.** Сумырға, эҙләп алып сығырға! Марш!

**Команда табан ялтырта.**

**Шмультке.** Ә һеҙ, майор әфәнде, тиҙ генә штабҡа шифровка тапшырығыҙ. Кисекмәҫтән авиация ебәрергә, Ҡара Торна һаҙлығының көлөн күккә осорорға!

**Вальтер.** Үтәйем, генералым! *(Залга инеп, ундагы бер ишектән төпкә үтә).*

**Яҡында ғына көслө шартлау ерҙе-күкте тетрәтә.**

**Шмультке.** Майн һо-о-от! Ҡорал склады шартланы. *(иҫенә килеп).* Катьюшша эҙгә баҫҡансы, табан ялтыратырға!

**Сәғәт секундтары келтелдәп ишетелә лә тына.**

**Шмультке.** Вальтер! *(Залға йүгереп инә, Вальтер ҙа төпкө бүлмәнән атылып сыға).*

**Вальтер.** Шифровка тапшырылды, авиация күккә күтәрелә, генерал.

**Шмультке.** Бында башҡа нәмәләр ҙә бит күккә күтәрелә.

**Вальтер.** Генерал, нимә шартланы?

**Шмультке.** Һәр хәлдә мин түгел. Миллион — минеке! Табандарҙы майлайыҡ, Вальтер, баштар муйында саҡта. Йүгер, Сәлисә туташты килтер!

**Вальтер.** Шеф-повар Ганс Кохты үлтереп, автоматын эләктереп, Сәлисә туташ юҡҡа сыҡҡан, сейфтан мосолман легионының исемлеге, шифровкалар ҙа осҡан.

**Шмультке.** Ма-а-алчать! Шылтыратырға, тышҡы постарҙы киҫәтергә!

**Вальтер.** Генерал, телефон сымдары киҫелгән, тышҡы постар юҡ... ителгән...

**Шмультке.** Йөҙ процентлы болван һин дә, майор.

**Тышта мотор, ат тояҡтары тауышы.**

**Шмультке.** Нимә был, беҙҙең авиациямы?

**Вальтер.** Юҡ, генерал, рустарҙың танкылары. Рацияnан хәбәр алып өлгөрҙөм: беҙҙең тылға маршал Рыбалконың танк клины, Шайморатовтың атлы ғәскәрҙәре ярып кергән. *(Дер-ҡалтырап).* Большевистик булат балдаҡ уратып алды беҙҙе, был балдаҡтан ысҡынырға юҡ сара...

**Шмультке.** Бар сара! Майор, бөйөк арий рухын юғары тоторға! *(Шкафтан аҡ простынялар алып ырғыта).* Уран аҡ урамалға!

**Вальтер** *(дер-ҡалтырап).* Аңламайым, генералым.

**Шмультке.** Миллионлыҡ башың менән һуҡыр тинлек рус премьеры Федор Керенский әфәденең сараһын да белмәйһең. Большевистик булат балдаҡтан ысҡынырға был беҙҙең берҙән-бер сара! Ошо изге секундтан алып һин — Вальтер түгел, мин фон Шмультке түгел, ә икебеҙ ҙә Халыҡ-ара Ҡыҙыл ярым Ай ойошмаһы тарафынан һиндостандан ебәрелмеш мәрхәмәтле шәфҡәт туташтарыбыҙ. Ә был сепрәк ярпыһы — милли кейем сариҙарыбыҙ!

**Ут һүнә, сәхнәне шау-шоу баҫа. Яҡтырғанда залға Остап менән бер нисә кавалерист килеп инә. Баштүбән торған Гитлер портреты ла шул мәл дөһөрләп ауа. Ҡаршыларында аҡ сариға уранған, баштарына Ҡыҙыл ярым Айлы яулыҡ бәйләгән ике "шәфҡәт туташы" дер-ҡалтырап тора.**

**Остап** *(автоматын тырылдатып).* Хенде хох, әпсәгеҙҙе фәләнем итмәгерҙәре! Күтәрегеҙ ҡулдарығыҙҙы!

**Ике "туташ" ҡулдарын күтәрә.**

**Вальтер** *(нескә тауыш менән).* Беҙ шәфҡәт туташтары, беҙ...

**Шмультке** *(берсә, түшенә, берсә, Ҡыҙыл ярым Айына төртөп күрһәтеп, нескә тауыштан).* Сари, Кришна, Чандра, Женева!

**Остап.** Ни ти был ҡойолдороҡ?

**Вальтер.** Хөрмәтле ҡыҙыл рус иптәштәр, беҙҙе тотҡарларға ярамай, ти. Был аҡ сариға уранған хөрмәтле ханым — һиндостандың Бомбей ҡалаһының Ҡыҙыл ярым Ай ойошмаһының яуаплы етәксеһе Кришна, ә мин уның тәржемәсеһе Чандра. Беҙ фронтҡа Халыҡ-ара Женева ҡарарҙарының үтәлешен тикшерергә килдек, ти.

**Шмультке.** Рупи карахати бхарата. Чаппахудра.

**Вальтер.** Кришна ханым һеҙгә әйтә, беҙҙе фронт аша үткәреп ебәрергә генә ярай, ти.

**Остап.** Тентергә!

**Вальтер, Шмультке** *(һиндтәрсә Хоҙайға табыныу ишараһы яһап теҙләнәләр).* О Рама!

**Остап.** Был ниндәй комедия?

**Вальтер.** Хөрмәтле ҡыҙыл рус иптәштәр, комедия түгел был! Трагедия был! Беҙ Хоҙайыбыҙ изге Раманан беҙҙе үҙе янына алыуын ялбарабыҙ, сөнки беҙҙең диндең изге ҡанундары тәнебеҙгә ир-ат ҡағылыуын тыя. Хоҙайыбыҙ изге Раманың эскерһеҙ саф ҡыҙҙары беҙ!

**Плащ-палатка бөркәнгән, пистолет тотҡан Сәлисә инә, плащ-палатҡаһы иңенән шыуышып төшөп ҡала. Шул ыңғайҙа Шмульткенең "салма"һын йолҡоп ырғыта. Салма аҫтында — генерал фуражкаһы.**

**Сәлисә.** һеҙме эскерһеҙ саф ҡыҙ? Салют, генерал!

**Вальтер, Шмультке.** Майн һо-о-от!..

**Сәлисә.** Старшина, "саф ҡыҙ"ҙарҙың сылғау аҫтын һәрмәгеҙ!

**Остап** *(генералдан йөҙөн бороп, танауын сыйырып).* Фу! Был “саф”лыҡтан эт үләкçәһе еçе килә!.. һаçығына сыҙарлыҡ түгел!

**Сәлисә** *(танауын ҡаплап).* Батырлығынан шыр ебәргән генерал.

**“Сари”ҙарҙы тағаталар. “Сари” аçтындағы кобураларынан — пистолеттарын, генералдың ҡулынан портфелен алалар.**

**Сәлисә.** Сәлих Хәмиди әфәнде ҡайҙа?

**Шмультке, Вальтер.** Беҙ ундайҙы белмәйбеҙ.

**Сәлисә** *(пистолетын дәһшәтле тоçҡап).* Белерһегеҙ! Гитлерығыҙ менән ҡуша көллөгөҙҙө көл итер булат балдаҡ!

**Сәғәт секундтарының көслө келтелдәүе ҡолаҡ яра.**

**Шмультке.** Майн һо-о-от... аяҡ аçтыбыҙҙа ҡот осорғос минаның сәғәт механизмы эшләгәнен тоям, Вальтер. Ошолор булат балдаҡ...

**Вальтер** *(тубыҡланып).* Зинһар, был урындан тиҙерәк алып китегеҙ, штабығыҙға илтегеҙ!

**Шмультке** *(тубыҡланып).* Был портфелдә бик мөһим документтар, карталар. Штабығыҙҙа беҙ уларҙың көллөһөнөң серен асып бирербеҙ!

**Сәлисә.** Бикләгеҙ ҡоҙғондарҙы! *(Фашистарҙы төпкө ишектәрҙең береһенә керетәләр).* Ә беҙ портфель менән уҙайыҡ тегендә. *(Башҡа бер ишеккә ашығыс ыңғайлайҙар).*

**Секундтарҙың ҡабалан келтелдәүе дауам итә, залдағы оло сәғәт ер һелкетеп һуға. һәм... көслө шартлау. Ут һүнә. Ҡыҙыл ялҡын араһынан өçтө-башы өҙгөләнгән Остап ҡанға батҡан Сәлисәне һәм портфелде күтәреп сыға.**

**Остап.** Генерал менән адъютантынан бына бынау портфель генә тороп ҡалды.

**Тауыш.** Тереме?

**Остап.** Тере, буғай, йөрәге тибә. *(Сәлисәнең ҡанлы күкрәген бәйләй).* Иншалла, туйына тиклем төҙәлер. һәр хәлдә был һылыуҡайға һуғыш тамам.

**Сәлисә.** Аһ, үләм... Сәлихем...

**Сәхнәне ҡараңғылыҡ күмә.**

## Алтынсы күренеш

**Беренсе күренештәге Һаҡмар буйы, шул уҡ аҡлан, шул уҡ эңер, шул уҡ бесән ваҡыты, шул уҡ ат кешнәүҙәре һәм моңло бытыл сыңлауҙары. Әммә һәммәһенә һуғыш үҙенең һөрөмөн һалған. Күктә талғын ғына моңло Ай йөҙә. Урал ҡарт Ай яҡтыһында салғы сүкей. Сафура йыры ишетелә яҡында.**

**Сафура.**

Аҡкош юлҡайҙары, ай, аҡ була,
Ҡайҙа осһалар ҙа хаҡ була.
Яуға китеп, йәнгә ҡан һауҙыртҡан —
Ир-егеткәй менән ат була.
Сыңрама ла, торнам, ай, сыңрама,
Бәлә-ҡаза илгә юрама.
Йөрәгемдең янып һыҙлауҙарын
Үҙең бел дә минән һорама.

**Йүгәнен шылтыратып, Сафура сыға тирәктәр араһынан.**

**Сафура.** Хәйерле кис, Урал еҙнәкәй. Минең алашаны күрмәнеңме, әй?

**Урал** *(сүкеүҙән туктап).* Һинең алаша көн дә ошо тирәктәр араһында аҙаша, буғай, балдыҙҡай.

**Сафура** *(күрһенеп).* Эййй, аҙаша шул, аҙаша.

**Урал.** Заманында, йүгән шылтыратып түгел, ә ҡарҙай ап-аҡ ҡаҙмендәр ҡабартып ҡороҡлай торғайның уны.

**Сафура** *(тертләп).* Ә?! Кемде?

**Урал** *(көлөп).* Алашаңды, тим.

**Сафура.** Их еҙнәкәй-еҙнәкәй, алаша түгел ине шул ул, ә ажар аҫау ине.

**Урал.** Дә-ә-ә... беҙҙең ише серек аҙау түгел шул.

**Сафура.** Э-э-эх... Ҡамыт аяҡлы, Ғәли атлы алашанан тыш юҡ шул хәҙер... Уныһы ла һуҡыр — фронттан күҙенә ҡара күн ҡаплатып ҡайтҡан. Өҫтәүенә, ҡара бирсәткә кейгән...

**Урал** *(һиҫкәнеп).* Ҡара бирсәткә?

**Сафура.** Тап үҙе. Булат балдаҡты урлағас кейгән теге ҡара бирсәткәһе...

**Урал.** Ә?!

**Сафура.**Э-э-эх! һыуға батҡандай булды был... *(Тирәклеккә инеп юғала).*

**Урал** *(баш сайҡап).* Теге ҡара бирсәткәһе... быныһы ни булды тағы?

**Ҡулдарын сепрәккә һөртә-һөртә, ҡарт эргәһенә Сәлисә килеп ултыра, сүкеш сыңлауына әҫәрләнеп уйлана. Өҫтөндә төҫө уңып бөткән хәрби гимнастерка һәм юбка, башында пилотка. Күкрәгендә яугир Ҡыҙыл Йондоҙ ордены.**

**Урал.** Йә, герой ейәнсәрем, фронттан ҡаты яраланып ҡайтҡандан һуң, ҡәҙимге тыныс тормошҡа күнегәһеңме? Гөрләйме тимер аттарың? Ниңә былай моңайҙың?

**Сәлисә.** Йөрәк бер ҙә үҙ урынында түгел, ҡарттай.

**Урал.** Был заманда ҡайһылай булһын инде ул? Бына мин үҙем бер ҡулым менән салғы сүкейем, икенсеһе менән ҡамыт-ыңғырсаҡ йүнәтәм, ә йөрәгем менән фронттан хәбәр көтәм. Төн сыҡҡансы беҙҙекеләр фашистарҙы ҡайҙа бырақтырҙылар икән, йәнәһе... Йә, теге НАТИ тракторың ни хәлдә?

**Сәлисә.** НАТИ-ҙы ни, йүнәтәбеҙ. Әле шуның шатун подшипниктарын шымартып килдем. Ләкин, картерҙы ябыр өсөн, поршенгә тығырға беренсе номерлы палец кәрәк.

**Урал.** Унынһы нимә тағы?

**Сәлисә.** Эй ҡарттай, ҡарттай, йөҙ йәшәгән ҡарттай! Ошо йәшеңә етеп, трактор моторының ҡоролошон да белмәйһең.

**Урал.** Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп. Өйрәт миңә белгәнеңде.

**Сәлисә.** Ҡуласаны беләһеңме?

**Урал.** Беләм. Тирмән ҡуласаһы бар, Донъя Ҡуласаһы бар.

**Сәлисә.** Трактор беҙҙең бригада өсөн донъя ҡуласаһы шул.

**Урал.** Ҡапаҡ әйттең, ейәнсәрем.

**Сәлисә.** Бына шул донъя ҡуласаһын поршень тигән оҙонса бер нәмәҫтәкәй бер аҫҡа — бер өҫкә, бер аҫҡа, бер өҫкә шыуышып йөрөп әйләндерә.

**Урал.** Әһә, бер аҫҡа — бер өҫкә.

**Сәлисә.** Ләкин ул шулай өҙлөкһөҙ йөрөһөн өсөн, *(бармаҡтары менән ишаратлай)* уның бына ошондай ғына арҡыры тишегенә ошондай ғына палец тығырға кәрәк.

**Урал.** Әһә, палис тығырға кәрәк.

**Сәлисә.** Бына шул. Шунһыҙ ул бер аҫҡа ла, бер өҫкә лә йөрөмәй.

**Урал.** Һуң ул палис тигәнең үҙебеҙсә ябай бармаҡ түгелме?

**Сәлисә.** Их, ябай бармаҡ тығып ҡына йөрөтөп булһа икән, ҡарттайым! Ҡаты ҡорос палец кәрәк шул уға. Ҡаты! Аңланыңмы инде?

**Урал.** Һәй был һуғыш, һуғыш!.. Илдә ир-ат ҡалмағас, ҡатыһы ла булмайҙыр шул инде... *(Асыуланып).* Ғәләмәт Ғәли ни ҡарай? Ҡайтҡанына ҡасан! Бына ошонда ҡатырып күрһәтһен ирлеген.

**Сәлисә** *(ҡул һелтәп).* Эй, һөйләмәсе шул Ғәләмәтеңде!

**Урал.** Ә шулай ҙа... теге ҡара бирсәткәһен кейгән, тиҙәр...

**Сәлисә** *(тертләп).* Нимә?!

**Урал.** Булат балдаҡ йолаһын иҫкә төшөрөүелер инде...

**Сәлисә** *(бармаҡ быуындарын берәм-берәм шартлата тартып).* Ах йола, йола... *(Китә).*

**Урал.** һәй донъя, донъя...

**Яҙғы күбәләктәрҙәй бөтөрөлөп ҡыуыша-ҡыуыша, көлөшә-көлөшә Оксананың ҡыҙы Мопра менән Сафураның улы Ким килә. Береһе — ҡул тырмаһы, икенсеһе йүгән тотҡан. Урал сүкеүҙән туҡтай.**

**Мопра.** Тоттоң, ти, тотмай ҙа ни!

**Ким.** Тотоу ғына түгел, битеңде "суп!" иттереп тә алырмын.

**Мопра.** Абау-абау, ояттһыҙ!

**Ким.** Битеңде генә түгел, ҡолағыңды ла тешләрмен әле!

**Мопра.** Минең ҡолаҡта ни үсең?

**Ким.** һи бешмәгән, шуны ғына ла белмәйһең! Ҡолағыңды тешләһәм, һин дә минекен тешләһәң, мин — һинеке, һин — минеке булабыҙ ҙа ҡуябыҙ. Беҙҙә шундай йола бар.

**Мопра.** Абау, ҡайһындай матур йола! *(Йүгерә).*

**Ким.** Үтәйек шул йоланы! *(Тота).*

**Мопра.** Абау-абау, ояттһыҙ!

**Ким.** Бына-бына һуғышҡа китеп барһам, ни эшләрһең икән әле?

**Мопра** *(тертләп).* һуғышҡа?! һине алалармы ни?

**Ким.** Алмаһалар ҙа китәм, ҡасып китәм!

**Урал ҡарт ҡапыл сүкеш һуға, йәштәр ағас араһына ташлана. Ыҫтан яғынан һөрәнләп Оксана килә.**

**Оксана.** Мопра-а-а! Ки-и-им! Мопра-а-ам, ҡәҙерле Значогым!

**Урал.** Оксана ҡәрендәш, шул ҡәҙерле Мопра-Значогың Сафура әхирәтеңдең Ким-Значогы менән ҡуша тағылып ҡуймағайы, тим. Бер түш... түшәккә.

**Оксана.** Уныһы булмаç. Нәҙере бар Остабымдың.

**Урал.** Бәй, быныһы ни булды тағы.

**Оксана.** Остабым хатында яҙа: фронттағы бер йән дуҫы менән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар булышырға ант итешкән. Ә ут эсендәге ант — изге ант. Минең ҡыҙым

атай нәҙерен тотасаҡ, шул йән дуҫтың улына ғына сығасаҡ. Мопра-а-ам, аҫыл Значогым минең! *(Китә).*

**Урал.** Һәй был донъя... *(Сүкешен атып бәрә, китә).*

**Сафура сыға, актирәккә һөйәлеп уйлана. Ғәли күренә, Сафураны түрәләрсә бармаҡ ымлап ҡына саҡырып ала. Ғәли ҡупшы хәрби кейемдә, ҡулында ҡара бирсәткә, һыңар күҙен ҡара япма ҡаплаған, түшендә ышҡып ялтыратылған миҙал.**

**Ғәли** *(һыҙғырып).* Һайыҫҡан, кил әле бирегәрәк!

**Сафура** *(яҡынлай).* Минән һиңә ни кәрәк?

**Ғәли** *(көлөп).* һәр хәлдә ҡаҙмендәр-фәлән түгел.

**Сафура.** Хурлама, былай ҙа тулышҡан күңел.

**Ғәли** *(кеҫәһенән ҡара пистолет сығарып, ҡулында уйнатып).* һинме әле әштер-өштөр колхозға ат көтөүсе?

**Сафура.** Абау!

**Ғәли.** Анауы эвакуированная хохлушка Оксанамы һиңә алмашсы? *(Пистолетын тоҫҡап, екереп).* Икегеҙ тиң вредитель — колхоз тоҡом айғырының башына етеүсе!

**Сафура** *(ҡойолоп төшөп).* Уй-уй, ата күрмә! Йә рапбым, кәкерсәгеңде тоҫҡама! Әстәғәфирулла тәүбә...

**Ғәли** *(пистолетын йәшереп).* Бирермен мин һиңә тәүбә! Айғырҙы терелтеп бир тәүҙә!

**Сафура.** Әстәғәфирулла тәүбә, айғырҙы бит үҙең менеп, бүре ҡыуып яндырып үлтерҙең.

**Ғәли.** Ә мин уны һинең елкәгә йөкмәтәм. Ағыулы ашлыҡ ашатҡаныңды күреп торҙом. Минме-мин...

**Сафура.** Әстәғәфирулла тәүбә, кем һин?

**Ғәли** *(күкрәк ҡағып).* Фронтовик мин! *(пистолетын ҡулында уйнатып).* Бөгөн-иртән булырға торған колхоз председателе! *(Пауза).* Төшөндөңмө инде, һайыҫҡан? *(Пистолетын йәшерә).* Айғыр хаҡына һыйырың тартып алынасаҡ, һуғыш статьяһы менән башың төрмәгә ябыласаҡ. Улың етем ҡаласаҡ.

**Сафура** *(илап).* Хоҙайым, был язаларың ни өсөн?!.

**Ғәли.** Һинең ирең үҙе теләп дошманға әсир төштө — фашист холуйы Сәлихкә эйәреп китте. Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Ә һин бында ҡоротаһың колхоздың синфи нигеҙен.

**Сафура.** Ялған!

**Ғәли.** Бар, аҡлан. Кем тыңлар икән һине. Тиле!

**Сафура** *(илап).* Минән... минән ни кәрәк һиңә?

**Ғәли.** Бына быныһы — минеңсә! Тыңла: бөгөн кискә ошо аҡланға халыҡ йыйыла. Шунда бөтә ил алдында шыҡырыҡлап бирәһең — Ишмырҙаңдың Сәлих менән һуғышҡа китер алдынан һүҙ беркеткәндәрен.

**Сафура.** Нимә тип?

**Ғәли.** Танауыңа кирт шуны: фашисҡа әсир төшөү юлын алдан һайланы улар.

**Сафура.** Ялған!

**Ғәли.** Әйткәнемде алмаһаң, алдыңдалыр Магадан! *(Пистолетын ҡулында уйнатып).* Был хаҡта — шым! Шыҡырыҡлаһаң, беренсе пуля — һиңә! *(Китә).*

**Сафура.** Хоҙайым! Ниңә ошо ҡара йыланды йәшенең менән атмайһың?! *(Аҡтирәккә һарыла).* Булат балдаҡты урлауы ғына етмәгән, фронттан инде кәкерсәк урлап алып ҡайтҡан... кемдәрҙелер атырға... Ишмырҙам, ЫшаныҒым, ысынмы шул хәбәре ҡара йыландың? Юҡ, ылғый ҡара яла был! Әммә кәкерсәк хаҡында онотorға, телде ҡанын сығарғансы тешләргә!

> һауаларҙа осҡан аҡҡоштарҙың
> Алдарында ҙур-ҙур шәһәр бар.
> Тере микән бәғерем, үле микән,
> Яу бик ҡаты, тигән хәбәр бар.

**Урал күренә.**

> **Урал** *(ҡатындың башынан һыйпап).*
>
> Илама ла балдыҙ, ай, илама,
> Ҡайғы-хәсрәт илгә юрама.
> Ир-егеттәр яуҙа еңеп ҡайтыр,
> Бәхет таңы атыр Уралда.

**Сафура.** Бөгөн төндә, йылҡыларҙы бер урынға тупланым да, тау башынан аръяҡтағы тимер юл уттарына ҡарап ултырҙым. Әллә нисәмә поезд һыҙғырып үтте. Әллә шуларҙың береһенә эләгеп, Ишмырҙам ҡайтып төшкәнме икән, тим, бөгөн... Уф, сығып бара йөрәгем... *(Ашығып йүнәлә).*

**Урал** *(ултыра, ныҡышып салғы сүкей. Туҡтай).* Етте, минең дә бар йөрәгем...

**Яҡында йыр һыҙыла — Сәлисә бейек яр башында аръяҡҡа ҡарап тора.**

**Сәлисә.**

Иртән тороп һыуға барһам,
Килә Саҡ, Суҡ тауышы.
Саҡ, Суҡ тауышы түгел ул,
Беҙҙең йөрәк ҡағышы:
Са-а-аҡ!
Су-у-уҡ!
Са-а-аҡ!
Су-у-уҡ!
Ҡара төндө ярып сыҡ!.. *(Йыр өҙөлә, пауза).*

Көтә-ә-әм, тауыш бир миңә, шаңда-а-ау!

**Һаҡмар аръяғынан алыҫ шаңдау Яңғырай: бик алыҫтан, ләкин айырым-асыҡ Сәлих тауышы килә.**

**Сәлих.**

Са-а-аҡ!
Су-у-уҡ!
Са-а-аҡ!
Су-у-уҡ!
Ҡара төндө ярып сыҡ!
Булат балдаҡ — бөгөн һалдат,
Мөхәббәткә юл асыҡ.

**Сәлисә** *(ҡулдарын һоноп).*Йәнем, Сәлихем!

**Урал** *(ырғып тороп).* Ейәнсәрем, ниһәйәт, һин уның исемен атаның! Ҡайтҡанынан биреле тәүбашлап әйттең!

**Сәлисә** *(илай-илай, ҡартатаһының ҡосағына ташлана).* Ҡарттайым, бәғерем, онота алмайым уны!.. һис ышана алмайым!.. Ҡарттайым, бәғерем, һин шуға ышанаһыңмы? Уның һатлыҡйән булыуына ышанаһыңмы?

**Урал.** Һинең йөрәгеңә ышанам, ейәнсәрем.

**Сәлисә.** Рәхмәт һиңә, ҡарттайым.

**Урал** *(ейәнсәрен башынан һыйпап).* Өмөт итеп көтәйек, ейәнсәрем. Донъя ғәжәп матур ул, яҡты ул. Хатта дегеттәй ҡара төндәрҙә лә ғәжәп яҡты донъябыҙ. Йөҙҙән уҙған ҡартатайың үҙе әйтә һиңә быны.

**Китәләр. Мопра, Ким, Оксана, Сафура күренә.**

**Мопра.** Ташланам, сөмәкәйгә ташланам!

**Ким.** Мин дә упҡынға осам!

**Сафура.** Балаҡайҙарым, харап булмағыҙ!

**Оксана.** Атайҙарығыҙ ҡайтҡансы ғына түҙегеҙ!

**Мопра.** Түҙмәйбеҙ! Атайҙарҙың әллә кемгә бирергә лә әллә кемде алырға, тигән нәҙерен танымайбыҙ!

**Ким.** Саҡ менән Суҡ ҡоштарылай, икебеҙ ике яҡта юҡҡа сығабыҙ!

**Ким һәм Мопра икеһе ике яҡҡа ташлана.**

**Сафура.** Уй Оксанам, әхирәткәйем, Хоҙайға арҡаланып, ҡушабыҙ ҙа ҡуябыҙмы әллә ғәзиз значоктарыбыҙҙы? Һәләк була бит бәпескәйҙәребеҙ!

**Оксана.** Әхирәткәйем... *(Ҡосаҡлашып илашалар).*

**Ике яҡта ҡыуаныслы ауаздар — балалар һәм атайҙарҙың ҡосаҡлашып күрешеүе.**

**Мопра.** Ой, атайым!

**Остап.** Һаумы, ҡыҙ ғынам, зәңгәр күҙ генәм!

**Ишмырҙа** *(икенсе яҡта).* Улым! нур үҫтеңме, улым!

**Ким.** Атай!

**Ике фронтовик ике яҡтан бер-береһенә шаҡ ҡатып ҡарап торалар ҙа йыйыныһы бер юлы бер-береһенә ҡаршы йүгерәләр: Остап менән Мопра, Ишмырҙа менән Ким, Оксана менән Сафура.**

**Остап.** Үҙең әйткән Саҡ менән Суҡ ҡоштарылай, икебеҙ ике яҡтан ҡайтып төшкәнбеҙ икән, әй. Бар ул, бар Хоҙай бабай! Ғаиләләр ҙә бер ерҙә, бөтәбеҙ ҙә иҫән-һау.

**Ишмырҙа.** Рейдҡа керер алдынан ғына осрашҡайныҡ бит һуңғы тапҡыр...

**Остап** *(Оксанаһын ҡосаҡлап).* Ошо була инде ғәзиз йән дуҫым һәм буласаҡ ҡәҙерле ҡоҙабыҙ.

**Ким, Мопра.** Ур-ра! Беҙ ҙә ҡолаҡ тешләштек!

**Сафура.** Өнөммө, төшөммө?.. Ишмырҙам, Ышанығым! Ниңә шатырлатып ҡаты ҡыҫмайһың? Билкәйемде өҙөлдөргәнсе...

**Ишмырҙа.** Һыңар ҡул ғынам шул... алтыным... *(һыңар ҡулы юҡ уның).*

**Сафура.** А-а-ай!..

**Остап.** Ҡоҙа, ҡарасы ҡоҙағыйыңды.

**Сафура** *(иҫенә килеп).* Сват, падажди, ул әле мине лә ҡарап бөткәнт еҡ бит.

**Оксана** *(сукыныпп).* Шөкөр, Хоҙай үҙе хәл ҡылды!.. Ҡоҙағый, ҡоҙа, был минутта беҙҙән дә бәхетлерәк кешеләр бармы икән донъяла?!

**Бөтәһе бергә.**

Беҙ — ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар,
Кәләш һәм кейәүкәйҙәр.
Бәхетлеләр ғүмеркәйҙе
Заяға үткәрмәйҙәр.
Алыҫтарға аҙаштыҡ,
Яҡындарҙа табыштыҡ.
Башҡалар ҙа, башҡалар ҙа
Беҙҙең һымаҡ ҡауышһын. *(Йырлап-бейеп сәхнәнән тараалалар).*

**Ыҫтан яғынан халыҡ ҡубына —аҡланға уларҙы Ғәли үҙе әйҙәп килә.**

**Ғәли.** Граждандар, өйөрөлөгөҙ майҙанға! Фронтовик-геройҙар исеменән...

**Сәлисә.** Һин үҙ исемеңдән һөйлә.

**Тауыштар:**

— Вәт “герой”! Миҙал урынына значок тағып ҡайтҡан!

— Ҡыҙыл Йондоҙ орденлы Сәлисә апай һөйләһен!

— Ғәли Ғәлич, лутсы шуны әйт беҙгә: илдең булат балдағын ҡайҙа иттең?

**Ғәли.** Во-первых, булат балдаҡ тураһында һүҙ алда. Во-вторых, һайыҫҡан Сафура баҫһын алға.

**Сафура.** Йә, баҫтым.

**Ғәли** *(Сафураға ғына).* Танауыңа киртелгәнде онотма. Мин тамаҡ ҡырғас та шыҡырығыңды ялға.

**Тауыш.** Фронтовик, һөйлә фронт хәлдәрен!

**Ғәли** *(күҙенең ҡара япмаһына бармағын тоҫҡалдырып).* Күрәһегеҙме бынауы ҡанлы яраны? *(Түшенә төртөп).* Күрәһегеҙме бынауы боевой наградаӊы? *(Күкрәк һуғып).* Утты-һыуҙы кистек беҙ!

**Халыҡ ҡул саба.**

**Ғәли.** Йәнебеҙҙе аяманыҡ ил өсөн! Ҡаныбыҙҙы ҡойҙоҡ! Ә шул ваҡытта һеҙҙең ҡай бер, хәбәрһеҙ юғалды, тигән “ҡаһарман”дарығыҙ, беләһегеҙме, унда нимә эшләне?

**Тауыш.** Нимә эшләне?

**Ғәли.** Үҙ күләгәләренән үҙҙәре өркөп, ҡулдарын бына былай итеп күтәреп, фашистарға әсир төштө икеһе.

**Тауыш.** Кем улар?!

**Ғәли.** Сәлих менән Ишмырҙа — бына кем!

**Пауза.**

**Сәлисә.** Алдай! Ышанмағыҙ! Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: бына бынауы тауҙар, һыуҙар, аҡтирәктәр-күктирәктәр иленең яугирҙәре һатлыҡйән буламы һуң? Юҡ, булмай!

**Бар тәбиғәт шаңдауы.** Булмааай!

**Урал.** Ишетәһегеҙме, ер-һыу-күктәребеҙ, Ҡояш һәм Айҙарыбыҙ нимә ти беҙгә? Ышанмайбыҙ!

**Ғәли** *(Сафураға тамаҡ ҡырып).* Ышанмаһағыҙ, ана тора дәлиле. һайрап ебәр әле, иптәш Сафура!

**Сафура.** Йәмәғәт! Был йөҙө ҡара бәндә мине, үҙе бүре ҡыуып яндырып үлтергән аҫау айғыр өсөн, төрмәлә башыңды серетәм, тоҡомоңдо ҡоротам, тип ҡурҡытты. Сәлих менән Ишмырҙамды фашистарға әсир төшөргә алдан уҡ һүҙ ҡуйыштылар, тип яла яғырға ҡушты.

**Шау-шоу.**

**Ғәли.** Граждандар, дөрөҫ шыҡырыҡламай — Һайыҫҡан аҡылдан яҙған!

**Урал.** Һин үҙең ул — алъйотҡа ҡалған!

**Сафура.** Ышанмағыҙ яуызға!

**Ғәли** *(күҙҙәрен аҡайтып).* Беләһеңме, хәҙер абышҡаң ҡайҙа?!

**Сафура.** Улмы? Ул әле йылы өйөмдә, йомшаҡ ҡаҙмендәремдә. Ишмырҙа-а-ау, бер күренеп китһәңсе!

**Ишмырҙа күренә.**

**Ишмырҙа.** Кем ул унда әтәсләнә? Ҡурҡаҡ Ғәләмәт Ғәлиме? *(Күҙенең ҡара япмаһын иғтибарлап).* Был ни тағы? Үҙ мылтығыңдан ҡулыңа атҡаныңдай, шаҡырайыңа ла икмәк үтә аттыңмы?

**Халыҡ гөж килә, Ғәли сигенә.**

**Ғәли.** Һи-һи-һин... абайлап һөйләш. *(Күкрәк һуғып).* Фронтовик мин! Бына көмөш миҙалым!

**Ишмырҙа.** Ә ҡайҙа һуң урлап алып киткән булат балдағың? Әһә, тешләнеңме телеңде?! Иптәштәр, һалдырығыҙ шул ҡара бирсәткәһен, күҙ буяп йөрөмәһен! *(Ғәли ситкә янтая).* Мөртәт, баҫтыммы ҡойроғоңа?! Күҙеңдәге ҡолаҡсынды ла һалдыртып ҡарарға ине, ялғандыр уныһы ла! *(Ғәли ергә сүгә).* Самострел һин! *(Елкәһенән бөрөп алып, артына тибә).* Мә, ал икенсе осаңа ла теге саҡта эләкмәй ҡалған кирза табан мөһөрөн!

**Ғәли тәкмәсләп барып төшә лә, елтерәп тороп, башын баҫып ҡаса, артынан халыҡ мәсхәрәләп шаулаша: “Һөләләй, тот ҡуянды!” — “Ҡороҡлағыҙ мәлғүнде!”**

**Ишмырҙа.** Ә булат балдаҡ — үҙенең хаҡ юлында, батыр егетенең ҡулында!

**Сәлисә** *(үҙәге өҙөлөп). Ағайым,* йән киҫәгем, ҡайҙа ул батыр егетең?

**Ишмырҙа.** Улмы, ул...

**Төркөм икегә ярылып, хөрмәтләп кемгәлер юл бирә — унда яугир офицер кейемендә Сәлих үҙе дөңкөлдәтә баҫып килә.**

**Ишмырҙа.** Улмы... ул әнә килә!

**Ким** *(гәзит болғап). Ағ*ай-эне, уҡығыҙ! Ҡаһарман разведчик Сәлих ағай Таңатаров дошман тылында “Булат балдаҡ” тигән партизан отряды ойоштороған, фашистарҙың ылғый кәрәгенә биргән!

**Сәлисә.** Өнөммө, төшөммө? *(Ҡатып ҡала).* Һинме Сәлих Хәмиди?!.

**Ишмырҙа.** Булат балдаҡ әйләнеп ҡайтты, тимәк!

**Ҡапыл ир-ат бер яҡҡа, ҡатын-ҡыҙҙар икенсе яҡҡа бүленә, Сәлисә менән Сәлихте лә шул ике төркөм ике яҡҡа айырып алып китә. Ҡара-ҡаршы теҙелеп тороп, “Аҡтирәк — күктирәк” уйыны башлана. Сафура менән Ишмырҙа ғына, билдәренән ҡосошоп, тирәклеккә олаға.**

**Егеттәр.**

Аҡтирәк — күктирәк,

Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

**Ҡыҙҙар.**

Һеҙҙән беҙгә Саҡ кәрәк,
Беҙҙән һеҙгә Суҡ кәрәк
Ебәрегеҙ тиҙерәк!
Ебәрәбеҙ тиҙерәк!

**Ким** *(Сәлихҡә).* Бар, еҙнәй, бар, Суғың саҡыра һине!

**Сәлих, күҙҙәрен йомоп, ҡулдарын һоноп йырлай-йырлай, ҡыҙҙар теҙмәһенә йүнәлә.**

**Сәлих.**

Тирә-яғым төн генә,
Суғым, осоп кил генә.

**Ҡыҙҙар төркөмөнән Сәлисә сыға, күҙҙәрен йомоп, ҡулдарын һоноп килә.**

**Сәлисә.**

Тирә-яғым төн генә,
Сағым, тауыш бир генә.

**Егеттәр, ҡыҙҙар.**

Төндәр ҡара, юл оҙон,
Ҡауышырға хаҡ яҙһын.

**Сәлих.**

Суғым минең — һин генә,
Ҡулҡайыңды бир генә.

**Сәлисә.** Ҡурҡам, күҙҙәремде асып ҡарарға ҡурҡам... Төшөм осор ҙа китер, фәҡәт йөрәк һыҙлауым тороп ҡалыр... *(Күҙҙәре йомоҡ килеш яҡынлай).*

Йәнем ята усымда —
Ил(е)тәмен Сағыма.

**Сәлих булат балдаҡты үҙ бармағынан һалып, Сәлисәнең бармағына кейҙерә.**

**Сәлих.**

Йәнем — булат балдағым —
Булһын Суғым ҡулында.

**Егеттәр, ҡыҙҙар.**

Ҡауыштырҙы төн оҙон,
Бергә булырға яҙһын.

**Сәлисә** *(күҙен асып ҡарап, тетрәнеүҙән аһылдап).* А-а-аһ!..Булат балдаҡ! Йәнем, Сәлихем, ысынлап та һинме был?!

**Сәлих.** Мин, күҙ нурым, мин, һөйөклөм! *(Ҡосаҡлашалар).*

**Егеттәр, ҡыҙҙар.**

Булат балдаҡ ҡайтты урап —
Ил намыҫы аҡ ҡалһын.

**Уйын тарала, халыҡ был икәүҙе һырып ала.**

**Сәлисә.** Сағым, һағынысым, ҡайҙарҙан ҡайттың ҡыйғырлап, ниңә һалып бирҙең булат балдаҡты?

**Сәлих** *(Сәлисәнең маңлайынан үбеп).* Һин Суғымды көйҙөргән ут эсенән ҡайттым ҡыйғырлап, ысын ҡаһарман ҡулына күсһен, тинем, был булат балдаҡ.

**Сәлисә** *(усындағы булат балдаҡты балҡытып).* Минең ысын ҡаһарманым фәҡәт һин, һин! Ал һин булат балдаҡты!

**Ағас артында йөҙө йәмерәйгән Ғәли күренә.**

**Ғәли** *(пистолетын тоҫҡап).* Врешь, стерва! Алһын туғыҙ грамлы ҡара ҡурғашты! *(Ата).*

**Сәлих.** Аһ... Суғым... *(Йығыла).*

**Сәлисә** *(һөйгәненең күкрәгенә ҡапланып).* А-а-ай!.. Кем атты?! Ни булды һиңә, Сағым?!

**Сәлих.** Бәхил бул... Суғым... күреп тә туйманым үҙеңде... мин... киттем... *(Йән бирә).*

**Сәлисә** *(үкһеп).* Китмә, йәнем, китмә, китмә!.. *(Тубыҡланып ултыра).*

Беҙ ултырҡан тирәктәрҙең
Аралары тар икән.
Йөрәктәргә ҡан һауҙырҡан —
Йәшләй һөйгән йәр икән.
Аҡтирәк — күктирәк,
Йөрәктәр яна көйрәп.
Аллаҡайым, ҡауышыуҙы
Ҡыҫҡа иттең бигерәк.

**Ғәли.** Стерррва, ҡауыштырайым бер юлы! *(Ата).*

**Сәлисә.** Аһ... *(Йығылып йән бирә).*

**Ғәли** *(йүгереп сыға).* Боже мой, ни эшләнем?!. һөйөклөмдө үлтерҙем... *(Илап).* Капут, унһыҙ йәшәү юҡ миңә... *(Пистолет көбәген маңлайына терәп).* Ә был һуңғы пуляны... юҡ, атмайым! *(Пистолетын бырағтыра).* Булат балдаҡты алам! *(Сәлисәнең ҡулынан балдаҡты йола).*

**Донъя ҡараңғылана. Булат балдаҡ, Ғәли ҡулынан сирғылып, күккә олғаша ҡапыл; Ғәли, булат балдаҡ сәсрәткән утлы сатҡыларҙан янып, яман аҡырып, юҡҡа сыға. Майҙанда Ким хасил була.**

**Ким** *(күккә ҡулдарын һоноп).* Кешелә-ә-әр! Кешелә-ә-әр! Булат балдаҡ олғаша!

**Тирә-яктан халыҡ ябырыла, ҡулдарын юғары һоноп ялбара.**

**Күмәк һөрән.** Булат балда-а-аҡ! Булат балда-а-аҡ! Булат балда-а-аҡ!

**Булат балдаҡ, күктең төбөнә етеп, түп-түңәрәк Ҡояшҡа әүерелә, донъяға нурын сәсә.**

**Булат балдаҡ.** Эй һеҙ, белекһеҙ бәндәләрем! Ишетегеҙ, һеҙгә аҡтыҡҡы һүҙем!.. Көндөң ҡаты булат саҡҡыһы инем, ергә төшөрөлгән булат балдаҡ инем. Ҡабат күккә олғаштым, үҙегеҙҙт еғарынан мәңге бағыр Ҡояшмын. Башҡортлоғон һатмаған, телен тешләп йотмаған, намыҫын таплатмаған һәр бәндәмә юғарынан булат нурымды ҡойормон, илдең күҙгә күренмәгән, йөрәгендә йөрөгән булат балдағы булырмын. Башығыҙҙы күтәрегеҙ юғары, — түбәгеҙҙә Булат балдаҡ урайы!

**Сәхнә түре аҡрын ғына ябыла, ут һүнә.**

## Шаршау

1975; 1998.

**Йөкмәткеһе:**

Ур-ра! Аляска беҙҙеке!
Ҡаһармандар
Шағир йондоҙо
Башҡорттар
Болан балаһы
Сөйөмбикә һылыу
Булат балдаҡ